АҒИҘЕЛ

Өфө,
ғинуар
2013

1(1077)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

Баш мөхәррир

Әмир ӘМИНЕВ

Мөхәрририәт:

Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

Редакция хеҙмәткәрҙәре:

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева, Тәнзилә Сәлихова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 21. 01. 2013. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 200 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0005.13.

Беҙҙең адрес: 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
Наш адрес: 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан Уфимский полиграфкомбинат.
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2013 (1,1077)

БЫЛ ҺАНДА:

БАШ МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

Әмир Әминев. Туҡһанға аяҡ баҫҡанда... 5

ШИҒРИӘТ

Тамара Искәндәриә. Шишмәләр тынған мәлдә… Ш и ғ ы р ҙ а р 6
Фәнил Күзбәков. Өҫтә – күк, аҫта – даръя... Ш и ғ ы р ҙ а р 13
Риф Мифтахов. Беҙ – һуғыш балалары. Ш и ғ ы р ҙ а р 25

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

Тәскирә Даянова. Фәрештәм минең. Х и к ә й ә 32
Сәүиә Бикмөхәмәтова. Сәфәртуй яланы. Х и к ә й ә 54
Мәхмүт Хужин. Яттар мөһөрө. Х и к ә й ә 68
Нияз Алсынбаев. Ил сигендә йәшәгән ҡарттың аты юғалды...
Х и к ә й ә 80

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

Мөнир Иҡсанов. Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә сонет жанры. ..100
Суфиян Поварисов. Тел тигән диңгеҙ бар...
(Марат Зәйнуллиндың һайланма мәҡәләләре сығыу айҡанлы) 104

“Агиҙел”гә – 90 йыл

Нәфис әҙәбиәт: хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы.
Фәнил Күзбәков. «Әҙәп», «әҙәбиәт» – бер тамырҙан.
(Мәрйәм Бураҡаева, Ғәлим Хисамов менән әңгәмә.) 107
Һөйөклө Ибраһимова. Ҡағыҙға туймаҫ ине атайым... 117

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

Әнүр Вахитов. Башҡортостандың беренсе халыҡ яҙыусыһы
(Зәйнәб Биишеваның тыуыуына – 105 йыл). 119
Рәмилә Аллаярова. Зәңгәр һағыш
(Ғәзим Аллаяровтың тыуыуына – 100 йыл). 127

ПУБЛИЦИСТИКА

Тәлғәт Шаһманов. Көнгәккә сығыу. Т а р и х и - д о к у м е н т а л ь
о ч е р к 130

КӨНДӘЛЕКТӘР

Рауил Бикбаев. Уҙған ғына ғүмер, ҡалған хәтер...
Башы. 139

ЗАМАН ҮӘ ЗАМАНДАШТАР

Венер Сәхәүетдинов. Мәғрифәтсе. Һүрәтләмәләр. 169

«АҒИҘЕЛ»ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

2013 ЙЫЛҒЫ ЮБИЛЯРҘАР

В НАШЕМ НОМЕРЕ:

СЛОВО ГЛАВНОГО РЕДАКТОРА

А. Аминев. Переступая 90-летие.

ПОЭЗИЯ

Тамара Искандерия, Ф. Кузбеков, Р. Мифтахов. *Стихи.*

ПРОЗА

Т. Даянова. Ангел мой; **С. Бикмухаметова.** Поляна Сафартуй;
М. Хужин. Печать чужбины; **Н. Алсынбаев.** Пропал конь старика.
Рассказы.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

М. Иксанов. Жанр сонета в современной башкирской поэзии.
С. Поварисов. Язык — безграничное море
(по случаю выхода избранных статей М. Зайнуллина)

«Агидель» — 90

Художественная литература: мечта, реальность, требование жизни.
Ф. Кузбеков. Нравственность и литература
(интервью с М. Буракаевой и Г. Хисамовым).
С. Ибрагимова. Об отце, писателе и издателе...

НАШ КАЛЕНДАРЬ

А. Вахитов. Первый народный писатель Башкортостана
(105 лет со дня рождения З. Биишевой).
Р. Аллаярова. Тоска *(100 лет со дня рождения Г. Аллаярова).*

ПУБЛИЦИСТИКА

Т. Шагманов. Подъем на Кунгак. *Историко-документальный очерк.*

ДНЕВНИКИ

Р. Бикбаев. Жизнь проходит, а память остаётся. *Начало.*

СОВРЕМЕННОСТЬ И СОВРЕМЕННИКИ

В. Сахаутдинов. Просветитель. Зарисовки.

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

ЮБИЛЯРЫ 2013 ГОДА

Телефондар:
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

Туҡһанға аяҡ баҫҡанда...

«Ағиҙел»дең ошо һаны менән беҙ журналдың сығыу башлауына 90 йыл туласаҡ йылға аяҡ баҫтыҡ. Бөгөн редакцияла эшләгәндәргә генә түгел, беҙҙән алда хеҙмәт иткән бихисап иптәштәргә, республикала, унан ситтә лә йәшәп ижад иткән, ғөмүмән, башҡорт матбуғатын, әҙәбиәтен, сәнғәтен ятратҡан милләттәштәргә, һанһыҙ авторҙарға, меңмең уҡыусыларыбыҙға ла ҡыуаныслы, иҫтәлекле дата был. Сөнки, журналдың Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ғына сығыуҙан туҡталып тороуын иҫәпләмәгәндә, ул, исеме аҙаш йылға ише, халҡыбыҙҙың төп рухи артерияһы булды, бер нисә быуынға үҙенең аҡ һәм пак һүҙҙәрен еткерҙе, ауыр саҡтарҙа күңелдәрҙә өмөт һәм ышаныс уятты, зауыҡ өҫтәне. Ундай тойғоларҙы бизмәнгә һалып үлсәп булмай, әммә республикала йәшәгән, журналыбыҙҙы алдырған, уҡыған һәр кем белә: 90 йыл буйы «Ағиҙел» үҙенең биттәрендә әҙиптәребеҙҙе барлап, теркәп барҙы, быуындар бәйләнешен тәьмин итте.

Данлы датаны беҙ үткән йылдың сентябрь һанынан уҡ билдәләй башланыҡ. «Нәфис әҙәбиәт: хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы» тигән темаға хәҙерге әҙәбиәт, ул күтәргән проблемалар, бурыстар, айырым әҫәрҙәр хаҡында оло һөйләшеү йәйелдерҙек. Байтаҡ яҙыусылар ҡатнашҡан әңгәмәләр март айына — юбилей һанына тиклем дауам итәсәк.

Юбилейға арналған төрлө материалдар буласаҡ. Әйтәйек, редакцияла эшләп киткән кешеләрҙең хәтирә-иҫтәлектәре, журнал эшмәкәрлегенең төрлө осорҙарын сағылдырған документтар, фотолар, шиғри арнауҙар һ.б.

Быйылғы йыл республикала Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан ителде. Экологик аждаһа тәбиғи мөхитебеҙҙе йота-емерә барғанда был бик тә ваҡытлы һәм яуаплы кампания булмаҡсы. Ошо мөһим сарала «Ағиҙел» дә ҡатнашмай ҡалмаясаҡ. Иң мөһиме, журналыбыҙ рухи экология, йәғни кеше аңына экологик тәрбиә буйынса ижади эшмәкәрлеген көсәйтергә ниәтләй. Ә быны елдәй елгән заман үҙе ҡуша.

Яңы йыл менән, хөрмәтле әҙәбиәт һөйөүселәр! Журнал биттәрендә осрашып торайыҡ, бөтәбеҙ ҙә имен-аман, шат кәйефле булайыҡ.

Әмир ӘМИНЕВ.

Тамара
ИСКӘНДӘРИӘ

ШИШМӘЛӘР ТЫНҒАН МӘЛДӘ…

Рух көмбәҙе

Йыһан икән ҡалҡаны,
Меңәр йондоҙ ҡалҡҡаны:
Оло йөрәк — ысын ирҙең
Ҡукрәгендә ҡаҡҡаны.

Илем, тиеп ҡалҡыр ул,
Илем, тиеп балҡыр ул.
Йөрәгенең түрҙәрендә
Йөрөтөр гел халҡын ул.

Тыуған төйәк — гөлөбөҙ,
Рух көмбәҙе — телебеҙ.
Хоҙай биргән бер ҡомартҡы,
Саф хазина — илебеҙ!

Һунар

Бүре өйөрөнөң айға ҡарап
Олоғанын улар көтмәҫтәр.
Көндөҙгөләй яҡты ошо төндә
Ҡуптарылыр оло бер мәхшәр.

Тамара Искәндәриә (1958) Ишембай районы Ҡыяуыҡ ауылынан. БДУ-ны тамамлағандан һуң “Башҡортостан пионеры", “Йәшлек", “Башҡортостан" гәзиттәрендә эшләй. Әле “Аҡбуҙат" журналының баш мөхәррире. Башҡортостан, Рәсәй Яҙыусылар союзы ағзаһы.
БР-ҙың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре.

Дала буйлап сабыр асырғанып
Һунар тынын тойған бүреләр.
Алыҫҡараҡ оя эргәһенән!
Ҡөсөктәре ҡала — тереләр.

Бына саба улар, бына саба
Төнгө ауыл һырты буйлатып.
Ҡыйҡыу-һөрән һалып
Һунар килә,
Суҡмар оса һауа шыйлатып...

Суҡмарҙарын ҡандан таҙартырҙар
Тағы “һайт” лап бүре ҡыуырға.
...Йә, ниңә һуң, шағир,
Һиңә тағы
Ул һунарҙың тынын тойорға?

Йә, ниңә һуң, шағир,
Һиңә тағы
Суҡмар тауышынан тайшаныу?
Һунар табышына әйләндеңме,
Ауырмы ни шуға ышаныу?

Донъя әүернәһе хикмәттәре
Бөтмәгәнме әле асылып?
Йөрәгеңде ҡабат ярып үтә
Заман һунарының асылы...

Һунар бара, һунар!
Ереңиркең,
Телең, динең —
Барыһы бизмәндә.
Меңйыллыҡтар үҫкән үҙлегеңде
Ҡыйып үтмәкселәр бер мәлдә.

Шулай уҡмы заман суҡмарынан
Һиңә телһеҙ, өнһөҙ ауаһы?
Ҡитә ҡалһаң, шағир, Ереңиңрәр,
Йән тетрәтер күктәр ауазы!

...Һунарсылар белмәҫ ғәмәлдәр бар
Ғаләм тигән бөйөк яланда.
Халыҡ йөрәгенә йығылдың һин,
Уяуһың һин, шағир, һаман да.

***

Шағир!
Һин кисер донъяны.
Болғанды, болғаны.
Тулғанды, тулғаны...

Нимәне көҫәй ул?
Нимәне киҫәтә?
Көсөңдө киҫә лә
Үс йыя куҫәккә.

Ә куҫәк — куҙәнәк
Бик оло золомға.
Донъяға барыбер:
Оло һин, олома.

Донъяға барыбер:
Шағирмы, бүреме.
Берәүҙең эше юҡ —
Бармы һин, тереме?

Шағир, һин кисер...

***

Тағы бер ҡат уйҙар ҡосағына
Атылдың да ҡапыл тонсоҡтоң.
Йәнгә тынғы тапмай,
Толҡа тапмай,
Ҡерпек ҡаҡмай
Тағы төн сыҡтың.

Шағирә һин...
Бар әйләнә-тирә
Әүерелә һинең кусәрҙә
Әүернәгә.
Ә һин уға, ҡыҙый,
Һыу ҡояһың
Шишмә-кәүсәрҙән...

Мәңгелек был кусәр әйләнеше,
Мәңгелек был шишмә танһығы.
«Һау бул, ҡояш!» — тиеп өлгөрмәйһең,
Офоҡ ситен ҡуя таң һыҙып.

***

Ап-аҡ бите дәфтәремдең —
Ҡабарып та ятҡан тупраҡ.

Устарымдан төшкән орлоҡ
Бирһен ҡыяҡ, үрһен япраҡ.

Эфирҙарҙан һоҫоп алам
Ваҡ мәғлүмәт, оло хәбәр.
Нимә уйлай был кешелек,
Ерҙә ни бар? Ниндәй хәтәр?

Хәүефләнә, буғай, халыҡ,
Етә, тиеп, ахырызаман.
Ғәрәсәттәр ҡупһа, тиҙәр,
Ҡалырбыҙмы имен-аман?

Сайҡалғанда киң даръялар
Айҡалмаҫмы яҙмыш-тәҡдир?
Бөйөк ҡөҙрәт эйәһенә
Ялбарабыҙ: именлек бир!

Именлек бир Еребеҙгә!
Именлек бир Һыуыбыҙға!
Именлек бир Ай-Ҡояшҡа,
Ә иң элек — Рухыбыҙға!

Изге йөрәк, зирәк аҡыл —
Шуларҙан мин егәм пар ат.
Яҡшылыҡты ерҙә тарат!
Планеталар яһай парад.

***

Ила — иләнмә тик.
Көлһәң — ҡалма көлгә.
Асыҡ сырай менән
Баҡ киләсәк көнгә.

Һин бер үҙең түгел,
Башҡаларға ҡара:
Хәләл көсө менән
Һәр кем юлдар яра.

Ә кем, этеп-төртөп,
Йылғырланып йылдам,
Алдап һуҡмаҡ йыра —
Йыраҡ ысын юлдан.

Яҡты йөҙлө дуҫтар
Килһен уңдан, һулдан.
Наҡыҫланма, Намыҫ.
Ташлап китмә, Выждан.

***

Күңелдәге төйөн,—
Хәс бер тейен,
Һикереп-һикереп уйнай күкрәктә.
Хаталарым, һеҙ, саф хаталарым,
Хафаларым ята йөрәктә.

Үҙ-үҙемә тағы йомоламын.
Тағы йотам ҡайнар һауаны.
Мин түгелме инем ихлас бер йән,
Берҡатлының иң-иң ауаны?!

Башында ҡар ятҡан тауҙай ҡырыҫ —
Сағыулыҡтан күҙҙәр ҡамаша! —
Һис бер өнһөҙ, үәмһеҙ, мәрхәмәтһеҙ
Үҙ хатамды ҡылам тамаша.

Мин кеше

Бөтәһе лә аңлайышлы хәҙер.
Берәүгә юҡ дәғүәм, үпкәм дә,
Ниңә һуҙманың, тип, ярҙам ҡулы
Уңышһыҙлыҡ юлын үткәндә.

Онотола, шөкөр, хыянаттар,
Түгел инде улар аяныс.
Солғап алған мәлдә хәүеф-хәтәр,
Иман нуры миңә таяныс.

Иң ауыры, бәлки, ҡурҡынысы —
Ысын асылыңды юғалтыу.
Улай була ҡалһа, ынтыл алға,
Өр-яңынан инде, туған, тыу!

Юҡ дәғүәм. Сөнки бер кемдең дә
Тормошомда минең юҡ эше.
Бер йөкауҙарғандай
Иңдәремдән,
Мин азатмын,
Эйе, мин — кеше!

Күбәләк

Һандуғаслы был иртәлә
Шишмәләр тынған мәлдә,
Йөрәккәйем, күкрәгеңә
Күбәләк ҡунған әллә?

Күбәләкте күпһенмәйем,
Ул да ҡунырға хаҡлы

Мине яратҡан күкрәккә...
Һылыулығың шул саҡлы!

Мәңгелеген был мәлдәрҙең
Күбәләк тә тоялыр.
Ҡыҫҡа ғүмерен йәлләп, ул
Саф йәштәрен ҡоялыр.

Мәлдәрҙең дә була икән
Мәңгелеге, ҡыҫҡаһы?!
Күбәләк, һин үпкәләмә,
Һин — осраҡлыҡ оҫтаһы:

Беҙгә әле киләсәкте
Ҡаршылап атлайһы бар.
Күбәләкле был иртәне
Хәтерҙә һаҡлайһы бар.
Йә, ос!

Һырғанаҡ

Тик берәүһе тороп ҡалған
Һинең бүләк һырғанан.
Иҫтәремә төштө инде
Баҡсалағы һырғанаҡ.

Һап-һары шул һырғанаҡтай,
Һәр бер быуының һайын
Татлы емеш булып һиңә
Һарылғым килде тағын.

Емештәре татлы ла һуң,
Сәнскеле — һабағы.
Әрнеүҙәрһеҙ генә булмай
Саф мөхәббәт һабағы.

Талдарҙан балдар тама

Балдар тама
Тал-тирәктән.
Балдар тама
Телеңдән.
Тик бер мәлгә онотолам
Йәшәүҙән һәм үлемдән.

Тал ямғыры...
Талма үйға,
Аҡҡан һыуҙарға ҡарап.
Йә тегеләй, йә былайға
Йөҙә, тип, унда ҡарап.

Аҡ караптар сағылалар
Һыуҙарҙың шаршыһында,
Береһе — ағым ыңғайында,
Береһе — ҡаршыһында...

Аҡҡан һыуға нимә булһын,
Талдары ҡалһа ярҙа,
Талдарынан бал тамдырған
Беҙ икәү унда барҙа.

***

Күбәләктәй леп-леп килеп
Остом һиңә, остом белеп:
Гөлт итеп мин тоҡанырмын,
Көл булғансы мин янырмын!

Танһыҡ миңә һинең ҡосаҡ,
Тандыр янған төнгө усаҡ.
Таңға хәтле таңдар ҡалып
Тыңланы бит тынлыҡ ул саҡ

Икебеҙҙе...
Иҫеңдәме,
Икеләнеү-шиктәр йыраҡ.
Леп-леп килгән күбәләктәй,
Леп-леп янды һөйөү-сыраҡ.

Йыһат-доға

Һағынамын йөҙөңдө,
Һағынамын һүҙеңде,
Һағынамын һинең янда
Ҡалған үҙкәй-үҙемде.

Аҡ һыуҙарға баҡһам да,
Һыуҙар булып аҡһам да,
Һылыулығым ҡайтмай инде,
Алҡаң һөйөп таҡһам да.

Йыһандарға ҡарайым,
Һыулы сәсем тарайым.
Толомомдоң остарына
Йыһат-доға урайым.

Йыһандарҙа ҡара юҡ,
Йыһаттарһыҙ ара юҡ,
Ер менән күк араһында
Һөйөүгә сик-сара юҡ.

Фәнил
КҮЗБӘКОВ

ӨҪТӘ – КҮК, АҪТА – ДАРЪЯ...

***

Тормош сикһеҙ диңгеҙгә тиң –
Кем һуң сыҡҡан осона?!.
Бер тын тартыр тапсыҡ та юҡ
Йәнемә –
ҡошсоҡома.

Өҫтә – күк,
аҫта – даръя,
Талпынған ҡайҙа ҡая?
Талпыныр ҡайҙа ҡая?
Өҫтә – күк,
аҫта – даръя!..

Еңеү–еңелеү

Еңеү генә түгел гелән –
Була еңелеүҙәр ҙә.
Еңеүе лә, еңелеү ҙә
Һынау бит ул ирҙәргә.

Көн менән төндәй алмашып,
Ҡиләләр бер-бер артлы:

Фәнил Күзбәков (1952) Мәләүез районы Әбет ауылынан. Башҡортостан һәм Рәсәй Яҙыусылар союзы ағзаһы, бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы. Әҙәби тәнҡитсе. Филология фәндәре докторы, профессор.

Үтәләй күренгәндә лә,
Зәңгәр күк ете ҡатлы.

Уң ҡулың бар, һул ҡулың бар —
Икеһе берҙәй кәрәк.
Еңелгәнгә биле терәк,
Ә еңеүсегә — йөрәк.

Еңелеү ҙә еңеүгә тиң
Ирмен тигән ирҙәргә.
Ирмен тигән ирҙәрҙе һин
Ер менән тигеҙләмә!

Еңелһә лә, еңгәндә лә
Үҙе булып ҡалыр ул.
Бил быуып, йөрәген услап,
Үҙ юлынан барыр ул,
Ил-көн тиеп яныр ул.

Өстән үрелгәнмен

Мин — ҡыл!
Төрлө көй сығарыр
Думбыра ҡылы мин.
Һағышлыларҙы илатыр
Халҡымдың моңо мин.

Мин — ҡыл!
Өстән үрелгәнмен
Йәйә керешенә.
Уғын сойорғотор яугир
Тартып йән көсөнә.

Мин — ҡыл!
Сылбырҙай бәйләйем
Үткәнде бөгөнгә.
Өҙөлмәйсә тартыламын
Алдағы көнөмә.

Моң сығырмы,
Уҡ осормо, —
Әйтер заманым.
Моң,
          уҡ,
                    сылбыр
Ҡабул итмәй
Тормош ялғанын.

Үҙемә нәсихәттәр

/Шәлкем/

Ышыҡлама

Аҡыл эйәләренә тәрән ихтирамлы Александр Македонский Диогенды саҡырып та килтерә алмағас, уның эргәһенә үҙе барған, имеш.

— Теләгәнеңде һора — бөтәһен дә эшләрмен,— тигән ул.

— Һин миңә Ҡояшты ышыҡланың. Ситкәрәк кит!

Берәү үлмәй — берәүҙәр көн күрмәй...
Төн һалҡыны — сәскә ысыҡлана.
Ҡояш ҡапларҙай, тим, булһаң да һин, —
Кешеләргә уны ышыҡлама!

***

Берәү үлмәй — берәү көн күрмәй, тип
Белеп кенә әйтелгән бит мәгәр!
Бәҫең булһа, артыр.
Башҡаларға
Үлмәҫ элек көн күрһәтһәң әгәр...

***

Өйрәтеүҙән, өгөтләүҙән аҙ мәғәнә,
Әгәр маҡсат изге икән — көс йәлләмә!
Әйтмәйенсә, арҡырыны буй әйләндер,
Был донъя
һүҙ — эш булғанда
көйләнгәндер.

***

Ахмаҡ менән дуҫ булыуың —
Ахмаҡлыҡ бит торғаны.
Бындай дуҫтың булыуынан
Яҡшыраҡ булмағаны.

Ирек баһаһы

— Ҡайҙа ғына ашығаһың, ҡырмыҫҡа?
— Мәшәҡәттәр етерлек бит тормошта...
— Билеңде лә биштән ҡыҫып быуғанһың?
— Хоҙай эше — шулай булып тыуғанмын...
— Ә үҙеңдең күрәм: ҡайыш бушаған...
— Аҙнаһына бер ысҡынам ҡоршауҙан.
— Уны һиңә кем билеңә һала һуң?
— Үҙем...
Шулай бәндә татый ирек баһаһын.

Сират күпере алдында

Ғәйеп эҙләү гонаһлыраҡ
Ғәйепле булыуҙарҙан.
Хөкөмдө үҙеңә сығар —
Аңлай алырҙайы аңлар
Сиратта торғандарҙан.

***

Ҡәңәш һора
олоһонан,
кесеһенән:
Донъя тығыҙ
бер йомғаҡтыр —
ныҡ сеймәлгән.
Ептең осон
тапһа табыр
күҙгә үткер,
Төйөндәрҙе
сисә алыу —
зиһенленән.

***

Хәмер эскән —
үҙ гонаһын
күрә белмәҫ,
Һөйләгәнен
әҙәм түгел,
эт тә еймәҫ.
Үҙ самаһын
самалай
алмағандар
Ситтә түгел,
үҙендә лә
ҡәҙер күрмәҫ.

***

Маҡсатыма
етәм тиһәң —
изге теләк,
Ә артабан
һыҙғаныулы
булһын беләк.
Бар булмышың
ниәтеңә
көйләнелһен,

Икеләнмә,
иң-иң үргә
етәлерһең.

***

Иҫәп тотма
ялмауыҙҙың
ҡәҙеренә, —
Дусар булһаң
бул һин дошман
йәберенә.
Күк биргәнен
мөрхәтһенеп
ҡабул итһәң,
Бейей алмаҫ
иблис-шайтан
ҡәбереңдә.

***

Хата баҫһаң,
Башҡаларға
Ғәйеп таҡма.
Сәбәпте һин
Тик үҙеңдән
Эҙлә башта.

Төшөнөрһөң —
Бөтә хикмәт
Тик үҙеңдә.
Бул юғары! —
Бысраҡ булмай
Күк йөҙөндә.

***

Аҡыл туплап
була микән
хатаһыҙ —
Тик соҡорға
ике тапҡыр
баҫмағыҙ.
Урап үтә
алмағанда
йырынды,

Тура сығам,
тип уйлама,
баҫмаһыҙ.

***

Әйтһәң әгәр:
“Эшләнере
эшләнгән —
Ни мәғәнә
терһәгеңде
тешләүҙән?!.”
Тулыһынса
хаҡлы түгел
һин, бәндә, —
Аҡыл туплау
башланалыр
биләүҙән.

***

Ныҡлы уйлан,
әгәр хата
эшләһәң,
Бешмәгәнгә
генә өлөш
төшмәгән.
Хаҡлы баһа
бирә алһаң
хатаңа —
Яуҙа улар
әйләнерҙәр
ҡалҡанға.

***

Ирҙе хатаһынан таны —
Хаталы бит батша ла.
Һынташтар ғына хатаһыҙ —
Билдән ергә батһа ла.

* * *

Һәр кемдең бар
был донъяла
үҙ өлөшө,—

Өлөшөнә
төшә торған
ұҙ көмөшө!
Бераҡ уны
баҡыр итер,
бераҡ алтын —
Шулай булған.
Шулай
ғүмер һөрөлөшө.

Башҡорт урманында кемдер ұкһей

Уралтауҙа әрнеп илай Бүре,
Рәнйегәндер Башҡорт балаһына...
Факиһа Туғыҙбаева

Үҙемде белгәндән бирле —
Бөркөтмө ни —
саңҡыным.
Уҡлы ҡаялар батшаһы
Татығанды татыным.

"Иҙелем — сәңгелдәгем", — тип,
"Олатай!" — тип Уралға,
"Тарих һөйләр мөъжизә", — тип
Арбалдым мин ҡурайға.

(Эй һин, Ҡурай! Моң шишмәһе,
Һынмаҫ Рух тантанаһы!
Һинең өсөн генә лә бит
Аттарға атланаһы!)

Әсәм һөтө, Атам ҡаны,
Ҡанбаба риүәйәте,
Аҡҡа төшкән, ташҡа яҙған
Уңды-һулды өйрәтте.

Шуға миндә —
йөрәгемдә (!)
Бошман бей яугирлығы,
Ялыҡ бейҙең сая рухы,
Салауаттың ирлеге;
Шәғәлиҙең сәйәсәте,
Алдар батыр аһтары,
Байыҡ сәсәндең ораны,
Буранбайҙың хаттары.

Эйе, миндә —
йөрәгемдә
Халҡымдың һыҙланыуы —
Берсә көлгә күмелеүе,
Ә берсә ҡуҙланыуы!

... Яраларымды ялайым
Ҡарурмандарға инеп,
Күҙ йәшем менән имләйем —
Сараһыҙ ҡалған кейек!
Яраланған бүреме ни —
Үкһейем...
Юҡ ишеткән.
Ишетергә тейешлеләр
Иблистәрҙе иш иткән.

(Ишетеүҙән уҙғанбыҙ шул:
Ил ҡалҡаны ағайҙар,
Орден тағып, ҡулдар сабып,
Яңы өйҙәр туйлайҙар,
Үҙ-үҙҙәрен "ҙурлайҙар" ҙа
Милләтемде хурлайҙар...)

Ишетеүҙән уҙғанбыҙ шул:
Башта башҡа ҡайғылар.
Ул "ҡайғы"ларҙан, бер килеп,
Айныуын да айнырҙар,
Тик һуң булыр...
Уянырҙар
Ер-һыуһыҙ маңҡорт булып...

Ә урманда кемдер үкһей
Ут-йәшенә быуылып.

***

Ағиҙелем инешләнгән Ирәмәлгә, —
Уралымды Урал иткән изге йәнгә
Күтәрелеү —
башҡорт өсөн бер йолалыр, —
Иҙел кисеп, тауҙар ашып, ир тыуалыр...

«Ете ҡыҙ»

Башҡорт йырындағы илаһилыҡ
Бейеүенә лә бит яғылған.
Был бейеүгә йондоҙ ҡабыныу ҙа,
Осҡон һүнеүе лә ҡағылған.

... Эй-й, ойотоп баҫа ете һылыу, —
Бына-бына һағыш сайпылыр;
Мөлдөрәмә һағыш касалары
Сылтыр-сылтыр килеп ватылыр...

Юҡ!
Ватмайса,
хатта сайпылтмайса,
Көйәнтәләп яҙмыш һонғанын,
Саң да ҡундырмайса мөхәббәткә,
Үтәләр бит тамуҡ һынауын.

Ете һылыу:
«Һөйөү — бәрәү!»
тиеп
Йәшен генә булып ялтлаған...
Һеҙҙе өткән ҡуҙҙар аша үттем, —
Һөйөү йәшендәре ҡайтмаған,
Һөйөү йәшендәре ҡайтмаған!

***

Үҙемде мин күтәрәмен икән —
Күтәрәмен, тимәк, халҡымды.
Халҡым, тиеп утҡа инәм икән —
Алам уға тигән ялҡынды.

Сер

Был серҙе мин бер кемгә лә сисмәм —
Етер мәле: бәпкә үлән ҡалҡыр.
Үлән елгә һөйләр,
ел — ҡурайға,
Ҡурай
сихри сер-моң таратыр.

***

Елгә астым иҙеүемде,
Кешеләргә — күкрәкте.

Ел сыныҡтырҙы,
кешеләр
... Тапап үтте йөрәкте.

Ергә атыла йондоҙҙар

Йондоҙ булып атылдым да
Һүндем һинең уста.
Ергә атлыҡҡан йондоҙҙоң
Ғүмерҙәре ҡыҫҡа.

Ер тип янып-һүнәләрме?!.
Күҙ һал, сыҡһаң тышҡа —
Төнгө күктең теленеүе
Һалыр һине уҡҡа.

Төндәрен сыҡ тышҡа, —
Ғүмерҙәр бит ҡыҫҡа.

Ҡулдарың

Ҡулдарың һинең яҙымлы,
Ҡулдарың һинең наҙлы.
Күк тәҙрәләрен һөрткәнһең —
Көндәрем салт аяҙлы.

***

Һөйөүҙе көтөү
һөйөүҙән
Ҡәҙерлерәк икән ул.
Зәңгәр тулҡын өҫтәренән
Осортҡан ал елкән ул.

***

Осрашыуҙы көтөү —
күтәрелеү,
Ҡанатланып,
Күктәр ҡатына!
Ә осрашыу —
кинәт Ергә төшөү
Тәүбәләргә килеү хаҡына.

***

Һинең менән
Көҙҙәремә инәм...

Ҡара:
нисек
Ҡурпыланған үлән!

***

Күрәм һине
йондоҙҙарҙың
Сер тулы яҡтыһында:
Сәсеңдән тама күл һыуы
Йыһан моңо аҫтында.

Бәүелсәктә

Бәүелсәктә бәүеләбеҙ —
Сайҡала Ер, Күк ауа:
Юғала Ер, юғала Күк —
Һин генә бар донъяла,
Мин генә бар донъяла.

Беҙ генә бар донъяла!

***

Һөйөү башы —
Айлы кистәр, йондоҙло күк.
Ә аҙағы...
Шул кистәр, шул хистәр хаҡына
Яманлама берүк!

***

Һинең сихри ҡарашыңдан
Бер тереләм, бер үләм.
Таңғы ысыҡ булып тамам,
Гөлдәр булып үрелә, —
Үтәм ҡылыс йөҙөнән.

***

Мөхәббәтһеҙ йәшәргә лә,
Үлергә лә —
ярамай!
Һаҡла берүк һөйөүеңде
Бер нигә лә ҡарамай.

***

Һинең менән булғанымда
Болоттарым тарала.
Күҙҙәрем әйләнә яҙға,

Яңы бер йыр ярала —
Балҡый йәйғор арала.

***

Һөйөү килер...
Тик йөрәгең
Һынауға әҙер микән?!.
Ялҡындарға әҙер микән,
Һалҡынға әҙер микән?!.

***

Һин киләһең...
Күҙҙәремдең
Алтын келәменән.
Көмөш йондоҙҙар ҡойола
Күктең иләгенән.

***

Йәй эҫеһеләй был һөйөү —
Тынды ҡура, башҡа ҡаба;
Кемдер үҙ-үҙен юғалта,
Кемдер берҙән-берен таба.

Йәй эҫеһеләй был һөйөү!..

***

Йылмаяһың...
Салт ҡояшлы
Көндәрем,
хатта төнөм!
Өндәрем минең төш кеүек,
Төшкә тиң кеүек өнөм.

***

Таң ҡыйыла...
Ялҡын алған
Күгелйем офоҡситен.
Әйтерһең дә,
Тәү үпкәндән
Алланған алма битең.

Риф
МИФТАХОВ

БЕҘ – ҺУҒЫШ БАЛАЛАРЫ

Мөъжизәләр

Булһа икән күрер күҙлегем,
Бар нәмәне аңлар һүҙлегем.
Сәфәр сығып, хатта бер үҙем
Урап ҡайтыр инем ер йөҙөн.

Хыялы ҙур өмөт-күңелдең,
Ә шулай ҙа мин бит күп күрҙем:
Мөъжизәле ғүмер кисерҙем –
Башҡортостан, һин бит бер үҙең, –
Ҡышын,
Яҙың, йәйең һәм көҙөң, –
Алмаштырыр бер Ил ер йөҙөн!

Хоҙай моңо

«Ҡайҙан килә был илаһи моңдар?..»
Һораным бер мәл ҡурайҙан.
Ҡурай әйтте: «Быны мин белмәйем,
Әйтер, – тине, – һора Хоҙайҙан».

Риф Мифтахов (1939) Ишембай районы Кинйәбулат ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Тиҫтәләгән шиғри, сатирик, повесть һәм хикәйәләр йыйынтыҡтары авторы. Оҙаҡ йылдар матбуғатта эшләне.
Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

Оялдым мин унан һорауҙан...
О, ни ғәжәп, тағы бер аҙҙан
Моң ағылды көпшә ҡурайҙан —
Ерҙән, күктән — бөтә Уралдан:
Йыһан үҙе сыңлай-иңрәй ине
Башҡорт ерендәге ҡурайҙан...
Илаһи моң, гүйә, үҙе әйтте:
«Һеҙ һаҡлағыҙ мине юғалыуҙан,
Ошо ерҙән алған йән-йәшәүем
Ул бит бүләк һеҙгә Хоҙайҙан...»
Йөрәгемдә тотоп баҫып торам:
Хоҙай моңо түгелә ҡурайҙан...

Беҙҙең быуын

Сабый сағы, бала сағы һуғыш алдына,
яу афәтенә тура килгән замандаштарыма

Яу мәле тере ҡалдыҡ беҙ
Ас әжәл хөкөмөнән.
Беҙме ни ҡурҡыр-өркөр йән
Сал ҡартлыҡ килеүенән?!

Һуғыш мәлендә тыуғандар
Барын иртә кисергән:
Түҙгәндәр — тере ҡалғандар
Тик үлән ашы менән.
Ат башында йөрөгәндәр:
Ер тырматҡан, ер һөргән.
Ололар нимә күрһәләр,
Барын да бергә күргән...
Үлсәмәгеҙ был быуынды
Ғәҙәти аршин менән.

Һаман улар эш өҫтөндә, —
Көнөн дә, төндәрен дә, —
Хеҙмәттең төрлөһөндә.
Үҙ балалары үҫһә лә,
Балдай татлы ейәндәрҙең
Хәсрәттәре-хәстәрҙәре
Уларҙың елкәһендә...

Шулай булғас, ҡалтыранып,
Саҡ һөйрәп аяғыңды,
Килмә, ҡартлыҡ, күрһәтмә лә
Килтергән таяғыңды.

Хәйер, тиҙ генә килмәҫһең,
Беҙҙең хаҡта ишетһәң:
Беҙ бит һуғыш балалары —
Сыныҡҡандар бишектән.

Беҙ һуғыш балалары —
Илебеҙ яралары.
Үтте тормош-яҙмыш аша
Аҡтары-ҡаралары.
Яу мәле тере ҡалдыҡ беҙ
Әжәлдәр хөкөмөнән.
Шулай булғас, юҡ, китмәйбеҙ
Тик һинең иркең менән!

Рух көсө тән-йәнебеҙҙә,
Онотма, ҡартлыҡ, беүк:
Ваҡыт еткәс, беҙ ауырбыҙ
Яу һалдаттары кеүек.

Әсә

Әсә... Ҡыҫҡа, ябай һәм ғәҙәти
Бары бер һүҙ генә донъяла.
Тик йөрәктәр әсәй тигән саҡта
Илаһилыҡ менән нурлана.

Был донъяға тыуған һәр сабыйға
Иң беренсе әсәй йылмайған.
Күкрәк һөтөн имеп йоҡлаған да
Бишек моңон тыңлап уянған.

Һыу-икмәктең тәмен, йәй-ҡыш йәмен,
Тыуған телдең сихри һүҙҙәрен
Әсә асҡан башлап: донъя-тормош,
Ер-йыһандың бөтмәҫ серҙәрен.

Тыуҙырғандан һуңғы көнөнәсә,
Үҙ ғүмере инде үтһә лә,
Һәр бер көнөн бала өсөн әсә
Хәүеф-хәсрәттәрҙә үткәрә.

Әсә тәнендәге һәр бер тамыр
Сабый йәндәренә тоташҡан.
Секундтарҙы үлсәр сәғәт кеүек,
Тиртеп тора йәндә уның ҡан.

Бер күрергә зар-интизар булған
Йорттан ситтә етем һәр бала
Ҡатын-ҡыҙға, әсәм түгелме, тип
Әсе йәшен һөртөп күҙ һала.

Тән-йән ғазаптарын кисергәндә,
Тулғаҡ тотҡан саҡта балаға,
Йәш ҡатын да әсәһенә баға,
Табынғандай, гүйә, Аллаға.

Яраланып, ахыр сиккә етеп,
Хәл өҫтөндә һалдат ятҡанда
«Әсәй» һүҙе менән күҙен йома,
Һуңғы тапҡыр һулыш алғанда.

Ташлағанда яҙмыш мәрхәмәте,
Ай-йондоҙо ерҙең, йыһандың;
Ҡолағында дәүер терәктәре,
Ҡалмағанда хаҡы имандың;

Туған-дуҫың, заман, бар кешелек
Көрсөктәргә терәп донъяңды,
Аҫтын-өҫкә хатта түңкәргәндә,
Мөхәббәте һүнмәҫ бер йәндә:
Ул мәңгелек һөйөү — әсәңдә.

Ябайҙар ҙа, даһиҙар ҙа — һәр кем
Әсәнән тыш ергә тыумаған.
Нисә быуын уға баш эймәгән,
Нисә быуын уны ҙурлаған?!

Ә барыбер әсә тормошона,
Яҙмышына лайыҡ булалған
Алтын һәйкәл әле һалынмаған.
Бөйөк әҫәр әле тыумаған...

Әсә һүҙе белмәй сик-сикләүҙе,
Инә йәнгә, ипләп, көсләшмәй.
Тәбиғәттәй, әсә күңелендә
Сабыр аҡыл, тынис көс йәшәй.

Ер шарында бөтә милләттәрҙе
Туған итер ҡөҙрәт был һүҙҙә!..
Кешелекте, ҡарынында һаҡлап,
Тыуҙырыусы әсә был ерҙә!

Холҡо күркәм, күңеле киң

Марат Хөсәйен улы Ғайсинға
тыуған көнө менән ҡотлау һүҙе.

Алдыңда етәксе булһа,
Артыңда таянысың булһын.

Башҡорт халыҡ мәҡәле

Мәҡәл иҫкерә төшөүгә
Юҡ үкенес, аяныс.
Ҡиреһенсә, һөйөнәбеҙ:
Етәксебеҙ — таяныс.

Алда ла бер төрлө,
Алыҫта ла бер килеш.
Ҡеше яратҡан етәксе
Шулай булырға тейеш.

Мең мәшәҡәтле эшенән
Үҙгәрә ауыл, ҡала.
Ябай, яғымлы ҡалаһы
Әммә үҙ булып ҡала.

Беҙ биҙҙереп бөткәндә лә,
Нисек ул беҙҙән биҙмәй?..
Холҡо күркәм, күңеле киң
Етәксе ерҙе биҙәй.

Таяныс бул һин алда,
Таяныс бул һин артта.
Хеҙмәттән, хөрмәт итеүҙән
Ҡәмемәй байлыҡ — арта!

Баһа

Дәүер иңен терәр ир-егеттәр киткәс,
Үткән заманалар кире ҡайта,
Дәүерҙәр ҙә бары әҙәм ирке менән,
Өр-яңынан тағы ҡабатлана...
Туҡта, ҡәләм, ярһып үтә ҡабаланма:
Ҡисәге көн — бөгөнгөгә баһа.
Әҙәм заты, заман үҙгәргән тип,
Үҙ асылын белмәй — хаталана.
Халыҡ көсө, бай тарихын аңлап-белеп,
Ҡилер көнөн дөрөҫ баһалауҙа.

Уртаҡ дан

Хәтер — диңгеҙ: йә ағыҙа,
Һалып ҡуя йә төбөнә.
Быуат-быуат тарих һыйған
Ҡешелектең хәтеренә.

Тәүтормошта ташҡа сыйған,
Уйлағанын әйткән телдән.
Ҡағыҙ тапҡан — аҡҡа яҙған,
Бөгөнгөгә килеп еткән.

Ҡеше бөйөк — өйрәнеүҙән,
Ҡеше даһи — эҙләнеүҙән.
Ағым бөтмәç, аçта ятмаç
Ҡалһа икән тарих беҙҙән.
Ижадыбыҙ — изге өмөт,
Ҡәләм алдыҡ — ҙур хыялдан.
Халыҡ юлы, уйы, йыры —
Ижад көсө һәм уртаҡ дин.

Изгелек

Һыуҙа — балыҡ, күктә — ҡош-ҡорт
Эҙҙәрен ҡалдырмайҙар.
Ерҙә лә изге йәнлеләр
Эҙ, һүҙ өсөн ҡылмайҙар.

Ҡылғандары — саф күңелдән,
Булғас йөрәк түренән.
Ҡылған йәнгә, сауап булып,
Ҡайта бит ул киренән.

Хоҙай күҙе — Йыһан күҙе:
Күрә, ҡыла барын да.
Изге булыу — ул бөйөклөк
Выждан — Хоҙай алдында.

Хыялый шағир өмөтө

Күк Аллаһы — Тимер ҡаҙыҡ,
Таң күҙе — Сулпан...
Һеҙгә ҡарап моңланамын
Урман йортонан.
Һеҙ үлемһеҙ, ә мин бер саҡ
Мәңгегә булмам.

Йөрәк емеше — йырымдан
Бер саҡ айырылһам:
Һалған эҙгә, яҙған һүҙгә
Шаһит Ай, урман...
Түҙермен, һеҙҙе күрермен
«Теге донъя»нан...
Һулышыма елдәр иҫер
Хоҙай тынынан...
Уянырмын, йорт өҫтөндә
Ҡалҡыр Ай, урман.
Күк аллаһы — Тимер ҡаҙыҡ,
Таң күҙе — Сулпан...

***

Ваҡыт үтә, тиеп уфтанмайыҡ,
Йәшәйек беҙ уға бөгөлмәй.
Ҡартлыҡта ла бар бит оло шатлыҡ:
Һәр кемгә лә ул бит бирелмәй.

***

Хаҡлыҡ өсөн һәләк булған кеше,
Үйламағыҙ, юҡ тип донъяла:
Ғәҙел хөкөмдәрҙең иң ғәҙелен
Ер өҫтөнә бер саҡ сығара.

***

Бәндәләр юҡ бөтәһен дә белгән,
Барыһын да булдыралған:
Алла итеп һис табынмайыҡ, —
Табыныуҙа заман сире — ялған.

***

Үргә үрләп, дан-шөһрәттән башың
Әйләнгәндә — туҡта!.. Эй, бәндә,
Тупраҡҡа баҫ: һине һаҡлап ҡалыр
Тамырҙарың ерҙә — түбәндә!

***

Башҡаларҙың уңышына
Көнләшеүҙең юҡлығы:
Ғүмереңдең тыныслығы,
Һаулығыңдың ныҡлығы.
Көнсөлһөҙ күңел бөйөк,
Саф, нурлы йондоҙ кеүек.

Тәскирә
ДАЯНОВА

ФӘРЕШТӘМ МИНЕҢ
ХИКӘЙӘ

– Тағы ла ҡал... бер аҙнаға?

– Һин нимә? Былай ҙа оҙаҡ йөрөлдө. Йә эштән сығарып ташларҙар.

– Иҫең дә китмәһен. Миндә йәшә лә ҡуй, тип әйтмәйемме ни? Өйҙә ултырғың килмәһә, «һә» тигәнсе эш табам.

– Магазиндамы? Сауҙа эшен енем һөймәй, йәнем тартмай. Унан килеп, гел һинең күҙеңә генә ҡарап торайыммы һуң?

– Мин һиңә ситме инде?

Студент йылдарында бергә йәшәп, бер табаҡтан ашап, бер эскәмйәлә лекциялар тыңлаған әхирәтем Ғәлимә менән бер үк мәсьәләгә нисәнсе тапҡыр әйләнеп ҡайтабыҙ. Уртаҡ фекергә килә алмай, йәнә туҡтап ҡалабыҙ.

Мин сәйемде ауыҙ бешерә-бешерә эсәм, ниңә ашығамдыр, үҙем дә аңламайым.

– Һуңға ҡалмаҫһың. Хафаланма, яңы алты тулды.

– Шулай ҙа иртәрәк ҡуҙғалыу яҡшы.

Сумкамды кистән әҙерләп ҡуйғанмын. Кейер кейем ҡул осонда. Көҙгөгә барып, үҙемде аҙ-маҙ тәртипкә килтерҙем. Борсоуло йөҙөм үҙемә күптән оҡшамай. Ләкин был турала уйлағым килмәй. Диванда ултырып тынып ҡалабыҙ. Ваҡытлыса төйәк булған фатирҙан, әхирәтемдән айырылыу былай ҙа китек күңелемде болоҡһотоп ебәрҙе.

– Ҙур рәхмәт, әхирәт. Һин булмаһаң, ни эшләр инем.

– Асия, ҡунаҡ ашы – ҡара-ҡаршы инде. Үҙең миңә аҙ изгелек эшләнеңме?

– Йә, Ғәлимә, ҡуҙғалайыҡ, булмаһа.

– Еңмешһең дә инде. Киттек, әйҙә.

Әхирәтемдең сейә-ҡыҙыл машинаһы, ҡыҙып-йылынып, беҙҙе көтөп тора. Урамда хәрәкәт юҡ кимәлендә. Шунда уҡ «йәшел ут»ҡа эләгеп, тотҡарлыҡһыҙ автовокзалға еттек. Билет алырға ла сират юҡ. Бөтәһе лә ыңғай ғына килеп тора. Алдағы урындарҙың береһенә билет алдым. Киләсәк тормошом уңышлы булыр кеүек.

Яҙыусы Тәскирә Даянова (1948) — мәғариф ветераны, Мәсетле районында йәшәй. «Ағиҙел» журналы конкурстарында электән әүҙем ҡатнаша, был юлы халыҡ-ара бәйгелә һынатманы.

Әхирәтемде оҙатырға ишек алдына сыҡтым. Әсе елле, һалҡын иртә. Килеп туҡтаған автобустарҙың тормоздары сыйылдай. Һалҡын һөйәккә үтеп киткән төҫлө. Ғәлимә, муйынын куртка яғаһына йәшереп, мөлдөрәп ҡарай. Көслө ихтыярлы әхирәтемә хас түгел был, минең күңелдең йомшаҡ икәнен белеп, һаман үҙенекен ҡайырыуылыр. Мин уны ҡосаҡлайым, бер башҡа оҙон әхирәтемдең түшенә башымды төртөп тын ғына торам.

– Йә, әхирәт, ҡайт инде. Рәхмәт бөтәһе өсөн дә. Әлегә хуш.

Уның юл аша сығып, машинаһына ултырып китеүен ҡарап ҡалғандан һуң, вокзалға индем. Автобус ҡуҙғалырға ярты сәғәт бар әлегә. Һирәкләп кенә кешеләр кереп, билет алып китә. Беҙҙең яҡҡа ҡайтыусылар күп тойолмай. Гәзит һатып алып, ҡараштыра башланым. Яртыһын әртистәр тормошо биләй. Улар ғына донъя тотҡаһы тиерһең. Гәзитте сумкаға тығып ҡуям. Ниһайәт, ултырырға иғлан ителде. Эргәмдәге юлдашым бик оло кеше икән. Минән алда инеп, төпкө яҡтан урын алған. Күҙен йомоп, серемгә киткән төҫлө. Ниңәлер иғтибар итә ҡуйҙым: шәшке бүрек, һоро тун кейгән, затлылыҡ бөркөлөп торған бабай ине ул. Йөҙө бик йонсоу күренә. Билеттарҙы йәнә бер барлап алып, автобус ҡуҙғалып китте. Мин дә күҙҙәремде йомдом, психотерапия сеанстарында өйрәткәнсә, тәнемде йомшарттым. Ҡараңғы салон эсендә бәүелеп бара торғас, нысҡына йоҡлап киткәнмен. Шулай байтаҡ юл үтелде. Һиҙеүемсә, ҡуйы урман эсенән барабыҙ. Юлдың ауыр, бормалы, тығыҙ өлөшө. Һаман дөм- ҡараңғы. Ҡышҡы көн сәғәт ун тулмай яҡтырмай. Аҙ-маҙ юлға ҡарап алам да йәнә онотолам.

Эргәмдә хәрәкәт һиҙеп, күҙемде астым. Бабай тынысһыҙлана ине. Уға һауа етмәй, тыны быуылып ғазаплана. Ауыҙын асып, күберәк һауа йоторға итә, тик бушҡа ғына көсәнә.

– Ағай, ни булды? – Уның тун төймәләрен ашығып ысҡындырҙым, шарфын бушаттым. Ул көс-хәл менән түш кеҫәһенә ымлай. Ҡулымды тығып, кескәй шешәләге төймәне алып, ҡаптырып ебәрҙем. Һыуым бар ине, шуны йоттороҙом. Күпмелер ваҡыттан һуң юлдашымдың тын алыуы яйланғандай булды. Ул күҙҙәре менән генә миңә рәхмәт белдерҙе.

Йоҡо ҡасты. Юлдашымды һиҙҙермәй генә ҡарап бара башланым. Бабай тамам тынысланып ҡалды, тигеҙ генә тын алып, йоҡоға китте, буғай. Сырайы аҡһыл-һары. Ғәҙәттә, саф һауала йөрөмәгән кешеләрҙеке шулай була. Йөҙ һыҙаттары дөрөҫ, килешле. Йәш саҡта бик сибәр булғандыр ул. Әле лә, оло булыуына ҡарамаҫтан, үҙенә генә хас күркәмлеге бар. Ҡыйғас ҡара ҡаштарына сал ингән, бөркөт танаулы, нескә ирендәре күкшел булып тора. Мин уны бер аҙ атайыма ла оҡшата бирәп ҡуйҙым. Ҡаҡса кәүҙәһе, оҙонса йөҙө уныҡына тартым. Ата-әсәм иҫемә төшөү менән һағыныу, юҡһыныу үҙегемде өҙҙө. Ах, атай, әсәкәйем! Икегеҙ ҙә был донъяны бигерәк иртә ташлап киттегеҙ шул. Бөтә уңышһыҙлыҡ-бәхетһеҙлектәрем һеҙҙе юғалтыуҙан башланды, тип уйлайым. Ҡайһылай ҙа яғымлы, кешелекле инегеҙ һеҙ. Әсәкәйем атайымды хатта бер көнгә лә ҡалдырып китергә теләмәй ине. Шуға ла ауырыуын эскә йомоп йөрөп, өрөп һүндергән шәм кеүек һүнеп ҡуйҙы. Унан башҡа йәшәүҙе күҙ алдына килтермәгән атайым өс айҙан һуң китеп барҙы. Мин үҙемдән ике йәшкә өлкән ағайым Асҡар менән тороп ҡалдым. Ул йомшаҡ күңелле, ҡыҙ фиғелле, сибек кенә егет ине. Шул арҡала хатта армияға ла алманылар. Минең менән ҡурсаҡ уйнап, уларға күлдәк тегеп үҫкән бала. Һайлаған һөнәре лә бесеүсе-тегенсе булды. Магазин кейеме яратмаған ҡупшыбикәләргә ҡойоп күлдәк, юбкалар, һирәкләп ирҙәр өсөн һарыҡ тиреһенән тундар ҙа тегә. Кәләше үҙе менән бергә уҡыған ҡыҙ. Ул ағайымдың тап киреһе: тос кәүҙәле, ҡалын тауышлы Диана еңгәм. Атай-әсәй вафат булғас, йорт ағай-еңгә ҡулында ҡалды. Атай – колхоз бухгалтеры, әсәй уҡытыусы булғас, донъялары бик бөтөн, яҡшы ине. Һөйөшөп, татыу йәшәгән кешеләрҙең ҡаралтылары ла берәмтекләп, матурлап йыйылған. Мин өлөш дәғүәләшеп

йөрөмәнем. Тыуған йортҡа юл ябылмаһа ла, унда, барыбер, киҫеп ташланған артыҡ киҫәк икәнем еңгәнең тел төбөнән аңлашыла ине.

Университеттың филфагында өсөнсө курста уҡып йөрөйөм. Шул ваҡытта бөтөнләй таянысһыҙ ҡалдым. Башына һуғылған һарыҡ һымаҡ ҡаңғырып йөрөгәндә Фәритте осраттым да инде. Ул – ауыл хужалығы институтының һуңғы курсында уҡып йөрөгән мыҡты кәүҙәле егет. Беҙҙең күрше бүлмәлә йәшәгән ауылдашына килгән саҡта мине күреп ҡалып, сытырман йәбеште. Бер уйлаһаң, аңлауы ауыр: ул – дөңкөлдәтә баҫып йөрөгән көрәшсе егет, мин уның янында күбәләктәй генә ҡыҙ балаға ниңә күҙ һалғандыр. Ауыр хәлемдә миңә таяныс була белде, өйләнешеүҙе лә ашыҡтырҙы. Ғәжәпләндергәне шул: ни өсөндөр ата-әсәһе менән таныштырырға ауылына алып ҡайтманы. Студент туйы үткәрҙек. Туйҙан һуң миңә дүртенсе, бишенсе курстарҙы ситтән тороп уҡырға талап ҡуйҙы. Күп кенә нәмә аҙаҡ аңлашылды. Өҫ-башым гел яҡшынан икәнде күреп, бай ғаиләнән, тип уйлаған. Һуңынан ағайымдарға ҡунаҡҡа барып, беҙҙең зауыҡлы ҙур йортто, етеш донъяны күреп ҡайтҡас, был мөлкәттәрҙең яртыһы һинеке бит, тип ҡайыра башланы. Шул ваҡыт мин унан саҡ китмәй ҡалдым. Уға эҫенеп өлгөрмәгән ваҡытта китеп барһам, яҡшы булыр ине лә. Аҙаҡ шул мәғлүм булды: Фәрит ун бер балалы ғаиләлә үҫкән икән. Береһенең кейемен икенсеһе туҙҙырып, икмәк-бәрәңге ашап үҫкән бала. Простыня, юрған тышы кеүек нәмәләрҙе студент ваҡытында ғына ҡуллана башлаған. Ата-әсәһе колхозда эшләгән ябай ғына кешеләр. Атай кеше – малсылыҡта, әсәһе сөгөлдөр-фәләнгә йөрөгән. Ни тиклем тырышһалар ҙа, донъя кәрәк-ярағы еткерә алмай интеккәндәр. Фәриттең шуның өсөн үҙҙәренә алып ҡайтырға ғәрләнгәнен аңлап иҫем китте. Нисек кенә булһа ла, ата-әсә бер генә, уларҙан ғәрләнеү башҡа ла һыймай. Тормош юлдашым булаһы кеше бала саҡта етеш йәшәгән тиңдәштәренән көнләшеп, уларҙың аш-һыуына, кейемдәренә күҙе ҡыҙып йәшәгән. Уҡып ҙур кеше булырға, бай ҡатын алырға хыялланған. Ләкин мин ул көткәнде бирә алманым шул.

Уны район юлламаһы менән уҡырға ебәргәйнеләр. Уҡып бөткәс, тыуған яғына ҡайтты. Инженер-механик кешене гараж мөдире итеп ҡуйҙылар. Колхоздар көрсөккә терәлә башлаған ваҡыт. Фәрит тырышып эшләп китте. Көнө-төнө иҫке техникаға запас частар эҙләп сапты. Шатландырғаны шул: кирбестән һалынған колхоз йортон фатир итеп бирҙеләр. Йортобоҙҙо бик оҡшаттыҡ. Нимә генә тимә, үҙебеҙҙең мөйөш. Ҡулға килеп ингән бар аҡсаны йорт йыһаздары алырға тотонабыҙ. Ул мәшәҡәттәрҙән ҡотолғас, машина алырға аҡса йыйырға керештек. Өсәр баҡса бәрәңге ултыртып һата инек. Ул эш күберәк минең елкәгә төштө. Сөнки Фәрит командировкаларҙан ҡайтып керә белмәне. Тырыша торғас, машиналы булдыҡ, һуңғы модель «Жигули» ине ул. Шул ваҡытта ауырға ҡалдым. Шул тиклем ҡанатланып, татлы хистәргә бирелеп йөрөйөм. Был яңылыҡты ни рәүешле иремә еткерергә, тип баш ватам. Матур итеп өҫтәл әҙерләп, сәскәләр ҡуйып был турала хәбәр итеүем иремдә кире тойғолар ғына уятты. Уның ҡара һөрөмө ҡойолдо.

– Зачем нищету разводить? Әле үҙебеҙҙең әҙәм рәтле йәшәгәнебеҙ юҡ, – тип кенә ҡуйҙы.

Шул саҡтағы рәнйеүемде, мәхрүмлек тойғолары кисереүемде, ғазаптарымды үҙем генә беләм. Ә Фәрит абортҡа барыуымды талап итте, өҙмәй ҙә ҡуймай. Көтөп кенә алған сабыйымды ҡотҡарыр өсөн байтаҡ ҡырталаштым. Ҡатылыҡ менән еңә алмағас, төрлөсә йыумалап, татлы тел, иркәләүҙәр менән Фәрит еңеп сыҡты.

Шул саҡта врач креслоһында ятыуым иҫемә төшөп, күҙҙәремдән йәштәр ағып төштө. Танауымды тартҡыслауға эргәмдәге оло кеше хәрәкәткә килде. Ул ҡабаҡтарын хәлһеҙ генә күтәреп миңә ҡараны.

– Ни булды, ҡыҙым? Әллә һинең дә берәй ерең ауыртамы? – Үҙе ауыр тын ала, хатта теле көрмәлеп киткәндәй була.

– Юҡ, ағай, иғтибар итмәгеҙ, зинһар. Үҙегеҙгә насар була күрмәһен.

– Булаһы күптән булған инде уның, – ул тәҙрәгә күҙ һалды. – Байтаҡ бараһы икән. Нисек тә түҙергә ине, – тип ҡуйҙы.

– Ҡайҙа юл тотаһығыҙ?

– Ҡайтып барыш... Мәксүткә.

– Больницаға барҙығыҙмы?

– Миңә ниндәй больница ярҙам итһен? Илемә ҡайтып үлгем килә, бары шул. – Ниндәйҙер аяуһыҙ битарафлыҡ менән әйтә был һүҙҙәрҙе. Үлем, әйтерһең, уның көтөп ала торған ҡунағы. – Ҡурҡыттым һине, ҡыҙым. Шулай ҙа ҙур рәхмәт. Йән сыға яҙҙы. Ете ят кешеләр араһында, автобуста үлермен тип кенә ҡурҡтым.

– Шулай ныҡ ауырығас, ниңә юлға яңғыҙ ғына сыҡтығыҙ?

– Ҡәрендәш, һөйләһәң, оҙонға китә. Күреп тораһың, йәнем көрсөккә терәлгән.

– Берәйһе ҡаршы аламы һеҙҙе?

– Юҡ, минең фажиғәм дә шунда. Бер кем көтмәй. Әбейем дә күптән вафат.

Торғаны бер йомаҡ был бабай. Хәйер, ғәжәпләнер урын да юҡ. Минең һымаҡ яңғыҙҙар, таяныстһыҙҙар донъяла аҙ тиһеңме? Нисә аҙна элек үҙем дә шул бабай хәлендә инем... Силәбе өлкәһен үтеп киткәнбеҙ икән. Мәксүткә ике сәғәт ҡалған. Был өлкән кешене яҙмыш ҡосағына ташлай алмаҫымды аңланым. Минең тормош кәмәһе ҡомға терәлгәс, ярҙам итеүселәр табылды бит. Күршем Заһир ағай иҫһеҙ ятҡанымда больницаға илткән, унан ары – Ғәлимә әхирәтем. Ҡотҡарырға тырыштылар, ташламанылар. Бабай хәлен һиҙҙермәҫ өсөн бар көсөн һала. Тыуып килгән ҡояштың һүрән генә нурҙары уға төшә. Йөҙө һап-һары, ғазаплы. Ябыҡ ҡына муйынындағы тамыры леберләп кенә тора. Уның менән бергә төшөп ҡалып, такси яллап, өйөнә тиклем оҙатырмын, врач саҡырырмын. Шулай хәл иткәс, үҙемә рәхәт булып ҡалды. Бабай йәнә тынысланды, ойоп китте. Мин дә күҙемде йомдом, уйҙарым, шуны ғына көткән төҫлө, өҫтөмә ябырылды.

Эйе, тәүге баламды төшөргәс, имгәнеп ҡалдым. Табиптар «бүтән ауырға ҡалмаясаҡһың» тигән хөкөм сығарып ҡуйҙы. Ә Фәрит минең шундай хәлгә төшөүемде көтөп кенә йөрөгән тиерһең. Мине бөтөнләй һанға һуҡмай башланы, икенсе ҡатындар менән сыуалды. Мин һүҙ әйтһәм, ҡул күтәрергә лә оялманы. Өндәшмәҫкә, телемде тешләргә мәжбүр булдым. Үләндән тәпәш булып ҡалдым. Үҙем, уны һаман яратам, тип уйлайым.

Был ваҡытта колхоздар тамам бөлөп, мал-тыуарын, техникаһын пыран-заран килтереп таратып бөтөрөп баралар ине инде. Халыҡ нисек булдыра ала, шулай көн итеүгә күсте. Фәрит тә таксист булып кәсеп итә. Күберәк Өфөгә йөрөнө. Арыу ғына килем дә килә ине, буғай. Оҙаҡламай машинаһын сит илдекенә алыштырҙы. Миңә йомарланған ҡулының бармаҡ араларынан тамыҙып тигәндәй аҡса бирә. Үҙемдең бәләкәс кенә эш хаҡым менән хужалыҡ, йорт тирәһен ҡарайым, алмай торһаң, кейеме лә таушала бит әле. Ирем аҙналар буйы өйгә ҡайтманы. Оҙон телдәр уның район үҙәгендә ҡатын-ҡыҙ әйбере һата торған магазин хужабикәһе менән дә йәшәүен хәбәр итте. Керпектәрен ҡалын итеп ҡараға буяп, ирененә ҡып-ҡыҙыл помада һөртөп йөрөүсе яһалма блондинканы минең күргәнем бар. Мин «батып барыусы һаламға тотона» тигәндәй йәшәйем. Өйҙө, баҡсаны сынъяһау итеп тотам. Иремдең кейемдәре, ҡайтып алыштырайым тиһә, носкиҙарына тиклем үтекләнгән. Унан башҡа бер кемем дә юҡ таһа.

Ҭулышҡан шеш һытылмай булмай. Бына быйылғы Яңы йылда записка ғына ҡалдырып, Фәрит мине бөтөнләй ташлап китте.

«Реактив невроз» тигән сиргә һабыштым... Тәүҙә районда, унан Өфөлә дауаханала яттым. Яҡын әхирәтем Ғәлимә «Йоматау» шифаханаһына юллама алып бирҙе. Уның үҙ бизнесы бар, ғаиләһе – берҙән-бер улы. Уны ла ата-әсәһе ҡарай. Әхирәтем, минән айырмалы рәүештә, өлгөр, ҡыйыу кеше. Ирҙәр өсөн йәш ҡойоп, маңҡа ағыҙып йөрөйәсәгем юҡ, ти. Шундай шәп ҡатын ни эшләп минең әхирәтем һуң? Университетта уҡығанда, киреһенсә, уҡырға мин шәп инем. Уға ныҡ ярҙам иттем. Курс эштәрен, дипломын минән башҡа йырып сыға алманы. Шуға ла ҙур рәхмәтле, изгелекте онота торған кеше түгел ул. Ә белем уға кеше араһына инеү өсөн бик кәрәк ине.

Әлеге ваҡытта ауылға ҡайтып кергем дә килмәй. Һигеҙ йыл йәшәгән донъямдан, эшемдән биҙеп киткән кеүекмен. Нисек кенә бөтәһен дә яйға һалып ебәрермен? Уйлана торғас, йоҡлап киткәнмен. «Максютово. Стоянка 15 минут», – тигән тауышҡа уянып киттем. Ултырып ялҡҡан юлсылар аяҡтарын яҙырға төшәлә башланы.

– Килеп тә еткәнбеҙ икән. – Бабайҙың яғымлы тауышы ишетелде. – Ҡыҙым, берәй тылсымың бармы әллә? Арыу ғына йоҡлап алдым, хәл дә ул тиклем мөшкөл түгел.

Мин уны ҡултыҡлап вокзалға алып сыҡтым. Ул, бирешмәҫкә тырышһа ла, көс-хәл менән атлай. Эскәмйәгә ултырттым.

– Мине көтөгөҙ, хәҙер киләм. – Бабайҙың күҙендә өмөт, ҡыуаныс сатҡылары ҡабынды, хатта әллә нисек үҙгәреп китте.

Минең кире килгәнде керпек тә ҡаҡмай көтөп ҡалған бабайға такси саҡырасағымды әйтеп киттем. Кәрәкмәгән саҡта тулып торған таксиҙарҙың әле килеп береһе лә күренмәй. Улай-былай һуғылып эҙләй торғас, бер насар ғына машина килеп туҡтаны. Таксист, йәп-йәш егет, бабайҙы, сумкаларҙы сығарырға ярҙам итте. Бараһы ер шаҡтай ғына йыраҡ, ҡасабаның бөтөнләй икенсе яғында икән. Матур ғына ағас өй янында туҡтаныҡ. Ихатаға инә торған юлды көрт баҫҡан. Шул саҡ башым әйләнеп китеп, саҡ йығылманым, хәсрәт ярҙамсы, үҙең дә аунап бараһың түгелме, тип уйлап алам. Болдорға еткәнсе бабай ике тапҡыр туҡтап хәл йыйҙы.

– Ҡыҙым, асҡыс тун кеҫәһендә. – Болдор бағанаһына тотоноп торған оло кешенең ҡулын кеҫәһенә тығырлыҡ та хәле юҡ ине, күрәһең.

Хужаһыҙ йорт һалҡын ҡотһоҙлоғо менән ҡаршы алды. Газ менән йылытыла икән, мин ундай мейесте тоҡандыра белмәйем.

– Хоҙайға шөкөр, бына ҡайттым, инде тыныс күңел менән тыуған төйәгемдә үлеп, ғәзиз тупрағымда ятырмын.

– Исемегеҙ кем, ағай?

– Фәрүәз бабайың булырмын. Рәхмәт, балаҡайым, изге кешеләр бөтмәгән икән.

– Мин Асия булам. Ағай, өйҙө йылытырға кәрәк ине... – Яҡындағы колонканан һыу килтереп, бабайҙың өйрәтеүе буйынса, мейесте көйләп, ут тоҡандырып ебәрҙем.

– Магазинға барып кил, ҡыҙым. – Ул аҡса һуҙҙы.

– Күп бит, вағырағы юҡмы?

– Юҡ. Бар, ни кәрәк, үҙең белерһең.

Бабайҙы хәлләндерер өсөн яҡшыраҡ ашатырға кәрәк, тип уйланып барҙым. Беренсе сиратта сәй-шәкәр, һөт-май, икмәк, ярмалар, быҡтырылған һыйыр ите алдым. Сәй ҡайнатып, дөгө бутҡаһы бешереп алыуға өй ҙә йылынып китте.

Бабай теремекләнде, өҫтөн һалып ташланы. Аҡ тулҡын сәстәрен тарап ебәрҙе.

– Йә, ҡыҙым, ни менән һыйлайһың?

Оҙон юл асыҡтырған, һыуһатҡан. Кисә генә бер-береһен белмәгән кешеләр, аталы-ҡыҙлы һымаҡ, тамаҡ туйҙырып ултырабыҙ. Яңы ғына шыҡһыҙ, һалҡын булып өңрәйеп ултырған өйгә йән инде. Яңы бешергән сәй, ҡайнаған һөт еҫтәре таралған. Хужаһы булмаһа, йорт та һағышҡа бата, ҡото китә шул. Фәрүәз бабайҙың маңлайына тир бәреп сыҡҡан, автобустағы сытырайған йөҙлө, үлеп барған ҡартҡа оҡшамаған. Мөләйемләнеп, йыйырсыҡтары яҙылып киткән.

– Бутҡаң да, сәйең дә тәмле булды. Күптән шулай танһыҡлап ашағаным юҡ ине.

– Рәхмәт.

Бабай оло кешеләргә хас иплелек менән минең хаҡта һораша. Етди аҡыл, нәзәкәтле тәрбиәлелек һирпелә унан. Мин ҡыҫҡаса ғына хәлемде һөйләп бирҙем. Хужа бабай бүлдермәй, ихлас тыңлай.

– Ҡыҙым, әгәр беҙҙе яҙмыш осраштырған икән, тиккә генә түгел ул. Осраҡлы ғына бер нәмә лә булмай. Бер-беребеҙгә кәрәкле булғанға, мохтаж булғанға осрашҡанбыҙ, тимәк. Күреп тораһың, оҙаҡ ҡына йәшәгән, күп кешеләр менән аралашҡан кешемен. Шул иҫәптән ҡатын-ҡыҙҙың да төрлөһөн күрергә тура килде. Һинең тәүге ҡарашыңдан ниндәй кеше икәнеңде төшөндөм. Фәрештәләр затынандыр һин. Шул тиклем дә эскерһеҙ, ихлас, мөләйем, дөрөҫ йәшәүсе кешеләрҙә генә була торған күҙҙәрҙе хәҙер осратып та булмайҙыр. Бындай кешеләргә тормошта ауырға тура килһә лә, тормош улар арҡаһында дауам итә. Улар – тормош тотҡаһы, – бабай, сәй менән ирендәрен сылатып алып, дауам итте. – Ҡарсығымдың вафатына ун йыл. Бер бөртөк улым, киленем бар. Өфөлә йәшәйҙәр. Яңғыҙ ҡалғас, бер үҙем йәшәп маташтым. Өй ҡарарға, аш-һыу әҙерләргә яңы пенсияға сыҡҡан бер ҡатынды яллап та ҡараным. Йөрәк арҡаһында тамам рәт китә башлағас, улым үҙенә алып ҡайтты. Бер бүлмәгә урынлаштырҙылар. Унда ла һаман яңғыҙлыҡ. «Алып ҡайтҡас эш бөттө-булды»,– тип уйланылар, ахрыһы. Ҡайһы көн хәл белешеп тә сыҡмайҙар. Хәлһеҙләнеп, тамаҡ ҡатып ятҡан саҡ була. Бер сынаяҡ сәйгә зар булаһың. Ярай, улым көн-төн эштә тигәндәй. ГИБДД-ла ҙур ғына етәксе. Уларға талап ҡаты: личный составты ла көндән-көн ҡыҫҡарталар. Ә килен ҡатын кеше бит. Ҡатындарға хас йомшаҡлыҡ, ҡайғыртыусанлыҡ булып, әҙерәк хәл белешергә, ашау ҡайғыртырға тейеш. Ҡайһы бер көн бер нәмә лә әҙерләмәй, буп-буш. Кафе-ресторандарҙа тамаҡ туйҙыра, буғай. Үҙе ниндәйҙер шәхси фирмала директор урынбаҫары. Эш тигәс тә, үлергә күп ҡалмаған атайҙы оноторға яраймы икән? Хәлле сағымда, улар яңы эш башлап торған ваҡыттарҙа тапҡан-таянғаным тик уларға китеп торғанын бар тип тә белмәнеләр. Шулай тәрбиә күрмәй, бер бүлмәлә ята торғас, бөтөрөнөп, хәлһеҙләнеп киттем.

Ғүмер буйы мәктәптә, ҙур ғына коллективта эшләгәс, кешеләргә өйрәнгәнмен. Пенсияға сыҡҡас та эшләп йөрөй инем әле, инфаркт тәгәрәтте. Проблемалар ҙа етерлек булды инде. Совет тәрбиәһе алып, шул осорҙа эшләп өйрәнгән кешегә хәҙерге замандың күп нәмәләре оҡшап етмәй. Уны һөйләй китһәң, минең ҡалған ғүмер етмәҫ ул. Эштән китергә тура килде, дауаландым, бер үҙем йәшәп маташтым. Тик бирештем, мыжыҡ бабайға әйләндем.

– Туҡтап тороғоҙ, зинһар. – Фәрүәз бабайҙың теле тыңламай башлағайны. – Ял итегеҙ. Бер юлы хәлдән тайып ҡуймағыҙ.

– Эйе, арыным. – Ҡарт күҙен йомдо, ойоп китте. Кәүҙәһе таралып йоҡлап киткән оло кешене гонаһыҙ сабыйға оҡшаттым. Күптән шулай ҡайғыһыҙ, тыныс, уйһыҙ халәте булмаған да. Әле килеп йомшарып ҡалған төҫлө ине. Уға хатта ки

һоҡланып ҡарайым: йөҙө мәғрур, мөһабәт ҡиәфәттә. Маңлайы киң, ҡалҡыу, сал сәстәре тулҡынлы, һаман да ҡуйы. Бөркөт танауы йөҙөнә ғорурлыҡ бирә, сал ингән ҡаштары ҡыйғас. Буйға ла кәкрәймәгән, сүгеп ҡалмаған. Заманында бик күп ҡыҙҙар ғашиҡ булғандыр. Өҫтөнә ябып, кухняға индем.

«Уны был көйө ҡалдырып булмай ҙаһа, бер нисә көн рәтләп тәрбиәләмәй булмаҫ. Хәлләндереп алырға кәрәк. Ас ятып миктәгәнлеге һиҙелеп тора. Мәшәҡәттәр араһында Фәрит әкренләп онотолор». Уйға сумып, бабайҙың йортон ҡарап йөрөйөм. Уңайлы уртаса ғына өй. Йорт йыһаздары самалы, артыҡ әйбер тулмаған. Тәртипле, бәләкәй ғаилә йәшәгәнлеге аңлашыла. Ишек алдындағы баҡсала самалы ғына емеш ҡыуаҡтары, өс төп алмағас. Арыраҡ мунса, утын һарайы. Әле барыһы ла йыйнаҡ, арыу, бөхтә. Айҙар буйы йыйылған туҙанды һөртөп, балаҫты ҡағып йәйҙем. Быҡтырылған иттән аш өлгөрттөм. Йорт эше һағындырған. Теләп, йүгереп йөрөп эшләнем. Йоҡлап ятҡан оло кеше минең атайым, мин уның һағынып ҡайтҡан балаһы тип хис иттем. Ах, ысынлап та, шулай атайым тере булһа, уны «өф» итеп тәрбиәләр, хөрмәт күрһәтер инем. Алтмышҡа еткән кешеләрҙең ата-әсәһе бар. Минең ата-әсәм дә, ирем дә, балам да юҡ. Ниңә шулай ҡыу томшоҡмон? Яман кеше лә түгелмен дәһә! Күңелем йомшарып, илап креслоға ултырҙым. Эңер төштө, күҙ бәйләнде.

– Ҡыҙым, ниңә ҡараңғыла ултыраһың? Утты ҡабыҙып ебәр. – Бабайҙың тауышы ысынбарлыҡҡа ҡайтарҙы.

Ут ҡабыныу менән өй эсендәге үҙгәреште күреп, ул ҡәнәғәт йылмайҙы, һәр йыйырсығы ҡыуанған төҫлө ине. Ҡайтып ингәне бирле ул гел шатлана, һөйөнөп кенә тора.

– Балаҡай, ҡулың ҡотло икән. Яңғыҙ ҡарттың ен эйәләп бөткән мөйөшөнә нур ингән. Әйттем бит, фәрештә затынанһың, тип. Ҡартлас ҡалай һайрап ебәрҙе, һиҙәһеңме? Иртән генә үләм тип ултыра инем. – Бабай көлөп ебәрҙе.

– Рәхмәт.

– Йәшәге килеп китте бит әле. – Ул тороп ултырҙы.

Мин уға йылы джемперын, йөн ойоҡбаштарын килтерҙем.

– Ай, Аллам, үҙемдең генә балам булһаңсы. Мин динһеҙ, ата коммунист инем шул. Һине күргәс, Хоҙай иҫкә төштө. Илаһи заттың пәйҙә булыуы Хоҙай ярҙамы менәндер, тим.

– Ағай, ашап алығыҙ. Бында килтерәйемме?

– Юҡ, тора алғанда торайым. – Ул йыуынырға китте.

Аҙаҡ күңелле генә табын ҡорҙоҡ, мин яраштырған ашты хужа бик яратып ашаны.

Бабайҙа биш көн тороп ташланым инде. Шул ваҡыт эсендә «Ашығыс ярҙам» саҡырып, уны докторға күрһәттем. Табип ауырыуҙы нисек тәрбиәләргә өйрәтте, дарыуҙар яҙып бирҙе. Бабайҙың организмы инде ҡартайған, туҙған, тип аңлатты. Медицина ҡартлыҡ алдында көсһөҙ, тик оло кешенең һуңғы көндәрен иғтибар, ҡәҙер-хөрмәт менән үткәрһәгеҙ, яҡшы булыр, тине. Ул, әлбиттә, мине уның ейәнсәре тип уйланы. Дөрөҫөн әйткем килмәне, уныһына үҙем дә төшөнмәнем. Шунан ары баҙарға барып ит, йәшелсә, картуф, ярма кеүек ризыҡтар алып, бабайҙың һыуытҡысын тултырҙым. Ул шул тиклем ҡәнәғәт, риза. Бындай тәрбиәне күҙ алдына ла килтерә алмай инем, ти.

Күршем Заһир ағай бер нисә тапҡыр шылтыратты. Фәрит йортто һатырға йөрөй, яңы ҡатыны йәнен алып бара икән. Шуның өсөн мине көтөп ала алмай, имеш. Ә үҙе шылтыратмай. Ҡыйыулығы етмәйме? Уның миңә хәбәр ебәрмәүе яҡшыраҡ та. Ошо хаҡта үҙе әйтһә, икеләтә ауыр булыр ине һымаҡ. Был аралағы мәшәҡәттәр менән уны бер аҙ онотоп торғайным. Сирле генә булһа ла, Фәрүәз

ағай янында үҙемде ышыҡта тойоп ебәрҙем. Уны ҡайғыртыу, тәрбиәләү күңел бөтөнлөгө бирҙе.

– Йә, ҡыҙым, мәшәҡәт бөтмәҫ, яныма ултыр әле, – тине ул бер. – Һорарға ла ҡурҡам. Бер көн мине ташлап китеп барһаң, ни эшләрмен? Шул арала ныҡ өйрәндем үҙеңә, баҡкан баламдан да былайыраҡ тойолаһың.

Аптырап бабайға ҡарап торам. Уның йөҙөндә сағылған ғажизлыҡты күреп, үҙәгем өҙөлөп йәлләйем.

– Мин дә аптырайым. Эшемә электән үк өмөт һалып йөрөйҙәр. Сөнки минең профессия китапханасы түгел. Оҙаҡлап китһәм, сығарып ташларҙар инде.

– Ҡыҙым, ул ауылға ҡайтҡың киләме?

– Бер кем дә бәйләмәй тиерлек. Етмәһә, ирем йортто һатырға маташа.

– Балаҡай, мин һинең киләсәгеңде уйламай ята тиһеңме? Бындағы лицей директоры минең уҡыусым. Эш башлаған сағында кәңәштәрем менән ярҙам итеп тә торҙом. Шундай ҙур мәктәптә бер кешегә эш табылыр ул, үҙең риза булһаң. Университет бөтөп, әлбиттә, үҙ һөнәрең буйынса эшләү тейеш.

– Ағай, ни әйтергә лә белә алмайым, – күңелемдә өмөт баҙланы. – Балалар менән эшләү минең хыялым бит.

– Һөйләгәнде көт, – ул ҡулын күтәрҙе. – Бына минең йорт йәшәмәҫлекме ни? Һиңә уны бүләк итһәм, ризаһыңмы?

– Мин – сит кеше, һеҙҙең үҙ балағыҙ бар. Әҙәм ышанмаҫлыҡ хәл.

– Эй, балаҡай, хәҙерге ваҡытта һинән яҡыныраҡ кешем юҡ. Унан килеп, улым ошо халупаға мохтаж тиһеңме? Өфөләге аппартаменттарын күрһәң, иҫең китер. Унан килеп, һинең эскерһеҙлек, ихласлыҡ менән ярҙам итеүең күңелемде йомшартты. Әйткәйнем бит инде, бер олораҡ ҡатынды ҡараусы итеп индергәйнем, тип. Икенсе көндө үк, өйөңдө миңә күсерһәң, ҡарайым, ти башланы, һаҡлыҡ кенәгәм менән ҡыҙыҡһынды.

– Улығыҙ йортто һатырға теләһә?

– Үҙемсә хәл итергә хоҡуғым бар. Минең көндәр һанаулы икәнен белә тороп, үҙ балам йөрәгендә бер семтем йылылыҡ тапмаған һымаҡ ҡыланды. Ни генә тимә, мин уны кеше иткәнмен, – бабай көрһөндө. – Түшәктә ятҡан кеше юҡҡа сыҡҡас та, шунда уҡ шылтыратманылар.

– Һеҙ нимә тип яуап бирҙегеҙ уға?

– Минән ҡотолдоғоҙ. Алыҫ туғаныбыҙ ҡарай, тип яуап бирҙем. – Бабай ауыр тын алып туҡтаны.

Тиҙ генә ҡан баҫымын үлсәп, дарыу эсерҙем.

– Борсолмағыҙ, мин ҡурҡам.

– Ҡыҙым, яуабыңды әйтмәнең.

– Әйтермен. Һеҙ ял итегеҙ.

Ишек алдына сыҡтым. Ҡояш байып бара. Бер-береһен алыштырған ғәжәйеп төҫтәр балҡышы – күңелем сағылышы. Алға мансылған болоттар, улар артындағы төпһөҙ сафлыҡ – хәҙерге халәтем. Фәрүәз бабай менән минең аралағы мөнәсәбәт тә шундай саф, эскерһеҙ. Иң яҡын кешеләр араһында ғына була торған керһеҙ тойғо – ата һәм бала араһында ғына була торған хис ине был. Күптән шундай йән рәхәтлеге тойғаным юҡ. Үҙемдең ата-әсәм артыҡ ҡурсалап, бәпләп үҫтергәнгә был бәғерһеҙ донъяла юғалып ҡалам. Кемгәлер һыйынып ҡына йәшәй торған йән эйәһемендәр инде. Хатта бер аяғы гүрҙә булған бабай оло таяныс һымаҡ. Оят булһа ла, үҙеңде алдап булмай. Эйе, эшкә инеп алһам, бөтәһе лә башҡаса булыр: ашар ашым, торор торлағым, кейер кейемем. Эш миңә үҙаллылыҡ бирәсәк.

Индем. Бабай көтә ине.

– Йә, ҡыҙым, ни хәлдәр ҡылдың?– Уның тауышы сабырһыҙ. – Телемә көсөм еткәндә хәл итеп ҡалырға кәрәк.

Уның янына килдем, теҙләнеп уға баҡтым, шау һөйәк кенә ҡулын тоттом. Мин булмышымды оло кешегә тапшырғандай хис кисерҙем. Икебеҙ ҙә тын ҡалдыҡ. Оло кешегә рәхәт, һил булып китеүен һиҙҙем. Уның нур ҡунған күҙҙәре миңә төбәлгән.

– Мин һеҙҙең янда ҡалам, Фәрүәз бабай.

Ул минең ҡулымды кипкән ирендәренә баҫты, һулҡылдап илап ебәрҙе.

– Бабай, ярамай, зинһар.

– Ярамайҙарҙан өҫтөн мин, балаҡай. Үлер алдынан бәхетле булып була, тиһәләр, ышанмаҫ инем. Һуңғы көндәреңә тиклем төшөнөп булмай был донъяны. – Ул тороп ултырҙы. – Әйҙә, балам, саф һауаға сығып инәйек. Гел түшәк ташламай башлаһам, аяҡтан яҙып, оло мәшәҡәт өҫтәрмен.

Болдорға кресло сығарып, уны ултырттым. Одеял менән ураным. Ул, ҡомһоҙланып һауа һулай-һулай:

– Их, һауаһы! Үҙ илеңдең һауаһы ла дауа, тынды киңәйтә. – тип һоҡланды. Тауышында сәләмәт кеше ауаздары яңғыраны. Уны ҡеүәтләгәндәй, төнәргә йыйынған сәпсектәр сипылданы.

Икенсе көн ҡапҡа алдына елле генә машина килеп туҡтаны. Олпат кәүҙәле ир өйгә инеп, алсаҡ тауыш менән сәләм бирҙе. Бабай тауыш хужаһын шунда уҡ танып:

– Хуп, бик хуп киләһең, Рафиҡ Ҡаҙыевич, түргә үт. – тип ҡаршы алды.

Ҡунаҡ өҫ, аяҡ кейемдәрен һалғас, тиҙ генә китмәҫ, тип уйлап, аш яғына сығып киттем. Шыйыҡ ҡамыр иҙеп ҡоймаҡ ҡоя башланым. Сәғәт тирәһе һөйләшеп ултырғас, ҡунаҡ ҡуҙғалырға булды. Мин уны өҫтәлгә саҡырҙым. Рафиҡ ағай ҡыҫтатып торманы. Ике сынаяҡ сәй эсте, ҡоймаҡты маҡтап ашаны.

– Күптән быңдай ризыҡтан ауыҙ иткән юҡ, – тине. Уның һынаулы ҡарашын тойоп, тартынып киттем. Бер аҙҙан рәхмәт әйтеп ҡуҙғалды, хушлашып сығып та китте. Кем булды икән?

– Йә, балаҡай, янлыма кил, – Фәрүәз бабайҙың тауышы көр, үҙе шат. – Ҡыҙым, беренсе еңеү менән! Лицейҙа тәрбиәсе эше буласаҡ. Аҙаҡ уҡытыусылыҡ та оҙаҡламаҫ. Әҙәбиәт уҡытыусыһы һуңғы йылын эшләй икән. Кисә һин өйҙә булмағанда, Рафиҡ ағайыңды саҡырғайным, бөгөн килеп тә еткән. – Бабай шул тиклем ҡәнәғәт. Мин дә сикһеҙ шатландым. Елкәмде баҫып йөрөгән ауыр йөк емерелеп төшкән кеүек булды. Элек үҙем йәшәгән Ереклегә ҡайтмаясағымды аңланым. Насар иҫтәлектәр ҡалдырған урындан айырылһам, тормошом башҡа йүнәлеш алыр һымаҡ.

Ваҡыттың үтеүҙәре. Февраль дә бөтөп бара. Бында йәшәүемә өс аҙнанан ашты. Фәрүәз бабай мине үҙ йортона пропискаға индерҙе. Бөгөн нотариус саҡыртып, васыят яҙып, йортон минең исемгә бүләк итте. Бабай бик ашыға, хатта шомло булып китә. Бер ваҡыт уның һуңғы көнө етер, тип һағышҡа сумам. Уға шул тиклем өйрәндем, атайым һымаҡ күрәм. Һуңғы көндәрҙә бигерәк йонсоп китте әле. Нотариус менән эш тамамланғас, ашағыһы-эскеһе килмәй, күҙен йомоп тик ята. «Еп өҙөр хәлем юҡ», – тип кенә ҡуйҙы. Уға күҙ һала-һала ғына йөрөйөм. Мәшәҡәттәрҙән бушағас, янына ултырам, ҡулын тотам. Ул сабый төҫлө: тыныслана, иҙерәп йоҡоға китә. Оло кеше бала хәкөмөндә, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәрҙер.

Табип менән кәңәшләшеп, уға аҙ булһа ла хәл индерергә витаминдар курсы башланым.

– Ниңә инде, ҡыҙым, үлгәнде һөйәп булһа ла йәшәтергә тырышаһың? – тип

ҡуя бабай, шулай ҙа укол һалдырыуҙан баш тартмай. Уға, ысынлап та, бер аҙ хәл ингәндәй итә, күберәк һөйләшә, кәйефе күтәрелә башланы. Бер көн ентекләп йыуындыртты, ҡырынды, хатта одеколон һиптерҙе. Таҙа күлдәк-ыштан кейеп алғандан һуң, мендәргә һөйәлеп, уңайлап ултырҙы.

– Бына хәҙер эйәрле ат кеүек шәбәйеп киттем, – тине ул. – Яныма ултыр, ҡыҙым, бергә йәшәп-йәшәп, кем икәнемде лә белмәй ҡалаһың. Әллә кәрәкмәйме?

– Кәрәк, бик кәрәк. Үҙем һорарға тартына инем. – Мин шатланып киттем.

– Улайһа, сәфәргә сығабыҙ, хәйерле сәғәттә. Маршрут – минең ғүмер юлы. – Ул бер нөктәгә текләп тын ҡалды. Мин сабыр ғына көттөм. Юлда уйнаған балаларҙың сыр-сыуы ишетелде. Фәрүәз бабай ҙа тормош юлындағы ташыу-ҡайтыуҙарҙы, уңыш-уңышһыҙлыҡтарҙы, бәхет, күңел ҡайтыуҙарҙы иҫенә төшөрә, барлайҙыр. Ниһайәт, хәленсә тәрән итеп тын алғас, талғын тауыш менән хикәйәһен башланы.

– Бына, ҡыҙым, оло кешемен, һикһәнгә лә күп ҡалмай. Шулай, барып етә алмам инде. Ә ғүмер тигәнең елдереп үтеп тә киткән: бер ишектән инеп, икенсеһенән сыҡҡан төҫлө генә. Тиккә генә ғүмерҙе аҡҡан һыу менән сағыштырмайҙар. Бына әле генә ялан аяҡ йүгереп йөрөгән елдәй етеҙ, шуҡ малай инем бит. Йәшәү ҡыҙыҡ, күңелле, матур кеүек. Һуғыштан алдараҡ тыуған бала булғас, аслығын, яланғаслығын күреп үҫелде. Сабый ғына көйгә ауыр эшкә егелергә тура килде. Миңә еңелерәк булғандыр, тим, сөнки береһе – биш, икенсеһе ике йәшкә өлкәнерәк ағайҙарым бар ине. Әсәйем дә арыҫлан йөрәкле, аттай шәп булмаһа, беҙҙе, өс малайҙы, таҙа-һау, туптай итеп үҫтерә алмаҫ ине. Ауыр заман, бер-береһенә оҡшаш яҙмыштар – ул хаҡта күп китаптар яҙылған. Тән – кейемгә, тамаҡ икмәккә туймаһа ла, сәләмәт, сибәр егет булып үҫеп еттем. Нигеҙ ныҡлы, нәҫел шәпле булғандыр инде. Үҙем беләм: ун биш йәшемдә тиҫтерҙәрем генә түгел, үҙемдән бер-ике йәшкә өлкән ҡыҙҙар ҙа ҡыҙыҡһынып ҡарайҙар ине. Малайлыҡҡа барып аңлап та етмәйһең, йәшлек сафлығы боҙоҡлоҡтарҙан һаҡлай. Ҡайнап торған дәртеңде атайһыҙ үҫкән көнитмеш, донъя мәшәҡәттәре баҫа. Атайым һуғышҡа киткәндә өс йәшлек булып ҡалғанмын. Саҡ ҡына иҫләйем дә оҙон буйлы, мыҡты ирҙең өрлөккә еткәнсе сөйгәнен. Мине, төҫкә һуйып ҡаплаған атайың, тиҙәр ине. Киткәс ни бары бер хаты килгән, икенсеһе инде – уның хаҡында ҡара ҡағыҙ. Атайһыҙ бала бер мин генә түгел, яҙмышыңа күнәһең.

Уҡырға шәп булдым, уҡытыусылары ла яҡшы тура килде. Һуңлабыраҡ булһа ла, ун класс тамамланым. Шул уҡ йылды һалдатҡа ла алдылар. Оҙатып ҡалыр ҡыҙым булманы. Мин – оҙон кәүҙәле егет. Ябығыраҡмын – ас бала саҡтың касафаты. Мөхәббәтемде көтәм, тик миңә насибы осрамай әле. Оҡшамағандар менән ҡатнашҡы килмәне. Флотҡа эләктем. Севастополгә. Диңгеҙ эргәһендәге боронғо ҡала, унда йәшәгән бөтөнләй икенсе халыҡ. Уныһын һөйләп көс сарыф итмәйек. Армия нимә бирҙе һуң? Нимәгә өйрәтте? Яҡшыһына ла, яманына ла. Диңгеҙ боламыҡтарҙы һөймәй, ихтыяр, яҡшы физик әҙерлек кәрәк. Әллә үҙебеҙҙең Уралдың гөл-сәскәләрен,урман-күлдәрен күреп үҫкәнгә, диңгеҙгә ғашиҡ булманым. Ул миңә артыҡ матур, хыянатсы, мәкерле, дәһшәтле булып күренде. Хеҙмәт иткәндә туған телемдә һөйләшкән кеүек итеп русса һөйләшергә өйрәндем. Үҙемде яҡлау менән бергә, дуҫлыҡ-иптәшлек тойғоһо ла үҫте. Тыуған илеңдең ҡәҙерен белергә, тоғролоҡҡа өйрәнәһең. Унан килеп – маҡсатлы булыу. «Мин кемдән кәм?» тигән уй мине гелән һөрөп йөрөттө. Киләсәгеңә битараф булмаһаң, үҙенән-үҙе шулай килеп сыға. Насарҙары: тәмәке тартырға, араҡы эсергә өйрәндем. Тағы ла насарырағы – ҡатын-ҡыҙ менән еңел-елпе бәйләнешкә инеү. Бында ҡатын-ҡыҙ батыр, беҙҙәге кеүек үҙҙәрен һаҡлап та бармайҙар. Минең дә увольнение һайын бер ҡыҙ булды. Иҫкә төшөргө лә килмәй.

Шулай оҙон дүрт йыл үтте. Күҙ ҡайтырға тейеш инем, яҙға тиклем ҡалдырҙылар. Һағынып, ашҡынып, ҙур маҡсаттар менән ҡайттым. Ағайҙарым өйләнеп, башҡаланғайны инде. Әсәйем төпсөгөнә ҙур өмөттәр бағлап тора. Яҡшы уҡыған улы артабан белем алыр, уҡытыусылыҡҡа уҡыр, ҡарт көнөндә ҡараусы, атай нигеҙен һаҡлап алып ҡалыусы булыр. Оҙаҡҡа һуҙмай ғына, ир-ат ҡулы көткән ихатаны тәртипкә килтерҙем. Көн дә тигәндәй клубҡа сығам. Ауылда йәштәр күп, ситкә сығып китеүселәр юҡ дәрәжәһендә. Клубта көн дә уйын-көлкө, йырбейеү. Йәш, ирһеҙ ҡатын мөдир булып эшләй. Армия ғәҙәте буйынса, шул ҡатынға бәйләндем. Төҫкә арыу, айырым йортта йәшәй, инеп йөрөргә уңайлы. Яҙ шаулап үтте, йәй етте. Дәреслектәрҙе ҡабатланым. Июль айында Өфөгә киттем. Һынауҙарҙы уңышлы тотоп, БДУ-ның тарих факультетына инеп киттем. Шатлыҡ эскә һыймай. Мине яңы бейеклектәр, икенсе тормош саҡыра. Флотта хеҙмәт итеп ҡайтҡан егетте группала комсорг итеп ҡуйҙылар. Әсәйҙән ҡыуанныслы хаттар килеп тора. Йәмәғәт эштәрендә йөҙөп йөрөп эшләйем, тырышып уҡыйым. Ҡышҡы сессияны ғәйәт уңышлы тапшырып, каникулға ҡайттым. Әсәй ҡарсыҡ менән шатланып, сөкөрҙәшеп сәй эсеп ултырабыҙ. Ул нимәлер әйтергә иткән кеүек. Тик оҙаҡ көтөргә тура килмәне, ҡыштың һалҡын быуын борҡотоп ишек асылды, бәпес күтәреп бер ҡатын килеп инде. Ҡараһам – Рәбиға, мин армиянан ҡайтҡас шаярған ҡатын. Бына һиңә уйындан – уймаҡ! Ҡойолдом да төштөм. Рәбиғаның ғына иҫе китмәне. Бәпесте урындыҡҡа һалды, юрғанын таратып ебәрҙе:

– Атай, бына мин ҡайттым, – тигән була, етмәһә.

Ни тиергә белмәй шаңҡып ҡалдым, ваҡыты ла тура килә, бәпесе лә миңә оҡшап тора. Тик минең генә уға ҡарағым да килмәй. Берҙән, көсләп тағыуҙы енем һөймәй. Яратмаған ҡатындан тыуған баланы ла ярата алмайым, ахырыһы. Еңел-елпе, йөрөмтәл ҡатын менән яҙмышымды бәйләгем килмәй. Инде үҙемдең курсташ ҡыҙ менән дуҫлашып та йөрөйөм. Рәбиғаны елтерәтеп сығарып та ебәрә алмайым. Тәки каникул буйына беҙҙең өйҙә серәшеп йәшәп маташты. Һөйләшмәйем, артты ҡуям да ятам. Шул тиклем уңайһыҙ хәлдә ҡалдым бит. Каникул бөткәс, йәнә уҡырға киттем. Әсәйем Рәбиғаны, тындырмай, ҡыуып ҡайтарған. Уҡый башлап аҙна үтеүгә, мине деканатҡа саҡырттылар. Рәбиғаның хаты мине бында ла ҡыуып етте. Ни ҡылырға белмәй ҡатып ҡалдым, ҡот китте. Уҡыу йортонан ҡыуалар икән, тип торам. Минең яҡшы уҡыусы студент, актив йәмәғәтсе икәнемде беләләр. Намыҫҡа килергә саҡырып оялтып, орошоп алдылар. Уҡыуҙан ҡыуманылар. Йәшен йәшнәһә лә, күк күкрәмәне. Уҡыуҙы дауам иттем. – Фәрүәз бабай көрһөнөп туҡтап ҡалды, кипкән ирендәрен яланы.

Мин тиҙ генә сәй яһап эсерҙем, ял итергә ҡушып, өҫтөнә яптым. Бабай арығайны, йоҡоға китте. Мин ғәжәпләнеп, хайран ҡалып йөрөйөм. Кеше ҡарбуз түгел, ярып ҡарап булмай, тип әйтеүҙәре дөрөҫ. Тәртипле, зыялы бер затты гонаһлы итеп күҙ алдына килтерге килмәй. Ә ул үҙ балаһынан баш тартҡан. Тормош ҡатмарлы, күпме кеше – шунса яҙмыштар. Тарихтың аҙағын белер өсөн бабайҙы йонсотмайым. Бала кеүек тәрбиәләйем, әҙләп яҡшы итеп ашатам, уколдар яһайым. Күрше Зәки ағай килеп мунса индерә. Уның ҡатыны Нәҡиә апайҙы өнәп етмәһәм дә, ул да яман кеше түгел. Ярҙам кәрәк булһа, әйт, тип кенә тора. Тик бына һөйләгән хәбәренең осо-ҡырыйы юҡ. Минең хаҡта ныҡ төпсөнә. Фәрүәз бабай өйрәткәнсә, «алыҫ туғанымын» тип әйтеүҙән уҙмайым.

Бер иртәлә бабайҙың кәйефе яҡшы тойолдо. Уның һөйләшергә әҙерләнгәнен тойҙом.

– Ҡыҙым, минән күңелең ҡайтыр, тип шөрләп бөткәйнем. Рәхмәт, бер нәмә лә һиҙҙермәнең.

– Минең һис кенә күңелем ҡайтманы ул.
– Йәнә лә рәхмәт. Бына шулай, ни тиклем генә үкенһәң дә, үткәнде ҡайтарып булмай.
– Кире ҡайтарып булһа, нимә эшләр инегеҙ?
– Фәҡәт уны эҙләр инем.
– Кемде?
– Йәшлектә ҡалған йәрҙе. Бар ине ул, бар ине. Аҫыл ҡошто өркөтмәй генә усыма ҡундырып, йөрәгемә баҫыу кәрәк ине. Бары минең теләктән генә торҙо. Ҡәҙерен генә белмәй юғалттым.
Мин, күҙемде алмай, бабайға ҡарап торам. Бына ул яңы тарих башлар, тыйыла алмай тыңлармын, шунан ул арып, хәлдән тайыр.
– Ауыр булһа, һөйләмәгеҙ.
– Юҡ, һөйләргә, күңелде бушатырға кәрәк. Көнө лә яҡшы. Ҡояш көлөп тора. Йә, тыңла. – Бабай, тылсымлы әкиәт оҫтаһылай, серле төҫ ала. Мин дә, «олатай, әкиәт һөйлә» тигән балалай, етеҙ генә эргәһенән урын алам. – Уныһы былай булды. Элек, мин йәш саҡта, ун йыллыҡ башҡорт мәктәбе ике ауылда ғына ине. Унлаған ауылдан йыйылып уҡыйбыҙ. Уны тәүләп комсомол йыйылышында күрҙем. Дуҫым Сәғит ҡабырғама төрттө, «ҡара» тип эйәге менән ымланы. Күҙҙәрем дымлы ҡарағаттай мөлдөр күҙҙәр менән осрашты. Ябыҡ ҡына ҡарасман ҡыҙыҡай. Һигеҙенселә уҡый, буғай. Уның йәшерен генә мине күҙәткәнен күптән һиҙеп йөрөйөм. Әлбиттә, бар тип тә белмәйем, сөнки унан былайыраҡтарға ҡарамайым. Боролоп ҡараным да донъяла барлығын оноттом. – Бабай көрһөндө, тауышында үкенес яңғыраны, тәҙрәгә ҡараны. Сыр-сыр һайраған ҡош тауышына ҡолаҡ һалып тын ғына ултырабыҙ. Сыйырсыҡ тамам шашты.
– Ҡошсоҡ ана ҡалай ярарға тырыша һөйгәненә, кешеләргә шуларҙан үрнәк алырға кәрәк ине лә бит. Аңһыҙлыҡ харап итә әҙәм балаларын, – уның нурһыҙ күҙҙәрен һаран күҙ йәштәре сылатты. – Һалдаттан ҡайтып, Рәбиға менән типтереп йөрөгәндә осраттым. Оятты онотоп, көтөү киткәнсе унда ятып ҡайтып киләм. Ауылдың тынысыраҡ ваҡыты, көтөү ҡыуыусылар өйҙәрендә иртәнге сәй эсәләр. Шул тиклем дә килешле, зифа буй-һындың һыуҙан ҡайтып килгәнен күреп, туҡтап ҡалдым. Нәҙек кенә билдәре, ҡояшта янған тулы балтырҙары иғтибарымды йәлеп итте. Оялсан ғына түштәре тиртеп тора. Бер ҡараһаң, яңы ғына үҫеп килгән ҡыҙ бала төҫлө. Ләкин башына ап-аҡ яулыҡ сөйгән. Тимәк, йәш килен. Янып торған оҙонсараҡ ҡуңыр йөҙ, сейә ирендәр… Күбәләктәй керпектәрен бер һирпте лә үтеп тә китте. Мин әллә ни эшләп киттем. Әле үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр. Тәҡәтһеҙ ҡалдым, быуын бөттө. Тыйыла алмай, барып күйәнтәһен тоттом.
– Һин кем?
– Тәнзилә… Кит, оят. Ебәр, кеше күрер.
Мин уны таныным. Теге ҡыҙ, бала ғына сағында миңә ғашиҡ булып йөрөгән ҡыҙ. Хәҙер бына ниндәй. Йәмһеҙ бәпкәнең ғорур аҡҡошҡа әйләнеүе шулай була икән. Беҙҙең ауылға кейәүгә биргәндәр. Ире холоҡһоҙ ғына егет. Аҙаҡ эсте, уны йәберһетте. Үҙенең уға тиң булмағанын аңлап, үсен алырға тырышты. Йәш ҡатын оҙаҡ ҡына буйға уҙманы. Күреп-осратып ҡалам, күргән һайын йөрәгем тала, әллә ни эшләп китәм. Ә ул сибәрләнә генә бара. Мине һаман яратыуын тоям. Күрһә, ҡуңыр йөҙө мәк сәскәһе кеүек янып китер ине. Оҙаҡ ҡына йәшәгәс, ир бала тапты, уға минең исемде ҡушты.
Тора-бара сибек ҡыҙыҡай бына тигән ҡатынға әйләнде, ирен дә ауыҙлыҡланы, шәп балалар үҫтерҙе. Эске рух көсө бар ине унда. Оҙаҡ йылдар үткәс, нисектер бер яңғыҙ тап итеп, батырлығымды йыйып әйттем:

– Ғүмер заяға үтеп бара, йә үҙең берәй ҡыйыулыҡ күрһәтмәнең, – тинем.

– Ирекһеҙләп асҡан күҙҙең нуры булыр инеме икән? – тигән яуабын ишеттем. Ғорур булған ул, һыр бирмәне. Ләкин бар булмышы икенсене һөйләй ине. Миңә кескәй генә ым-ишара етәсәк ине, Тәнзилә ул юлға барманы, бәҫен төшөрмәне. Үҙемә үлеп-талып яуларға кәрәк булған да бит. Мин ҡатын-ҡыҙ иғтибарынан боҙолоп, осһоҙ хистәргә мауығып йәшәй биргәнмен. Йәшлек ахмаҡлыҡтары тормош ләззәте булған мөхәббәттән мәхрүм итте. Балаҡай, йәшһең, һөйкөмлөһөң. Һине яратҡан, үҙең тартҡан йән осрамай булмаҫ. Ғафил булып ҡалма.

Был көн шул һөйләшеү менән уҙҙы. Бабай һаман һөйләргә теләһә лә, тыйҙым. Иртәгә, тинем.

Фәрүәз бабайҙың һүҙ ҡапсығы тишелде. Ҡалған уколдар килештеме, ундағы әйтеп ҡалыу теләге көс бирҙеме – тормош юлын һөйләп ҡалырға тырышты. Ни генә булһа ла, уны тыңлау – мауыҡтырғыс китап уҡыу менән бер. Бына бөгөн дә уның һүҙ башлағанын көтөп йөрөйөм. Тәрбиәләп, ашатып алғас, карауат эргәһендәге креслоға килеп ултырҙым.

– Ҡыҙым, кисә һүҙ ни хаҡта барҙы әле? – тип һорай ул.

– Тәнзилә апай хаҡында, – тиҙ аныҡлап ебәрәм мин.

– Аһ, Тәнзилә, һаман күҙ алдында. Күм-күк ерлеккә аҡ борсаҡтар төшкән нәҙек билле, өйөрөлөп торған итәкле күлдәген кейеп, башына үтек эҙе һиҙелеп торған аҡ яулығын бәйләп, билдәрен һығылдырып һыуҙан ҡайта. Бер генә тамсы һыуы сайпылып сәсрәһәсе! Һыуалышта һағалап тороп, бер ҡосаҡлап үпһәм дә ғүмерем был тиклем үкенесле булмаҫ ине.

– Ағай, минең Рәбиға, ҡыҙығыҙ хаҡында белгем килә. Аҙағы ни менән барып бөттө?

– Эйе, теге ваҡыт Рәбиға мине еңә алманы, осраҡлы яралған бала мине әүрәтмәне. Ни хәл итмәк кәрәк? Ярата алманым. Ғәйепле икәнемде тойоп йәшәһәм дә, үҙемде еңеп булманы. Рәбиға тормошҡа сыҡты, бала артыҡ бүрәнә башы ине. Балалар йортона бирҙеләр. Мин бер ни ҡыла алманым.

– Ә әсәйегеҙ ни тине һуң? Ул да ҡатын кеше бит.

– Әсәйем ни, минең яҡлы инде. Минең ҡарашым дөрөҫ уға. Их, әсәй, әсәй! Ғүмер буйы бер үҙе йәшәне, ҡыҙ унда үҫһә, үҙенә иптәш булыр ине лә бит. Барып ярҙам итеп тορορ инем. Шулай онотолмаҫ, күңелде өйкәп торған ғазап булып ҡалды инде.

– Кемгә өйләндегеҙ шунан? Бигерәк һайланған кеүекһегеҙ.

– Һуңғы курста һабаҡташыма өйләндем. Йәш тә китеп бара ине шул.

– Яраттығыҙмы уны?

– Тәүҙә яратҡан кеүек инем. Төҫкә сибәр, эшкә тилбер, телгә шәп. Хатта артығы менән. Бергә йәшәгән тормош юлдашыңа битараф булып булмай. Ни генә тимә, бер йөктө парлап тартаһың. Уртаҡ бурыс берләштерә кешене. Яраттыра белеү ҡатындандыр инде, тим. Әсе теле, еңмеш холҡо һыуындыра башланы.

– Яраттырыу ҡатындан ғынамы икән? Бик уңайлы, күндәм кеше булһам да, мине ташланылар бит.

– Уға күндәм кеше кәрәкмәгән, тимәк. Ярһыу, дәртле, гел көсөргәнештә тота торған ҡатын кәрәккән.

Аптырап киттем: бабай тап өҫтөнә баҫты. Фәриткә, ысынлап та, минең һалмаҡлығым, һөйөшөү мәлдәрендәге тыйнаҡлығым оҡшамай ине.

Ә бабай хикәйәтен дауам итә, унда эске көсөргәнеш тыуа:

– Флора үҙенең ваҡсыллығы, бәйләнсеклеге, кешене гел генә контролдә тоторға тырышыуы, гел дә үҙен өҫтөн ҡуйырға ынтылыуы менән мине биҙҙерҙе. «Мин һинән шәберәк специалист, – тип ҡабатларға ярата торғайны. – Минең

поддержканан башҡа һин никто, директор ҙа була алмаҫ инең», – тип ғорурлығыма тейә, кешелек бәҫемде төшөрә. Ҡанат ҡуя алманы ул миңә. Түбәләүен генә белде, мөмкин булһа, тапап уҙыр ине, йығып аяҡ һөртөр ине. Характеры артыҡ көслөмө – кешене баҫыу, еңеп алыу уның төп һыҙаты булды. Ләкин ир кеше, хатта йомшаҡ тигәндәре лә, үҙенекен эшләй бит ул. Мин дә үҙемсә үс алдым: тура килгән бер юбканы ла ысҡындырманым. Тик ниңәлер гел өҙгөс, йолҡҡостар осрап тик торҙо. Әллә күҙемә гел шундайҙар ғына күрендеме? Ҡатын, миңә үсегеп, баланы ла берәү генә тапты. Улымдың миңә ҡарата һалҡынлығы ла уның йоғонтоһолор. Атайың шундай, атайың бындай, тип өҙлөкһөҙ тылҡыны, – бабай ирендәрен сәй менән сылата ла һүҙен дауам итә. Хатта ки ярһыу менән һөйләй. – Был донъяла бер нәмә лә эҙһеҙ үтмәй. Бар ҡылығың өсөн дә яуап бирергә тура килә. Берҙән-бер улымдың балаһы юҡ. Минең нәҫел ҡорой, фамилиям да ҡалмаҫ. Үҙ баламды яҙмыш ҡосағына ташлағаным өсөн был яза. Бына нисек килтереп һуға. Фәнни атеизм уҡып, ата коммунист булып йөрөһәм дә, һуңғы көндәремдә Хоҙай Тәғәләгә ышанып, унан ярлыҡау ялбарып ятам. Рәхмәтлемен уға: һинең менән осраштырҙы. Үлем түшәгендә ятҡан кеше бәхетлеме ул, тиһәләр, бына ғүмеремдең тап әлеге өлөшөндә, һуңғы көндәремдә, мин бәхетлемен. Ысын. Әжәл яғаңдан алғанда ҡараулы, ҡәҙерле булып, таҙа урындыҡта, таҙа кейем менән ятыу; сарсағанда ирененде сылатырға һыу биреп тороусың булыу – иң ҙур бәхеттер ул.

Ташландыҡ эт хәлендә был донъянан китеүселәр аҙмы ни? Мин дә шул көндө күрә яҙып ҡалдым бит. Һөйләмәм тигән инем. Һиңә һөйләйем, балаҡай, әйҙә, күңелдә төйөр булып ҡалмаһын.

Тағы бер ваҡиға һөйләп, бөтөнләй хәлдән тайыр, тип ҡурҡа ҡалдым.

– Зинһар, мөмкин булһа, һөйләмәгеҙ юҡ хәлегеҙҙе бар итеп, – тип әйтә һалам.

– Юҡ, һөйләргә булғас, һөйләргә. Әҙәмдең ни тиклем дә ҡанһыҙ була алыуына бер ғибрәт. Ҡатын кешенең шул сиккә етә алыуын күрергә насип булды. Етмәһә, үҙ баламдың ҡатыны. Унынһы былай булды. Улым командировкаға йыйынды. Кистән кереп, үҙе ашатты, сәй эсерҙе. «Атай, үҙең беләһең, мин хөкүмәт кешеһе, китергә тура килә, киленеңә әйткәнмен», – тине.

Улым киткән көн килен инмәне. Ярай, сәй бар, һалҡын булһа ла, кисәңге бутҡа бар. Шуларҙы ҡабыштырам. Икенсе көн дә юҡ был. Әллә бөтөнләй ҡайтмай. Аш-һыу еҫе һиҙелмәй. Урыҫ әйтмешләй, голод не тетка. Бер нисә ҡабым ризыҡ менән булһа ла тамаҡты алдарға кәрәк. Таяна-һөйәлә кухняға сығам, холодильникты асам. «Лып» итеп ултырып китәм. Унда тәғәм ризыҡ юҡ. Шкафтарҙан ярма, туҡмас кеүек нәмәләрҙе һыпырып түккәндәр, буғай. Килен мине асҡа үлтерергә булған. Башҡаса уйлау мөмкин түгел. Ни генә булһа ла, яуыз әҙәм ҡулынан ҡорбан булғым килмәне. Ысынлап тороп соҡонорға керештем. Йәшәү өсөн көрәш хәл индерҙе. Ҙур бер кәстрүл артынан ҡоймаҡ оно килтереп сығарҙым. Яҙалаусым уны күрмәгәндер. Уның тоҙо, йомортҡаһы үҙендә тигәндәй. Шыйыҡ ҡамыр туғыным. Хәҙерге табаларға май кәрәкмәй әлдә. Үҙемә шулай ризыҡ йүнәттем. Ҡайнар һыуға ҡытлыҡ юҡ. Аҙығымды бүлмәмә алып барҙым. Йәнә өс көн шулай йән аҫырап яттым. Улым китеүгә алты көн үтте тигәндә, килен шым ғына фатир ишеген асты. Алғы яҡта лыбыр-лыбыр килделәр. Төнө менән мин йәнә кухняны тикшерҙем. Бөтәһе лә үҙ урынында. Һыуытҡыста йәнең ни теләй – шул. Тауыҡ һурпаһы, былау, кәтлит-маҙар, колбаса. Бөтәһен дә тултырған. Йәнәһе, мине ныҡ һыйлап тотҡан. Төндә улым ҡайтты. Мин шымсыға әйләндем. Килендең мине нисек ҡәҙер-хөрмәт менән тәрбиәләгәнен ишеттем. Улыма әйтеп торманым. Барыбер ышанмаҫ, тинем. Бына шулай, ҡыҙым.

Мин хайран ҡалып тыңлайым, хатта асҡан ауыҙымды яба алмай ултырам.

Ҡәбәхәтлек тигән нәмә менән осрашҡан бар инде, ә бындайы башҡа һыймаҫлыҡ. Шул тиклем дә кешене күрә алмаҫҡа. Бер бәлтерәгән ҡарт ул ҡатынға ниндәй яманлыҡ ҡылған инде.

– Аптырама, балаҡай, тормошта барыһына ла әҙер булып йәшәргә, бирешмәҫкә кәрәк.

– Йә, ярай, ял итеп алығыҙ әле. Минең дә тамаҡ әҙерләйһе бар.

– Сәй генә эсермен. Төп уйымды әйтмәнем әле.

Сәй әҙерләй һалып, икәүләп эсеп алдыҡ. Бабай, тырышып булһа ла, минең менән бер өҫтәл артында ултырҙы. Ярты кәнфит, бер ҡоймаҡ менән сәй эскәс, маңлайына сыҡҡан тирҙе һөрттө. «Болонда бесән сапҡан кеүек арыным», – тине. Урынына ятты, ғәҙәттәгесә ойоп китмәне. Тағы мине саҡырҙы.

– Мин әйтәһе һүҙҙәремде әйтеп бөтмәнем бит әле.

– Һеҙҙе тыңлай башлаһаң, айырылырлыҡ түгел, ләкин…

– Етте, бер ниндәй «ләкин» кәрәкмәй. Әйтер һүҙемде әйтеп бөтмәһәм, йәнем сыға алмай интегер.

– Һеҙгә ҡаршылашып килештерерлек түгел.

– Улай булһа, тыңла. Минең уй-фекерҙәрем һинең күңелеңдә урын алһа, киләсәктә шытым бирһә, китеү ҡурҡыныс түгел.

Хәҙер төп уйымды әйтмәксемен, был – минең васыятым, тиһәм дә була. Әлеге ваҡытта, донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр, тип тылҡырға әүәҫләнделәр. Һүҙ юҡ, гүзәллек – шәп нәмә. Тик кешелекте ҡотҡарырға көсө етерме? Ә мин... – Ул тәрән итеп тын алды, хатта һулышы оҙайып киткән төҫлө, – донъяны һөйөү, мөхәббәт ҡотҡарыр, тип ҡат-ҡат әйтер инем. Сөнки мөхәббәт кенә бар ғаләмгә ҡот бирә. Боронғо китаптарҙа, Аллаһ, йәғни юғары көс, барса йыһанды яратҡан, тип әйтелә. Яратыу, йәғни барлыҡҡа килтереү. Яратыу – ул ижад. Баланы ла бит, бар көсөңә, бөтөн йөрәк көсөңдө биреп яратмаһаң, әҙәм итеп булмай. Ергә һөйөү менән хеҙмәт итмәһәң, уңыш алып булмай. Ир менән ҡатын мөхәббәте булмаһа, кешелек дауам итмәй. «Мөхәббәт» тигән һүҙҙе киңерәк аңлау фарыз. Хәҙер енси яҡынлыҡты мөхәббәт менән бутай башланылар. Ваҡланылар бөйөк тойғоно. Мин ниңә Рәбиғаға өйләнә алманым, сөнки мөхәббәттең остоғо ла юҡ ине. Оло һөйөүҙән яралған балалар ғына рухы һәм тәне менән сәләмәт яралғанлығына шигем юҡ. Буталып һөйләһәм, ғәфү ит. Ашығам, буғай. Тағы ни әле? Эште лә яратып, күңел һалып башҡарһаң ғына һөҙөмтәле, мәғәнәле була. Бар донъяны, тереклекте, әҙәмиәтте һөйһәң генә, ҡотҡарып алып булыр. Ҡайһы бер донъя тотҡаларының (улар үҙҙәрен шулай тип уйлай) кешелеккә ҡарата яуызлығынан, мәрхәмәтһеҙлегенән ниндәй афәт, һуғыш-ҡырылыштар килеп сыға. – Бабайҙың тауышы ҡарлыҡты, тынып ҡалды. Хәле насар кеүек түгел ине, киреһенсә, унда эске ярһыу һиҙелә. Аптырап уға ҡарап торам, һөйләүенән тетрәнеп ҡалдым. Ул шул тиклем үтемле итеп, ышандырып һөйләй белә. Артыҡ тынып ҡалыуынан ҡурҡып, йөрәк дарыуы эсерә һалдым. Ул, хәлһеҙ генә йылмайып:

– Ҡурҡма, ҡыҙыҡай, ебәр ҙә ҡуй мине, йәнем асманға ашһын әйҙә, – ти.

Күптән, хатта ай тирәһе инде, үҙемдә сәйер үҙгәрештәр һиҙеп йөрөйөм. Ваҡыты-ваҡыты менән эсем бороп ауыртып ала, тағы үтә. Хәлдән дә тайып китәм. Уныһы яңылыҡ түгел. Күңел ныҡ болғанып, иртә менән ҡоҫоп та алам. Нимә генә ҡапһам да, аш түгел, күңелгә ятмай. Әсе сейәме, ҡарағатмы ҡапҡы килә. Ауырлымын, тиер инем, түлһеҙмен бит. Табиптарҙың ҡарары шулай. Тәк, тип һанай башланым, өмөтһөҙ – шайтан, кем белә, бөтөнләй ҡыу ағас түгелмендер ҙә. Ауырым булһа, өс ай булып килә инде. Айлыҡтарым юҡ, ауырыуға һылтанып йөрөй бирәм дә ул. Йөрәгем ҡорошоп китә. Әллә берәй яман сирем бармы? Эй, Аллам, көсәйеп китмәһен тағы! Бабайҙы кем тәрбиәләр?

Оло кеше хәлемде һиҙеп ятҡан икән.

– Ни булды, балаҡай? – Ул йылы итеп өндәшә. – Төҫөң дә боҙолоп китә. Һиҙҙермәҫкә тырышһаң да, барыһын да күреп ятам бит. Ныҡлап сирләй күрмә.

Уны тыңлап, поликлиникаға юл тоттом. Шулай ҙа иң беренсе ҡатын-ҡыҙҙар докторына инергә булдым. Сәбәбе лә бар бит. Доктор – оло ғына ҡатын. Ентекләп ҡараны. Аптыраны. Дарыу еҫенә сытырайғанымды күреп, йылмайҙы:

– Ҡотлайым һеҙҙе. – Уның тауышы шундай мөләйем. – Ауырығыҙ ун ике аҙналап. Ни эшләп килмәй йөрөнөгөҙ, ун һигеҙ йәшлек түгелһегеҙ бит.

– Мин бит ауырға ҡалырыма ышанмағайным... – Хистәремә тулышып илап ебәрҙем.

– Көлөргә, ҡыуанырға, бейергә кәрәк. Бәхетле һеҙ. Был – мөғжизә.

– Тик ирем ташлап китте бит инде.

Табип ханым уйсанланды.

– Аңлағыҙ, меңгә бер булған осраҡ. Һуңғы шанс. Беҙҙең халыҡта, бала үҙ ризығы менән тыуа, тигән әйтем бар. Дөрөҫ фекер ул, миңә ышанығыҙ.

– Ышанырға тырышам. – Балаларса танау тартам.

– Шулай булғас, йөгөгөҙҙө еңел итеп күтәрегеҙ. Уңыштар һеҙгә.

Артабан карта тултырып, анализдарға ҡағыҙҙар яҙҙы.

– Анализдарығыҙҙы иртән бирерһегеҙ.

Хушлашып сығып киттем. Әсәйем менән һөйләшкән төҫлө рәхәт булып ҡалды. Яҙғы һыуҙар йырғылаған һуҡмаҡтан атлайым. Нескә генә тауыш менән гөрләүек селтерәй. Бала төҫлө, туп-тура күләүектәргә баҫып киләм. Итегем бысранып бөттө. Саф һауаны күкрәк тултырып һулайым. Аҡ болоттар араһынан зәңгәр тәрән күлдәр һымаҡ күк йөҙө күренә. Улар миңә шатланып баҡҡан Хоҙай күҙҙәре һымаҡ тойола. Бар нәмә матур, һоҡландырғыс. Кисә генә яңғыҙ инем, хәҙер икәүбеҙ. Илау аша көлөп ебәрәм. Яңы яралған сабыйым, мин һине бар донъянан өҫтөн күреп яратам инде. Мине ташлап китер алдынан Фәрит иғтибарлы, яғымлы булырға тырышты. Арабыҙ арыулана бара тип, иреп төштөм. Ихлас иркәләнем, иркәләндем. Ералтҡан сабый өсөн һине ғәфү итәм, рәхмәт әйтәм.

Тилереп тигәндәй ҡайтып индем. Фәрүәз бабай борсолоп, түҙемһеҙләнеп көтә ине. Тороп уҡ ултырған.

– Балаҡайым, ни булды? Һөйләй һал.

Хистәремә тулышып, уны ҡосаҡлап илап ебәрҙем.

– Мин ауырлымын, бабаҡай. Ни хәлдәр генә итермен?

Уның ҡалтыранған хәлһеҙ ҡулдары арҡамды һыйпай, сәстәремдән үбә.

– Туҡта, балам, мине үлтермәй тор.

Аңыма килеп, шып туҡтаным.

– Ҡотлайым, ҡыҙым. Һөйөндөрҙөң. Юҡһа әллә нәмәләр уйлап бөттөм.

– Атайһыҙ үҫер инде ул.

– Кем белә? Өмөтөңдө өҙмә улай. Йәшһең, һылыуһың. Маңлай күҙҙәре ботаҡ тишеге булмаһа, күрерҙәр, баһаларҙар. Мотлаҡ ишеңде табырһың. Әгәр теләһәң, минең фамилиямды бир. Ейәнем ҡала, тиермен. Ҡыҙым, торт килтермәй булмай. Бөгөн байрам беҙҙең өсөн.

Шатлығыма иҫереп йөрөй торғас, кинәт айнып киттем. Августа эш башлаясаҡһың, тигәйнеләр. Тап минең декрет ваҡыты еткән була. Өләсәйҙең бер мәҡәле иҫкә төштө: «Хәйерсенең ауыҙы ашҡа тейһә, танауы ҡанай». Шиктәремде бабайға һөйләмәй булдыра алманым. Был арала кем күберәк ярҙамға мохтаждыр: үлем түшәгендәге ауырыуымы, әллә минме? Шул хәлдә лә уның миңә таяныс булыуы ғәжәпләндерә.

– Һиңә апрель башы менән эш башларға тура килә, ҡыҙым.

– Ә һеҙ?

– Мин нимә? Ятырмын әле. Ятҡан бар. Нәҡиә апайың күҙ-колаҡ булыр.

– Күңелем ятмай уға. Бер ҙә ауыҙы ябылмай. Гел кеше һөйләй. Ғәйбәт...

Бабай асыуланды:

– Был осраҡта тыуасаҡ йәнде уйларға кәрәк. Һис тә икеләнмә. Бар, саф һауаға сығып кер, һиңә файҙалы ул. Телефонды тоттороп сыҡ.

Уны тыңламай хәлем юҡ. Тышҡа сыҡтым. Болотлап ебәргән, ел сыҡҡан. Күктәге зәңгәр тәҙрәләр юғалған. Кинәт епшек ҡар яуырға тотондо. Тоҙлоҡ яумай ҡар бөтмәй, тиҙәр. Моғайын тоҙлоҡ яуалыр. Өйгә ингәндә, бабай тынис ҡына йоҡлай ине инде. Сабый һымаҡ ҡайғыһыҙ, тынис сырай, тимәк, ҡәнәғәт. Шым ғына йөрөп, өй эштәрен бөтөрҙөм.

– Яныма килһәңсе, – тигән тауышҡа һиҫкәнеп киттем. Йоҡоһо ҡоштоҡо һымаҡ ҡына. – Ултыр яныма. Бына шулай.

Тын ғына ултырабыҙ. Күп ваҡыт ошондай тынлыҡтар ваҡытында күңелдәр һөйләшкән төҫлө. Уның хәбәренең ыңғай булырын аңлап торам.

– Алдағы дүшәмбенән эш башларһың. Ҡаршы һүҙҙең булыуы мөмкин түгел.

– Рәхмәт һеҙгә. Был изгелектәреҙҙе нисек кенә ҡайтарып бөтөрөрмөн?

– Ҡайтарып йөрөйһөң түгелме? Хатта артығы менән.

Эш башларға тағы ла ике көн бар. Шул арауыҡта булһа ла бабайҙы яҡшыраҡ ҡарарға тырышам. Тауыҡ һурпаһы бешерәм, компот ҡайнатам. Янынан китмәйем, һәр бер күҙ ҡарашын аңлап, теләктәрен үтәп кенә торам. Тик уның ашау теләге көндән-көн кәмей. Бер-ике ҡаба ла кире ултыра.

– Рәхмәт, ҡыҙым, тәмле, – тип маҡтаған була. – Кәрәкмәгәнгә эш табып маташма. Янымда ултырһаң, иң яҡшыһы.

Ике көн күҙ асып йомғансы үтте. Дүшәмбе Нәҡиә апайҙы саҡырып, күрһәтмәләр биреп, ят ергә, ят кешеләр араһына киттем. Директор, әлбиттә, таныш инде. Кәрәк ҡағыҙҙарҙы Заһир ағай аша алдырткайным. Тормошомда ярҙам итеп торған яҡшы кешеләр осрауына шатланам. Йәшәү тигәнең гел ҡара һыҙаттарҙан ғына тормай икән шул, уның яҡшы яҡтарын да күрә белер кәрәк.

Лицейҙа йыл башынан уҡ ике тәрбиәсе кәрәк булған. Унда эшләгән оло ғына педагог: «Баламды уҡытам, аҡса күберәк кәрәк», – тип бер үҙе ике кеше өсөн эшләп йөрөгән. Әлеге ваҡытта арып, ярҙамсы һорай башлаған икән. Ана шул урынға мине алдылар ҙа инде. Тәрбиәсе Әнисә Сәғитовна ла шунда икән. Ул мине лицей менән таныштырырға алып китте. Уҡыусыларҙың уҡыуҙары, йәшәүҙәре бер урында. Спортзал да, ашхана ла ошонда уҡ. Шулай булғас, бик уңайлы инде. Йыһаздар заманса, яҡты, йылы. Бында эшләүе лә бик күңеллелер. Тәрбиәселәр өсөн ҙур, уңайлы кабинет бар. Иртәнән башлап балалар уҡып сығыр алдынан килергә. Көн режимын тайпылышһыҙ үтәү – тәрбиәсенең бурысы. Әнисә Сәғитовна түңәрәктәр расписаниеһы, режим менән таныштырып сыҡты. Бөтәһе лә яңы, ҡыҙыҡ ине. Эште, балаларҙы яратасағымды һиҙҙем.

Эшләй башлағас, бөтә иғтибарымды балаларҙы өйрәнеүгә йүнәлттем. Уларҙы бер төркөм итеп түгел, һәр береһен айырым шәхес, һәр береһендә үҙенә генә хас фиғел-холоҡ тип уйлап, шул юҫыҡтан сығып аралаша башланым. Яңы тәрбиәсегә төбәлгән ҡыҙыҡһыныусан, һынаусан ҡараштарға бирешмәҫкә тырышам. Әле тәжрибәһеҙ педагог тип, миңә ҡыҙ балаларҙы бирҙеләр. Ниңә ҡыҙҙар менән эшләү еңелерәк, тип уйлайҙар икән, тип аптырап ҡуйҙым. Дөйөм алғанда, балалар оҡшаны. Аҡыллы, етди, белем алыр өсөн йыйылған алсаҡ, ихлас ҡыҙҙар. Мөләйем, йыйнаҡ, шул уҡ ваҡытта ҡыйыу Айзиләне оҡшатып өлгөрҙөм.

Теләктәрем тормошҡа ашты. Күптән хыялланған һөнәрем буйынса эшләйем, бәпесем буласаҡ, торор урыным бар. Хыялдарымды тормошҡа ашырырға ярҙам

иткән кеше генә үлем түшәгендә. Был хәл иҫкә төшөп, йөрәкте өҙөп тора. Хәҙерге ваҡытта эшем ныҡ ылыҡтырһа ла, ашығып ҡайтам. Ауырыу мине түҙемһеҙлек менән көтөп ята. Уның хәле хәҙер көнләп түгел, сәғәтләп насарая. Хәҙер инде был донъянан алыҫлаша бара, бер нәмә менән дә ҡыҙыҡһынмай, нисек эшләп китеүемде лә һорап торманы. Ҡайтып инәм, иң беренсе эшем итеп янына ултырам, ҡулын тотам. Шулай тын ғына хәтһеҙ ваҡыт үтә. Мин уға булған бар рәхмәтемде шулай еткерергә тырышам. Ул быны аңлай, минең яҡын булыуымдан рәхәтлек кисереп шым ҡала.

Шулай тәүге эш аҙнаһы үтте. Һөнәремә тиҙ үк төшөнөп алдым. Ҡатмарлы нәмә булмаһа ла, һәр бала – үҙе бер асылмаған донъя. Ләкин асасағыма ныҡлы инанам. Балалар миңә тиҙ үк тартылып китте. Әнисә Сәғитовнаның быға бер аҙ эсе бошҡан кеүек. Йыуаш ҡиәфәтемә ҡарап, был ни алып барып сығыр, тип уйлағайны, буғай. Ул үҙе киҫкелек, ҡатылыҡ менән генә алдыра, үҙе әйтмешләй, кәнфитләнеүҙе ене һөймәй.

– Улай һәр береһен һылай-һыйпай башлаһаң, нисәгә бүленергә мөмкин? Йөрәгеңә тиҙ тейер, бына күрерһең, – тип ҡуя.

Ял көнө иртүк тороп иҙән йыуҙым, ашарға әҙерләнем.

– Гел генә эш табып юрғалама, уның сиге булмаҫ. Миңә лә оҙаҡ ҡалмай. Икебеҙ ҙә ҡотолорбоҙ.

– Улай тимәгеҙ, зинһар, – күҙ йәштәремде күрһәтмәҫ өсөн йөҙөмдө ситкә борҙом.

– Көтөү ялҡыта, бөтәһе лә ялҡа. Китеүсе лә, ҡалыусы ла. Бар әле, балаҡай, яҡшы күлдәгеңде кей. Бер аҙ төҙәнеп тә ал. Бөгөнгө көн шуны һорай.

– Ниңә инде?

– Кәрәк. – Ауырыу серле көлөмһөрәй, сырайы йәшәреп киткәндәй була.

Үҙем йәшәгән йоҡо бүлмәһенә инеп, сумкамды астым. Ғәлимә бүләк иткән зөбәржәт төҫөндәге күлдәгемде кейҙем. Был төҫ минең ҡап-ҡара сәстәремә, ҡуңыр йөҙөмә килешә. Күҙҙәремде һөрмәләп, помада яҡтым. Капрон колготки, туфли кейҙем. Фәрүәз бабай күҙен дүрт итеп көтә ине инде. Һуңғы ваҡыт ул ныҡ сабырһыҙға әйләнде.

– Урап йөрөп ал, күргәндәй булайым. – Ул минең бүлмә буйлап әйләнеүемде иғтибарлап күҙәтте. Миңә лә күңелле булып китте. Күлдәген күрһәткән бәләкәй ҡыҙ кеүек өйөрөлөп йөрөгән булам.

– Һуңғы көндәреңдә алдыңда шундай фәрештә йөрөгәндә был донъяны нисек итеп ташлап китмәк кәрәк, шайтан алғыры. – Бабайҙан сәләмәт кеше тауышы сыҡты. Ул, мендәр аҫтынан алып, бер бит ҡағыҙ һуҙҙы. – Һуңынан уҡырһың. – Йәнә зәңгәр бәрхәт ҡумта алып миңә тотторҙо. – Был алҡа егет сағымдан алып хужабикәһен көткәйне. Лайыҡ кешеһен тапманым. Ул һиңә насип булған. – Емелдәп торған оҙонса йәшел ҡаш алтын тирәскә ултыртылған. Һәр ҡырынан нур сәселә.

– Таҡ. – Тауышына буйһоноп, тағып ҡуям. Күлдәк менән икеһенең тап килеп тороуы бит әле уның. – Һуңғы бүләгем. Ҡолағыңдан һалма. Элек уның хаҡына йорт һалып була ине.

Бүләк оҡшаһа ла, шатландырмай, сөнки минең өсөн изге, ҡәҙерле кешенән айыра һымаҡ.

– Әйкәнемде тыңла, белеп ҡал, әйҙә. Ниңә яҙмыш әҙәм балаһын был тиклем дә мыҫҡыл итәлер? Ниңә беҙ замандаштар булып яралмағанбыҙ? Минең иҫке сепрәккә әйләнеп теткеләнгән йөрәк ғашиҡ булырға ла көс тапты. Бер аҙнанан үләсәк кеше өс ай йәшәп ташланы. Һинең тылсымың был. Минең хисемдән, зинһар, ғәрләнмә. Заманында бөркөт егет инем. Тиңемде генә таба алманым. Әле

бәхетле булып китермен, ер йөҙөндә миңә оҡшарҙай ҙа зат булған икән, тиермен. Киләсәктә, бәлки, минең кеүек берәү осрап, һине бәхетле итер. Һәр хәлдә шуны теләп китәм. «Үлем түшәгендә теләк ҡабул була» тигәнде әсәмдән ишетеп ҡалғайным. Әле килеп иҫемә төшә... – Бабай мендәргә йығылды, ҡороға ташлаған балыҡтай ауыҙын асты.

Йүгертеп килтереп дарыу ҡаптырып, һыу йотторop ебәрҙем. Укол һалдым. Тәне дарыуҙы ҡабул итә, тимәк, хушлашыуы түгел әле.

– Рәхмәт, бәпесем, – бабай ойоп китте, һулышы рәтләнә бирҙе.

Ул биргән ҡағыҙҙы астым. Был кәкре-бөкрө итеп хәлһеҙ ҡул менән яҙылған шиғыр ине.

Һуңғы хистәр

Был бит һуңғы һөйөү, һуңғы хистәр,
Һуңғы тапҡыр ҡанат талпыныуы.
Һуңғы буран, һуңғы өйөрмәләр,
Һуңғы тулҡын ярһып ашҡыныуы.
Елгә елберҙәгән һуңғы япраҡ,
Көҙөн гөлйемештәр атыуы.
Ҡояш байығастан ал шәфәҡтең
Һуңғы нуры менән балҡыуы.
Ниңә генә шулай бары ла һуң?
Тулама һин, күңел, даулама.
Сабыр итсе, баҫыла күр, йәнем,
Һуңғы һөйөүемде арала.
Ни булһа ла, рәхмәт яҙмышыма,
Мин татыным гүзәл, саф хистәр.
Үҙем менән китер баҡыйлыҡҡа
Һөйөү менән тулы был хистәр.

Йән тетрәнеүе менән ҡағыҙҙы күкрәгемә ҡыҫтым. Алда буласаҡ йәнә бер юғалтыу йөрәгемде өтә. Ниңә минең тормошом юғалтыуҙарҙан тора һуң? Атаәсәм, ирем, хәҙер килеп – атамдай яҡын кешем. Ҡасан табыштарым башланыр? Уларҙы көтөп алырға хәлем етерме?

Дүшәмбе йәнә эшемә киттем. Токсикоз борсомай инде. Ҡан баҫымы, анализдар барыһы ла нормала. Теләп, көтөп алған бәпесем булғанға шулайҙыр.

Бабай хәлһеҙләнгәндән-хәлһеҙләнә. Көнө буйы бер-ике йотом ҡайнаған һыу менән хушлана. Ике ҡалаҡ шыйыҡ бутҡа ҡаба. Тире менән һөйәктән генә тора инде. Сыҡмаған йәне генә бар. Улына шылтыратып, хәлен еткереп торам, саҡырам. Бабай өндәшмәй генә көтә. Был осраҡта ла ул ир кеше булып ҡала белде. Фуат Фәрүәзович килә алмай ине. Мәскәүҙән тикшереү көтәләр. Был хаҡта еткермәй булмай. «Улар мәңге йәшәрҙәр, минең көнөм бер ҡасан да килмәҫ». – Ауырыуҙың йөҙө ныҒыраҡ сытырайҙы, яңаҡтары һуҙыла төштө.

***

Быйылғы ҡар нисек кенә ҡалын булһа ла, мөғжизә менән бөтә барған кеүек. Көҙҙән ҡоро ҡалған тупраҡ һәр тамсыны ҡомһоҙланып йота бара. Бөрөләр шартларға етешкән. Бабай һөйләшмәй тиерлек. Үтенесен күҙҙәренән аңлайым. Зәки ағай, муллаға әйтеп, ике тапҡыр ясин уҡытты. Элекке коммунист доғанан баш тартмай ине. Рәфиҡ Ҡаҙыевич был арала эшкә йөрөмәҫкә рөхсәт итте. Быны аңлап ятҡан бабай шатланды. Ул хәҙер һүнгән шәм төҫлө. Иҫһеҙ ятамы, ойоп киткәнме – белеп булмай. Бер ҡалаҡ һыу йотоу ҙа ғазап уға. Кипкән ирендәрен

марля менән сылатам. Янынан китмәйем. Һуңғы минутында янында булмауҙан ҡурҡам. Уны юғалтҡас, нисек кенә түҙермен? Тыуасаҡ балам иҫемә төшһә, йәнә айнып китәм.

Ул көн ғәжәп аяҙ килде. Апрелдең һуңғы көнөнөң зәп-зәңгәр күкле, ҡоштар сыр-сыу килгән саф бер иртәһе ине. Ошо гүзәл иртәлә Фәрүәз бабай күҙҙәрен ҙур итеп асып ебәрҙе лә миңә текләне. Әллә хәле арыуланып киләме? Шатланып емеш һыуы килтереп еткерҙем. Ул йотлоғоп эсеп ҡуйҙы. Элекке кеүек матур тауыш менән:

– Яныма ултыр, фәрештәм... – тине. Тәрән, яғымлы, салт ҡарашы мине иркәләне, ҡулын күтәреп минең ҡулымды тоторға көсө етте. Йөҙө алһыуланды. Әйтерһең, бер ҡасан да һулышын ала алмай интекмәгән.

– Йә, хуш инде, бәхил бул, фәрештәкәйем минең. Алырға килеп тә еттеләр ана. Яңғыҙ булмаҫһың һин… – Һөйләмен әйтеп бөтөрә алманы. Күҙҙәрен йомдо, тәненән тулҡын үтеп киткәндәй булды ла бер генә эйәк ҡаҡты.

Ҡарап торам: китеп барыуы шул булдымы? Йөҙө балауыҙ төҫөнә инә башланы. Үкһеп илап ебәрҙем, уның ҡаҡ күкрәгенә ауҙым. Шул ваҡыт ҡарынымда лепер-лепер иткән хәрәкәт тойҙом. Һикереп тороп, эсемде тоттом. Күбәләк ҡағыуына оҡшаған хәрәкәт ҡат-ҡат ҡабатланды. Ләкин оҙаҡ һуҙылып торорға ваҡыт юҡ. Ниҙер эшләргә кәрәк. Үтеп киткәндән һуң бабайҙың йөҙө тыныс, мөләйем ҡиәфәттә ине. Ҡара ҡаштары, бейек маңлайын ҡаймалаған сәстәре күркәмлек биреп тора. Уға ҡыш етмеш һигеҙ йәш тулған икән.

Ауырлы ҡатын мәйеткә оҙаҡ ҡарап торорға тейеш түгеллеген әллә ишеткәнем бар, әллә үҙем һиҙендем. Аҡ простыня алып мәрхүм өҫтөнә яптым да Зәки ағайҙарға шылтыраттым. Ағай мәйет ҡарауылларға ирҙәр саҡырып китте. Нәкиә апай шкаф, көҙгө кеүек әйберҙәрҙе япмалар менән ҡапланы.

– Мәйетте һинән башҡа ла тәрбиәләрҙәр, беҙгә барып ултыр. Ауырлы көйгә бында йөрөмә, – тине.

Үлем бөтәһен дә йыуашландыра, тәртипкә саҡыра икән. Иртәгәһен мөһабәт кәүҙәле, атаһына ике тамсы һыу кеүек оҡшаған Фуат ағай менән тәкәббер сырайлы Зарина апай ҡайтып төштөләр. Апай мине күреү менән, яратмайса, сырайын һытты:

– Ҡайҙан килеп объявилась наследница, бедная родственница, – тип бәйләнергә итә башланы.

Ҡойолдом да төштөм, бер һүҙ әйтер әмәлем юҡ. Фуат ағай миңә һынап ҡарап алды ла, ҡатынына боролоп:

– Ҡартты бер стакан сәйгә зарыҡтырып, үлем түшәгенән билдәһеҙлеккә оҙатҡан көйөңә, әле килеп уның мәйете өҫтөндә тауыш сығарырға итәһеңме? Учти, һинең арҡаңда атай алдында ғүмергә ғәйепле ҡалдым, – тип теш араһынан шундай уҫал итеп әйтте. Тағы ла бер «учти» тип ҡуйҙы. Ир менән ҡатын араһында татыулыҡ юҡлығы ете ят кешеләргә лә аңлашыла ине.

Фуат ағай минең менән үҙен йомшаҡ, яғымлы тотто. Хатта ки уның йотлоғоп, һоҡланып ҡарауын тойоп йөрөнөм. Быны һиҙеү миңә ниндәйҙер ғәйеп тойғоһо тыуҙырған төҫлө. Зарина апай ҙа, үткер кеше, күрә йөрөй, йәне көйә, ләкин үҙен тота.

Мәйетте тәрбиәләүҙе ойоштороу, йыназа уҡыу, хәйер таратыу эштәре муллаға тапшырылғайны. Бәләкәй генә кәүҙәле, етеҙ, ихлас кеше ине ул. Бөтә мәшәҡәтте намыҫлы атҡарып сыҡты.

Мәрхүмде оҙатырға бик күп кеше йыйылды. Элекке эшләгән еренән, уҡыусыларынан олпат, хөрмәтле кешеләр килде. Шунан ғына ла Фәрүәз бабайҙың абруйлы шәхес икәнен төшөнөргә була ине. Ул, үлеренә ике аҙна ҡалғас, «Фуат

ағайыңа бирерһең» тип бер конверт ҡалдырғайны. Шуны тапшырғас, бурысым үтәлгән кеүек еңеллек тойғоһо кисерҙем. Унда мәрхүмдең һуңғы теләктәре, кәңәштәре яҙылыуына шигем юҡ.

Фуат ағай үҙен олпат, тыйнаҡ-ихлас тота. Унда атаһының һыҙаттары сағыла. Шул кешенең үҙенең яҡын кешеһенә булған иғтибарһыҙлығына ышанғым килмәй. Фәрүәз бабай, бәлки, яңылышҡандыр, тигән фекер тыуа.

Бабайҙы табутҡа һалғас, һуңғы тапҡыр хушлашырға, ҡарап ҡалырға теләгәйнем, мулла ағай рөхсәт итмәне.

– Йыуылған мәйеттең йөҙөн асырға ярамай, ғөсөлө боҙола, – тип сабыр ғына аңлатты.

Был бер үкенес булып ҡалды.

...Зыяратҡа тик ирҙәр генә китте. Беҙ ҡапҡа төбөндә генә оҙатып ҡалдыҡ.

Буп-буш йортта үҙем генә ҡалдым. Өй эсе йыйнаҡ, ауырыу файҙаланған әйбер, һауыт-һаба алып ҡуйылған. Был яңғыҙлыҡты көсәйткән һымаҡ. Кистәрен Нәҡиә апай ҡунырға инә.

– Оло мәйет сыҡҡас, өйҙә ҡырҡ көн яңғыҙ йоҡларға ярамай, – ти. Уға өйрәндем инде, артыҡ бәйләнсек тойолмай. Күп һөйләүе лә ялҡытмай.

Фәрүәз бабайҙың етмәүен бар булмышым менән тоям. Уның әйткән һүҙҙәрен эсемдән барлайым. «Изге фәрештәм минең», – тип өндәшер ине. Кем кемгә фәрештә булғандыр? Хоҙай ғына белә. Дөрөҫө, мине күп бәлә-ҡазанан ҡотҡарыусы, аралаусы фәрештә ине бит. Уның әйткәндәре һаман ҡолаҡ төбөндә: «Ирең һиңә кире килер, бына күрерһең. Ниндәй аҫыл ташты юғалтыуын аңлар, әҙерәк аңы булһа. Тик һин ҡара, бер баҫҡан тырмаға икенселәй абынма».

Ул хаҡлы булған. Кисә Ғәлимә шылтыратты. Фәрит уның менән ҡайғыһын уртаҡлашмай булдыра алмаған. Минең менән һөйләшергә үҙенә нимәлер ҡамасаулай. Ояламы, ғәрләнәме, намыҫы ҡушмаймы.

«Ныҡ яңылыштым, – тигән ул. – Фәрештәләй күргәнем аждаһа булып сыҡты. Минең йортто, машинаны һаттырып, пластик операцияға барырға уйлаған. Етмәһә, минән ун йәшкә олораҡ булып сыҡты. Керпегә лә, тештәре лә яһалма икән. Әл дә өйҙө һатмағанмын, уныһы өсөн Асияға рәхмәт. Хәҙерге көндә ауылға ҡайттым, Асия ҡайтһа, кире ҡаҡмам», – ти икән.

Хайран ҡалыуҙан ят та ул. Мин һаман меҫкенләнеп, ялынып, ғәйепле кеше кеүек уның аяғына баш һалып ҡайтып инергә тейешмен. Шулай итер ҙә инем әле, йүләр. Фәрүәз бабай осрап, үҙемде хөрмәт итергә өйрәтмәһә, һаман шулай үҙемде ҡәҙерһеҙ итеп йөрөр инем. Бәлки, шатланып маташыр инем. Бер нисә ай эсендә лә бөтөнләй үҙгәреп киткәнем өсөн ҡыуаныс кисерҙем. Ғәлимә минең ауырлы булыуымды ла әйтеп тормаған, рәхмәт төшкөрө.

Унан килеп, Фуат ағайҙың хушлашҡан саҡтағы күҙ ҡарашы иҫемә төшөп аптырата. Фәрүәз бабай һымаҡ йылы-яғымлы итеп оҙаҡ ҡарап торҙо, наҙлы ғына ҡулымды ҡыҫты. Нимә аңлата был ҡараш? Әллә оҡшатам инде уны? Ҡуйсы-ҡуйсы, был уйҙарҙы күңелдән ҡыуалайым. Ә улар һаман ябырыла.

Нәҡиә апайҙың һәр саҡтағыса хәбәре күп: Фуат ағайҙың бала саҡтарын, уның шуҡлыҡтарын иҫенә төшөрә. Бәләкәй генә саҡтан гел пистолеттан атыш уйнаны, бандиттар баҫтырҙы, ти. Бала саҡ хыялдары тормошҡа ашҡан, ул хәҙер, ысынлап та, пистолет тағып йөрөгән кеше, ти. Ә һин, ҡыҙыҡай, белмәһәң белеп ҡуй. Ул ҡатыны менән исем өсөн генә йәшәй. Аралары күптән һалҡын, йә балалары юҡ. Кем белә, ҡартласты яҡшы ғына тәрбиәләһә, Фуаттың күңеле йомшарыр ине... Һәм башҡа оҙон-оҙон хәбәрҙәр теҙелә..

Мин тыңлайым, бүлдермәйем. Фуат ағай тураһындағы хәбәрҙәр оҡшағанын һиҙеп ҡалам.

– Фәрүәз Сафиевич беҙгә ҙур яҡшылыҡ эшләгән кеше. – Яңы йөкмәткеле һүҙ теҙмәләре башлана. – Беҙ ауылдан район үҙәгенә күсеп килгәс, мине техничка, Зәки ағайыңды завхоз итеп эшкә алған кеше ул. Ғүмер буйы бергә эшләп пенсияға сыҡтыҡ.

Ә-ә-ә, была ниңә эскерһеҙ ярҙам итергә әҙер торалар икән, тип аңлап ҡалам.

– Ә Зарина апай бабайҙы бер аҙна ашатмай ятҡырған, нисек йәлләмәгәндер, – тип ҡысҡырып уйлап ҡуям, телемдән нисек ысҡынғанын һиҙмәй ҡалам.

– Нимә, нимә тиһең? – Апай сат йәбешеп төпсөнә башланы, миңә бик ҡыйын булып китте, үҙемде кеше араһында һүҙ йөрөтөүсе һымаҡ тойҙом.

– Юҡсы, яңылыш ысҡындырҙым, – тиһәм дә, апай өҙмәй-ҡуймай һорашыуын белде.

– Уның шулай булырына аптырамайым. Зарина килен йылан аяғын киҫкән бит ул, – тип йомғаҡлап та ҡуйҙы.

Нәҡиә апай мине, Фәрүәз бабайҙың дүртенсеме, бишенсеме быуын бер туғанының ҡыҙы, тип уйлап, кем балаһы икәнлегемде, кемгә оҡшауымды уҡ билдәләп ҡуйған. Шуға ла яҡын күрә. Миңә был уңайлы ла.

Әгәр эшем булмаһа, йәнә лә ныҡ ауыр булыр ине. Ауырға ҡалыуымды Ғәлимә һиңлап ҡына белде, ғәҙәтенсә, тәүҙә тиргәп алды, һуңынан ҡотларға кереште. Фуат ағайҙы ла белә ине ул. Ни тиһәң дә, яҡташтар шул.

Май айы һис бер яңылыҡһыҙ, шыма үтте. Был һуңғы ваҡыттағы иң тыныс ара ине. Унынсы июндә Фуат ағай атаһының ҡырҡына ҡайтырға тейеш. Улар ҡайтыуға йорт тирәһе йәмле булһын тип, ирис, нәркәс, ләлә гөлдәре ултыртҡайным. Гөрләп сәскә атып ебәрҙеләр. Һиҙмәҫтән Фуат ағайҙы көтөп йөрөүемде аңланым. Тиргәп тә, оялтып та үҙемде еңә алмайым. Ҡорһағым бәләкәй булһа ла, һиҙелә инде. Ауырлы көйгә ир кеше уйлап йөрөү оят, яҙыҡ эш. Шул ваҡыт көслө итеп телефон шылтыраны. Ашығып трубканы алам. Ғәлимә тауышы: «Сәйеңде ҡуя һал, ун минуттан килеп етәбеҙ», – тип хәбәр һалды. Яр һалып: «Кем, кем менән?» – тип ҡысҡырам. Ғәлимә шарҡылдап көлә, ул ҡәнәғәт, уның кәйефе көр. «Һиңә ғашиҡ кеше менән», – ти ҙә трубканы ырғыта.

Хоҙайым, кемде әйтә ул? Әлбиттә, шаярта. Йөрәгемдә өмөт баҙлай, уны һүндерер әмәл юҡ. «Өҫтәлгә ҡуйырға нимәләр бар?» – тип һыуыткысҡа күҙ һалам. Сәй ҡуям. Ул арала затлы иномарка ҡапҡа төбөнә килеп туҡтай. Хоҙайым, был бит – Фуат ағай машинаһы. Уларға ҡаршы йүгерәм. Тәүҙә Ғәлимә атылып килеп сыҡты, унан ҡулына алһыу розалар тотҡан Фуат ағай күренде.

Фәрүәз бабайҙың аҡыллы, уйсан, ләкин сикһеҙ һөйөү менән тулы күҙҙәре миңә төбәлә. Уларҙа үтенес, ялбарыу ҙа бар кеүек. Эйе, был минутта был ҡараштар тап уның күҙҙәре менән бағалар, уның хистәрен һөйләйҙәр һымаҡ.

– Һаумы, фәрештәм минең, мин килдем, ҡыумаҫһыңмы? Хистәремә яуап бирерһең тип, өмөт менән килдем.

***

Хөрмәтле уҡыусым! Әйтмәй булдыра алмайым. Ҡыҙым тыуҙы, уға Фәйрүзә тип исем ҡуштым. Бабай, был донъяла нәҫелем ҡалмай, исмаһам, тип үкенес белдергәйне. Фәрүәз бабайҙың рухы шат булһын. Мин Фуат ағайға кейәүгә сыҡтым, уның фамилияһын йөрөткән ике улан таптым. Тәүге балам да уның фамилияһын йөрөтә...

Сәүиә
БИКМӨХӘМӘТОВА

СӘФӘРТУЙ ЯЛАНЫ

ХИКӘЙӘ

«Сәфәрбикә». Инглиз телендә яҙылған ошо ник аҫтында ҡыҙыҡ ҡына бер статус тора: «Every person has his own field Safartuy» («Һәр кешенең үҙ Сәфәртуй яланы бар»). Ник аҫтында яҙышҡан кеше үҙенең йәшен (22 йәш) һәм итальянка икәнен генә белдергән, бүтән бер мәғлүмәт тә юҡ.

Осраҡлы ғына был биткә килеп юлыҡҡан Илһам, ошо статусты күреп, быуар йылан алдына килеп сыҡҡан ҡуяндай, ни алға, ни артҡа бара алмай туҡтап ҡалды. Әйтерһең дә, икһеҙ-сикһеҙ Интернет донъяһының ошо нөктәһе, ғалимдар йыһанда барлығын иҫбат иткән «ҡара тишек» кеүек, йәш ирҙең бөтә иғтибарын, ихтыяр көсөн үҙенә һурып алды, гипнозланы, сихырланы. Илһам, мейеһенең хәтер өсөн яуап биргән бөтә күҙәнәктәрен эшкә егеп, ниндәйҙер мөһим төшөнсәне күҙ алдына килтерергә тырышты. Компьютерҙың эҙләү системаһын эшкә еккәндә, моронон уңға-һулға бороп, алғы тәпәйҙәре менән ерҙе соҡопсоҡоп, кеше биргән команда буйынса эҙләнгән эт сүрәтендә, ошо билдәһеҙ информацияны тотоп алырға ынтылды. Юҡ, был онотолған мәғлүмәт, ҡасандыр бала сағында Рәүҙәк йылғаһында ҡоро ҡул менән тотоп алып та, шул уҡ минутта, майлы бау кеүек, бармаҡтары араһынан һыуға һыҙылып ҡына төшөп киткән шыуғалаҡ шамбылай, мейе лабиринттарына кире кереп юғалды.

Ваҡыт та һуң ине шул – көн дә эштән ҡайтҡас, үҙ һөнәре буйынса ла, заманаса модаға эйәреп тә, Интернет селтәрҙәрен айҡарға ятҡан Илһам йоҡларға ятты. Кем әйтмешләй, иртәгә байрам түгел бит, исемен телгә алырға ла шөрләткән, дәүләт именлеге менән бәйле ойошмала «перспективалы йәш белгес»те мәшәҡәтле эш аҙнаһы көтә ине.

Икенсе көнөнә иртүк тороп, ятҡан музыкаһын тыңлай-тыңлай эшкә юлланғанда, ҡапыл үҙенең «Сәфәрбикә», «Сәфәртуй яланы» тип ауыҙ эсенән генә

Сәүиә Бикмөхәмәтова (1963) Ишембай районының Һарғай ауылында донъяға килгән. БДУ-ны тамамлай. Әлеге көндә Салауат ҡалаһының 25-се башҡорт гимназияһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй.

ҡабатлап барыуын һиҙеп, «Шайтан алғыры нәмәстәкәй!» тип һүгенеп ҡуйҙы. Унан машинала бер үҙе булыуын, исәр кеше һымаҡ үҙ алдына һөйләнеп барыуын иҫләп, аптырай төштө. «Әллә аҡылдан яҙып барам? Бөтмәгәнме был донъяла төрлө никтар, ҡушаматтар, статустар! Әйтерһең дә, беренсе тапҡыр «Бәйләнештә» ултырғанмын. Унда бит кеше ишетмәгән, донъяла булмаған мәғәнәһеҙ ҡушаматтар туп-тулы. Сәфәрбикә? Был ҡушаматҡа бик аптырағас, әйҙә әле, Илһам, логикаңды эшкә ек. Тә-әк. Сәфәрбикә – ҡатын-ҡыҙ исеме. Төрки тамырлы һүҙҙән яһалған. Шуға аптырарлыҡ: итальян ҡыҙы нишләп үҙенә ошо никты алған? Юҡ, был ғына ла мине аптыратмай. Никта түгел шул хикмәт, ә статуста. Ниндәйҙер бер күренекле шәхестән алып үҙгәртелгән цитатамы ул: «Һәр кешенең үҙ Аустерлицы бар». Әллә «Ватерлоо яланы бар» тип әйтеләме? Ҡыҙыҡ ҡына статус шул: «Һәр кешенең үҙ Сәфәртуй яланы бар». Стоп! Ошо урынды нығыраҡ соҡо! Мейегә бирелгән эҙләү командаһында файл исемендә «Сәфәрбикә» тигән һүҙҙәр булған төшөнсәләргә иғтибар итергә ҡушылғайны бит. Тимәк, кисәнән бирле тынғы бирмәгән сер ошо һүҙҙәрҙә йәшерелгән: «Сәфәрбикә», «Сәфәртуй яланы». «Сәфәр» тигән тамырҙан яһалған һүҙҙәр былар. Сәфәр – сәйәхәт, юл йөрөү. Юҡ, был төшөнсә миңә бер нәмә лә аңлатмай!

«Сәфәрбикә», «Сәфәртуй яланы...» Мин бит был һүҙҙәрҙе ҡасандыр ишеткән кеүекмен? Тик ҡайҙа ишеттем?» Нимәнелер хәтерләргә, нимәнелер күҙ алдына килтерергә, кире ҡайтарырға тырышып өҙгөләнде күңеле. Ошо һүҙҙәрҙе мейеһенең икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрендә тегеләй-былай осортоп йөрөтә торғас, Илһам фекер ебенең осон тамам юғалтты, үҙе әйтмешләй, бөтөнләй көрсөккә килеп терәлде…

***

Ҡояш, күк йөҙөндә сираттағы траекторияһын һыҙып, алыҫта күренгән тауҙар артында юғалды. Ергә йәйге эҫе көн аҙағында ғына була торған киске һиллек килде, ҡала өҫтөнә Ағиҙел яғынан еләҫ һауа ағымы таралды. Ошо мәлде бигерәк ярата Илһам. Фатирҙарының балконы Ағиҙел туғайҙарына, әсәһе тыуып-үҫкән яҡтарға ҡарап тора шул. Мәңгелек урмандар, мөһабәт тауҙар, текә ҡаялар, көмөш һыулы йылғалар, сылтыр шишмәләр иленә ул бала саҡтан ғашиҡ. Балкондағы креслоһынан алыҫ-алыҫтарҙан күгәреп күренгән Урал һырттарына ҡарап ярты сәғәттәй ял итеп алғас, егет йәнә үҙенең яратҡан шөғөлөнә – компьютер ғәмәлдәренә тотондо.Тәүҙә ҡыҙыҡ өсөн бер нисә виртуаль уйын уйнап алды. Унан социаль селтәргә инеп, сираттағы яңылыҡтарҙы уҡырға тотондо. Шул саҡ мониторҙың һул яҡлап аҫҡы мөйөшөндә «белдереү» емелдәне: «Һеҙгә хәбәр бар». Илһам «Белдереүҙәр» битен асты ла шаҡ ҡатты: хәбәр «Сәфәрбикә»нән ине!

Илһамдың маңлайына һалҡын тир бәреп сыҡты: “Әллә мине “ҡалпаҡ” аҫтына алғандармы? Берәй ҡулайлама ярҙамында уйҙарымды уҡый башлағандармы?» Ҡалтыранған бармаҡтары “сысҡансыҡ”тың курсорын кәрәкле нөктәгә тура килтерә алмай этләнде. Ниһайәт, хатты уҡыны: «Һеҙ кисә минең битемә кереп сыҡҡанһығыҙ. Һеҙҙең менән танышҡым килә, зинһар өсөн, үтенесемде кире ҡаҡмағыҙ! Һеҙҙең биттә минең өсөн ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бар».

«Нисә йыл Интернетта ултырам, кемдәрҙең генә сайтына, блогына, чатына, шәхси битенә махсус рәүештә лә, осраҡлы ла барып юлыҡҡаным булды, берәү ҙә мине тотоп алып, икенсе көнөнә үк хат ебәреп ултырғаны булманысы! Тем более Италиянан! Ниндәйҙер таныш булмаған итальян ҡыҙы!» – тип аптыраны ул.

Илһам, ғәҙәте буйынса, бер нисә минутҡа мейеһен уйланыу эшенә екте. Ошо «уйланыу ғәҙәте»н уға бала саҡтан мейеһенә ҡалыплаштырып һала белгән, улының логик һәләтен үҫтереүҙе тәрбиәнең иң мөһим өлөшө тип иҫәпләгән, һөнәре буйынса уҡытыусы әсәһенә мең-мең рәхмәтле ул. Был һәләте уға мәктәптә уҡығанда ятраҡан уҡытыусыһының «мейе штурмы» тип аталған методик алымы ваҡытында ла, юғары уҡыу йортонда белем алғанда ла, аҙағыраҡ спецназ ғәскәрендә хеҙмәт иткәндә лә, әлеге эш урынында ла бик тә ярҙам итә.

«Тәк-тәк… Тимәк, был мәсьәләнең ниндәй компоненттары бар? Мин – Илһам, «Сәфәрбикә» нигы аҫтында бер яҙмаға юлыҡтым да, түңгәккә һөрөнгән ат кеүек, кисәнән бирле шул статус тирәһендә тапанам. Мейемдең бер күҙәнәгендә ошо һүҙ менән бәйле ниндәйҙер тоткарлыҡ килеп сыҡты, был юҡҡа түгелдер. Кеше мейеһе, аҫҡы аңыбыҙ – ул донъяла бер компьютер ҙа үҙләштерә алмаҫлыҡ мөғжизәле энергия ҡыры. Иртәме-һуңмы ошо һүҙгә бәйле мәғлүмәт аҫҡы аңымдан тышҡа бәреп сығасаҡ та, мин бөтәһен дә хәтерләйәсәкмен.

Мәсьәләнең икенсе компоненты – «Сәфәрбикә» нигы аҫтында виртуаль донъяла йәшәүсе 22 йәшлек ҡыҙ. Бәлки, әбейҙер? Бәлки, бабайҙыр? Бәлки, ул был донъяла бөтөнләй юҡтыр? Ни ғилләменәндер, ошо һүҙҙе ишеткәндә тыуған уйҙар минең аҫҡы аңымда ятҡан ниндәйҙер мәғлүмәт менән бәйле.

Шулай итеп, мәсьәләнең сиселеше ошо һүҙҙә булып сыға? Был һүҙҙе үҙенә ник итеп алған кеше менән, ысынлап та, танышырға кәрәк».

Илһам, ныҡлы ҡарарға килеп, етеҙ бармаҡтары менән тиҙ-тиҙ генә клавишаларға баҫа башланы. Бер нисә һүҙҙе йыйғас, үҙенең рус телендә яҙып ултырғанын абайлап ҡалды ла, яҙғандарын кире юйып ташлап, инглиз теленә күсте.

Утыҙ йәше лә тулмайынса тормошта күп нәмәләргә өлгәшкән егет инглиз телен һыу кеүек эсә, һәм бер телдән икенсе телгә күсеү уға бер ни тормай. Өсөнсө телде – туған башҡорт телен әсә һөтө менән бергә үҙләштереүен, уға ҡәрҙәш бер нисә төрки телде лә белеүен иҫәпкә алғанда, Илһам полиглот булып сыға түгелме?

Эйе, Илһам – ҡала башҡорттары ғаиләһендә тыуып-үҫкән егет. Алтынсы класты тамамлаған улдарын, шул йәштә генә үҙҙәре янынан бик ебәргеләре килмәһә лә, ата-әсәһе башҡорт-төрөк лицейына уҡырға бирҙе. Был лицейҙа өлгәшкән иң ҙур уңыштарының береһе тип Илһам инглиз телен бер йылда тиерлек бик яҡшы үҙләштереүен иҫәпләй. Элекке класташтары, был телде ун бер йыл өйрәнеп тә, бер һөйләм төҙөп әйтә алмайҙар бит!

«Һаумыһығыҙ! Һеҙҙең саҡырыуҙы ҡабул итәм» тигән һөйләмде инглиз телендә йыя һалып, виртуаль донъяға оҙатты ла, Интернеттан үҙенә кәрәкле битте табып, иғтибар менән уҡый башлағайны, мониторҙың бәләкәй тәҙрәсегендә тағы ла бер хәбәр пәйҙә булды.

«Ах-ах-ах! Был Сәфәрбикә мине бөтөнләй зомбиға әйләндереп, Италия мафияһының Рәсәйҙәге иң абруйлы шпионы итеп ҡуя инде! Таныш булығыҙ – Илһам Хәлитов! Интернет ҡорбаны. Социаль селтәрҙәр аша вербовкаланған агент».

Илһамдың ошолай уйларға нигеҙе бар, әлбиттә, сөнки эшләгән ойошмаһы – «Дәүләт серҙәрен ситкә сығармаҫҡа!» тигән килешеүгә ҡул ҡуйып эшкә ингән урын. Ҡасандыр «йәшел егет» сағында «Бәйләнештә» социаль селтәрендә аҫҡан битенә лә онотҡанда бер кереп сыҡҡылай, унда әсәһе тыуған яҡтарҙа төшөрөлгән бер нисә фотонан башҡа бер нәмә лә ҡуйылмаған. Унан килеп, үҫмер бала кеүек, көнө-төнө социаль селтәрҙә ултырырға уның ваҡыты ла, теләге лә юҡ.

Шулай ҙа ҡыҙыҡһыныуы еңде егеттең, ул хәбәрҙе асып уҡымайынса түҙә

алманы: «Һаумы, таныш булмаған виртуаль дуҫ! Зинһар өсөн, минең бер нисә һорауыма яуап бирергә тырышығыҙ. Һеҙ милләтегеҙ буйынса кем? Йәшәгән урынығыҙ «Рәсәй» тип күрһәтелгән. Рәсәйҙең ҡайһы төбәгендә йәшәйһегеҙ?»

Илһам, үҙенең йылдар буйы холҡона һалынған уйлап эш итеү һәләтен, һалҡын ҡанлылығын юйып ташлап, ни ғиллә менәндер, ошо танышлыҡҡа күҙ йомоп ризалашты, бер ҡасан да ошолай танышып, хәбәрләшеп ултырғаны булмаһа ла, «Сәфәрбикә» менән социаль селтәрҙәр аша аралаша башланы. «Сәфәрбикә» үҙенең ысын исемен дә йәшермәне: Алесия. Уға 22 йәш, ҙур ғына сауҙа ойошмаһында эшләп йөрөй.

«Ни өсөн минең менән ҡыҙыҡһынып киттегеҙ, минең «стена»ла фотом да, үҙем тураһында бер ниндәй мәғлүмәт тә юҡ бит?» тигән һорауға Алесия: «Үҙегеҙгә төрки тамырлы ник алғанһығыҙ: «Бузкурд». Ә танышыуға этәргән төп сәбәп – һеҙҙең биттәге тәбиғәт күренештәре төшөрөлгән фотографиялар», – тип яуап бирҙе. Илһамдың һаман төпсөнөп: «Мин ҡуйған фотолар ҙағы тәбиғәт күренештәре ул тиклем эксклюзив тип әйтмәҫ инем. Ундай йылға, ҡая, тауҙар пейзажы менән Интернет тулған», – тип ныҡышыуына, Алесия: «Бузкурд, һеҙ бер фотография аҫтына «Ыласынташ» тип яҙып ҡуйғанһығыҙ. Был һүҙ нимә аңлата?» – тип һорауға һорау менән яуап бирҙе.

Егет, бер аҙ уйланып алғас: «Һеҙ туризм менән мауығаһығыҙмы әллә? Улай тиһәң, Рәсәйҙә сит ил туристарын үҙенә йәлеп иткән тәбиғәт мөғжизәләре бик күп бит. Улар тураһында махсус сайттарҙан белешергә була. Ҡайһы берҙәренең веб-сайттарын күрһәтә алам»,– тигән хәбәрен виртуаль донъяға оҙатты ла, компьютерын бер аҙға ҡалдырып, икенсе бүлмәгә сығып китте.

Ҡабат килеүенә, Интернет селтәрендә уны Алесияның сәйер генә яуабы көтә ине: «Бузкурд, ышанаһыңмы-юҡмы, кисә һинең битеңә осраҡлы ғына барып эләктем дә фотоларыңды ҡарап сыҡтым. Эйе, уларҙа сағылған тәбиғәт күренештәре башҡа яҡтарҙағынан бер нәмәһе менән дә айырылмай. Шул уҡ тауҙар, ҡаялар, урмандар. Ләкин минең иғтибарҙы бер фотоһүрәт аҫтында торған «Ыласынташ» һүҙе йәлеп итте. Кисә кис буйы шул һүҙ мейемдә өйөрөлдө. Әйтерһең, мин был һүҙҙе ҡайҙалыр, ҡасандыр ишеткәнмен дә хәҙер иҫемә төшөрә алмайынса этләнәм. «Дежавю» тигәндәренә ышанмаҫ ереңдән ышанырһың».

Илһам, инде тамам аптырап, таныш булмаған итальян ҡыҙына үҙенең дә тәүлек буйы «Сәфәрбикә», «Сәфәртуй» тигән һүҙҙәрҙән ступор хәлендә йөрөгәнен яҙып ташланы. Әйтерһең дә, ниндәйҙер көс уны ошо аңлайышһыҙ ҙа, уның өсөн мәғәнәһеҙ ҙә булып тойолған танышлыҡҡа этәрә, кем икәнлеге лә билдәһеҙ осраҡлы бер кеше менән виртуаль донъяла һин дә мин һөйләшергә мәжбүр итә!

Ә ҡыҙ шундай ихлас: Илһамдың «Сәфәрбикә» ҡушаматы менән бәйле һорауына яуап итеп, тотош бер легенда һөйләп ташланы. Юҡ, легенда тип тә әйтеп булмай быны. Илдәр, сәйәси системалар араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың бер кешенең яҙмышын сеймәләндереп, сисеп булмаҫлыҡ төйөнгә әйләндергәне тураһында мажаралы повесмы? Мелодрамамы, әллә трагедиямы Алесияның ҡарт олатаһы тураһында бәйән иткәне?

«Минең ҡарт олатайым тыумышы менән Рәсәйҙән булған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙ уның тураһында бик аҙ беләбеҙ. Италияға килеп юлыҡҡансы ул исем-фамилияһын үҙгәрткән, шуға күрә уның ысын исемен, ниндәй милләттән икәнен, тыуған ерен асыҡларлыҡ документтар һаҡланмаған. Ҡарт олатайымдың Италияға килеп сығыу тарихы беҙҙең быуын өсөн баналь күренешкә

әйләнгән, тиһәң дә була. Ғаилә легендаһы буйынса (дөрөҫөрәге, урыҡ-һурыҡ ҡына һаҡланып ҡалған мәғлүмәттәр инде), ул Икенсе донъя һуғышында әсирлеккә эләккән, тик, ни сәбәптәндер, һуғыш бөткәс, Рәсәйгә кире ҡайтмай, Италияла тороп ҡалған. Бында ул итальян милләтле ҡарт өләсәйебеҙгә өйләнгән. Уларҙың бер ҡыҙы тыуған. Ҡарт олатайыбыҙ, ҡыҙына ун йәш тулыр-тулмаҫ, ҡаты ауырыуҙан мандый алмайынса үлеп киткән. Ҡарт өләсәйебеҙ ҙә оҙаҡ йәшәмәгән. Ғаилә архивында уларҙың фотолары ла һаҡланмаған. Ҡарт олатайыбыҙ төшөргән бер һүрәт кенә, ғаиләбеҙҙә ҡәҙерле ҡомартҡыға әйләнеп, быуындан быуынға тапшырыла килгән. Һүрәт аҫтында яҙыу бар: «Сәфәртуй яланы».

Ҡарт өләсәйебеҙ һөйләй торған булған: «Фашистик Германия Рәсәйгә һуғыш башлаған көндә ҡарт олатай менән йәш кәләше Сәфәртуй исемле яланда ҡуна ятып бесән эшләгәндәр. Бер йәше лә тулмаған улдары ла үҙҙәре менән булған. Сапҡынсы килеп, ҡарт олатайҙың һуғышҡа алынғанын, иртәгә таң менән военкомат алдында булырға тейешлеген әйткәс, ул, атын арбаға егеп тормайынса, сапҡынсы менән бергә ауылға һыбай сапҡан. Ә кәләше урман-тауҙар араһында бәпесе менән тороп ҡалған, ирен яуға шул яланда ғына оҙатҡан…»

Был ғибрәтле тарихты уҡып сыҡҡас, Илһам шаңҡыған хәлдә оҙаҡ ҡына ултырҙы. Ә мейеһендә ниндәйҙер бер уй өйөрөлә лә сөйөрөлә, уның осон инде тотам, бына тотам тигәндә, фекер ебе өҙөлә лә ҡуя. Тик бер нәмәне тоя егеттең һиҙгер күңеле: ошо уйҙа ғәжәйеп сер йәшеренгән, аҫҡы аң төпкөлөндәге ниндәйҙер күҙәнәк ысҡынып китер ҙә, быуылып ятҡан мәғлүмәт, ташҡын булып, тышҡа бәреп сығасаҡ. Бөтәһе лә шул саҡ яңынан хәтергә төшәсәк…

***

Илһам менән Алесияның виртуаль донъяла аралашыуы йышайҙы. Улар көн дә тиерлек эштән һуң, мөмкинлек табып, бер-береһенең хәл-әхүәлен белешеп торҙо.

Әҙәбиәттә, сәнғәттә, донъяға булған ҡараштарында фекер уртаҡлыҡтары булыуы асыҡланды, нишләптер, улар бер-береһе менән бик еңел аралашты.

Бер көндө ҡыҙ үҙенең «Бәйләнештә»ге битенә фотоларын ҡуйҙы. Уның яҡындан ғына төшөрөлгән бер фотоһына күҙ һалыу менән, Илһамдың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте: фотолағы йөҙ уға шундай таныш ине! Әйтерһең дә, виртуаль донъянан Илһамға бынан бер нисә йыл элек атаһы менән бергә юл фажиғәһендә һәләк булған әсәһе ҡарап тора! Шул уҡ тулҡынланып торған ҡара бөҙрә сәстәр, ҡарағусҡыл йөҙөнә сикһеҙ матурлыҡ биреп торған оҙон керпектәр араһынан донъяға наҙ һәм һөйөү менән ихлас итеп баҡҡан йәшкелт күҙҙәр!

Илһам, ҡапыл һиҫкәнеп, һикереп торҙо ла атаһы менән әсәһенең йоҡо бүлмәһенә йүгереп сыҡты, шкафтан ғаилә альбомын килтереп сығарҙы, ҡабалан-ҡарһалан альбом биттәрен аҡтара башланы. Әле генә мониторҙан үҙенә баҡҡан йәш ҡыҙ һүрәтен эҙләй ине ул. Күрҙе, мең тапҡыр күрҙе ләһә ул ошо наҙлы ҡараштарҙы! Был һөйкөмлө йөҙҙөң һәр бер һыҙаты инде нисә йыл өндәрендә уның күҙ алдында тора, төштәрендә һаман тере булып, улы менән һөйләшә, сәстәренән иркәләй…

Бына, бына әсәһенең йәш сағы – институттың өсөнсө курсында ғына уҡып йөрөгән ваҡыты. «Әсәй… Ҡәҙерле кешем… Әллә уның йәне алыҫ Италияла йәшәгән икенсе бер кешегә күскәнме? Реинкарнация тип атала, ахыры, был күренеш. Юҡ, юҡ! Был осраҡта, үлгән кешенең йәне яңы тыуған сабыйға күсә, тиҙәр. Әсәй менән атайҙың вафатына быйыл йәй ете йыл була. Ә Алесияға

егерме ике йәш. Тимәк, ул әсәйҙең «двойнигы», йәғни тышҡы ҡиәфәттәре менән бер-береһенә бик ныҡ оҡшаған ике кешенең береһе булып сыға? Әллә Алесия клонмы икән?» Илһам тамам буталды, башында йөҙ төрлө уйҙар ҡайнаны, мейеһе береһенән-береһе сәйерерәк һәм ҡатмарлыраҡ фекерҙәр тыуҙырҙы. Тик бер аҙҙан тынысланғандай булды: «Их, ҡайһылай иҫәр мин! Һуң был бит – фотомонтаж! Ҡайҙан башланыҡ, шунда килеп төртөлдөк, тип әйткәнме әле берәү? Ҡарт олатай тураһында биҙрә-биҙрә күҙ йәштәрен ағыҙырлыҡ хәсрәтле легенда! Сәфәртуй яланында хушлашыу тарихы! Ah-ah-ah! Әхмәт Лотфуллиндың «Хушлашыу» картинаһы персонаждары юл ситенә ултырып ял итә! Бәхетемә күрә, мин үҙем Алесияға бер ниндәй ҙә фото ебәреп өлгөрмәнем, юҡ-бар хәбәр һорытманым…

Ярай, синьорина Алесия, виртуаль донъяла матур ғына ҡултыҡлашып йөрөнөк, матур ғына итеп хушлашайыҡ».

Егет, ҡәтғи бер ҡарарға килгәндән һуң, компьютерын һүндереп, йоҡларға ятты.

***

Икенсе көндө эшкә барғас та, етәксеһе алдына ғаризаһын һалды. Отпускыһы иҫәбенә бер аҙналыҡ ял һорап... Етәксеһе ҡаршы килмәне, алды-ялды белмәй эшләп йөрөгән тырыш егеттең үтенесенә ыңғай яуап бирҙе.

Илһам шунда уҡ юлға сыҡты. Ике-өс ай инде эргәһенә ҡайтыр юл төшмәй торған өләсәһе янына, ғәзиз әсәһенең тыуған төйәгенә ашҡына ине уның күңеле. Ул хәтлем йыраҡ юл да түгел инде бала сағында һәр бер каникулын тиерлек уҙғарған Ҡарағай ауылы: күп тә үтмәй, эстән-тыштан ялтырап торған сит ил машинаһы Өҙөк тауына килеп тә етте. Тауҙан төшкән саҡта бөтә тирә-яҡ ус төбөндәгеләй күренеп тора. Бына – күрше Ишекәй ауылы. Уның һул яғында Селтербей тауы ҡалҡан булып баҫҡан. Ә уң яҡта, тау-урмандар ҡуйынына һыйынып ҡына, Илһамдың әсәһе яҡлап шәжәрә тамырҙары береккән Ҡарағай ауылы ята. Ауылдың ҡаршыһында ғына – Иҫкутар тауы. Ҡасандыр ауыл шунда урынлашҡан булған, шуға был тауҙы «иҫке утар» тип йөрөтәләр. Ауылдан арыраҡ, мәңгелек урмандар башланған ерҙә, Ыласынташ ҡаяһының аҡ түбәһе сусайып күренә.

Ыласынташ! Ҡапыл Илһамдың рулдә ятҡан ҡулдары ла, газ менән тормоз педалдәрендә тотҡан аяҡтары ла, ҡорошҡаҡ тотҡандай, ҡалтыранып китте, хатта шәп тиҙлектә тау аҫтына төшөп барған автомобиль һелкенеп ҡуйҙы. Әллә яңылыш алмаш-тилмәш газға ла, тормозға ла баҫты! Илһамдың маңлайына һалҡын тир бәреп сыҡты, машинаһын туҡтатҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Тышҡа сыҡты, юл ситендәге үләнгә ултырып, ауыл яғына күҙ ташланы. Мейеһендә теге башы-аҙағы күренмәгән уй яңынан өйөрөлөп-сөйөрөлә башланы: «Ыласынташ! Ҡарағай ауылы янындағы ташлы ҡая! Ыласындар төйәк иткәнгә шулай аталғандыр. Үҙен «Алесия» тип таныштырған, «Сәфәрбикә» ҡушаматлы итальян ҡыҙы тап ошо Ыласынташ ҡаяһы төшөрөлгән фотоһүрәткә иғтибар иткән бит. «Ыласынташ» һүҙе миндә ниндәйҙер ассоциатив тойғолар уята, ниңә шулай икәнен үҙем дә аңлай алмайым», – тип яҙғайны ул ҡыҙ. Мине «электерер» өсөн уйлап сығарылған махсус трюкмы был? Эйе, баштан аҙағына тиклем бик оҫта итеп, ентекләп уйланылған хәтәр шәп легенда! Тағы шул «итальянка»ны уйлайымсы! Наваждение какое-то! Юҡ, былай булмай! Йә ошо ял көндәрендә мин был виртуаль танышлыҡты бөтөнләй башымдан алып ташлайым, йә минең исемем Илһам түгел!»

Илһам үләнгә тәгәрәне, күҙҙәрен йомоп, тирә-яғындағы тәбиғәттең мең төрлө тауыштарын тыңлай-тыңлай, бер аҙ ятып торҙо. Ун-ун биш минут үтеүгә, мейеһе бер аҙ асыҡланып, әрһеҙ уйҙарҙан ҡотолғандай булғас, машинаһын яңынан ауыл яғына ҡыуаланы.

***

Бына ул бер урамдан торған ауыл буйлап үтеп, өләсәһе йәшәгән өй янына килеп туҡтаны. Зәңгәргә буялған тәҙрә ҡапҡастары, ҡапҡа-ҡоймалары, урам яҡлап үҫкән пар ширшылары – һәр бер нәмәһе бала саҡтан таныш, йөрәгенә үтә ғәзиз йорт был. Ҡарт олатаһы Сәлимгәрәй ошо нигеҙҙән Бөйөк Ватан һуғышына сығып киткән, ул киткәндә бер йәше лә тулмай ҡалған олатаһы ошонда яңы йорт күтәргән, ошо йортта әсәһе тыуып-үҫкән...

Йорт янына килеп туҡтаған машина тауышын ишетеп, өләсәһе ҡапҡаны шар асып килеп тә сыҡты, ейәнен ҡыҫып-һөйөп туя алманы. Өйгә ингәс, йүгереп йөрөп сәй табыны әҙерләне. Сәй янына ултырғас, Илһам, стеналағы рамда эленеп торған иҫке фотоһүрәттәргә күҙ төшөрөп, үҙе лә һиҙмәҫтән һорап ҡуйҙы:

– Өләсәй, ә ҡарт олатайым Сәлимгәрәй ниндәйерәк кеше булған? Уның фотолары һаҡланғанмы ул?

Өләсәһе уға бер аҙ аптырабыраҡ ҡарап ҡуйҙы ла:

– Эй, улым, дөрөҫөн генә әйткәндә, мин уның тураһында бер нәмә лә белмәйем, тиһәм дә була. Олатайың үҙе лә атаһын иҫләмәй ҙә ҡалған бит, ул һуғышҡа киткәндә, олатайың имсәк балаһы ғына булған. Шул китеүҙән ҡайным был нигеҙгә әйләнеп ҡайтмаған, һуғышта хәбәрһеҙ юғалған. Ошонан башҡа бүтән бер ни ҙә белмәйем мин, балам. Ә нишләп был хаҡта һорарға булдың әле?

– Юҡ, былай ғына.

Һүҙһеҙ-ниһеҙ генә сәй эсеүҙе дауам иттеләр. Шулай ҙа өләсәһе ейәненә һәр осрашҡанда әйтелә торған шелтә һүҙҙәрен әйтмәйенсә булдыра алманы:

– Илһам улым! Утыҙға етеп бараһың, һаман өйләнмәй йөрөйһөң! Исмаһам, берәй йөрөгән ҡыҙың бармы һуң?

– Миңә тигән ҡыҙ әле тыумаған бит әле, шуны көтөп йөрөйөм, – тип шаяртып яуап бирҙе егет.

– Эй, ошоно! Гел генә шаяртыуға бора ла ҡуя! Ана, Гөлмәрйәмдең ейәне ауыл тултырып туй яһаны үткән ялда, машиналары урамға һыймай йөрөнөләр. Санияның ейәндәре лә кәләш алып бөттө. Улар менән бергә уйнап үҫкәйнең бит. Үҙем иҫән-һау ваҡытта башлы-күҙле булғаныңды күрергә ине!

– Өләсәй! Ҡыҙҙар менән танышып, свиданкала йөрөргә бер ҙә генә ваҡытым юҡ шул. Вәт, шәп бер идея килде башыма! Күптән түгел Интернетта йәш итальянка менән таныштым. Ҡушаматы – Сәфәрбикә! Хәтәр яңғырай, эйе бит!

– Этме ни ул ҡушамат тағып йөрөргә? Нишләп «ҡушаматы» тип хәбәр һөйләйһең?

– Юҡ, өләсәй! Уның ысын исеме, әгәр дөрөҫ булһа – Алесия. «Сәфәрбикә» – уның виртуаль донъялағы исеме.

Өләсәһе, ейәне алып ҡайтҡан тәмле кәнфитте һура-һура:

– Әстәғәфирулла! Виртуаль донъя тигәнеңде белмәйем, әммә был фани донъяла әсәйең бала сағынан уҡ үҙен Сәфәрбикә тип йөрөттө. Хатта мулла ҡушҡан бына тигән матур исемен үҙгәртеп, үҙенә «Сәфәрбикә» тигән яңы исем алырға ла йөрөгәйне,– тип аптырашта ҡалды.

– Өләсәй, ысынмы? Әсәйем үҙен Сәфәрбикә тип йөрөттөмө? Сәфәрбикә?!

Илһамдың аҡылдан яҙғандай шашып ҡысҡырыуына әбей ҡурҡып китте, ҡулындағы сынаяғын иҙәнгә төшөрөп ебәрҙе, унығы иҙәнгә «сарт» итеп ҡаҡлығып, селпәрәмә килеп ватылды. Ошо тауыш Илһамды ҡапыл тынысландырҙы, ул тиҙ генә өҫтәл артынан сығып, өләсәһе янына ынтылды:

– Ғәфү ит мине, өләсәй, һине тертләттем дә баһа ҡысҡырып. Берәй ерең киҫелмәнеме сынаяҡ ярсығына? Эҫе сәй түгелеп, тәнең бешмәнеме? Хәҙер мин ярсыҡтарҙы йыйып алам. Ә һин тыныслан, ултырып ҡына тор, йәме, өләсәй?

Икәүләшеп ҡымғырыз килеп, ватылған сынаяҡ ярсыҡтарын сүпләп алдылар ҙа яңынан өҫтәл артына ултырыштылар.

– Балам, әсәйеңдең үҙен Сәфәрбикә тип йөрөтөүенә ниңә шул тиклем аптыраның? Бая үҙең һорашып ултырған боронғо олатайың Сәлимгәрәй нәҫеленең йәйләү урыны булған Сәфәртуй яланы. Ул ялан ауылдан ун-ун биш саҡрымда ята. Анау торған Ыласынташ һырттары буйлап урман эсенән үтеп, Шәрип утарын үткәс барып сығыла инде Сәфәртуй яланына. Олатайыңа ата-бабаһынан ҡалған йәйләү урыны булғас ни, ғүмер буйы шунда булды инде беҙҙең сабынлыҡ та. Олатайыңдың сәләмәтлеге бөткәс кенә ташланыҡ унда барып бесән сабыуҙы.

– Әсәйемдең дә шул яланда булғаны бар инеме?

– Уға ҡуна ятып бесән сабыу бер-ике йыл эләгеп ҡалды, шикелле. Әсәйең бер аҙ ҡул араһына кергәс, олатайың, күтәрем төбөн тырмап булһа ла йөрөр тип, үҙенә эйәртеп йөрөттө.

– Шулай матурмы ни ул ялан? Әсәйем хатта уның исемен алырға йөрөгән бит?

– Матур, иҫ киткес матур бит ул яҡтар! Ошо яҡ башҡорттарының боронғо йәйләү урындары шунда булған. Мин ни, ялан яғынан төшкән килен булғас, ул тауҙарҙың исемдәрен дә белеп етмәйем. Әсәйең бала саҡтан ҡыҙыҡһына торғайны шул урман-тауҙарҙың атамаларының килеп сығышы менән. «Һәр берәһе боронғо тарих һаҡлай, уларҙы өйрәнергә кәрәк», – тип ауылдың оло кешеләренән һорашып, яҙып алып йөрөгәйне. Ә Сәфәртуй яланын бигерәк тә яратты. Ҡарт олатайың Сәлимгәрәй үҙенең яҡындарын һуңғы тапҡыр шул яланда күргән инде. Бер йәше лә тулмаған сабыйын – һинең олатайың Ғәбдрафиҡты ҡосаҡлап, ҡарт өләсәйең шунда ер тырнап илап ҡалған, тиҙәр. Иламай шул, һуғыш башланған көндө улар Сәфәрбикә яланында бесән сабып йөрөгән булғандар. Сапҡын килеп, ҡарт олатайыңа иртүк военкоматҡа барырға ҡушып киткән. Ул атын һыбай менеп, саптырып ауылға ҡайтҡан да киткән, һуңларға ярамай бит инде.

Илһам өләсәһенең һүҙҙәрен әллә өңдә, әллә төштә ишетә ине. Дежавю… Әле ишеткәнеңдә, күргәнеңдә ҡасандыр күргән-ишеткәнең бар һымаҡ: шул уҡ күренеш кире ҡабатлана, күҙ алдында тора, ҡолаҡта сыңлай. Дежавю… Ә өләсәһе һаман һөйләй:

– Әсәйең Сәфәртуй яланы тураһында ололарҙан һорашып, легендаһын яҙып алғайны.

Егет, ҡапыл уянып киткәндәй:

– Ниндәй легенда ул, өләсәй? Һин уны беләһеңме? – тип һораны.

– Әйтеп торам бит, мин бик ҡыҙыҡһынманым шул был яҡтарҙың тарихы менән. Ул легенданы әсәйең район гәзитенә ебәреп баҫтырып сығарғайны. Ҡайҙа һуң, эҙләп алайыҡ, әсәйеңдең яҙыу-һыҙыуҙары һаҡланған сумаҙанда ятмаймы икән? Мин уның шиғырҙары, нәҫерҙәре баҫылған гәзит-журналдарҙы йыйып барғайным да ул.

Илһам йөрәкһенде. Һикереп тороп, өләсәһенән алда төпкө өйгә йүгереп сыҡты ла диван аҫтынан иҫке генә ҙур сумаҙанды һөйрәп сығарҙы. Шатырлатып асып, төрлө блокнот-дәфтәрҙәр араһында соҡсона башланы.

– Ипләп, йыртып ҡуйма! Әсәйеңдең бала сағынан бирле яҙған көндәлектәре, шиғыр дәфтәрҙәре бит былар. Ҡайҙа, үҙем эҙләп алайым.

Өләсәһе менән икәүләп һарғая башлаған гәзит-журнал биттәрен берәм-берәм аҡтара торғас, район гәзитенең 70-се йылдарҙа легенда баҫылған һанын килтереп сығарҙылар. Илһам шунда, иҙәндә, ултырған килеш легенданы уҡырға тотондо. Өләсәһе: «Ни булған был балаға, ғүмерҙә лә әсәһенең яҙғандары менән улай ҡыҙыҡһынмай торғайнысы», – тип эстән генә уйланып алды ла ихатаға сығып китте.

Әсәһе мәктәптә уҡып ҡына йөрөгән саҡта яҙып алған легенда Илһамды боронғо быуаттарға алып китте:

«Элек башҡорттар, йәй еттеме, ырыу-ырыу булып, йәйләүҙән йәйләүгә күсеп йөрөгән. Шул заманда Ҡарағай ауылында Сәфәрбикә исемле бер һылыу ҡыҙ йәшәгән. Уның ҡулынан килмәгән эш булмаған, оҫталығы, эшкә уңған булыуы менән яҡын-тирәләге бөтә ырыуҙар араһында дан тотҡан. Ә мәргәнлеге яғынан ул хатта егеттәрҙән дә өҫтөн торған.

Сәфәрбикә йәшәгән өйҙән яусылар өҙөлмәгән, уны һоратып төрлө яҡтан килгәндәр. Ләкин атаһы Сәфәрбикәне ныҡ яратҡан һәм уны ҡыҙы үҙе һайлаған егеткә генә бирергә уйлаған. Ә Сәфәрбикә сирмеш ырыуынан бер егетте яратҡан. Ул Сәфәрбикәне үҙенә кәләшлеккә һоратып яусы ебәргәс, ҡыҙҙың атаһы риза булған. Ике ырыу кешеләре бергәләп ҙур туйға әҙерләнә башлаған, туйҙы йәй баштарында үткәрергә килешкәндәр.

Туй булаһы көн килеп еткәс, Сәфәрбикә ырыуы йәйләгән урман-тауҙар араһындағы матур бер сәхрә яланға егет яғынан бик күп ҡунаҡтар килеп төшкән. Ике яҡ та хәлле генә булғанлыҡтан, туй бер нисә көн дауам иткән.

Бер көндө Сәфәрбикәнең атаһы ике ырыу егеттәре араһында бәйге иғлан иткән. Мәргәнлек буйынса ярыш башланып, унда бик күп егеттәр үҙ оҫталыҡтарын күрһәткән. Шул саҡ яҡындағы бер ағас башына ҡарсыға килеп ҡунған. Уны күреп, Сәфәрбикә лә ярышта үҙ көсөн һынап ҡарарға атаһынан рөхсәт һораған. Атаһы рөхсәт иткәс, ул тиҙ генә уҡ-йәйәһен ҡулына алған.

– Ҡарсығаның ҡайһы еренә атып тейҙерәйем? – тип һораған ул.

– Булдыра алһаң, суҡышына тейҙер, – тип яуаплаған егеттәр.

Сәфәрбикә, йәйәһен киреп, уғын төҙәп тә тормайынса ҡошҡа ҡарап атып ебәргән, ҡарсыға ағас башынан әйләнеп килеп тә төшкән. Эргәһенә барып ҡараһалар, уҡтың ҡарсығаның суҡышына тейеүен күреп, бөтә кеше хайран ҡалған. Сәфәрбикәнең мәргәнлегенә һоҡланғандар, ҡурайсылар уны данлап көй сығарған... Ләкин Сәфәрбикәне электән күрә алмай йөрөгән оло еңгәһе, бөтә халыҡтың ҡыҙҙы маҡтауын, уға арнап йырҙар сығарыуын, уның һылыулығына, сослоғона һоҡланыуын күреп, көнсөллөгөнән үс алырға булған. Ул Сәфәрбикәгә ағыу һалынған ҡымыҙ эсергән. Бер нәмә лә уйламаған Сәфәрбикә ҡымыҙҙы тын да алмай эсеп тә бөткән, бөгөлөп тә төшкән һәм һис ни әйтә алмайынса йән биргән.

Сәфәрбикәнең ата-әсәһе, туғандары, һөйгән егете нык ҡайғырышҡандар, уны, күҙ тейеүҙән үлде, тип уйлағандар. Күңелле туй ҡара ҡайғыға әүерелгән. Сәфәрбикәне хөрмәтләп ялан уртаһына ерләгәндәр. Шул ваҡыттан бирле халыҡ был йәйләүҙе – Сәфәртуй яланы, уның ҡырынан аҡҡан йылғаны – Сәфәр йылғаһы, ә эргәләге тауҙы Сәфәрбикә тауы тип йөртә башлаған».

…Быуаттар төпкөлөнән килеп еткән был тарих Илһамдың хыялын уятып ебәрҙе. Ҡолағында боронғо ырыуҙаштарының һай-һайтлап мал-тыуар ҡыуғаны, йыйын майҙанында бәйгеләрҙә сапҡан ат тояҡтары тупылдауы, сибәр, сая Сәфәрбикәнең сәпкә төбәп атҡан уҡтарының һыҙғырыуы ишетелгәндәй булды.

Гәзит киҫәген кире урынына һалғанда, мәктәптә рәсем төшөрә торған альбомды күреп ҡалды. Уны асып ебәрһә, әсәһенең үҙе төшөргән һүрәттәре! Уның рәсем төшөрөү һәләте лә булған икән! Ә Илһам уны шиғырҙар, хикәйәләр ижад итеүгә маһир башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп кенә белә ине.

Уның уйҙарын тыштан килеп ингән өләсәһе бүлдерҙе:

– Әсәйеңдең һүрәттәрен ҡарайһыңмы ни? Һүрәт төшөрөүгә оҫта ине шул. Ана бит, ҡалай матур итеп төшөрөп ҡуйған тыуған яҡ тәбиғәтен! Олатаһы Сәлимгәрәйҙән күскәндер инде уға быңдай һәләт. Ул да һүрәт төшөрөргә оҫта булған, тип һөйләгәндәрен ишетә торғайным ололарҙан.

Илһам был минуттарҙа бер һүрәткә иғтибар менән ҡарап тора ине. Аҫтында «Сәфәртуй яланы» тигән яҙыуы ла бар. Де-жа-вю! Ҡапыл айырым-асыҡ булып егеттең күҙ алдына бала саҡтың матур бер көнө килеп баҫты.

Йәйге аяҙ көн. Улар әсәһе менән ихатала, йәшел сирәм өҫтөнә йәйелгән балаҫ өҫтөндә ултыралар. Уға ун йәштәр тирәһе булдымы икән, әсәһе Илһамға ошо һүрәтте күрһәтеп:

– Улым, ҡара әле. Быңа был һүрәттә – Сәфәртуй яланы. Ә ялан ситенән Сәфәр йылғаһы аға. Сәфәрбикә исемле сибәр, сая, мәргән ҡыҙ хөрмәтенә ошо яланға уның исемен ҡушҡандар. Һин үҫә төшкәс, беҙ ул яланға барырбыҙ әле. Һиңә ҡарт олатайыңдарҙың йәйләү урынын күрһәтермен, – тип һөйләгәйне.

Илһамдың ҡолағында уның ошо һүҙҙәре йылдар төпкөлөнән ҡаҡлығып яңғыраны, ә күҙҙәре һаман ҡулындағы һүрәткә ҡарай ине. Ниһайәт, нисә көндәр буйы мейеһендә сабыулап йөрөгән уй, аҫҡы аңында һаҡланған мәғлүмәти энергия ҡырынан ысҡынып китеп, хәтер киңлектәренә бәреп сыҡты…

«Быңа ни өсөн «Сәфәрбикә яланы» тигән һүҙбәйләнеш минең мейемдә уйҙар өйөрмәһе барлыҡҡа килтергән! Туҡта әле, Алесия, ҡарт олатайымдың «Сәфәрбикә яланы» тип исемләнгән һүрәте һаҡланған, тип яҙғайны бит. Стоп! Ошо урында уйлан!»

Егет, өйрәнелгән ғәҙәте буйынса, «мейе штурмы»на күсте: «Беҙҙең алда хәҙер нисә билдәһеҙҙән торған мәсьәлә ҡалҡып сыҡты инде? Ике билдәһеҙ дәүмәлле тигеҙләмәләр системаһы. Шулай итеп, беренсе тигеҙләмә: Икенсе донъя һуғышында пленға эләгеп, Италияға барып сыҡҡан Рәсәй һалдаты – бер. Уның ысын исеме билдәһеҙ, ләкин төрки милләтле булыуы ихтимал – ике. Был һалдат һуғышҡа алынғанда кескәй сабыйы менән кәләше ҡалған – өс. «Сәфәртуй яланы» тип аталған картинаһы һаҡланған – дүрт!

Икенсе тигеҙләмәгә күсәбеҙ. Бөйөк Ватан һуғышы башланған көндө үк яуға сапҡан ҡарт олатайым Сәлимгәрәй – бер. Ул 1942 йылда хәбәрһеҙ юғалған – ике. Уның бер йәше лә тулмаған улы һәм йәш кәләше тороп ҡалған – өс. Уның ата-бабаһының боронғо йәйләү ере, бесәнлеге булған Сәфәртуй яланы, ысынлап та, был донъяла бар – дүрт! Абсолют сиселеште табыр өсөн, Алесия менән бәйләнешкә кереп, уның ҡарт олатаһы төшөргән һүрәт күсермәһен һалыуын һорарға! Әгәр ҙә ул һалдат төшөргән һүрәт минең әсәйем төшөргән һүрәткә тап килһә, улар икеһе лә бер үк яланды төшөргәндәр икәне асыҡлана. Тимәк, улар араһында ниндәй бәйләнеш килеп сыға? Туғанлыҡ бәйләнеше! Мейебеҙгә, гендарыбыҙға һалынған йән тартылыуы, һәләттәр оҡшашлығы. Ҡан тартыуы!

Алесия менән беҙҙең туғанлыҡ иҫбат ителә! Юҡ, юҡ, ҡабаланырға ярамай. Тәүҙә шул һүрәттең күсермәһен алдырырға кәрәк».

Илһам, тиҙ генә тороп, юл сумкаһынан ноутбугын тартып сығарҙы, модемды тоташтыра һалып, компьютерын Интернетҡа көйләп ебәрҙе.

Әлдә Алесияны бәйләнештән юйып ташламаған. Онлайнмы икән? Ярай, бер кермәһә бер керер әле бәйләнешкә. Былай көн дә аралашып торалар ине бит әле.

***

22 июндең таңын аяҡ өҫтөндә ҡаршыланы Илһам. Иртән тороп, кистән яҡҡан мунсаға барып ҡойоноп сыҡты, өҫтөнә спорт костюмын кейеп алды. Өләсәһе уның былай иртән иртүк тороп, ҡайҙалыр йыйыныуын күреп, аптырап һорап ҡуйҙы:

– Әллә китер көнөң дә еттеме, балам? Ҡайҙа шулай иртәләнең?

– Борсолма, өләсәй. Төшкә тиклем бараһы ерҙәрем бар. Ҡайтыр юлға, Алла бирһә, төштән һуң сығырмын.

Киң яурынлы, мыҡты кәүҙәле ейәненә һөйөп тә, һоҡланып та ҡарап ҡалды ауылда ил инәһе дәрәжәһенә күтәрелгән сабыр йөрәкле, изге күңелле әбей. Унан тәрән көрһөнөп ҡуйҙы: «Йә, Хоҙайым, ҡыҙым менән кейәүемдең ни ғәйебе бар ине? Бынау баланы етем ҡалдырып, уларҙың үҙҙәрен ейән-ейәнсәрҙәрен һөйөүҙән мәхрүм иттең… Эй, һиңә үпкәләп, гонаһлы булып та булмай. Күктә лә минең балаларым кеүек изге йәндәр кәрәктер инде…»

Был ваҡытта Илһам, картуф баҡсаһы аша тура ғына сығып, туғай аша Иҫкутар битләүенә табан атланы. Уның һул яҡ битләүендә, урманға керә торған юл буйлап, ауыл зыяраты урынлашҡан.

Иҫке утар урыны… Уң яҡ битләүендәге ҡарағайлыҡтан һалҡын шишмә ағып сыға. Башланған урыны һаҙамыҡ ҡына ер булһа ла, артабан түбәндәге ваҡ ҡырсынташтарға бәрелә-һуғыла аҡҡан тау йылғаһына әүерелә был шишмә. Ҡарағайлыҡтан башланғанғалыр инде, кешеләр уны Ҡарағай йылғаһы тип атаған. Бик боронғо замандарҙа уҡ халыҡ Иҫке утарҙы ташлап, йылға түбәненә, ул Рәүҙәк менән ҡушылған ергә күскән, яңы ауылға нигеҙ һалған. Рәүҙәк инеше буйына урынлашҡан яңы ауылды Ҡарағай тип йөрөтөп алған да киткәндәр.

...Иҫкутар битләүенә күтәрелгәс, Илһам туп-тура ауыл зыяратына табан юл тотто. Зыярат ҡапҡаһын асып керер алдынан башына түбәтәйен кейеп алды. Иртән генә тәһәрәтләнгәйне, кәрәкле доғаларҙы ла ысын күңелдән уҡый аласаҡ.

Бына егет ғәзиз кешеләре – шәжәрәһендә күрһәтелгән ун бер быуын ата-бабалары ятҡан изге тупраҡҡа аяҡ баҫты. Бөтәһе лә уға әйләнеп ҡайта бит! Йәштән үк ситкә сығып киткән ата-әсәһе лә үҙҙәренең һуңғы төйәктәрен бына ошо ике ҡәберҙә тапҡан… Илһам, ҡиблаға йөҙөн бороп, уларҙың ҡәберҙәре янына тубыҡланып ултырҙы. Бөтә әруахтарҙың рухына бағышлап доға ҡылғандан һуң, түш кеҫәһенән дүрткә бөкләнгән ҡағыҙ битен сығарҙы. Был – ете диңгеҙ, ете тау артындағы алыҫ Италия тарафтарынан электрон почта менән кисә генә ебәрелгән һүрәт-күсермә ине. 70 йылға яҡын ваҡыт үтһә лә, һүрәт яҡшы һаҡланған, бер мөйөшө лә йыртылмаған, төҫө лә уңмаған.

«Әсәкәйем! Һин бала саҡтан уҡ Сәфәртуй яланын яҡын күргәнһең, уның тураһында шиғырҙар яҙғанһың, легендаһын гәзиттә баҫтырып сығарғанһың, һүрәтен төшөргәнһең. Сәлимә тигән матур исемде йөрөтһәң дә, нишләптер Сәфәрбикә исемен алырға хыялланғанһың.

Сәлимгәрәй олатай ҙа сит яҡтарҙа ҡаңғырып йөрөгән саҡтарында үҙенең ғәзиз төйәген йоҡоһоҙ төндәрҙә өҙөлөп һағынғандыр, Сәфәртуй яланына бер генә минутҡа булһа ла аяҡ баҫырға, ҡәҙерле кешеләренең күҙҙәренә бер генә тапҡыр тултырып ҡарарға хыялланғандыр. Йөрәккәйе янып, һағыштарынан үҙенә урын таба алмай алҡымынан алған был тойғолар уны ҡулына ҡылҡәләм алырға мәжбүр иткәндер… Бына – һинең ғәзиз олатайың Сәлимгәрәй сит яҡтарҙа зар-интизар булып, һарыларға һабышып һағынғанда төшөргән һүрәттең күсермәһе».

Илһам, һүрәтте ике ҡулына тотоп, йәйеп ебәрҙе:

– Күрәһеңме, әсәйем? Икегеҙҙең дә һүрәтендә бер үк пейзаж: болоттарға ашып торған ҡаялы тауҙар араһында сәхрә... Сәфәртуй яланы. Ә был мөйөштә – башы яңы ғына сабып алынған йәшел үлән менән ҡапланған ҡыуыш. Ҡыуыш янында ғына үҫкән ҡайындың аҫҡы йыуан ботағына сәңгелдәк эленгән. Сәңгелдәк янында зифа буйлы йәш һылыу ҡатын тора. Ул талпынып-талпынып сәңгелдәк бәүетә. Ә үҙе, башын бороп, ялан уртаһында кирелеп бесән сапҡан мыҡты кәүҙәле йәш бер ир-егеткә ҡарай. Ниндәй һоҡланғыс картина! Ә тәбиғәттең гүзәллеген әйтеп тораһы ла түгел. Йыраҡ түгел бейек бер ҡая ағарып күренә. Уның түбәһендә ыласындар шыҡайып оса…

Илһам, күҙҙәренә йәш тығылып, берсә ҡәбергә, берсә салт аяҙ күккә баҡты. Һүрәттең аҫтына латинса хәрефтәр менән «Сәфәртуй яланы» тип яҙылғайны. Һүрәттең артында тоноҡлана төшкән яҙыу ҙа ҡарт олатайҙыҡы: «Сәфәрбикә йәйләүендә Ыласынташ».

Ошо һүрәтте ебәргәндә Алесия: «Бузкурд! Һинең социаль селтәрҙәге битеңдә фотоһүрәттәрҙе ҡарамаған булһам, шундағы бер фотография аҫтындағы яҙыу минең иғтибарымды йәлеп итмәгән булһа, ошолай аралашып та ултырмаҫ инек. Бөтөнләй сит-ят кешеләр бит беҙ. Миллиард кеше араһынан шулай танышып китеүе ҡыҙыҡ, эйе бит? O tempora, o mores!

Ә инде «Ыласынташ» – бала саҡтан ҡарт олатайҙың һүрәтендә күреп үҫкән серле яңғырашлы һүҙ булған…» – тип яҙып ҡуйғайны.

Илһам һүрәтте тәҫләп кенә кире түш кеҫәһенә һалды ла, зыяраттан сығып, түтә юлға төштө. Арҡаһына аҫҡан юл сумкаһын рәтләп ҡуйҙы, ни тиһәң дә, ҡара урман эсенән атлап, Биктәр тауын ике артылып, 15 саҡрым тирәһе атлайһы бар бит. Ҡапҡылап алырға ла кәрәк булыр тип, бөтәһен дә кистән үк хәстәрләп ҡуйғайны.

Сәфәртуй яланын күргәне юҡ ине уның. Ошо ауылда бала сағының, йәшлек йылдарының күп өлөшөн үткәрһә лә, әллә нишләп юл төшмәгән.

Ят, һалҡын урман уны һиҙҙермәй генә үҙенә йотто. Урман эсенә ингән һайын, ағастар өҫкә ауып килгәндәй тойолдо, урыны-урыны менән йөҙйәшәр ағастар сереп юлға арҡыры йығылғандар, түтә юл беленер-беленмәҫ кенә булып ҡалған шырлыҡ урындар ҙа осраны.

Шулай көс-хәл менән бер нисә сәғәт атлағас, Илһам ҡапыл асыҡлыҡҡа килеп сыҡты. Ҡараңғылыҡҡа өйрәнгән күҙҙәре бындағы яҡтылыҡтан, сағыу ҡояш нурҙарынан сағылып, бер нисә секунд бер нәмә лә күрмәй торҙо. Күҙҙәре яҡтылыҡҡа өйрәнеп, алда ятҡан асыҡлыҡҡа күҙ ташлағас, ул хайран ҡалыуынан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне! Ошондай ҡотһоҙ шыр урман эсендә лә ҡояшлы, береһенән-береһе матур сәскәләргә күмелгән гүзәл сәхрә ялан булыр икән!

Мең төрлө сәскә-үләндәр өҫтөндә мең төрлө ҡош һайрай, уларҙың моңло көйө ыңғайына күбәләктәр талпынып оса. Оҙаҡ ҡарап торҙо ошо гүзәллеккә Илһам,

яландың ҡайһы яғына атларға белмәне. Ата-бабаһы йәйләү урынын һайлай белгән шул! Юҡҡа ғынамы ни ҡарт олатабыҙ Сәлимгәрәйҙе лә ошо йәйләү, ата-бабаларҙың боронғо төйәге, магниттай тартҡандыр, ашҡындырып та, һыҙландырып та гел үҙенә саҡырғандыр, күңелен елкендергәндер?

Карта буйынса йүнәлеш алып өйрәнгән элекке спецназсы булараҡ, Илһам тиҙ генә түш кеҫәһенән олатаһының һүрәт күсермәһен сығарып, урынды билдәләне: «Әһә, бына бында ҡарт ҡайын ултыра. Олатай төшөргән ҡайынмы икән, әллә инде ошо оҙон йылдар араһында уның урынына икенсеһе үҫеп өлгөргәнме? Ана, Ыласынташ ҡаяһы ағарып күренә. Яландың аҫҡы яҡ битләүенән тау йылғаһы Сәфәр сылтырап аға. Шул тирәлә урынлашҡан булған бит һүрәттә күрһәтелгән ҡыуыш».

Егет яландың шул яҡ битләүенә йүгереп төшөп китте. Ҡарт ҡайын янына килеп баҫҡас, Сәфәр йылғаһына табан һуҙылған беленер-беленмәҫ кенә һуҡмаҡты шәйләне. Хуш еҫ бөркөп ултырған сәскәле үләндәрҙе йырып, һуҡмаҡ буйлап йылға буйына төштө. Бәләкәй генә тау йылғаһы, үҙенең мәңгелек йырын көйләп, көмөш һыуҙары менән төбөндәге ваҡ ҡырсынташтарҙы шымартып, үҙе генә белгән юл менән билдәһеҙ тарафтарға ынтыла.

«Ҡайҙа барып ҡушыла икән был йылға? Ҡарағайғамы, әллә Рәүҙәккәме? Әллә бөтөнләй икенсе тарафтарға китеп, беҙ белмәгән берәй тау ҡыуышына инеп юғаламы?» – тип уйлап ҡуйҙы Илһам.

Юлда һыуһап килгән икән, йотлоғоп-йотлоғоп һалҡын шишмәнең тәмле һыуын эсте, бит-ҡулдарын йыуып алды. Унан ҡарт ҡайын янына күтәрелеп, Сәфәртуй яланына оҙаҡ ҡына ҡарап ултырҙы.

«Бөгөн июндең егерме икеһе. Бынан теүәл етмеш йыл элек, 1941 йылда, ошо яланда ҡарт олатайым менән ҡарт өләсәйем ҡыуыш ҡороп, ҡуна ятып бесән эшләгәндәр. Олатайым бынау ҡайын ботағына эленгән сәңгелдәктә тирбәлгән. Мин уларҙың аяҡ эҙҙәрен һаҡлаған ғәзиз тупраҡ өҫтөндә баҫып торам. Бихисап дәүерҙәр, борон-борон замандар буйы боронғо юрматы башҡорттары йәшәгән, хәләл тирен, ал ҡанын түккән ер битендә... Алдымда өнһөҙ ҙә, ғорур ҙа Урал ҡаялары теҙелеп киткән. Ҡайҙа, ҡайһы тәңгәлдә һуң ҡарт олатамдың һуңғы тапҡыр салғыһын һелтәп, ҡолас ташлап бесән сапҡан урыны? Ниҙәр уйлап, ниҙәр кисерҙе икән ул һуғышҡа алынырын белеп, ат эйәрләп ауылға сапҡан минуттарында? Йәш кәләшен, имсәк балаһын ошо яланда билдәһеҙлек ҡосағына ташлап киткәненә әсендеме, әллә тыуған еремдең һәр ташы, һәр ағасы уларға күҙ-ҡолаҡ булыр, яҙмыштың ҡырыҫ елдәренән һаҡлап торор, тигән өмөттә булдымы?

Кем уйлаған... Һуғыштың иң ауыр мәлдәрендә утлы яуға кереп, концлагерь ғазаптарын кисереп, бихисап илдәр гиҙеп, иҫәпһеҙ-һанһыҙ ер-һыу күреп, ярты донъяны айҡап сыҡһа ла, Италия тарафтарына етеп, аяҡтарын уның диңгеҙҙәрендә йыуып йөрөһә лә, ул барыбер һине һағынған, йөрәк түрендә һинең иҫ киткес гүзәл күренешеңде һаҡлап йөрөткән, Сәфәртуй яланы! Барыбер һиндә башланып, һиндә килеп осланып ҡуйғандыр уның ғүмер юлы: анау өҙөлөп-өҙөлөп һайраған ҡошсоҡҡа күскәндер уның ғәзиз йәнгенәһе, йыл да йәй башында тыуған яҡтарына ҡайтып, ошо Сәфәртуй яланын төйәк итәлер...

Ә һин иҫләйһеңме уны, Сәфәртуй яланы? Ниндәй улың, ниндәй затың ине ул? Һинең һыуҙарыңды эсеп, һинең үләндәреңде тәмләп үҫкән. Һинең күктәреңдә емелдәгән йондоҙҙарға ҡарап, яҙмыш юрағандыр, улар атылғанда, үҙенә бәхет теләгәндер...

Нишләп, ҡайһылай ул Италияға барып юлыҡҡан? Ниңә яҡындарына «Мин хәбәрһеҙ юғалманым, мин иҫән!» тип ҡош телендәй булһа ла хәбәр ебәрмәгән, ниңә ҡайтып әйләнмәгән? Әллә ғәзиздәрен ныҡ ятатҡанға, уларҙы Сталин афәттәренән шулай ҡурсалағанмы? Уны аңлай, кисерә алырһыңмы һуң, Сәфәртуй яланы?!»

Ялан өнһөҙ... Уның өҫтөнән генә йөҙгән аҡ болоттар ҡайҙалыр алыҫҡа, көнбайыш тарафтарына, юллана. Уларҙың кеше яҙмыштарында эше юҡ. Был донъя ғәмдәренә иҫтәре лә китмәй. Бәлки, ошо ялан өҫтөнән күтәрелгән һыу парҙарын үҙҙәре менән алып китеп, йыраҡ-йыраҡтағы Италияла ямғыр булып яуаларҙыр...

Илһам ергә йөҙтүбән ҡапланды, күҙ йәштәре алҡымына килеп тығылды, илап ебәрмәҫ өсөн, үлән һабаҡтарын тешләп, ирендәрен ҡымтыны... Күҙ алдына, һуғышҡа алынған ире ауыл яғына һыбай сапҡас, яңы сабылған үлән өҫтөндә тәгәрәп-тәгәрәп, һамаҡлап-һамаҡлап, ер тырнап илаған ҡарт өләсәһе килде. Ауыҙындағы үләндән уның күҙ йәштәренең тоҙло тәме килгәндәй тойолдо...

Ул юл сумкаһынан сапер көрәген килтереп сығарҙы ла үҙе ултырған ҡарт ҡайын төбөндә ашығып-ашығып соҡор ҡаҙый башланы. Соҡорҙо бер сама тәрәнәйткәс, түш кеҫәһенән ҡарт олатаһы төшөргән һүрәт күсермәһен алып, соҡор төбөнә тәҫләп һалды. Өҫтөнә ҡара тупраҡты өйөп, бәләкәй генә ҡәбер яһаны, уны ялан сәскәләре менән биҙәне. Ҡәбер әҙер булғас, үҙе белгән йыназа йолаларын еренә еткереп башҡарғандан һуң, ҡайтыр юлға – урман ауыҙына табан атланы.

Урман шырлығына кире кереп китер алдынан, бер мәлгә туҡтап, артына әйләнеп ҡараны.

«Бәхил бул, йыраҡтағы яҡын кешем! Тәнең сит тарафтарҙа ятып серепһә лә, йәнең барыбер үҙ төйәген – Сәфәртуй яланын килеп тапты... Быныһы – иң мөһиме. Шуныһы үкенесле: Италияла таралған тамырҙарың был яланды бер ҡасан да күрмәйәсәк. Ете ят әҙәмдәр ҡарт өләсәмдең ҡайнар күҙ йәштәре тамған бынау сәхрә яланды тапап йөрөмәйәсәк... Бүләсәрең Алесия ла виртуаль донъяла үҙенең яҡындан-яҡын туғанына килеп юлығыуын бер ҡасан да белмәйәсәк...

Үпкәләмә, олатай, мин шулай хәл иттем. Компьютерҙағы бер нөктәгә генә баҫһаң, бөтә бәйләнештәр юҡҡа сыға: ете миллиард халыҡ йәшәгән Ер шарын уратып алған Интернет селтәрҙәрендә әле генә аралашып ултырған кешең мәңгелек билдәһеҙлеккә инеп юғала. Алесия өсөн мин дә шулай осраҡлы виртуаль таныш булып ҡына ҡалырмын. Аңлайһыңмы, олатай, шулай кәрәк!

«Рәсәйҙә ҡарт олатайымдың ошо яланын тапһам, уны һатып алыр инем. Хәҙер шундай заман бит: хатта Айҙа ла үҙ биләмәләрен булдыралар», – тип хыялланған итальян ҡыҙы минең өсөн ят бауыр булып сыҡты. Йөрәк түрендә юрматы ырыуының сая ҡыҙы Сәфәрбикә рухын йөрөтмәгән, был яланды әсәйем кеүек яратмаған кеше донъяның ошо гүзәл мөйөшөндә Сәфәртуй яланы барлығын белергә лә тейеш түгел!»

Сәфәртуй яланына һуңғы тапҡыр күҙҙәрен талдырғансы ҡараны ла ҡара урман шырлығына инеп юғалды Илһам...

Мәхмүт
ХУЖИН

ЯТТАР МӨҺӨРӨ
ХИКӘЙӘ

Йәшел «Жигули» сираттағы боролманы үтеү менән, уң яҡлап бейек кенә ҡалҡыулыҡтар теҙмәһе күҙгә салынды. Ямғыр был яҡта мул яуған, күрәһең: ҡалҡыулыҡтар битләп үҫкән һарғылт-йәшел ҡылған шул тиклем ҡуйы, алыҫтан уҡ күҙгә ташланып, иртәнге талғын елдә диңгеҙ тулҡындарына оҡшап китә. Офоҡта улар зәңгәр күк менән ҡушылып, ғәжәйеп дәрәжәлә һоҡланғыс пейзаж барлыҡҡа килтерә. Тәбиғи матурлыҡты күрә-тоя белгән күңел өсөн шундайын сихри күренеш, – моғайын, уны сәғәттәр буйы күҙәтеүҙән дә ялҡмаҫһың. Талғын ел йәйҙең тиҫтәләрсә, бәлки, йөҙҙәрсәлер үҙенә генә хас төҫ-еҫкә бай энергияһын ошо ҡылғанлы ҡалҡыулыҡ аша ҡайҙалыр йыраҡтарға алып китә. Ә бит быңдай ҡабатланмаҫ иртәләр йәйҙәрен генә була. Ғүмер иртәһе кеүек.

Машинаның артҡы ултырғысында килгән ҡуйы сал сәсле, шулай уҡ шырт һаҡал-мыйыҡлы юлаусы ян тәҙрәне төшөрҙө лә, иң ҡәҙерле нәмәһен күргәндәй, тирә-йүнде ҡомһоҙланып күҙәтергә кереште. Бит-йөҙөндәге ниндәйҙер нескә мускулдар хәрәкәткә килеп, әллә ниндәй таныш булмаған тойғолар күңел төпкөлөндәге ҡылдарҙы сирткәндәй итте. Мәрткә киткәндәй тойолған хәтер, әйтерһең дә, уянды, көсөргәнеп, инде тамам онотолған бала саҡ, ҡыҫҡа ғына йәшлек йылдарының айырым мәлдәрен күҙ алдына баҫтырҙы. Эйе, ҡасандыр анау ҡалҡыулыҡ битендә ул, әле үҫмер малай, өләсәһе менән ауыл көтөүендә йөрөгәйне. Тағы ла арыраҡ тауға ҡышын иптәштәре менән сана шыуырға килә торғайнылар.

– Абзый, ошонда төшәһеңме, әллә өйөңә хәтле алып барайыммы? – Уны район үҙәгенән Ереклегә илтергә ялланған «Жигули» хужаһының һүҙ ҡушыуы юлаусының хәтер ебен өҙҙө.

– Әйҙә, ауылға алып төш инде. – Юлаусы өҫ-башын төҙәткеләне, оло сумкаһының тотҡаһына ҡағылып алған булды. – Күтәренеп йөрөү килешмәҫ, йәшелкенсәк түгелмен бит.

Мәхмүт Хужин (1953) — публицист, проза жанрына ла ныҡлап тотонмаҡсы. Ҡәләмдәшебеҙ — бер китап авторы.

Ерекле үҙгәргән. Бала саҡтан таныш юлдан түгел, бәлки, самолетта килеп төшһә, юлаусы уны тыуған төйәге тип ҡабул итмәç тә ине. Ауыл осонда, элек колхоз сәсеүлеге булған ерҙә, техника мастерскойы төҙөп ултыртҡандар. Уның бер яҡ ситендә ике-өс трактор һөлдәһе, сәскесме, тағы әллә нәмәләр күренә. Былар, моғайын, ҡасандыр гөрләп торған колхоздың һуңғы өнһөҙ шаһиттарылыр. Ҡасандыр ул белем алған мәктәп урынында уратып ултыртылған ағастар ғына тороп ҡалып, уларҙың да байтағы, эйәһеҙ мал ҡазаға тарығандай, ҡороған. Илле метрҙай арыраҡ ҙур кирбес бина үҙен ауылдағы берҙән-бер заман ҡаҙанышы икәнен тойоп, ҡуҡырайып ултыра. Моғайын, клубтыр, бер ҙә мәктәп булырға оҡшамаған.

Уң яҡлап ерекләләр Һырт тип йөрөткән тәпәш кенә ҡалҡыулыҡтар теҙмәһе аҫтында теҙелеп киткән өйҙәр яңы урам хасил иткән. Күбеһе яңы һәм ҙур ғына, тимәк, бында йәштәр йәки йәшерәктәр донъя көтә. Ерән сәсле, зәңгәр күҙле, тәү ҡарашҡа йылғыр һәм уҫал ғына тойолған «Жигули» хужаһы бында беренсе тапҡыр килмәй, ахырыһы, һорау биреп торманы, машинаһын оло урам буйлап алып китте. Төш яҡынлауға ҡарамаҫтан, тирә-йүн һил, әҙәм заты күренмәй.

Ҡасан түшәлгәне билдәһеҙ, унда-һанда һыйыр тиҙәктәре аунап ятҡан асфальт юл, буялған һәм буяуһыҙ, өф итеп тотолған йәки күптән тәрбиә күрмәгән ҡапҡа-ҡоймалы өйҙәр. Ҡайһылары – кирбес, ҡарағай, уҫаҡтан һалынғандары, яңыраҡтары, иҫкерә төшкәндәре. Һәр ҡайһыһы был ихатала ниндәйерәк ҡуллы хужа донъя көткәненә ишара яһап, йә күркәмлегенән маһайып, йә меҫкенлегенән бөршәйеп торғандай. Ләкин уларҙың береһен, хатта иң иҫкеләрен дә юлаусы күргәндәй итмәне. Әлбиттә, Ерекле үҙгәргән, ваҡыт тамғаһы, бер яҡтан, ауылдың ҡартайыуын раҫлап, ҡасандыр бала-саға гөж килеп йөрөгән һил урамдарында сағылыш тапһа, ҡоролош яңырыуын ярайһы хәлле ихаталар менән бергә бөлгөнлөккә төшкән, нигеҙе ергә һеңеп бөткән өйҙәр кәүҙәләндерә.

Урамдың арғы осона етәрәк пассажир машинаны туҡтатты. Уйлауынса, ҡайтып еткәйне ул. Водитель йөҙлөктө бер һүҙһеҙ кеҫәһенә һалды ла:

– Абзый, китергә булһаң, үҙемә звонить ит! – тип ҡағыҙ киҫәгенә телефон номерын яҙып бирҙе. – Һә тигәнсе килеп алырмын.

Юлаусы сырамытып төшөп ҡалған өй элекке күршеләре Хөсәйеновтарҙыҡы булырға тейеш ине. Ә ул тыуып үҫкән нигеҙҙе ун-ун биш йылдар элек күтәрелгән ҙур ғына кирбес йорт биләгән. Уның да яңы түгеллеген мосафир ҡоймаларының йәшел буяуы ҡуба башлауға ҡарап билдәләне. Ҡойма аша үрелә биреп, ул үҙенең бала саҡ эҙҙәрен һаҡлаған, һуңғы осорҙа төштәренә инеп яфалаған ихатаға күҙ ташламай булдыра алманы. «Анау ерҙә ситән аҙбар бар ине. Анда биш-алты тауыҡ, ике-өс кәзә тора торғайны». Һыйыр аҫраманылар, сөнки уны һауырға ғына түгел, тәрбиәләргә лә кәрәк бит. Өләсәһенең хәле самалы булғандыр инде.

Хөсәйеновтарҙың 50-се йылдар уртаһында һалынған бер ҡасан да иҫкермәҫтәй-бирешмәҫтәй тойолған алты мөйөшлө ҡәлғәләй ҡарағай йортона ла, нигеҙен ергә нығыраҡ һеңдерә биреп, йылдар үҙенең шәфҡәтһеҙ мөһөрөн һуҡҡан, хатта йыуан бүрәнәләр ҙә нәҙегәйгәндәй күренә. Ә эске ихатаға эске яҡлап ултыртылған тирәк, киреһенсә, әҙәм йыуанлығы булып олпатланып, унан төшкән күләгә ике-өс өй аша әллә ҡайҙа китеп юғала. Ҡыҙыҡ, бөгөн бында кемдәр донъя көтә икән?

Оло сумкаһын күтәреп, ҡунаҡ ҡыйыр-ҡыймаҫ аҙымдар менән ҡапҡаға ыңғайланы. Өй һәм ихатаның тәрбиәле икәнлеге һәр урында күҙгә ташлана: тырмалған, һеперелгән, буялған. Күпереп үҫкән үлән ихатаны тағы ла йәмләй төшә. Ҡояш яҡ болдорҙа оло йәштәге ҡатын нимәлер бәйләп ултыра ине. Йылы көн

булыуға ҡарамаҫтан, йөн ойоҡ, һырма кейеп, йылы яулыҡ ябынған хужабикәне йылдар элекке сибәрлеген алып китеп, ҡарсыҡҡа әүерелдерһә лә, юлаусы тиҙ таныны: Ғәбделхәй ағайҙың ҡатыны Тәнзилә еңгәй. Ереклегә уны Ғәбделхәй ағай ҡайһылыр төньяҡ райондарҙа урман киҫеп йөрөгәндә күҙләп алып ҡайтҡан, тигәйнеләр. Һыу һөлөгө кеүек ине йәш еңгәй, теле лә ауылдыҡыса түгел, әллә татар, әллә сыуаш. Эшсәнлеген дә күрһәтте йәш килен, дөрөп донъя көттө лә китте. Фермала һыйыр һауыу өҫтөнә, бер-бер артлы биш бала: өс ул менән ике ҡыҙ тапты. Күршеләренә лә ипле, йылы һүҙле, ярҙамсыл булды.

Ят кешенең ихатаға уҡ килеп инеүе хужабикәне бер аҙ ҡаушатты, ахырыһы, ниҙер әйтергә теләп, ирен ситтәре ҡалтырап ҡуйҙы. Ләкин өндәшмәне, күрәһең, ят кешенең һүҙ башлауын көттө.

– Шәпмеһегеҙ? – Юлаусы, ауылдағы ғәҙәт буйынса, күрешергә ике ҡулын һуҙҙы. – Тәнзилә еңгә, әллә танымайһың инде? Был мин, Кәбир бит.

– Кем тинең? – Ҡарсыҡ, ауыҙын ябырға онотоп, ҡунаҡҡа текләне. Уның тәрән йыйырсыҡтар телгеләгән бит-маңлайындағы һырҙар берсә юйылды, берсә тәрәнәйҙе. – Ҡайһы Кәбир?

Таный алмай, күрәһең, хәтере насарҙыр. Шул саҡ юлаусы һаҡал-мыйығын иҫенә төшөрөп, ғәйепле йылмайҙы. Ауылда улай йөрөгән кеше юҡтыр, моғайын, ошо ҡиәфәте менән ҡарсыҡтың күңеленә шом һалғандыр.

– Һеҙҙең күрше Кәбир. – Ҡунаҡ үҙе үҫкән ихатаға ымлап, яғымлы йылмайҙы. – Гөлбикә әбейҙең внугы.

– Атаҡ-атаҡ! Бүтән ерҙә күрһәм, был һаҡалтай беҙҙең ауылда нишәп йөрөй икән, тип аптырар инем. – Хужабикә йөҙөнә ауыртыныу билдәләре сығарып, ойоп киткән билен яҙа биреберәк ҡалҡынды. – Эй, Кәбир ҡәйнешкәйем, армияға тип киттең дә сәпсим юғалдың бит.

– Шулай булды шул, еңгә. – Ҡунаҡ, еңелсә шелтәләүҙәрен һиҙенеп, уңайһыҙланды. Тулҡынланыуын белдермәҫкә тырышып, тәмәке ҡапҡан булды ла кире ҡабына һалды, сөнки ул арала еңгәйҙең йөҙөнә ризаһыҙлыҡ ғәләмәте ҡалҡып өлгөрҙө.

– Өйгә инәйек, ҡәйнеш! – Ауырыу аяҡтарын һыҙлана-һыҙлана шылдырып, хужабикә солан ишеген асты. – Һыуһап-асығып килгәнһеңдер, сәй эсеп алырбыҙ.

Һыуытҡыс, иҫке телевизор, тағы әллә ниндәй хужалыҡ кәрәк-яраҡтары торған ярым ҡараңғы иркен солан аша өйгә үттеләр. Унда ярайһы һалҡынса булып, икмәк, бәрәңге, май кеүек тәмле еҫтәр таралғайны. Үҙенең бала сағына ҡайтҡандай булды Кәбир, йөрәге һулҡылдап ҡуйҙы, күңелен ҡапыл килеп тулған нескә хистәр биләп алды. Күршеләренең өй эсен яҡшы хәтерләй: түрҙә – оҙон һике, уң яҡта – оло һандыҡ, һул яҡлап ҡулдан эшләнгән оҙон ғына өҫтәл була торғайны. Һикене һүтеп алғандар, унда шифоньер, сервант, төҫлө телевизор кеүек заман ихтыяжына әүерелгән әйберҙәр урын алған. Иркен диван, ағас карауат та күренә. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, хужабикә өйөн таҙа, йыйыштырыулы тота икән, буялған иҙәне лә ялтырап ята. Уң яҡлап – икенсе бүлмә, әммә элек уның ишеге булмай торғайны. Уны һары ҡорған менән биҙәгәндәр.

– Үҙең генә тораһыңмы әллә, апай? – Сумкаһын диван ҡырына урынлаштырып, Кәбир бер яҡ ситтән урын алды.

– Юҡ, Әҡсән улым белән торабыҙ. – Хужабикә сәйнүккә һыу ағыҙып, газ плитәһенә ҡуйҙы, ут тоҡандырҙы. – Бәләкәй улыбыҙҙы хәтерләйһеңдер әле?

– Тиктормаҫ Әҡсәндеме ни? Хәтерләйем, еңгәй. – Ҡунаҡ стеналағы фотоһүрәттәр ҡуйылған рамды күреп, ҡаршыһына килеп баҫты. Хөсәйеновтар һәм башҡаларҙың төрлө йылдарҙа төшкән фотолары байтаҡ икән. Ләкин күбеһе таныш түгел. – Өйләнгәндер инде Әҡсән? Балалары күпме?

– Берәү ҙә юҡ! – Ҡарсыҡ, ҡулын таҫтымалға һөртә-һөртә, ҡунағы янына килеп ултырҙы, уфтанды. – Юҡ аның симъяһы. Ҡартайып бөттө инде, тәки өйләнмәй. Ҡартайған көнөмдә килен рәхәтен күрергә яҙмаған, бөтәһенә лә кәкерәйеп үҙем йөрөйөм. Димләп тә ҡаранылар, юҡ тигәс юҡ инде, – тип йәне көйөп теҙеп китте хужабикә.

– Ә Әхтәм? – тип һаҡ ҡына бүлдерҙе ҡунаҡ, йәштәшен иҫенә төшөрөп.

– Шул ҡалаһында инде. Мәктәпте бөткәс киткәйне бит. – Апайҙың тел төбөнән оло улынан да ҡәнәғәт түгеллеге һиҙелде. Бәлки, Кәбиргә генә шулай тойолғандыр.

Сәй артында ҡунаҡ элекке күршеһенең донъяуи хәлен ныҡлап белеште. Ғәбделхәй ағай ун йылдар элек яман шештән гүр эйәһе булып ҡуйған. Әҡсәндән олораҡ Әхмәте Себерҙә төпләнеп ҡалған. Йәй һайын, ғаиләһен машинаһына тейәп, ял итергә ауылға ҡайта икән. Моңһоу күҙле, ҙур башлы был малай аҙ һөйләп, күберәк шымып йөрөй торғайны. Атаһы, улының башына төрттөрөптөр инде, «был малай академик булыр, ахырыһы» тигәне әле лә хәтерендә Кәбирҙең. Тимәк, уҡымаған, ә шулай ҙа, аҡсалы һөнәр һайлап, яңылышмаған. Кемгә әлегә әле бөгөн төшөмлө урын? Әле Тәнзилә еңгәйҙең Себер ҡунаҡтарын күтөбөрәк йөрөүе, имеш.

Ҡыҙҙары – улар Хөсәйеновтарҙың икәү – үҙ иштәре кеүек, ҡалаға китеп донъя ҡорған. Әсәләрен ай-ике айға бер ҡайтып күреп, донъяһын таҙартып, йыуаһын йыуып китәләр икән. Ҡыҙҙарҙың олоһона – теремек һәм алсаҡ Минзәләгә Кәбирҙең үҫмер сағында күҙе төшөп тә йөрөгәйне. Романтика ғына булған икән, тиҙ онотолдо. Ҡыҙҙарына рәхмәтле хужабикә, тик кейәүҙәре генә эсергә ярата икән.

– Үҙең бик йыраҡларҙа йөрөнөң шикелле. – Ҡунағына сәй яһай-яһай, хужабикә һүҙ юҫығын уға күсерҙе. – Нишәп бер ҙә ҡайтаһы итмәнең?

– Ҡайтып булманы шул, еңгәй. – Кәбир ҡарашын ситкә алды. Бала саҡ тәьҫораттарымы, әллә ташлап киткән өләсәһе алдындағы ғүмерлек ғәйебен тойоу хистәреме тамам баҫып алғайны уны. Быға тиклем бер ҙә иҫләп ҡарамаған үкенесме, әллә оялыумы тойғоһо көсәйгәндән-көсәйеп, ҡунаҡ үҙен енәйәт өҫтөндә тотолғандай хис итте. – Яҡын ер түгел бит.

Камчатка крайында хеҙмәт иткәндә тәү тапҡыр диңгеҙ күреп, уға ғашиҡ булыуы һәм хеҙмәте тамамланыу менән иптәштәренә эйәреп диңгеҙ пароходствоһына эшкә урынлашыуы, айҙар буйы диңгеҙ гиҙеп, төрлө илдәрҙә булыуы хаҡында ҡыҫҡаса ғына һөйләп бирҙе ул.

– Ауылыңды диңгеҙгә алыштырғанһың икән. – Көтмәгәндә Тәнзилә еңгәй шундай һығымта яһап ҡуйҙы. – Тыуған ер бер була бит, ҡәйнеш.

Ауыл ҡатынының ошондай кинәйәле фәлсәфәһе Кәбирҙе аптыратты. Ни әйтергә белмәй:

– Отпускыла ҡайтыр инең, ярты ял юлда үтә. Поезд менән оҙаҡ ҡайтыла бит, – тип аҡланып маташты. – Анан, йәш саҡта ауыл иҫкә төшөп бармай шул, еңгә.

Хужабикәнең ҡунағына әйтер һүҙе был ғына булмаған икән.

– Үлер алдынан, меҫкенкәй, гел һине һөйләне, – тип һүҙҙе Гөлбикә ҡарсыҡҡа күсерҙе. – Йөрөй алғанда астануфкаға тиклем барып урай торғайны. Аптырағандандыр инде, ҡайтҡан булһаң, астануфкала ғына тормайһың бит инде. – Һуңғы һүҙҙәрҙе әйткәндә, хужабикәнең тауышы ҡалтырап, күҙҙәренән йәштәр күренде.

Ҡапыл килеп ябырылған ауыр кисерештәренән һыҡтап ебәрерҙәй булған ҡунаҡ башын аҫҡа эйеп, бер килке өнһөҙ ултырҙы. Өләсәй! Ысынлап та, яҡты донъяла уның иң яҡын кешеһе шул ғына ине бит. Мәрхәмәтле, йомарт, үҙе ас

булһа ла, ейәнен туҡ йөрөтөргә тырышҡан, йылы һүҙен, йөрәк йылыһын йәлләмәгән иң ғәзиз зат.

...Бына Кәбир ҡышҡы һалҡында аяғы туңып, өшөп ингәс, өләсәһе унең аяҡтарын ыуалай ҙа, мейес башынан алып, йылы ойоҡ кейҙерә. Малайҙың күңеле күтәрелеп китә, өләсәһе алдынан һикереп төшә лә ҡаҙан яғына барып, иртән бешерелгән ҡоймаҡҡа йәбешә... Былар бөтәһе лә кисә генә булған кеүек күҙ алдынан уҙа ла, күҙ йәше булып, тышҡа бәрелеп сыға.

Өҫтөнә оҙон бәбәйле күлдәк, камзул кейеп йөрөгән өләсәһенең тауыш күтәргәнен хәтерләмәй Кәбир. Ғөмүмән, унең йөҙ йыртып һөйләшкәне булмағандыр. Армияға киткән көҙҙә өләсәһен һуңғы тапҡыр күреүе булғанын ул башына ла килтермәне. Район үҙәгенә хәрби комиссариатҡа илтергә килгән йөк машинаһы янында өләсәһе ейәнен ҡысып ҡосаҡлап, сәстәренән һыйпаны:

– Кәбир балаҡайым, берүк тыңлап йөрө! Иҫән-һау йөрөп ҡайт! – тип бышылданы. – Минең һинән башҡа бер кемем дә юҡ бит.

Тамсы ла күҙ йәше сығарманы өләсәһе, һыҡтаманы ла. Күрәһең, йолаһы шулай булғандыр. Машина бортына менеп ултырған егет унең кеҫәһенән ҡулъяулыҡ сығарып, күҙҙәрен һөрткәнен һуңынан ғына күрҙе. Бушап ҡалған иҫке өйөнә ингәс ҡарсыҡтың буҫыҡҡансы илауын ул, әлбиттә, уйламаны ла. Ә бына һиҙгер өләсәһе, моғайын, ейәне менән мәңгегә хушлашҡанын һиҙенгәндер. Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ күңеле һиҙгер була икән.

«Һинән башҡа». Был һүҙ ҙә Кәбирҙең бер ҡолағынан инеп, икенсеһенән сығып та китте. Шуларҙы иҫләп, ул еңгәһенең ни һөйләгенен ишетмәне лә.

– Беҙҙең нигеҙгә кем өй һалды? – Яйын табып, ҡайтҡаны бирле тел осонда өйөрөлгән һорауын бирҙе ул.

– Ә ул Харрас ҡарттың улы Тимерхан. Ташкин яғынан аҡса белән ҡайтты, – тип вайымһыҙ ғына яуапланы хужабикә. – Өй һалып, ошонда донъя көтөргә ине лә иҫәбе, калхуз бөтөп ҡуйҙы. Ҡайҙалыр Себерҙә эшләп йөрөй шикелле. Үзбәк бисә лә эйәртеп ҡайтҡайны, тегеһе торманы, кире китте.

Рәхмәт әйтеп, ҡунаҡ болдорға сыҡты. Тәмәке тоҡандырҙы. Ҡарашы менән Һырт буйын иңләһә лә, күңелен көс еткеһеҙ ауыр хис-тойғо баҫып алғайны. Үҙен яңғыҙы тәрбиәләп кеше иткән ғәзиз өләсәһен ошолай аҙмыш ҡосағына ташлап ҡуйғаны өсөн үкенес тойғоһо уны тамам биләп алды, бар ғәмен баҫты. Күҙ алдынан таныш та кеүек, бер ҡасан да күрмәгәндәй тойолған күренештәр теҙелеп уҙҙы.

...Ҡышҡы һалҡын кистә өшөп-ҡалтыранып, йоҡлай алмай ятҡан өләсәһе көсхәл менән тороп, солантан бер-ике тиҙәк күтәреп инә лә уны мейескә һала алмай интегә... Мейесте тоҡандыра алмай яфалана торғас, хәле бөтөп, йығылып китә... «Эх, Кәбирем янымда булһа» тип күпме тапҡырҙар өмөтләнгәндер әле өләсәһе. Ә ул?

Урам яҡлап ике ирҙең һөйләшкәне уны күңелһеҙ уйҙарынан ихатаға ҡайтарҙы.

– Ошо урамға инеп китте бая, – тине ҡалын тауышлы берәү көрмәлгән теле менән. – Ҡала кешеһе аҡсаһыҙ йөрөмәй. Моғайын, бер яртылыҡ бирер.

– Бирер! – тип ҡушылды уға сыйылдаҡ тауышлы икенсеһе. – Бирмәй ҡараһын!

Быларҙы индерергә ярамай, моғайын, мине эҙләп килеләр, тип Кәбир туфлиҙарын эләктерҙе лә урамға ашыҡты. Нимә икәнлеге лә билдәһеҙ бысраҡ, алама кейемле ике ир ҡапҡанан былай килә ине. Икеһе лә күптән ҡырынмаған, бит-ҡулдары һабын түгел, һыу ҙа күрмәгәндер. Яңаҡтар эскә батҡан, ә ҡырлас

танау һөйәктәре иһә, киреһенсә, алға сыға биреп, ҡояшта ыҫмалалай ялтырай. Төпкә батҡан күҙҙәрҙә, сепрәк менән һөртөп ҡоротҡандай, тамсы ла нур күренмәй. «Ҡарасҡылар», – башына килгән тәүге уй шул булды. Камчаткала аҙ түгел ундайҙар. Ә бына тыуған ауылында шуның ишеләрҙе күрермен тип Кәбир һис тә уйламағайны.

– Мына бит, дөрөҫ әйткәнмен, – тип тантана итте оҙон буйлыһы гөргөлдәп, көлгән тауыш сығарырға маташып. – Здоров, абзый?

Ул күрешергә бысраҡ ҡулын һуҙҙы. Сирҡанһа ла, тотто Кәбир. Икенсеһе, кәүҙәһе менән асҡа туҡ булып үҫкән үҫмерҙе хәтерләткәне, ят кешегә текләп өнһөҙ генә тора бирҙе. Уның ауыҙ тирәһе әллә эремсеккә буялып, әллә шайығы ҡатҡанға ағарып тора ине.

– Ярты ал әле! – тип ҡапыл сыйылдап ебәрҙе ул. – Баш ауырта.

Кәбирҙең сумкаһында күстәнәскә алған яҡшы коньяк бар ине. Тик нәзәкәтле эсемлекте быларға сығарыу килешмәҫ. Өйгә лә саҡырырға ярамай.

– Алам, егеттәр, – тине ҡунаҡ, йөҙөнә яһалма алсаҡлыҡ сығарып. – Киттек.

Урамда әүәлгесә һил ине. Кәбир тегеләрҙе ҡултыҡлап алған булды, ҡиәфәттәре ҡурҡыныс булыуға ҡарамаҫтан, ауылдаштары бит. Яҡын кеүектәр.

– Ҡайҙа араҡы һаталар? – Һорау ҡалын тауышлыға төбәлде.

– Араҡы, тисе. – Тағы гөргөлдәү яңғыраны. – Самагун да ярай беҙҙең ҡорсаҡҡа.

– Ҡайҙа һаталар ул самогонды? – Кәбиргә ҡыҙыҡ булып китте.

– Хәҙер алып барабыҙ. – Оҙон буйлы, салыш-солош атлап, алдан төштө.

Кәбирҙәрҙең элекке күршеһе Шәрифулла ағайҙың улы Ғарифулла булып сыҡты ул. Алсаҡ йөҙлө, йор һүҙле Шәрифулла ағайҙы ҡунаҡ яҡшы хәтерләй. Ауылса әйткәндә, «фирмыла мал духтыры» булып эшләне. Һәр саҡ бөхтә кейенеп йөрөнө, кешеләргә ярҙамсыл булды. Көҙ етһә, аҙ-маҙ ҡаҙын һуйҙырырға өләсәһе һәр саҡ күршеһен саҡырыр ине.

– Шәрифулланың ҡулы тәмле, – тигәне әле лә хәтерендә Кәбирҙең.

«Алма ағасынан йыраҡ төшмәй, тигән булалар тағы», – тип уйлап алды ул. Күрәһең, әҙәм балаһы бишектәгесә бишкә төрләнә. Ят ҡунаҡтың күршеһе икәнлеген белгәс, Ғарифулла сикһеҙ шатланды, хатта ҡосаҡлап уҡ алды.

– Эх, абзый! Яҡшы кеше икәнлегең күренеп тора. – Уның күҙендә йәштәр йылтыраны.

Сыйылдаҡ тауышлы Зариф күрше ауылдан икән.

– Ике донъя – бер мөрйә! – Өнһөҙ генә килгән асарбаҡ, үҙ исемен ишетептер инде, ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе. – Атым юҡ буранда, ҡайғым юҡ урамда.

– Тыҡ өнөңдө, хайуан! – Ғарифулла ҡапыл асыуланды. – Һинең ауыҙҙан йүнле һүҙ сығамы?

Әшнәһенең тос йоҙроғон күреп, Зариф шымды. Ауыр тынлыҡ урынлашты. Кем нисек һүҙ башларға белмәй ине.

– Һинең нәҫел-нәсәбеңде беләм мин, абзый, – тине Ғарифулла, сер асҡандай, әкрен тауыш менән. – Олатайыңды камунислар раскулачит итеп, ауылдан ҡыуғаннар. Атайымдан ишеттем.

Ҡунаҡ өндәшмәне. Бала сағында бер нисә тапҡыр «подкулачник» тип ирештергәндәрен, шуның өсөн малайҙар менән һуғышып киткәнен иҫенә төшөрҙө. Өләсәһенә ошо хаҡта белдергәс, көрһөнөп кенә ҡуйғайны: «Көслөнөкө замана, балам. Үҫкәс, һөйләрмен әле».

Һөйләргә өлгөрмәне. Был ваҡиға тиҙҙән онотолоп, Кәбир үҙе лә иҫенә төшөрмәне.

– Килеп еттек. – Юл башлаусының ҡарлыҡҡан тауышы уның уйҙарын бүлде. – Мына ошонда һаталар ул төннә тыуған нәмәкәйҙе. Ҡана, абзый, аҡсаңды бир ҙә...

Улар бейек күтәрмәле ҙур кирбес өйгә яҡынлай биреп туҡтағайны. Хәлле кешеләр йәшәгәне күренеп тора. Тимерҙән ҡойма урата башлағандар, төптәрәк – еңел машина, арт яҡлап «Беларусь» тракторы күренә. Мал аҙбары ла ике ҡатлы, мунса, аласыҡтары ла – яңынан.

– Кем өйө был? – Һорамай булдыра алманы Кәбир. Ана бит, тырышып донъя көтөүселәр ҙә юҡ түгел. Былары – күренеп тора – ауылдың буласаҡ капиталистары.

– Крахабур! – Ғарифулла ласт итеп аяғы аҫтына төкөрҙө. – Беҙҙекеләр түгел, килмешәкләр.

Шул саҡ өйҙөң урам яҡ тәҙрәһенең ҡорғаны бер яҡ ситкә ҡайырылды ла, берәү урамға күҙ һалды. Йәнәһе, кемдәр йөрөй? Кәбирҙән йөҙ һум алып инеп киткән Ғарифулла, оҙаҡ тормай, кәйефһеҙ боролдо.

– Бирмәнеләр, һинән шөрләйләр, – тине ул, юлдашына ҡарамай ғына. – Һин, абзый, лутсы ҡайтып, беҙҙе көт.

Быларҙан нисек ҡотолорға белмәй килгән ҡунаҡ шатланды. Бирьяҡ урамда йәшәгән класташы Ғәфүрҙе иҫенә төшөрөп, шунда барырға булды. Самалап өйҙәренең ҡайһы тирәлә икәнен дә белә. Күперҙән сығып бер аҙ атлағас, урам яҡлап акациялар үҫкән йорт булырға тейеш ул.

Иҫке ағас күпер урынына, аҫҡараҡ күсереп, яңыһын тимерҙән һалғандар. Үҫмер сағында һыу инеп кинәнгән мул һәм тоноҡ Ҡоро Күндерәктең ныҡ һайығыуын күреп, Кәбирҙең иҫе китте. Яр ситләп үҫкән ваҡ талдарҙан бер ни ҡалмаған, ҡаҙ-өйрәк күренмәй. Йылға инештәй генә ҡалып, болғансыҡ аҡһа ла, төбө күренеп тиерлек ята. Тегендә-бында буш шешә, аяҡ кейемдәре, хатта тимер-томор ҙа ырғытылған. Ысынлап та, халыҡ аҙған, нужаһын күндергән һыуын сүплеккә әйләндергән. Ә бит Кәбир бәләкәй саҡта йылғаға бер нәмә лә ташлатмай торғайнылар.

Саңы борхоп ятҡан юлдан алға атлауын белде ҡунаҡ. Бына ул төбәп килгән урын, әммә акациялар ҙа, элекке класташы йәшәгән өй ҙә урынында юҡ. Ҡасандыр бында өй нигеҙе булғанына ҡотороп үҫкән әрем, алабута, кесерткән генә ишаралай. Йәшәреп бөткән шифер башлы ярайһы ергә сүгә төшкән һул күршеләге өйҙөң күптән буялмаған ябыҡ ҡапҡастарына ҡарап, бында ҡайһыһы йәшәй икән, тип оҙаҡ ҡына хәтер дәфтәрен аҡтарһа ла, Кәбир иҫенә төшөрә алманы. Килгәс-килгәс, белеп китәйем әле тип, эске яҡҡа ауышҡан урам ҡапҡаһын этәрҙе.

Ихатала йән эйәһе күренмәй, бесәй үләне баҫып киткән өй алдында, ғөмүмән, кеше аяғы һиҙелмәй. Арыраҡ урынлашҡан иҫке таҡта аҙбар бер яҡҡа ҡыйшайып, ана ауам, бына ҡолайым тип тора. Ишектә йоҙаҡ-фәлән күренмәгәс, ҡунаҡ инеп ҡарарға булды.

Ҡараңғы соланда әсе итеп әллә серегән бәрәңге, әллә кеше, әллә мал тиҙәге еҫе бәрелде. Кәбир, танауын сирып, кире боролорға уйлағайны ла, ҡыҙыҡһыныу тойғоһо көслөрәк булып сыҡты, таҡта ярығы аша һуҙылған яҡтыла өй ишеге тотҡаһын шәйләп, үҙенә тартты. Тупһа аша үтеү менән үҙен таныш булмаған ауыр тойғо биләп алыуын һиҙҙе, әйтерһең дә, кемдер уның бында килеп инеүенә ризаһыҙлыҡ белдереп, ҡыуып сығарырға ынтыла. Ҡурҡыуын еңеп, ҡунаҡ тирә-яҡҡа күҙ һирпте. Бер яҡ ситтә – ҡалай һәм быяла һыра шешәләре, шәшке өҫтәре, бысраҡ сәселгән бер-ике стаканлы өҫтәл. Ишек төбөндәге бер нисә сөйҙә алам-һалам кейем элеүле тора. Стенаға беркетелгән иҫкереп бөткән балаҫтың

бер яҡ сите ҡаҙауҙан ысҡынып, түбән һәленгән. Бысрағы ҡаҡашып бөткән иҙән, моғайын, һуңғы тапҡыр ҡасан йыуылғанын да хәтерләмәйҙер.

Түрҙәрәк диван кеүек нәмәлә одеялға оҡшаған төҫһөҙ нәмә ябынған кемдер ятҡан кеүек. Кеше барлығын белдереп, ҡунаҡ тамаҡ ҡырҙы, ләкин диванда ятҡан әҙәм, әгәр ысынлап та, ул йән эйәһе булһа, тауыш бирергә, һис булмаһа, ҡуҙғалып ҡуйырға тейеш ине. Әммә ундай хәрәкәт тойолманы. Күңелен биләп алған хәүефтең көсәйә барыуына ҡарамаҫтан, Кәбир, барлыҡ ҡыйыулығын туплап, диван янына килде һәм ҡысҡырып ебәрә яҙҙы. Унда күҙен түшәмгә төбәп, хәрәкәтһеҙ-ниһеҙ әбей ята ине. Көҙгө бураҙналай ярғыланған ябыҡ бысраҡ битен себен көтөүе һырыған.

Ҡапыл артынан шығырҙап ишек асылған тауыш килде. Тертләүҙән ҡото алынған ир, көслө хәүеф тойоп, артына боролоп ҡараны, әммә унда бер йән эйәһе лә юҡ ине. Күрәһең, ишекте ул үҙе ябып бөтөрмәгән. Өйҙәге түҙеп торғоһоҙ ауыр еҫте ул шунда ғына шәйләне һәм, йәне алҡымына килерҙәй булып, ишекте лә ябып тормай, тышҡа атылды. Ниндәйҙер шом уны туҡтауһыҙ эҙәрлекләй ине. Кәбир эләгә-тәгәрәй Тәнзилә еңгәләренә ашыҡты. «Кем булыр был әбей, ни эшләп һәм ҡасан үлгән, ниңә бер кем дә уны күрмәгән», – тип уйланды ул, фекер йөрөтөрлөк хәлгә килгәс.

– Ә-ә, ул Мәүсилә ҡарсыҡтыр, – тине хужабикә, хәлде ҡайтып һөйләгәс. – Йөрөй алмаһа ла, эсеп ята, тиләр ине. Эсеү харап итте аларҙы, симйом эстеләр бит.

Шулай һөйләнә-һөйләнә йыйынды ла ишеккә йүнәлде.

– Мәйетте өйҙә тоторға ярамай, берәйһенә барып әйтергә кәрәк, – тине ул, диванда өнһөҙ ултырған ҡунағына ҡарап. – Баяраҡ Ғариф менән Зариф һине һорап килгәйне. Өйгә индерә күрмә инде. Кеше әшәкеһен таҙартып йөрөр хәлем юҡ.

– Юҡ-юҡ, еңгәй, – тине Кәбир, өтәләнеп. – Ҡайҙа ул! Мин дә һинең менән сығам.

Урамдың көнбайыш осона етәрәк класташы Зөфәр йәшәй торғайны. Мәктәптән ҡайтышлай Кәбир уларға ингеләп тә йөрөнө. Ҡала яғынан күсереп һалынған ҡарағай өйҙөң ҡапҡалары ла ҙур ине. Тәҙрәләренең икеһе лә урам яҡҡа ҡарап, ҡапҡаһыҙ була торғайны. Әммә таныш өй күҙгә салынманы. Бер ихатала күмәк ирҙәр тауышы ишетеп, ҡунаҡ шунда боролдо.

Ҡасандыр күркәм генә булған был кирбес өйҙөң ҡоймаһы ла, ҡапҡалары ла юҡ. Аҙбар, келәт кеүек ҡаралтылар ҙа күренмәй. Тауыш өйҙөң ҡояш төшмәгән яғынан килә икән. Күрәһең, кемдәрҙер, эҫенән ҡасып, күләгәлә гәпләшә. Яҡынлағас, Кәбир Ғарифулла менән Зарифты, тағы бер ир менән ҡатындың бәләкәй генә өҫтәл кеүек нәмә артында эсеп торғандарын күрҙе.

– Ниндәй боевик йөрөй мында? – Ирҙәрҙең иң өлкәне – өҫтөнә ҡырылып бөткән иҫке шаҡмаҡлы күлдәк, ҡатып бөткән салбар кейгәне – ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Ас яңаҡлы йөҙөндәге төпкә батҡан күҙҙәр, атылып сығырҙай булып, Кәбиргә төбәлде. – Што нада?

– Тукта, Ғәфүр абзый, шаулама! – Ғарифулла уны тынысландырырға ашыҡты. – Был Кәбир абзый бит. Шуның күстәнәсен эсеп ултыраһың ишшу.

– Ниндәй Кәбир? – Теге ир көрмәлгән теле менән тағы ниҙер мығырҙаны. – Бер ниндәй Кәбирҙе лә белмәйем.

Кәбирҙең класташы Ғәфүр ине был. Алтынсыламы, әллә етенселәме уҡығанда, төртмә һүҙле шиғырҙар яҙып, иптәштәренә лә уҡып йөрөгән, әҙәбиәт уҡытыусыһы Әнүр абый, шағир буласаҡ был егет, тип маҡтаған йәштәше. Шағир булыу хыялын тормошҡа ашыра алмаған класташын таныуҙан бигерәк, ошо көнгә төшөүен

башына һыйҙыра алмаған Кәбир оҙаҡ ҡына ни әйтергә белмәй торҙо. Ғәфүр ҙә ошондайыраҡ тойғо кисерә ине, ахырыһы. Ғарифулла бик оҙаҡ тылҡығандан һуң унының айҙар буйы айнымай йөрөгән мейеһенең ҡайһылыр мөйөшөндә тейешле күҙәнәктәр эшләп китте, ахырыһы, – ир ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе.

– Класташ! Кил әле, бер ҡосаҡлайым. – Ҡасандыр бер класта ултырып белем алған иптәшенең ауыр тир еҫенә, һаҫыҡ тынына әһәмиәт бирмәҫкә мәжбүр булды Кәбир. Үҙе лә ҡосаҡлағандай итте.

Балалыҡ йылдары бер тирәлә үткән кешеһен осратҡас, Ғәфүрҙең иң нескә тойғоларына юл асылды. Берсә һыҡтауҙан телмәре өҙөлөп, берсә тыныс тауыш менән ул үҙ хәлен һөйләргә кереште. Нисек итеп институтҡа имтихан тотоп та, инә алмай яфаланыуын, шунда танышҡан бер ҡыҙға ғашиҡ булып, һуңынан өйләнеүен, балалары тыуып, ошо өйҙө һалып кергәс, ҡатыны менән аралары боҙолоп китеүен һәм эсеүгә һалышыуын өҙә-йолҡа тасуирланы. Был өй уныҡы икән. Әсәһе яҡлап олатаһының нигеҙен яңыртырға булған.

– Ҡатының хәҙер ҡайҙа һуң? – тигән булды Кәбир.

Ғәфүр өндәшмәне, башын түбән эйҙе. «Ых» тигән кеүегерәк өн генә сығарҙы ул.

– Кых! – Бығаса өндәшмәй ултырған Зариф, сыйылдап, муйынын һыҙып күрһәтте. «Аҫылынып үлде» тигәнде аңлата ине был ишара.

Кәбиргә лә ситтәренә бысраҡ бармаҡ эҙҙәре буялған шәшкегә һалып, болғансыҡ көмөшкә һонғайнылар, ләкин ул, ашҡаҙан язваһына һылтанып, баш тартты. Дөрөҫөрәге, алдашты, ниңә бороло п ингәненә үкенеп, бәлә сыҡмаҫ борон тайырға кәрәк, тип уйлана ине ул.

– Бәхетле кеше, – тип телгә килде бығаса тиклем иҫе киткәндәй өнһөҙ ултырған урта йәштәрҙәге ҡатын. – Көнләшәм мин ундайҙарҙан.

Был ҡатын кем булғандыр, Кәбир танымады, белешмәне лә.

– Нужа күрмәгән ул. – Зариф тағы сыйылдап ҡысҡырып ебәрҙе. – Тиреҫтә соҡоноп, капейкаға йөрөһә, нибус эсер ине.

– Һинең усаҡтай ауыҙыңа көсләп һалалармы? – Ғарифулла унан да яман аҡырҙы. – Нәфсеңде тыя алмайһың икән, кеше битәрләп утырма! Бәрер ҙә үтеремен!

Табында ултырыусыларҙың да иҫереүе еткәйне инде. Ят ирҙән оялып булһа кәрәк, ҡатын тиҙ генә шылды. Кем ҡайҙа урын таба, шунда йоҡоға талдылар. Иҫерек булыуға ҡарамаҫтан, Ғарифулла ғына элекке күршеһенә эйәрергә маташты. Фекерләүенә ҡарағанда, аҡылы ярайһы теүәл эшләй кеүек ине унының.

– Мына шулай яфа сигәбеҙ инде, – тине ул, ҡунаҡ йәнәшенән атлап. – Эсеп иҫерәбеҙ ҙә баш төҙәтәбеҙ.

– Ниңә ташламайһың һуң? – Рәтле яуап ала алмаҫын белһә лә, һораны Кәбир.

– Булмай шул, абзый. – Ғарифулланың яуабы айыҡтарса яңғыраны. Күрәһең, ул был хаҡта электән уйланып йөрөгән. – Эсергә өйрәнеү бер ни ҙә түгел, ә араҡы ҡолона әйләндеңме, ҡотолоп булмай.

Колхоз таралған, ҡарарға – мал, сәсергә – орлоҡ, унан да бигерәк техника юҡ. Кеше эшләмәһә, боҙолорға тора. Кемдең иҫ-аҡылы дөрөҫ, шулар ситкә сығып эш эҙләй. Хәҙер ауылда пенсионерҙар ҙа «ана үләм, бына ҡалам» тип йөрөгән эскеселәр генә ҡалып бара. Дөрөҫ, «крахабур», «эспикүләнттәр» бар, тик ундайҙар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Һуңғыларҙы ата-инәһенән төшөрөп һүккән Ғарифулланы Кәбир өйөнә саҡлы илтеп ҡуйҙы. Иҫкереүе етеп, әллә нисә быуынды ҡартайтҡан бысраҡ, алам-һалам ғына ҡалған ҡурала көн итә икән үҙе. Бер яҡ

ситтә сепрәк-сапраҡ ташланған иҫке тимер карауатты яман шығырҙатып барып ауҙы асарбаҡ һәм хырылдай ҙа башланы.

Хөсәйеновтарҙың ихатаһында иҫке генә еңел машина күренде. Ҡаҡса кәүҙәле, йүгерек күҙле Әксән телевизор ҡарап, киске ашҡа Кәбирҙе көтөп ултыра икән. Бирешкән Әксән, йөҙөнә тәрән йыйырсыҡтар ятҡан, ҡарашы ла әллә моңһоу, әллә хәсрәтле. Улай ҙа йылы иҫәнләште, һаҡал-мыйығына төрттөрөп:

– Был ниндәй барбудос[1] икән, тип торам, – тине.

Ҡунаҡтың коньягын ауыҙ итеүҙән ул ҡырҡа баш тартты:

– Ауыҙға тейһә, туҡтап булмай, абзый, – тине ул, көлөмһөрәп. – Көсләшмә.

Оҙаҡ ҡына бала саҡтарын иҫкә алып, берсә көлөшөп, берсә уфтанышып ултырҙылар. Кәбир үҙенең алыҫ яҡтарҙағы тормошон бәйән итте, сит ҡитғаларҙа күргәндәре менән уртаҡлашты. Урыҫтан ҡатын алыуы, бер ҡыҙ үҫтереүҙәре тураһында ла әйтте.

– Нишләп берәү генә? – Әксән шелтәләгәндәй итте. – Беҙ бишәү үҫтек.

– Ә һинең ҡатының да юҡ бит әле. – Ҡунаҡ та көлгән булды. – Мин бит күп ваҡыт диңгеҙҙә йөрөнөм, ҡатындың да теләге булмағандыр. Донъялар ҙа үҙгәрҙе, туған, мыныһын кеше итә алһаҡ та ярар.

Хужабикә ирҙәр әңгәмәһенә ҡушылманы. Аштан һуң соланға сығып, бәләкәй генә һандыҡ күтәреп инде лә Кәбир алдына ҡуйҙы.

– Мына, туғанҡайым, өләсәйеңдең әйберләре ошонда инде. Ҡарап сыҡ.

Быуындан-быуынға күсә килгән был ғаилә йыһазын ул бала саҡтан белә. Өләсәһе унда күҙ ҡараһындай күргән әйберҙәрен генә һаҡлай торғайны. Иң өҫтә – хаттар. Таныш почеркты күреп, ирҙең йөрәге сәнсеп ҡуйҙы. Ул армиянан һирәк-һаяҡ яҙған сәләм хаттары. Күрәһең, өләсәһе уларҙы уҡып йыуанғандыр. Һалдат кейемендә төшкән бер нисә һүрәт айырым конвертта һаҡланған. Үҙенең йәш сағын күргәс, Кәбиргә тағы яманһыу булып китте.

Тағы ла хаттар. Былары таныш түгел. Адрестары, штемпелдәренә ҡарағанда, Мәскәүҙән, Өфөнән ебәрелгән. Шул саҡ ул олатаһының ауылдан һөрөлөүен, атаһының ҡапыл ғына юғалыуын иҫенә төшөрҙө. Был хаттар өләсәһенең улар хаҡында ниҙер белешеп яҙыуына яуап булғандыр.Ҡунаҡ уларҙы ла бер яҡ ситкә һалды: үҙе менән алып китер ҙә, булдыра алһа, аҙағына еткереп ҡуйыр.

Бына Ҡөрьән китабы. Йыш асыуҙан биттәре керләнеп бөткән. Ни ғилләменән һаҡланғандыр – үҙе бер мөғжизә. Һандыҡ төбөндә Кәбирҙең ҡулына сепрәк төргәк килеп юлыҡты. Асып ебәрһә – ҡағыҙ аҡсалар. Бер, өс, биш һумлыҡ совет аҡсалары. Уларҙы ни тип йыйҙы икән өләсәһе? Хәйер, тотонолмаған булғас, уға тәғәйенләнгәндер. Эй Алла!

– Кәбир туғанҡайым! – Хужабикәнең яғымлы тауышы ҡунаҡты ысынбарлыҡҡа ҡайтарҙы. – Өләсәйең, һин ҡайтһа, туғандарын аяуһыҙ хөкөмдән яҡлар, тип өмөтләнгәйне. Хәҙер уларҙы аҡлайлар тиме.

«Подкулачник». Кәбир тағы ошо һүҙҙе иҫенә төшөрҙө. Уның олатаһын, Гөлбикә өләсәһенең ирен, Совет власы мөлкәтенән мәхрүм итеп Себергә һөргәс, Шакир ҡартты шахтала ер баҫып үлтерә. Үҫмер ҡорона еткән улы Зәбир менән ҡатынына ҡайтырға рөхсәт бирәләр. Ауылда ҡағылып-һуғылыуға түҙмәй, Зәбир ҡалаға сығып китә, шунда ғаилә ҡора, Кәбире тыуа. Гитлер Германияһы менән һуғыш башланғас, Зәбирҙе хәрби комиссариатҡа саҡыралар. Ҡатыны менән улын ауылға әсәһе янына ҡайтарып ҡуйырға өлгөрә ул. Ағыулы башаҡ ашап үлгән әсәһен ике-өс йәшлек Кәбир хәтерләмәй, ә бына һалдат кейемендәге атаһын

---

[1]*Барбудос — Куба революционерҙарын һаҡал-мыйығы өсөн шулай атағандар.*

бер аҙ иҫләй. Һуғыштан ҡайтҡас, үҙен ҡосаҡлап ятҡаны, ниндәйҙер әсе, әллә тир, әллә тәмәке еҫе килгәнен дә иҫләп ҡала. Әммә, оҙаҡ та тормай, атаһы ҡайҙалыр китеп юҡ булды. Совет власына яла яҡҡан өсөн хөкөм ителде, тинеләр. Быныһын Тәнзилә еңгә лә онотмаған икән:

– Нимес шәп йәшәй, беҙ хәйерсе, ти торғайны ул. Шуны кемдер районға еткергән.

Өләсәһе юллап ҡараһа ла, бер ни ҙә сығара алмаған. «Үҙеңдең дә киткең киләме ни?» тип ҡурҡытып ҡуйғандар.

Ҡунаҡҡа урынды төпкө бүлмәлә йәйҙеләр. Түшәме бейек булғанғамылыр, бында һауа ла саф күренде. Бер ни белмәй йоҡланы Кәбир, хатта төнгө бәҙрәфкә лә тороп йөрөмәне.

– Ауыл һауаһы килешкән һиңә, туғаным, – тине хужабикә.

Кәбир болдорға сыҡҡанда, ҡояш офоҡтан ике терһәктәй күтәрелеп өлгөргәйне. Күк йөҙө салт аяҙ. Көн бөгөн дә эҫе булмаҡсы. Күләгәлә, бер-береһенә күҙ ҡыҫышҡандай, ысыҡ тамсылары йылтыраша. Ауыл иртәһе тып-тын, матур һәм саф. Ундай иртәләр диңгеҙ томанына сорналған Камчаткала күренгәне юҡ. Кәбирҙең күңеле күтәрелеп китте.

Ихатала машина күренмәне, тимәк Әҡсән эшкә киткән. Сәй алдынан ҡунаҡ урамдағы йыуынғыста һаҡал-мыйығын ҡырып ырғытты.

– Күптән шулай кәрәк ине. Хәҙер үҙебеҙҙең Кәбир булдың, – тине еңгәһе.

Бер нисә ирҙең көрәк күтәреп зыяратҡа ыңғайлауын күреп, ҡунаҡ көрәк һораны. Ниәте бер ыңғайҙан өләсәһенең ҡәберенә баш эйеп булһа ла ҡайтыу ине.

– Бар, туғаным, зыяратты булһа ла күреп кит! – тине Тәнзилә ҡарсыҡ, баҡсала һөйәүле торған көрәкте алып сығып.

Ирҙәр күп түгел ине, күбеһе – оло йәштәгеләр. Һытыҡ йөҙлөләре, алсаҡтары ла бар. Бер килке Кәбирҙе һорауҙар менән күмеп ташланылар. Кемдәрҙер уның сит илдәр гиҙеп йөрөүенә көнләшеүен йәшермәне. Шелтәләүселәр ҙә табылды:

– Өләсәйеңде күмергә ҡайта алманыңмы ни?

Гөлбикә ҡарсыҡтың ҡәбере зыяраттың арғы башында икән. Бәләкәйерәк сағында ялан аяҡ килеш был тарафты иптәштәре менән күп тапаны ул. Еләк, йыуа, сейә мул өлгөрә ине бында. Таш менән буралған бер нисә ҡәберҙе лә ул бәләкәйҙән белә. Күрәһең, уларҙа дәрәжәле кешеләр ерләнгән. Ябай ғына таш ҡуйылған, хатта бер ни менән дә уратылмаған ҡәберҙәр күберәк. Яңылары ла бар, ҡайһыларында йәш кенә кешеләрҙең һүрәттәре тора. Шулай иртә өҙөлдөмө икән ни ғүмерҙәре?

Өләсәһенең зыяратын тапҡансы байтаҡ ыҙаланырға тура килде. Башына ҡағылған ҡаҙыкта юйыла барған хәрефтәр менән ҡарсыҡтың фамилияһы, исеме генә көйҙөрөп яҙылған. Ергә ярайһы ныҡ һеңгән тупраҡ өйөмөнә өнһөҙ генә төбәлеп байтаҡ торҙо. Кеше ерләргә йөрөргә тура килгәне юҡ ине шул. Үҙе лә бәләкәйҙән мәйеттәргә ҡарарға ҡурҡа. Көтмәгәндә уның күңелен ниндәйҙер сәйер тойғо биләй башланы, тәүҙә зиһенен албырғатты, унан, тере организм кеүек, тәнен солғарға тотондо. Башы шаулап китеп, күҙенән әсе йәштәр бәреп сыҡҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды ул. Һыктауын баҫырға теләп, тештәрен ҡыҫты. Ике тубығы ла ҡалтырап, ҡәбер өҫтөнә бөгөлөп төшкәнен һиҙмәй ҙә ҡалды ир. Ҡасандыр донъяла иң изге йәндәрҙең береһе булған өләсәһенән ошо тупраҡ өйөмө генә ҡалыуы менән килешергә һис кенә лә теләмәне.

Ауыр уфтанып, тупраҡ өйөмөн ҡосаҡланы. Өләсәһенә күрһәтер һуңғы ихтирамы шул ғына ине уның. Башы ергә терәлгәс, ошоғаса тыйылып килгән һыктау үҙенә юл асты, сабыйҙарса һуҙып илап ебәрҙе ир. Илап туйғас, башы

еңеләйеп, күңеле бер аҙ тынысланғандай булды, ләкин аңы дөрөҫ түгел ине әле. Артабан ни эшләргә? Был һорау башында туҡтауһыҙ әйләнеүгә ҡарамаҫтан, яуап табылманы.

Урынынан ҡалҡынып, ҡәбер ҡаҙыусылар яғына атланы ул. Ирҙәр эшен бөтөргәйне инде. Бына мәрхүмәне лә килтерҙеләр, мулла йыназа сыкты.

Ауыр тойғо зыяраттан сығып, ҡайтыр яҡҡа атлағанда ла башынан китмәне. Тыуған ауылына күңел тыныслығы табып, йәнен эс бошорғос уйҙарҙан арындырырға өмөтләнеп ҡайтҡайны бит. Яҙмаған. Мөхит менән бергә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә үҙгәргән. Тик күңел генә ошоларҙы ҡабул итергә теләмәй, имеш. Йөрәк ҡартаймай, тигәндәре шул буламы икән? Үҙенә һүҙ ҡушҡандарға ла Кәбир «эйе», «юҡ» тиеүҙән уҙа алманы, теле асылманы ла ҡуйҙы. Бында артабан ҡалып булмаҫын ныҡлы аңланы ул. Ҡырҡ йыл ғүмер эсендә тыуған ауылы өсөн ул ят кешегә әүерелгәйне. Бындағы мөхит-тормош уны ҡабул итмәүе аҙым һайын белдереп тора. «Китеүең хәйерле» тигән һығымтаға килде Кәбир. Өйгә инмәҫ элек кеҫә телефонынан теге «Жигули» хужаһының номерын йыйҙы.

– Бер сәғәттән барып алырмын. – Водитель һүҙҙе ҡыҫҡа тотто.

Ҡунағының ҡапыл ғына юлға йыйыныуына Тәнзилә еңгәһе аптыраны:

– Тағы бер-икене ҡуныр инең, – тине ул, тура ҡарап. – Ҡунаҡ йыйырға уйлап тора инем. Ауылдаштарыңды күргең килмәйме ни?

– Рәхмәт, еңгәй, ниңәлер күңел тартмайыраҡ тора. – Ул хәтер һаҡлау тураһында уйламаны ла.

Сумкаһын асып, ауылдаштарына тәғәйенләнгән күстәнәстәрен сығарҙы. Консервалы балыҡ ыуылдырығы, ыҫланған ҡыҙыл балыҡтан тыш, яулыҡ, шарф, футболка, майка, еңел сарафан кеүек әйберҙәр һалынғайны унда. Хужабикә алмаҫҡа ла иткәйне:

– Кире алып китәйемме ни? Киленегеҙ ебәргәйне. Ал инде, апай, үҙең белеп таратырһың әле, – тип ныҡышҡас, күнде.

Тәүлек эсендә күргән-кисергәндәр ыңғай тойғолар тәьҫирендә һәүетемсә йәшәп өйрәнгән Кәбирҙе тетрәтте. Ер менән күк араһында, бушлыҡта ҡалғандай тойҙо ул үҙен. Ирекһеҙҙән ҡасандыр ҡараған «Свой среди чужих, чужой среди своих» тигән кинофильм иҫенә килеп төштө. Эйе, Камчаткала ул – күптән үҙ кеше, ә бында, тыуып үҫкән ауылында, – ят бауыр. Ә бит бар ғүмере ошонда үткән олатаһын да «яңы тормош» ҡороуҙа ҡамасаулаусы күреп, ҡыуып ебәргәндәр. Мең михнәт менән сит тарафтарҙа иҫән ҡалып, нәҫел-нәсәбе ғүмер кисергән төйәгенә ҡайтҡан атаһы ла бында һыя алмаған. Яттар мөһөрө һуғылған уларға. Башына килгән көтөлмәгән һығымтанан тәне семерҙәп ҡуйғандай итте.

Әгәр ҙә хәрби хеҙмәтен тамамлағас та ауылына ҡайтһа, бөгөн ни рәүешле донъя көтөп ятыр ине икән? Өр-яңы нигеҙ тергеҙергә хәленән килер инеме? Әллә Ғарифулла, Ғәфүр кеүек шешә ҡолона әүерелер инеме? Бәлки, унан да яман: гүр эйәһе булып, хәтерҙән юйылған булыр инеме? Ә ул ҡайтманы…

«Яңы тормош». Нимәһе менән яңы һуң ул? Кешене донъя көтөүҙән төңөлдөргән тормошто нисек яңы тип әйтмәк кәрәк?! Уйҙары тәрәнәйә барған һайын, ул нығыраҡ буталды, бер ниндәй ҙә яуап таба алманы.

Ул арала урамда машина сигнал бирҙе. «Жигули» хужаһы килеп еткән. Хужабикә ҡунағы менән ҡоро ғына хушлашты:

– Иҫән-һау йөрө, туғанҡайым! Хәйерле юл һиңә.

Машина, саң борхотоп, һил урамдан ҡояш байышына табан елдерҙе.

Нияз
АЛСЫНБАЕВ

ИЛ СИГЕНДӘ ЙӘШӘГӘН ҠАРТТЫҢ АТЫ ЮҒАЛДЫ...

ХИКӘЙӘ

Район мәғариф бүлегенә ике путевка килде. Италияға. Бушлай. Өс аҙнаға. Халыҡ-ара балалар лагерында ял итеп ҡайтыу өсөн. Берәүһен прокурор ҡыҙына тәғәйенләнеләр. Сөнки 13 йәшлек балаға уҙған йыл аҙағында йөрәгенә операция яһағайнылар, реабилитация курсын дауам итергә кәрәк, тип таптылар. Икенсеһен урман төпкөлөндә ятҡан Һаҡмарбай урта мәктәбенән Фәғилә Һамарова тигән етемгә бирергә булдылар. Яҡшы өлгәшә, моңло йырлай, былтыр республика кимәлендә уҙған олимпиадала еңеп сыҡты. Әсәһе бынан бер нисә йыл элек вафат булған. Атаһы төрмәлә. Был фани донъялыҡта меҫкенкәй тағы ниндәй генә рәхәтлек күргән тиһең.

РОНО етәксеһе Фәрит Мотаһар улы Ырғыҙбаев райондың социаль яҡлау һәм профсоюз әһелдәренең фекерен белеште лә – ә улар бер тауыштан риза булды – Өфөгә ебәрәсәк рәсми ҡағыҙҙарҙы тултырырға ҡушты. Юлламалар Мәғариф министрлығы аша килгәйне, яуапты дүшәмбе көн көтәләр икән. Төркөм киләһе аҙнала баш ҡалала йыйылырға тейеш. Миланға иһә кесе йома таңында осасаҡтар.

Ләкин буштан төшкән юллама көтөлмәгән шау-шыу тыуҙырҙы. Тәүҙә район хакимиәтенән шылтыраттылар. Башлыҡтың иҡтисад буйынса урынбаҫары. Һүҙ, ғәҙәттәгесә, хәл-әхүәл белешеүҙән башланды:

– Сәләм, ҡорҙаш!
– Марат Ғәбитович, сәләм, сәләм! Хәлдәрегеҙ ни хәлдә?
– Минеке Аллаға шөкөр!
– Нимә булды, Марат Ғәбитович, әллә берәйһенеке «Аллаға шөкөр» түгелме?
– Түгел шул. Фәриҙәне беләһең дә инде…
– Ҡайһы Фәриҙәне?
– Һуң, күршеңде һуң!

Нияз Алсынбаев (1963) — радиожурналист, прозаик. Өс китап авторы. Әҫәрҙәре прозаиктарҙың II республика семинарында ла (Сибай, 2009 й.) юғары баһаланды.

Мутлаша урынбаҫар. Фәриҙә ябай күрше генә түгел. Район хакимының бер туған һеңлеһе! Үтә һылыу, үтә дыуамал бисә. Торғаны бер аждаһа. Халыҡты дер һелкетеп тотҡан ағаһына арҡалана. Үҙе баш та үҙе түш. Яңыраҡ күрше райондан иренән айырылып ҡайтты. Ҡайтыуына бынамын тигән тыныс урын таптылар. Ағаһының бер шылтыратыуы ла етте. Быға са нисәмә йылдар буйына бер шелтәһеҙ арыу ғына эшләп йөрөгән үҙәк китапхана мөдирәһен вазифаһынан бушаттылар ҙа ошо ҡатынды тәғәйенләп ҡуйҙылар. Эйе, белә генә түгел, үтә яҡшы белә. Хатта бөтөнләй икенсе фиғелдә лә. Хәйер, быныһы инде – уларҙың икәүһенең генә сере…

– Ә, эйе-эйе…Шунан?

– Шул. Балаһы менән йонсой бит. Неврозмы шунда, психозмы. Күршең булғас, һиңә һөйләп тормайым инде. – Эйе, ысынлап та Фәрит Мотаһаровичҡа ул бала хаҡында һөйләүҙең хәжәте юҡ. Невроз түгел, психоз уның. Ғәфү итегеҙ, ләкин егерме биш йыл бала-саға менән ҡаңғыра, әммә ул ҡәҙәре лә «псих»ты күргәне юҡ ине. Әсәһе буйлата, әсәһе. Яңыраҡ машинаһының капотын сөй менән сыйып киткәйне.

– Әле генә инеп сыҡты. Зар илай, меҫкен. Баламды дауаларға кәрәк, мөмкин булһа – йылы яҡта, тей. Тик ҡайҙан инде ул ҡәҙәре аҡса бюджетниктарҙа…

Фәрит Мотаһар улының кәйефе боҙолдо. Ул малайҙы йылы яҡта түгел, ә махсус мәктәптә йәки колонияла тәрбиәләргә кәрәк. Тимәк, районға ҡайтҡан бушлай юллама хаҡында ишеткән яһил бисә. Прокурор балаһыныҡын тартып алырға теше үтеңкерәмәй. Тимәк, етемдең өлөшөнә ҡул һуҙа. Ә элек улай түгел ине Фәриҙә…Эй, ваҡыт, ваҡыт, ни эшләйһең һин бәндәләр менән? Тураһын һораны:

– Путевка тураһында ишеткәнме?

– Тап өҫтөнә баҫтың. Ярҙам итеп ебәреп булмаҫмы икән?

Ҡыҙыҡ, урынбаҫар төп хужаның шәхси үтенесе буйынса шылтыратамы икән? Әллә эргәһендә теге бисә ултырамы? Хәйер, быныһы бигүк мөһим дә түгел. Түтү, поезд китте. Ҡарар ҡабул ителгән, балаға ла әйтеп өлгөргәндәрҙер. Артҡа сигенергә урын юҡ.

– Ғәфү ит, Марат Ғәбитович, беҙ министрлыҡҡа яуап ебәрҙек инде. Бынан бер-ике сәғәт элек кенә аңғартҡан булһағыҙ…

Теге оста «һм-м» тигән ауаз ишетелде. Ҡоро ғына хушлаштылар. Район хакимы менән аралары былай ҙа шәптән түгел, хәлдең хәҙер тағы ла ҡатмарлашасағын көт тә тор. Дүшәмбе үтәсәк кәңәшмәлә үсен аласаҡ.

Район халыҡ мәғарифы бүлеге урынлашҡан ике ҡатлы бина алдына ялтырҡара «Ауди»ҙа Ғәлим дуҫы килеп төштө. Байтаҡ ваҡыт күрешкәндәре юҡ. Район үҙәге янындағы ҡасабала йәшәй, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә. Заманында бер синыфта уҡынылар, университетҡа ла бергәләп инделәр. Унан юлдары айырылды. Ғәлим өсөн белем тауы үтә бейек булып сыҡты, беренсе курстан һуң уҡыуын ташланы. Армияла йөрөп ҡайтты, шундуҡ өйләнде, алыпһатарлыҡ менән булаша башланы. Аяуһыҙ 90-сы йылдарҙа Фәрит директор булып эшләгән ауыл мәктәбенә байтаҡ ҡына ярҙам итте. Шәп егет, күңелсәк, тура һүҙле. Үҙендә ике магазин тота, ағас ярыу цехы асып ебәргән, тип ишеткәйне. Күптән инде шылтыратҡаны юҡ. Үҙгәреп киткән Ғәлим: һимергән, олпатланған. Башта, ғәҙәттәгесә, өр-яңы көләмәсенән ауыҙ иттерҙе:

– Тау башында урыҫ, башҡорт, инглиз, ҡытай баҫып торалар икән.

Башҡорт ҡысҡыра:

– Мин һине яратам!
Шаңдау әйләнеп ҡайта:
– Яратам, яратам, яратам!
Урыҫ:
– Я люблю тебя!
Шаңдау әйләнеп ҡайта:
– Тебя, тебя, тебя!
Инглиз һөрәнләй:
– I love you!
Ҡайтауаз яуаплай:
– You, you, you!
Ҡытай ҡысҡыра:
– Yuhwjhu-xnexkshcnl-sae!
Байтаҡ ваҡыттан шаңдау ишетелә:
– Нимә-ә-ә, инәң башы?

Бер талай көлөштөләр. Ғәлим, ғәҙәтенсә, ҡабалана ине, шуға ла һүҙҙе эшем эйәләренә хас ҡыҫҡа һәм аныҡ тотто:

– Фэрри! (Ул дуҫын шулай тип кенә йөрөтә, талип саҡтан тороп ҡалған ҡушамат.) Дуҫҡай! Һине күреүгә сикһеҙ шатмын-шатмын-шатмын! Ләкин ашығамын! Һорау: ҡайҙа ашығамын? Беренсе яуап – хакимиәткә! Дөрөҫ түгел! Икенсе яуап – мунсаға! Дөрөҫ түгел! Ә дөрөҫ яуап – һалым инспекцияһына ашығамын! Сөнки отчет бирергә кәрәк! Тимәк, һалпы яҡтарына һалам ҡыҫтырырға китеп барамын! Һуңлап китеп барамын! Шуны ғына әйтергә тип ингәнмен. Беренсенән – иртәгә беҙҙең шәмбе! Ял! Кис еңгәй менән миңә ҡунаҡҡа саҡырылаһығыҙ! Программа – турбаза, балыҡ, шешлек, мунса һәм банкет! Кире ҡағыуҙар ҡабул ителмәй! Икенсе, төп һорау…

«Ҡабалан батыр»ҙың (быныһы Ғәлимдең ҡушаматы, бала саҡтан килә) тауышы кинәт баҫылды:

– Путевка килгән, тип ишеткәйнем… Минең малайҙы әллә Италияға оҙатабыҙмы? Һытма йөҙөңдө, һытма! Мин һиңә көн һайын килеп һоранып йөрөмәйем! Ҡыҫҡаһы, Фэрри, тураһын әйт: булдыраһыңмы-юҡмы?

– Ғәфү ит, ҡартлас, беҙ уны…

– Аңлашылды! Хуш! Ашығамын, ашығамын…

Үпкәләне дуҫ кеше. Ҡәһәр төшкән путевка.

Ҡайҙан ишетеп өлгөргәндәр тиһең. Бушлай килгән юлламаны юллап көн аҙағына тиклем унлаған кеше инеп сыҡты. Төрлө «текәлек»тәге ағай-эненән шылтыратыуҙар өҙөлмәне. Бына бит нисек шәп эшләй «йүкә телефон»: юллама кисә кис, эш көнө тамамланып торғанда килде, ә бөгөн таңдан уҡ теңкә ҡоротторға тотондолар. Сәғәт алты тулып, сәркәтип ҡыҙ ҡайтып киткәс, беренсе ҡатта иҙән йыуған Сәжидә апай бәреп инде. Күҙҙәренән осҡондар сәсрәй, теле телгә йоҡмай:

– Бына мин ошонда ғүмер буйы иҙән йыуам! Теге иҫке ағас йортта йыуа башлағайным, һаман йыуам! Һеҙ, Фәрит ҡустым, ул ваҡытта арта барһа пионер булып йөрөгәнһегеҙҙер. Бала ғына инегеҙ, мин бит Һеҙҙе хәтерләйем. Әсәйегеҙ менән бер сама уҡыным мин…

– Сажидә апай, йомошоғоҙ бар инеме?

– Бар шул! Ҡайҙа ғәҙеллек? Техничка тигәс тә… Бирегеҙ минең ейәнгә лә путевканы! Радик, ин бында!

Ҡабул итеү бүлмәһе ишегендә ун-ун бер йәшлек бала күренде. Ул ҡурҡышынан ағарынған.

– Бына, ошо сабыйҙы нишләп рәнйетергә? Уның да ата-әсәһе юҡ! Ул да етем! Ул да «дүртле», «бишле»гә уҡый!

– Радикты беҙ пансионатҡа ебәрҙек тә инде былтыр. Йыл һайын улай ҡыланырға «Әндрәй ҡаҙнаһы» бармы әллә? Беҙ бит РОНО, ә мәрхәмәтлек фонды түгел.

Сажидә апай илап ебәрҙе

– Әрләмәгеҙ мине…

– Сажидә апай, Һеҙ нимә, кем әрләй? Мин хәлде аңлатам ғына бит. Әгәр минән генә торһа…

– Моғайын, берәй түрә балаһын ебәрерһегеҙ әле! Ана, Ғәйзуллиндыҡын ебәрәһегеҙ бит? Етемгә эләгәме инде ул…

Бушлай путевка бәхете эләккән Фәғиләнең кәйефе ҡырылды. Тик торғанда Италияға һурылып сығып китеү ике ятып бер төшөнә инмәй ине. Кәйефе ҡырылыуҙың иһә сере ябай: картуф күмәһе бар. Бизнес! Урамында ғына ла ете пенсионер йәшәй. Һәр береһе кәмендә 500 һум бирһә, йәмғеһе өс мең тәңкә ярым була ла ҡуя. Аръяҡтағы һуҡыр бабай, 700 бирәм, тип шылтыратты. Тимәк, күптәнге хыялы – ноутбук һатып алырға етә лә ҡуя! Бер синыф өҫтәрәк уҡыған Найлә тигән ҡыҙ үҙенең иҫкеһен һата. Ә инде тегендә, Италияға, барып йөрөй башлаһаң, эште бүтәндәр эшләп бөтәсәк. Ул саҡта еләк-бәшмәк йыйып һатырға ғына ҡаласаҡ.

Фәғилә, ун өс йәшлек ап-аҡ йөҙлө ябыҡ ҡыҙыҡай, бөтөнләй йомолдо. Ҡайһы ваҡыт шулай булып ала уның менән. Дәрес алдынан кемдер яман һүҙ әйтһә, өндәшмәй ҙә ҡуя. Бирелгән теманы энәһенән ебенәсә белә, өйгә эшен дә әҙерләгән. Әммә бәғере ҡата ла ҡуя. Тамаҡ төбөнә ултырған төйөрө һүҙ әйтергә ирек бирмәй. Ярай, уҡытыусылар ғәҙәтен белеп бөткән. Киләһе дәрескәсә тынғыһына теймәйҙәр. Етем күңеле – әсе күл, тиҙәр бит, саҡ ҡына һаҡһыҙ ҡыланһаң, сайпылырға тора… Әммә бөгөн көйөнөргә түгел, шатланырға кәрәк тә бит. Италия тиклем Италияға бушлай барып ҡайтыу бәхете һәр кемгә лә эләкмәй. Ләкин картуфты нишләтергә? Унан, ноутбукты берәйһенә һатып ебәрһәләр?

Сәбилә апай ҙа хафаға ҡалды. Һөйөнсө алырға ингән мәктәп директорын һорауҙары менән күмеп ташланы. Егерме ете йәшлек егетте әле яңы ғына туғыҙ йыллыҡ мәктәпкә хужа итеп ҡуйғайнылар:

– Китсе-китсе, ҡурҡмай ҡалайтып сығарып ебәрәһең ҡыҙ баланың яңғыҙын? Италия тейһеңме?

– Италия! Яңғыҙын түгел, группа менән. Ял көнө үҙем районға алып барам, унан – РОНО машинаһы менән Өфөгә. Шунан йыйылышып, медосмотр үтеп, ҡағыҙҙарын рәтләйҙәр ҙә – Мәскәүгә! Унан кесе йома таң менән вжжыт!

– Уф Алла, самолет менәнме?

– Самолет менән! Бына, Сәбилә апай, һин донъяла 61 йыл йәшәйһең, ә бер мәртәбә самолетта осҡаның булдымы?

– Булды, ти, булмайса! Поезға нисә тапҡыр ултырҙың, тип һора, ҡустыҡайым!

– Нисә ҡат ултырҙың һуң?

– Ике тапҡыр. Береһе ана Фәғиләнең әсәһе менән Магнитҡа балнисҡа барғанда. Икенсеһе – шул уҡ поезд менән кире ҡайтҡанда.

– Был ике ҡат тип һаналмай, бер ҡат була.

– Булһа булалыр… Ә нишләп Фәғиләне ебәрергә булдығыҙ? Унан башҡа балалар аҙмы ни?

– Балалар күп, лайыҡлылар аҙ! – Үҙенең тапҡыр яуабынан Марсель Рәмилович ҡәнәғәт булды.

– Унан, кемде ебәрергә, кемде юҡ, ҙур ағайҙар хәл итә, мин хәл итмәйем. Өфө хәл итә, – директор, былар баш тартып ҡуймаһын тиептер инде, юғарыға һылтанды. – Эйе, Өфө хәл итте. Министр районға шылтыратҡан, ә РОНО хужаһы минән кәңәш һораны. Мин инде ҡуш ҡуллап риза! Сөнки, мәйтәм, ҡыҙыҡай етем, мәйтәм, ҡыҙыҡай шәп уҡый, мәйтәм, саңғыла йөрөй, һушты алырҙай итеп йырлай, мәйтәм. Һуң, былтыр республикаға барып ҡайтты ла баһа, беренсе урынды алып!

Марсель ауыҙына һыу уртлағандай ултырған Фәғиләгә кереште

– Һин бит сит илгә, балалар лагерына бараһың. Унда төрлө илдәрҙән халыҡ була. Халыҡ тигәс тә, һинең һымағыраҡтар инде. Социаль яҡтан теге нейтелмәгән, яҡланылмаған етем балалар. Африканан, Швейцариянан, Швециянан, Американан, Ҡытайҙан, Германиянан, Польшанан һәм башҡа илдәрҙән… – Ҡунаҡ, галстугын бөтәрләй-бөтәрләй, үҙе белгән байтаҡ илдәрҙе һанап сыҡты. Һәм һығымта яһап ослап ҡуйҙы.

– Шулай булғас, инглиз телендә аралашырға форсат сығасаҡ. Һин шартлатып һөйләйһең бит инде.

Йорт хужабикәһе тыныслана төштө. Ҡыҙҙы ер аяғы, ер башы булған ят, әммә һоҡланғыс хозур яҡтарға ебәрергә фатихаһын бирҙе. Ниңә, әйҙә йөрөп ҡайтһын, дәрт итһә. Беҙҙең кеүек, ус төбөндә ятҡан һаҫыҡ Магнитты күрҙем, тип хәбәр һөйләп кеше көлдөрөп ултырмаһын. Унан, хөкүмәт иҫәбенә тотошлай бушлай алып баралар, ти бит. Шулай ҙа ул-был хәжәтенә, мәҫәлән, туңдырма һатып алыуына аҡса бирергә кәрәк булыр, берәй 100 тәңкә. Етем тигәс тә, кәм-хур булып йөрөмәһен. Өҫ-башы әлегә арыу ғына, ана теге аҙнала джинсы салбар алып ҡайтып кейҙерҙе.

Сәй эскәндә, Сәбилә апай тауышын баҫып ҡына, әйтерһең, кемдер тыңлап тора, һорай ҡалды:

– Берәй төрлө ризалаштырырға кәрәктер бит РОНО хужаһын?

– Уй, уныһын белмәйем. Кәрәктер, моғайын, – тине директор.

– О-о, Италия! Унда, беләһегеҙме нисек күңелле!

– Нимәһе күңелле?

– Һуң, барып төшкәс, бушлай ашаталар, бушлай илде күрһәтәләр. Музейҙарға, киноларға, концерттарға, театрҙарға алып баралар, төрлө экскурсияға йөрөтәләр унда. Теге нейҙәре бар ҙа инде уларҙың, һыуҙа батып ултырған ҡалалары! Венециялары! Тағы ла ҡолап барған башнялары бар! – Директор йыр һәм хеҙмәттән уҡыта ине, шуға ла артығын таусирлай алманы. – Ә-ә, тағы ла унда диңгеҙ бар! Ҡара диңгеҙ.

«Урта диңгеҙ», «Адриатика» тип кенә эстән төҙәтеп ҡуйҙы Фәғилә. Яңылышмаһа, шул ике диңгеҙ ярында урынлашҡан Италия. Был илдең карталағы һынланышы итеккә оҡшаған. Тибенгеһе, йәғни шпоры ла, дағаһы ла бар, ә иң осонда – туп рәүешендәге утрау. Итектең икенсеһе һыңары – ерҙең теге яғында, Яңы Зеландияла. Был утрау ҙа ҡиәфәте менән нәҡ итек! Әйтерһең дә, ҡасандыр бик ҙур Алпамыша йән көсө менән сисеп бырағтырған. Һәм бер һыңары Төньяҡ, икенсеһе Көньяҡ ярымшарға барып төшкән... Фәғилә географияны бик ярата.

Йылдың-йылы ауыша барған Пизан башняһы тураһындағы яңылыҡ өй хужабикәһенә көслө тәьҫир яһаны:

– Китсе-китсе! Балам, ул ҡолап барған вышкаларына менеп йөрөй күрмә тағы. Үҙең менмәйем тиһәң, моғайын, берәү ҙә көсләп мендермәҫ…

– Яңғыҙын уларҙың ебәрмәйҙәр. Һәр саҡ группалары менән генә, гид менән генә йөрөтәләр. Сөнки тәртибе шул, шулай тейешле.

Директор ниңәлер Фәғиләнең ҡулын ҡыҫты, тантаналы линейкала һөйләгәндәй көр тауыш менән өндәште:

– Ҡотлайым! Киләсәктә лә уҡыуыңда һәм кластан тыш эштәрҙә уңыштар теләйем!

***

Фәғиләнең әсәһе үпкә ауырыуынан үлгәс, атаһы йәш ҡатын алып ҡайтты. Өйҙәгеләрҙең араһы тәүге көндән үк боҙолдо. Күҙ ҡабаҡтарын күгәртеп буяп алған ҡаҡса ҡатын өләсәһен ҡосаҡлап алып һөйгән булды.

– И-и-и, ҡәйнәмде!

Унан шундай уҡ яһалма, үтә сөсө тауыш менән Фәғиләгә өндәште:

– И-и-и, ҡыҙымды минең! Хәҙер мин булырмын инде әсәйең. Кил бында, кил, балаҡайым…

Фәғилә тәртешкәләй ябыҡ, бырау ҡарашлы был ҡатындың әсәһе булыуын теләмәй ине. Йән өҙгөс тауыш менән сәрелдәп ебәрҙе:

– Һин минең әсәйем түгел! Минең әсәйем үлде!

Атаһы бер-ике мәртәбә тауыш сығарып, йәш бисәһен урынына ултыртырға маташып ҡараны ҡарауға. Ләкин тегеһе баш бирмәне. Үҙенән дә нығыраҡ талашты, сапсышты, сыр-сыу килеп илашты. Ауылына ҡайтып киткеләне. Ярата ине Фәүзи ағай, артынан барып, инәлеп-ялбарып тигәндәй алып ҡайтты.

– Был зәхмәт тамам сихырлап алған икән баламды, – тип һөйләнде өләсәһе.

Ҡатын йортта яңы тәртип урынлаштырҙы. Өләсәһен, төпкө бүлмәгә шаршау ҡороп, тәҙрә төбөнә күсерҙеләр. Әбейҙең ашау-йәшәүе хәҙер айырым ине. Улы ла, килене лә уға ҡаршы ҡаты һүҙҙәр әйтте. Аш өсөн тимер сеүәтә, эсәренә күп ҡырлы стакан, бер ҙур ҡалаҡ тәғәйенләнеләр.

– Йәшәрен йәшәгән, ашарын ашаған! Йәлләмә! – тип баланы ла тыйып ҡуйҙылар. Фәғилә йәшереп өләсәһенә ризыҡ ташыны. Тик әбейҙең көндәре һанаулы ғына ҡалғайны. Ҡайғыһы башына етте уның. Улы етәкләп алып ҡайтҡан хәсрәттән һарғайҙы. Ҡыш тәҙрәнән шарлап өргән ел һуңғы һаулығын алды. Күк үләнгә сығыр-сыҡмаҫтан гүр эйәһе булды.

Әйберҙәрен сығарып үртәнеләр, галуштарын, таяғын, протез тештәрен сүплеккә ташланылар. Иртәгеһенә Фәғилә теге йомшаҡ сеүәтәне эҙләп табып, өйгә алып ҡайтты.

– Һеҙ ҡартайғас, шаршау ҡороп, икәүегеҙҙе лә тәҙрә янына күсерәм дә ошо һауыттан ашатам!

Тиҙҙән атаһын төрмәгә ултырттылар, кеше малын урлап һуйған өсөн. Үгәй әсәһе Фәғиләне балалар йортона урынлаштырам тип түбәһе күккә теймәй, осоноп-талпынып йөрөй башланы. Бәхетенә, инәһе Сәбилә килеп, күрше ауылға алып ҡайтып китте. Ире күптән мәрхүм ине, балалары булманы. Фәғилә берҙәнбер йыуанысына әйләнде. Һәм бына Италияға барыу форсаты насип булды етемкәйгә. Тик ҡыҙ битараф ҡалды, һаман да үҙенең күмелмәй ятҡан картуфы хаҡында тылҡыны.

РОНО мөдире сәғәт һигеҙ тулғас ҡайтырға сыҡты. Хәҙер эш бер аҙ кәмене, мәктәптәрҙә имтихандар тамамланды. Инде йәйге ялды ойоштороу, ремонт эштәре килеп баҫты. Өҫтәүенә, бәләкәй ауылдарҙағы мәктәптәрҙе ябыуҙы бурыс итеп ҡуйҙылар. Ата-әсәләр ҡаңғыра, эшһеҙ ҡалған уҡытыусылар зар илай. Хатта

өҫтәгеләр, министрлыҡтағылар, үҙҙәре ни эшләргә белмәй. Ә бында, төбәктә, бөтөнләй мәхшәр. Баш ҡатҡан инде. Быйыл отпуск бөтөнләй тәтемәҫ моғайын, бәлки, берәй аҙна-ун көнгә ял һорап алыр. Бирһәләр…

Июль ҡояшы яңы һүрелеп, ергә оҙон-оҙон күләгәләр һуҙа башлағайны. Район үҙәге бик ҙур ауыл ине. Рәсми ойошма-учреждениеларҙан ситтәрәк, йылғаның һул ярында яңы биҫтә башлана. Ғәмәлдә түрә-ҡара, уңышлы эшҡыуарҙар, ғөмүмән хәллерәк халыҡ йәшәгәнлектән, «Санта Барбара» тип йөрөтәләр уны. Фәрит тә бында күптән түгел йорт һалып сыҡҡайны. Бер яҡ күршеһе – полиция начальнигы, уның коттеджы, подвалын да иҫәпләһәң, өс ҡатлы килеп сыға. Фәриттең ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған өйөнә ауып барған кеүек. Уң яҡта һалым инспекцияһының баш бухгалтеры әкиәт һарайы төҙөп ҡуйҙы. Әлегә күсеп сыҡмаған әле. Артта ниндәйҙер курдмы-әрмәнме йәшәй. Уны күргәне лә юҡ, ихатаһы бейек таш ҡойма артында. Төндә генә килеп-китеп йөрөй, шикелле. Бәғзе ваҡыт затлы машиналар килеп тула. Шикле кеше.

Ләкин иң күп бәләне ҡаршыла йәшәгән Фәриҙә, дөрөҫөрәге, уның ун-ике, ун өс йәштәрҙәге малайы килтерә. Саҡ ҡына «етешмәй» шикелле ул балаға. Бер көнө эргә-тирәләге селбәрәне йыйып банда төҙөгән. Кинолағы кеүек. Һәр берендә уйынсыҡ пистолет, күҫәктәр. Унан икегә бүленеп, «стрелка» тәғәйенләгәндәр. Һуғышҡандар. Унан еңелгән малайҙарҙы хилаф эшкә мәжбүр иткән. Береһе аҡса табып килтергән. Үтеп барыусыға таш атҡандар. Шамил, үҙен батыр итеп күрһәтергә теләптер инде, Фәриттең машинаһына оятһыҙ һүҙ сыймаҡлаған.

– Шамил, нишләп эш боҙаһың? Һин ҙур егет тә инде! – Фәрит күршегә инде, малай менән ысын теләп «аңлашырға» ниәт ҡылғайны. Тик тегеһенең оло ағай менән һөйләшкеһе килмәне, башын телевизорға борҙо. Әйтерһең дә, ишетмәй.

– Шамил, Шамил, ҡара әле бында! Миңә ҡара! Ни өсөн тәҙрә ваттығыҙ? Минең машинаны…

– Булмаҫ, Шамил улай алама малай түгел. Эйе бит, улым? – Фәриҙә, ғәҙәтенсә, малайы яғына баҫты. – Икенсе берәйһе ҡыланғандыр...

– Һуң, күршенең ҡапҡаһына видеокамера ҡуйылған. Ул әйтте миңә.

– Ярай, минең малайҙы төрмәгә ултыртығыҙ улай булғас! – Фәриҙә ҡапыл ҡыҙыша башланы. – Шаян тигәс тә… Унан, бисәндән ҡурҡмай, нисек килеп индең минең өйгә, ә, Фәрит Мотаһарович?

Үткән көҙ күрше ауылдан бынамын тигән фермер иренән айырылып ҡайтҡайны.

– Ата-әсәһе бар саҡта ул ниндәй етем булһын? – Фәрит хужабикәнең мыҫҡыллауын ишетмәгән булды, уны тынысландырырға тырышты.

– Етем инде, тере етем!

Ҡатын артынан ҡысҡырып ҡалды:

– Хәлеңдән килһә, ултырт мине лә төрмәгә! Мәгәр хәлеңдән килһә!

Фәрит Мотаһарович сығып киткәс, малайына сәпәп ебәрҙе. Тегеһе ырғып торҙо, күҙе шәмәреп бер ҡараш ташланы ла атылып сығып китте. Мунсаға инеп ләүкәгә һуҙылып ятты, сарылдап илай башланы. Ике усы менән битен ҡаплап байтаҡ һулҡылданы. Ябыҡ яурындары ҡалтыранды. Ҡурҡылдаҡ тауыҡтай өтәләнеп әсәһе килеп етте. Ҡарпыш ҡолаҡтары ҡыҙарған, бите буйлап йәш аҡҡан улын күреп, үҙенең йөрәге өҙөлөп төшөр хәлгә етте. Ҡосаҡлап алды ла күкрәгенә ҡыҫты:

– Эй, тере етемкәйемде минең. Атаң йүнле булһа, был хәлгә лә ҡалмаҫ инек…

Әсәле-уллы икәү байтаҡ балауыҙ һыҡты. Ғәҙәти хәл ине был. Тәүбәгә килгән

малай иртәгә йәнә эш боҙасаҡ, унан йәнә зыян күреүселәр менән «аңлашырға» тура киләсәк. Йәнә илаш, йәнә талаш сығасаҡ. Был ҡалыплашҡан хәлдең осоҡырыйы күренмәй ҙә, һиҙелмәй ҙә кеүек. Һәм бына бушлай путевка. Улын сит илгә ебәрергә ныҡлы ҡарарға килде. Бер аҙ тынысланып, ер-һыу күреп ҡайтһын әйҙә. Үҙе лә унан ял итер, исмаһам. Тик нисек Фәриттең, ҡасандыр уның Фәрите булған түрәнең, күңеленә асҡыс табырға? Хәйер, бер генә һүҙе лә етер ине. Был хулиган малай, үҙе белмәһә лә, райондың төп мөғәллиме Фәрит Мотаһар улы Ырғыҙбаевтың улы ине…

Фәрит дүртенсе курстан һуң өйләнде. Филология факультетынының иң уңған һәм сибәр ҡыҙын ҡаратып алды ул. Йәштәр айырым фатирҙы ҡуртымға алып йәшәй башланы. Эйе, тыныс ҡына башланып китте уларҙың ғаилә тормошо. Ир кеше, уҡыуынан тыш, бер ойошмала ҡарауылсы булып эшләне. Кәләшен ярата ине, уға артыҡ көс төшөрмәҫкә тырышты. Шул ғына хәсрәттәре бар ине – ике йәш йөрәктең мөхәббәт емеше булырҙай сабый ғына донъяға килергә ашыҡманы. Түлһеҙ ине Нәфисә. Төрлө табиптарға, өшкөрөүселәргә, хатта ки күрәҙәселәргә барып ҡаранылар. Һуңғыһы, үҙен әүлиә тип йөрөтөүсе әбей, серле генә һүҙҙәре менән таң ҡалдырҙы:

– Ҡыҙым! Һинең балаң булмаҫ. Иреңдеке булыр, әммә был турала арыуыҡ ваҡыт үткәс белерһегеҙ. Тик, ҡара уны, шул мәл еткәс, ауан ҡылығың менән харап итеп ҡуйма балаҡайҙы…

Был юрауҙың ни аңлатҡанын белмәйенсә, аңҡы-тиңке булған йәштәр ҡайтып китте. Нәфисәһе тормошҡа аныҡ ҡарашлы, тәүәккәл ҡатын ине, кит юҡты һөйләмәһен, булмаҫ, тине лә онотто. Бәлки, үҙен дә, ирен дә йыуатыр өсөн шулай ҡыланғандыр. Уныһын кем белә? Бер нисә көндән Фәрит ҡатынынан йәшереп кенә теге шомло әбейгә килде. Ләкин уныһы асылманы, теге юлы әйткән юрауына бер һүҙ ҙә өҫтәмәне. Шулай ҙа аҙаҡтан сәйер генә риүәйәт бәйән итте:

– Борон Син яғында, хәҙергесә әйткәндә, Ҡытайҙа, бер бабай булған. Әбейе һәм яңғыҙ улы менән ил сигендә – заставала йәшәгән. Бик фәҡир көн иткән был ғаилә. Бер заман уның аты юғалған. Хужа бик ҡайғырған, әммә әбейе әйтә икән: ҡайғырма, бәлки, был яҡшығалыр! Күп тә үтмәй, илгә яу килгән. Кемдең аты бар, һәммәһен дә ғәскәргә алып киткәндәр. Ә бабайҙың ғәзиз улы өйҙә тороп ҡалған. Ҡот осҡос һуғыш булған, һөҙөмтәлә киткәндәр кире әйләнеп ҡайтмаған. Ябай ғына осраҡлыҡ арҡаһында егет ҙур ҡазанан – үлемдән ҡотолған. Шуға ла ҡытайҙарҙа иң яратҡан әйтем: «Заставала йәшәгән ҡарттың аты юғалған. Бәлки, был яҡшығалыр...»

– Был легенда һеҙгә Хоҙай тарафынан, өҫтән төшөрөлдөмө? – тип һораны әҫәрләнгән Фәрит. Эйе, ныҡ тәьҫир итте был шомло йортта ишеткән сәйер әкиәт.

Әбей өндәшмәне. Студентҡа иғтибар менән ҡарап ултырҙы-ултырҙы ла кинәт көлөп ебәрҙе:

– Юҡсы! Мин уны радионан ишеттем!

Ирҙең уҡыуы тамамланғас, Өфө эргәһендә, сәнәғәт предприятиелары шыҡлап тултырылған ҡасабала, эшләнеләр. Ике йыл ғүмерен шул ҡотһоҙ төбәктә үткәрҙе. Унан директоры менән һүҙгә килешкәс, барыһына ҡул һелтәне лә үҙ яғына ҡайтып китте. Көньяҡ райондарҙың береһенә, урман төпкөлөндә ятҡан Ҡарағайлы ауылына эшкә төштөләр. Фәрит – физика, Нәфисә башҡорт

теле уҡытыусыһы булып. Мәктәптең иҫке генә өйө бар ине, элекке интернат, шуны йүнәтеп йәшәй башланылар. Ҡатыны әле бишенсе курста ғына ине, ситтән тороп уҡыуға күсте. Йылына ике тапҡыр баш ҡалаға имтихан тапшырырға йөрөнө. Сессиялары берәр айлап һуҙыла ине. Был мәлдәрҙә ҙур ағас йортта яңғыҙы ҡалған Фәриткә айырыуса ҡыйынға тура килә. Эсе бошҡанда мәктәпкә яҡын уҡ йәшәгән хеҙмәт уҡытыусыһына инеп кәрт һуғалар йәки сатраш уйнайҙар. Уныһы һарғайып ҡатҡан ҡарт буйҙаҡ ине.

– Тишек, йәһәннәм тишеге бит был ауыл! – тип уфтанышып алалар. – Ней клубҡа дискотекаға сығып булмай, уҡыусылар туп-тулы. Ней концерт килмәй, ней кино күрһәтмәйҙәр…

Киләһе йылы, ҡышҡы каникулдар бөтөү менән, мәктәп тормошон йәнләндереп ебәргән ике ваҡиға булды. Тәүҙә өҫтән фарман килде. Баҡһаң, районда үҙэшмәкәр театрҙарҙың фестивале башлана. Тимәк, һәр урта мәктәп спектакль әҙерләргә тейеш. Ҡарағайлылар мәш килеште, халыҡта бығаса йоҡомһорап ятҡан дәрт уянды. «Ураҡсы ҡыҙ» тигән пьесаны һайлап алдылар. Уҙған быуаттың утыҙынсы йылдарында барған һәм коллективлаштырыу осорон һүрәтләгән фәһемле лә, күңелле лә драманы. Ауылдың барлыҡ ижади көсө – ҡарты ла, йәше лә уйынға йәлеп ителде. Билдәле, төп яуаплылыҡ та, төп өмөт тә йәш мөғәллимдәр иңендә ине. Фәрит кистәрен күнекмәләр барған ауыл клубынан сығышманы. Бының йәнә бер сәбәбе бар: Нәфисәһе нәҡ шул көндәрҙә сираттағы имтихандарын тапшырырға китте. Өйҙә иһә күңелһеҙ, өйҙә эс боша.

Өҫтәүенә, саҡ ҡына алдараҡ, ҡар-буранлы ғинуар башында, ауылға ғәжәйеп һылыу ҡыҙ – Фәриҙә килеп төштө. Егерме биш-егерме алты йәштәрҙә булғандыр ул саҡта. Ысынлап та һоҡланып туймаҫлыҡ ине яңы география уҡытыусыһы. Сөм-ҡара оҙон сәстәре биленә етеп тора, күҙҙәренән шаян осҡондар сәсрәй, ҡабарынҡы алһыу ирендәре араһынан мәрйендәй ап-аҡ тештәре балҡып китә. Тыҡ-тыҡ атлап, юҡ, бейеп кенә йөрөй. Уҡытыусы ирҙәр һәм юғары синыф уҡыусылары кемуҙарҙан ғашиҡ булып бөттө яңы «географ»ҡа.

Һәм иң тулҡынландырғаны – ҡыҙҙы ошо уҡ элекке интернат бинаһына урынлаштырҙылар. Коридорҙың теге осондараҡ йәшәп ятҡан инглиз теле уҡытыусыһы янына өйҙәш булып керҙе. Уныһы ла институтты яңы бөтөп, ошо уҡыу йылы башында килгәйне. Шулай итеп, Ырғыҙбаевтар күршеле булдылар. Ләкин артыҡ ҡатнашманылар. Ҡыҙ-ҡырҡындың үҙ сере, үҙ хәстәрлектәре, ә ирле-ҡатынлы был икәүҙең үҙенеке.

Фәриҙәнең артислыҡ һәләттәре, күрәһең, йөҙөнә сыҡҡайны.

– Бына беҙҙең төп героиня! Сәрбиназды фәҡәт Фәриҙә Хөсәйеновна уйнарға тейеш!

Шулай хәбәр һалды бер көнө хеҙмәт уҡытыусыһы, Фәриттең дуҫы. Йыйылышта ултыралар ине. Директор ҡашын төйҙө:

– Мин, әлбиттә, ҡаршы түгел. Фәриҙә Хөсәйеновнаға ниндәй роль бирһәң дә булдырыр ине! Тик беҙҙең төп геройыбыҙ бар. Ул инде нисәмә репетицияла ҡатнашты, һүҙҙәрен күптән ятлап бөткән.

Фәриҙә әлегә ят даирәлә шым ҡалыуҙы хуп күрҙе. Әммә төп герой ролен башҡарған йыр уҡытыусыһына һынсыл ҡараш ташланы. Иғтибарлыраҡ берәйһе күҙәтеп ултырһа, мәгәр был ҡарашта сәм сатҡыларының сәсрәп киткәнен тойор ине. «Бәхетеңә алданыраҡ өлгөргәнһең, юғиһә минән ни ереү артығыраҡ?» Шундай мәғәнә һалынған ине был ҡарашҡа.

Фәриҙәгә һөҙөмтәлә арттараҡ йөрөгән бер ҡыҙҙы уйнарға тура килде. Фәрит

иһә гармунсы егет Ғәле булып йөрөй. Һылыуҡай менән ул бер күренештә генә осраша. Имеш, кулактар тарафынан ҡотортолған бер өйөр аңһыҙ әбейҙәр һөрләгөшөп килеп сығалар ҙа гармунсы егет – комсомолец Ғәлегә ябырылалар. Уларҙың башлығы, убырлы ҡарсыҡ, йәмһеҙ итеп аҡырып ебәрә:

– Бөтөр, дөмөктөр ҡәбәхәтте!

Һәм иң ҡыҙығы, был «убырлы ҡарсыҡ»ты иң сибәр ҡыҙ Фәриҙә башҡара! Сөнки уға бүтән роль ҡалмаған. Һис кемдең дә убырлы ҡарсыҡ булғыһы килмәй. Сюжет буйынса, кулак әбейе Ғәленең башына таяҡ менән тондора. Ул йығылғас, синфи дошмандар – аңһыҙ, һөмһөҙ, наҙан ҡарсыҡтар «камсамул»ды «йыртҡыстарса» туҡмай башлай.

Был «фажиғәле» күренеште Фәрит таңдан уҡ менән көтә башлай. Оҡшай, бик оҡшай уға Фәриҙә, нимә эшләһен инде. Өфөлә йөрөүсе ҡатыны алдында ла уңайһыҙ. Үҙен әллә ниндәй енәйәт ҡылған бәндә кеүек тоя. Ләкин иртәнсәк дәрескә барып, уҡытыусылар бүлмәһендә йәки коридорҙа ҡыҙҙың аҡ свитерын шәйләп ҡалһа, йөрәге дарҫлап тибә башлай. Йыш ҡына уларҙың «тәҙрәләре», йәғни буш дәрестәре бер ваҡытҡа тура килә. Яңылыш ҡына ашханала тап булып, бергәләп сәй эсәләр. Йәки уҡытыусылар бүлмәһендә сатраш уйнайҙар. Унан кискеһен йәштәр уйынға ашыға.

– Дөмөктөр, бөтөр ҡәбәхәтте!

– Эх, ошондай убырлы ҡарсыҡ миңә әләкһә! – Хеҙмәт уҡытыусыһы күнекмәләр араһында тәмәке тартҡанда уфтанып алғылай. Эйе, шәп шул, бигерәк шәп ҡыҙ! Ул оҙон таяғын күтәреп ипләп кенә Ғәленең башына төшөрә, үҙе шаян йылмая.

– Түк Фәрит ағайҙың башына! Бына шулай, бына шулай. Ҡолағыҙ, һеҙ үлдегеҙ.

«Риза, риза, һылыуҡай! Һинең ҡосаҡта мең тапҡыр үлергә лә, терелергә лә риза… Нәфисәкәйем, ғәфү ит. Шайтан ҡоторта мине». Ғәле ысын теләп иҙәнгә ауа.

– Ул ниндәй «түк», ул ниндәй «Фәрит ағай»? Ул ниндәй «ҡолағыҙ, үлдегеҙ»?

Режиссер бисә, бер үк ваҡытта клуб мөдирәһе, уҫал күренергә тырышып, бармаҡ янай. Ул, әйткәндәй, ошо ике парҙы иң уңышлы тип һанай. Фәриҙәне төп ролгә ҡуйырға ынтылып-ынтылып ҡараны ла бит. Тик әлеге лә баяғы директор менән ныҡлап һүҙгә килешергә теләмәй. Тегенең балдыҙы уйнай бит Сәрбиназды.

Бер көнө ҡыҙ, дәрестәр араһында тап булып, үтенесен еткерҙе.

– Фәрит ағай (педагогтар бер-береһен, ғәҙәттә, рәсми исем-шәрифтәре менән йөрөтә, ләкин Фәриҙә уға нәҡ шулай, ябай ғына, мөләйем итеп өндәшә), беҙҙең бүлмәлә тәҙрә ябылып етмәй, шуны ҡарап бирмәҫһегеҙ микән?

– Әлбиттә, бирәм! – Ирҙең шатлығы йөҙөнә сыҡты, ә ҡыҙ бер генә йылмайып, һирпеп ҡараны ла коридор буйлап тыҡ-тыҡ атлап китеп барҙы.

Дәрестән һуң Фәрит спорт кейемендә генә, аяғына тапочкалар ҡатып, күрше бүлмәгә килде. Ҡыҙҙар элекке ятаҡхананың йәтеш кенә бүлмәһен биләйҙәр ине. Сағыу ғинуар ҡояшы ҙур тәҙрәләрҙәге ҡорғандар аша бүлмәгә төшә. Таҙа һәм матур йәшәй ҡыҙҙар. Мөйөштә телевизор, ишектең уң яғында өҫтәл. Һыуыткыс. Кәштәләрҙә китаптар, шифоньер. Моңло ғына көй ишетелә, хужабикә радиоһын аҫҡан икән. Көндөҙгө концерт бара.

Ҡыҙ үҙе генә. Өҫтөндә ҡыҙыллы-күкле сәскәләр төшөрөлгән бик матур йәшел халат. Һығылмалы нәҙек кәүҙәһенә һылашып ҡына тора. Оҙон сәстәрен күбәләй итеп түбәһенә өйгән. Хуш еҫтәр аңҡып китте үҙенән.

– Һеҙҙә күңелле икән, Фәриҙә Хөсәйеновна. Ә бына беҙҙең яҡҡа ҡояш төшмәй.

– Беҙҙә һәр саҡ күңелле ул. Сөнки, кемдер әйтмешләй, күңелһеҙ тормош булмай, күңелһеҙ кешеләр генә була

– Ә кем әйткән һуң ул алтын һүҙҙәрҙе?

– Әлләсе, әле яңы ғына үҙем әйттем! – Фәриҙә сыңғырҙата көлөп ебәрҙе.

– Тимәк, Һеҙҙе бөйөк кешеләр рәтенә индерергә мөмкин?

– Уй, Фәрит ағай, минең ундай алтын һүҙҙәрем аҙым һайын. Тик яҙып барыусыһы ғына юҡ…

Артабан да әңгәмәләре уйынлы-ысынлы юҫыҡта дауам итте. Фәрит кире үҙ бүлмәһенә (дөрөҫөрәге, Нәфисә менән икеһенең бүлмәһенә) инеп ҡасау, сүкеш алып килде. Насар ябылған форточкаларҙы тығыҙлап сыҡты. Фәриҙә котлет ҡыҙҙыра ине, унан ваҡ бәлештәр эшләргә кереште. Үҙе баяғы хәбәрен дауам ҡылды:

– Әйтәләр бит, кеше ни тиклем йүнһеҙ хәбәр һөйләй, шул тиклем аҡыллы күренә!

– Юҡ, Һеҙҙең хаҡта улай тип әйтергә һис кемдең теле әйләнмәҫ! – Фәрит ни әйтергә белмәне, тырышып-тырышып кире ҡағырға кереште.

– Юҡ, мин бит үҙемде әйтмәйем… – Фәриҙә сәхнәләге кеүек «текә» ҡиәфәткә керҙе. Ысынлап та уға фәҡәт актриса булырға кәрәк!

– Сөнки мин бөйөк! Сөнки мин Клеопатра!

Йәнә селтерҙәтеп көлөп ебәрҙе. Унан баяғы фекеренә әйләнеп ҡайтты:

– Беҙҙең институттағы уҡытыусы әйтә торғайны. Мәгәр кеше араһында әйтер һүҙегеҙ юҡ икән, бер нөктәгә ҡарап тик кенә, өндәшмәй ултырығыҙ. Һирәк-һаяҡ «м-дааа» йәки «эйе, шула-а-ай» тигәнерәк ауаздар сығарып ултырыу тәҡдим ителә.

– Ни өсөн?

– Сөнки шулайтһаң, аҡыллы күренәһең. Фәйләсуф тип ҡабул итәләр!

Көлөштөләр. Күңелле лә, рәхәт тә ине бында.

– Ә Маргарита ҡасан ҡайта?

– Әлләсе, ул, факультатив үткәрәм, ти ине.

Фәриҙә күршеһен яңы ғына бешкән котлеттар, ваҡ бәлеш менән һыйланы. Сәй эстеләр. Аш артында бер мәл күҙҙәре осрашты. Икеһе лә тертләп ҡуйҙы.

Ошо хәлдән һуң Фәрит бер ни ваҡыт ҡыҙҙарға инмәй йөрөнө. Фәҡәт бүлмәһендә булғанда коридорҙағы аяҡ тауыштарын тыңлап ята ине. Дөрҫ-дарҫ баҫып ауыр кәүҙәле Маргарэт Тэтчер үтә. Ҡушаматты инглиз теле уҡытыусыһына балалар күптән йәбештергәйнеләр. Ә Фәриҙәнең аяҡ тауыштары үҙе кеүек үк наҙлы, йомшаҡ, тигеҙ. Ҡыҙ хаҡында бик йыш уйлана, хыяллана башланы. Имтихан биреп йөрөүсе ҡатыны менән телефон аша һөйләшеп торҙо. Нәфисә алдында үҙен ниндәйҙер оло ғәйепле кеше һымаҡ һиҙә ине. Ҡыҙ менән аралары яҡынайған һайын, был тойғо көсәйә, ҡабарына барҙы.

Режиссер ҡатын барыбер үҙенекен итте. – Фәриҙәне төп ролгә тәғәйенләнеләр. Директор тыштан был аҙымды хуплаған булды, әммә үҙ һүҙле «географичка»ға асыуын төпкә йәшерҙе. Балдыҙы киҙеү йоҡтороу һылтауы менән больничный астырҙы ла репетицияларға килмәй башланы.

Яңы Сәрбиназды башҡа артистар ҙа яратып ҡабул итте. Ҡыҙ үҙе лә бик һәләтле, тырыш ине. Һә тигәнсе һүҙҙәрҙе ятлап алды. Оноҡкан ерҙәрендә үҙенән сығарып та һөйләргә күп һорамаҫ. Иң мөһиме, уның «ураҡсы ҡыҙы» күпкә йәнлерәк, ихласыраҡ, ышандырғысыраҡ килеп сыға. Ә инде элекке ролен,

йәғни «убырлы ҡарсыҡ»ты Зөләйха исемле сәркәтип ҡыҙға тапшырҙылар. Был «ҡарсыҡ» Фәритте саҡ ғәрип ҡалдырманы. Хәйер, баштан бәйән итәйек.

Фестиваль асылыр алдынан ғына спектаклде ауылда ҡуйҙылар. Халыҡ эркелешеп килде. Сәхнә алдын башланғыс синыф уҡыусылары солғап алды. Һыуыҡтан ҡыҙарған ҡулдарын сәхнә ҡырыйына һалып, йомшарған танауҙарын мыршмырш килтергән бала-саға ағас ботағына ҡунған сәпсектәрҙе хәтерләтә ине.

Беренсе күренештә Ғәле гармун тартып йырларға тейеш. Фәрит йырлауын арыу ғына йырлай. Ләкин гармун тарта белмәй. Шуға ла ул сәхнәнең уң ҡырында шаршау эргәһендә тороп йырларға тейеш. Күректәрҙе тегеләй-былай тартҡылаған була, ә эстә боҫоп торған клуб мөдирәһе баянда һыҙҙыра ғына. Ситтән, тамашасы залынан ҡарағанда, Фәрит уйнай ҙа, йырлай ҙа булып күренә. Бына ошо урында тәүге «әкәмәт» килеп сыҡты. Алдан тәғәйенләгән кеше спектакль өсөн кәрәкле тальянканы килтермәгән, имеш. Ул ғына ла түгел, үҙе лә ғәйеп булған. Бына һиңә мә. Йүгерешеп йөрөп гармун эҙләнеләр.

– Бына ошонда, гримеркала, элек берәү була торғайны. Эҙләгеҙ, эҙләгеҙ! – тип өтәләнде клуб мөдирәһе. Ниһайәт, шкаф артына төшөп ятҡан бик иҫке ҡорамал хасил булды. Фәриткә тотторҙолар ҙа артынан этәреп тигәндәй сәхнәгә сығарып ебәрҙеләр.

Алдында ҡара бушлыҡ, тик алда ғына мыш-мыш танау тартҡан малайҙарҙың күҙе йылтырай. Гармунын һуҙып ебәреүе булды, күреге икегә өҙөлдө лә ҡуйҙы. Саңы борҡ итеп ҡалды. Әйтерең бармы: юғалған ҡомартҡы бит ун йыллап туҙан йотоп, шкаф артында боҫоп ятҡан! Халыҡ шаулатып ҡул сапты. Фәрит, һыр бирмәҫтән, йырлап ебәрҙе. Ҡыҙарып-бүртенеп шаршау артына ҡайтыуына Фәриҙә суп иттереп үбеп алмаһынмы! Ярай әле, бүтәндәр күрмәне.

– Молодец, юғалып ҡалманың! Мин спектакль өҙөләме тип торам…

Фәрит аңына килгәнсе, ҡыҙҙы сәхнәгә саҡырҙылар. Ул ғәжәйеп матур йырлай ине. Фәрит сәхнәлә күбәләктәй бөтөрөлгән Сәрбиназға ҡарап эстән моңланды:

Ай урағын алып ҡулдарына,
Көмөш шишмәләрҙән һыу алдың.
Көмөш шишмәләрҙән һыу алғанда
Кем исеменә йырҙар йырланың?

Унан йәнә Фәритте сығарҙылар. Нәҡ ошо урында икенсе «әкәмәт» килеп сыҡты. Әлеге лә баяғы «убырлы әбей» эште боҙҙо. Уны хәҙер, әйтеүебеҙсә, директорҙың сәркәтибе уйнай ине. Зөләйха ҡалын күҙлек кейә, әммә сәхнәгә сыҡҡанда унышын ҡалдыра. Шуға ла ул ярым һуҡыр. Бына был юлы ла аңһыҙ, йүнһеҙ, наҙан «әбейҙәр»ен эйәртеп ажғырып килеп сыҡты.

– Бөтөр, дөмөктөр ҡәбәхәтте!!!

Күҙҙәр күкле-ҡаралы төҫтәргә буялған, уларҙан синфи көрәш нәфрәте бөркөлөп тора. Яулыҡтар елгә елберҙәй, йоҙроҡтар төйөлгән. Һәм бына ошо асыулы даръя, әбейҙәр ташҡыны, «камсамул Ғәле»гә ташлана. Зөләйха хәтәр башлы имән таяғы менән киҙәнә:

– Бөтөр, дөмөктөр ҡәбәхәтте!

Ғәле ҡаһармандарса ҡыйыу торорға тейеш. Сөнки ул – батыр егет, сөнки ул – комсомол әһеле. Ҡоторонған убырлы ҡарсыҡ, күҙлекһеҙ ҡарсыҡ, ысын теләп Фәриттең башына тондора. Мә һиңә, ҡәбәхәт! Әммә китаптағы ниндәйҙер иҫәүән Ғәленең башына түгел, ә физика уҡытыусыһы Фәрит Мотаһаровичтыҡына! Бында Зөләйха ғәйепле түгел, ул фәҡәт насар күрә, айырыуса кистәрен насар күрә. Бында герой булып ҡыланыусы ир үҙе ғәйепле.

Ырғыҙбаев үтә лә тәбиғи рәүештә сәхнәгә йығылды, маңлайында күгелйем оро бәреп сыҡты. Халыҡ үтә ҡәнәғәт булып йәнә ҡул сапты.

– Ҡарәле, былар ҡалай оҡшата, әй!

– Моғайын, районда беренсе урынды алып ҡайтырҙар!

– Әлбиттә, алалар...

– Афарин!

Шаршау ябылды.

Спекталь бөткәс, уңышты билдәләнеләр. Ошо клубтың ҙур бүлмәһендә мөдирә ханым коньяк сығарҙы. Тост артынан тост әйтелде. Халыҡ таралышҡанда, сәғәт төнгө бер тулғайны.

Тышта селлә һалҡыны хөкөм итә. Эттәр өргөләй, электр сымдары елгә геүелдәй. Оҙон күләгәләр сайҡала. Аяҡ аҫтында ҡар шығырҙай. Күктә инде тула башлаған ай ялтырай, йондоҙҙар емелдәй.

– Һеҙ ҡышты яратаһығыҙмы? – тип һораған булды Фәрит, ҡыҙҙы ҡултыҡлап.

– Яратам! Айырыуса ҡыш төнөндә, йылы ғына өйҙә йомшаҡ ҡына юрған аҫтына сумып, иркәләнеп ятырға яратам, – тип яуапланы ҡыҙ. Ирҙең ҡулын мәғәнәле генә итеп ҡыҫты ла сыңғырҙатып көлөп ебәрҙе. Фәриттең йөрәге ләззәтле тибеште. Аңланы ул ҡыҙҙың нескә ишараһын. Кинәт кенә туҡтап, ҡосаҡлап алды. Ҡыҙ шараптанмы, һыуыҡтанмы ҡыҙарынған. Алһыу биттәрендә ынйылай ҡар бөртөктәре йымылдай, күҙҙәрендә йондоҙҙар яна. Шағирҙың матур һүҙҙәре хәтеренә төштө, һәм ир кеше уларҙы ҡысҡырып ҡабатланы:

Күҙҙәреңә йондоҙ ҡолап төшкән,
Иртән унда ҡояш уяныр.

Был әкиәти төндө лә, алдағы аҙнаның сихри төндәрен дә улар бергә үҙғарҙы. Тас Фәриҙә теләгәнсә – йылы өйҙә, йылы юрған аҫтында... Донъялағы иң бәхетле, иң мөхәббәтле кешеләр ине улар.

– Ни өсөн һин нәҡ мине һайланың? – тип һораны бер мәл.

– Сөнки Стәрлетамаҡта дуҫлашып йөрөгән егетемә бик тә оҡшағанһың, – тип дөрөҫөн әйтте Фәриҙә. Ирҙең хәтере ҡалды, аҙаҡ байтаҡ үпкәләп йөрөнө. Нәҡ ысын ғашиҡтар кеүек.

– Ә нимә булды ул егет менән?

– Бер ни ҙә булманы. Ул өйләнде, икенсе бисәгә. Шул ғына...

Нәфисә ҡайтҡансы дауам итте был бәхет. Нәҡ ошо мәлдә ҡыҙҙың бүлмәләше лә, ауылды ялмап алған киҙеүгә тарып, дауаханаға ятҡайны. Һигеҙ ҙур бүлмәнән һәм һалҡын коридорҙан торған интернат бинаһы инде тулыһынса улар ҡарамағында ине. Фәриҙәнең ҡотло бүлмәһендә бергә яталар, бергә уяналар. Бөтөнләй ир менән ҡатынға әйләнеп бөттөләр.

Быларҙың араһында урынлашҡан үтә йылы мөнәсәбәттәр, әлбиттә, мәктәптә лә, мәғлүм булды. Һәр хәлдә аулаҡҡа сыҡҡан «аҙаштар» (уларҙы спектаклдән һуң шулай йөрөтә башлағайнылар) тураһында төрттөрөбөрәк һөйләгән хәбәрҙәрең ос-мосо булһа ла ҡолаҡтарына салынып ҡала ине. Йәшерерлек сер түгел ине шул. Һәр саҡ күтәренке кәйефтә, осоп-талпынып ҡына йөрөйҙәр. Дәрестәре лә күңелле, бер тында үтә. Тик бәғзе ваҡыт ирҙе аңлап бөткөһөҙ ғәйеп тойғоho солғап ала. Уның хыянаты тураһында һис нәмә лә белмәйенсә Өфөлә йөрөгән ҡатыны алдында выжданы ғазаплай ине. Шул мәлдә ул ҡапыл тынып ҡала, күҙҙәрен ситкә бора. Фәриҙә лә быны һиҙә, ҡыҙҙың булмышын көнсөллөк хисе биләй.

– Һин мине яратаһыңмы?

– Бик-бик яратам.

– Таһир Зөһрәһен яратҡан кеүекме?
– Уларҙан да ныҒыраҡ…
– Ә ҡатының?
– Мин айырылам.
– Улай ярамай, Фәрит. Һин уны яратаһыңмы?
– Яратам. Тик һине лә яратам.
– Улай булмай, Фәрит!
– Нисек булмай?
– Ике ҡатынды ла бер юлы, бер тигеҙ яратып булмай!
– Булалыр инде, беҙ мосолман бит. Дүрт кәләш алырға рөхсәт ителә!
– Биремен мин һиңә дүрт кәләште!
Фәриҙә кескәй йоҙроҡтары менән ирҙе түпәләй башлай.
– Беҙҙең барыбер балабыҙ юҡ…
– Ә мин һиңә малай табып бирәм.
– Юҡ, уныһы мотлаҡ түгел, үҙең кеүек аҡыллы ҡыҙ бала булһа ла ризамын.
– Ә мин аҡыллымы?
– Әлбиттә.
– Юҡ, мин иҫәр. Мөхәббәттән иҫергән иҫәр! Кеше иренә ҡул һуҙған хыялый бисә.
– Ә мин һиңә өйләнәм, әйттем бит инде!
– Һәм беҙ был ауылдан да, райондан да алыҫыраҡҡа, ер ситенә күсеп китәбеҙ, ибет?
– Мотлаҡ шулай. Ер ситенә!
Ер ситенә күсеп китергә тура килмәне. Өфөнән имтихандарын тамамлаған кәләше ҡайтып төштө. Төштө лә барыһын да үҙ урынына ултыртты. Ҡайҙан ишеткәндер, кем ҡолағына шыбырҙағандыр, әммә ул һәммәһен дә бик тиҙ аңланы. Бәлки, ҡатын-ҡыҙға ғына хас тойомлауы ла булғандыр. Дөрөҫ, Фәриткә бер нәмә лә белдермәне. Ҡайтҡанының иртәгеһенә, был йәкшәмбе кис ине, Фәриҙәнең бүлмәһенә барып инде. Ҡыҙ бер ҡарауҙан уҡ бик етди һөйләшеү буласағын төшөндө. Һырт йөндәрен ҡабартҡан бесәйҙәй, үҙ-үҙен яҡларға әҙерләнде.
– Шунан, күршекәйем, нисек кенә көн иттегеҙ мин ситтә йөрөгәндә?
Нәфисәнең күҙҙәренән зәһәр осҡондар сәселде. Тауышы шулай ҙа ярайһы уҡ тыныс ине.
– Кеше ире менән гүләйт итеү оҡшанымы?
– Һеҙ нимә һөйләйһегеҙ, Нәфисә Хәмитовна?
– Ҡыланма бер нәмә лә белмәгән булып. Артистка…
Нәфисә ҡыҙға яҡын уҡ килде, тегеһе сигенеп, койкаһына ултыра төштө.
– Бына күрәһеңме ошоно. – Нәфисәнең ҡулында кескәй банка хасил булды. Ап-аҡ түңәрәк дарыуҙарҙы усына өйҙө.
– Был бик көслө таблеткалар. Мәгәр кәнтәйләнеүеңде дауам итһәң, ошоларҙы бер юлы йотам да…
Нәфисәнең күҙҙәренә йәш төйөлдө. Ирендәре салшайҙы, йөҙө ҡара янып сыҡты. Кинәт ҡартайып, йәмһеҙләнеп киткән ҡатынды йәлләү тойғоһо уянды Фәриҙәлә.
– Биллаһи тип әйтәм, биллаһи! Һин бында ҡалһаң, мин донъяла йәшәмәйсәкмен!
– Ҡурҡытмағыҙ мине…
– Ә мин ҡурҡытмайым!

Шартлап ишек ябылды, Фәриҙә бүлмәлә яңғыҙы ҡалды. Тәҙрә яңағына һөйәлеп байтаҡ торҙо ул. Был ҡатындан барыһын да көтөргә мөмкин. Унан Фәриттең әйткән һүҙе иҫенә төштө. Мин уны ла яратам…» Ә кемде нығыраҡ ярата һуң: минеме, унымы? Хәйер, үҙе һуң, үҙе яратамы һуң? Әллә Стәрлелә күмелгән мөхәббәтен тергеҙергә генә маташамы?

Фәрит һуңлап ҡайтты, был юлы ла хеҙмәт уҡытыусыһы менән кәрт һуғып оҙаҡ ултырып ташланылар. Февраль бураны кеүек ауылда өйөрөлгән ләститтәрҙе нәҡ дуҫы еткерә ине.

– Хәҙер беҙҙә демократия бит инде, тиҙҙән Дәүләт Думаһы күп ҡатынлылыҡ тураһында ҡанун ҡабул итәсәк, ишеттеңме, Фәрит Мотаһарович?

– Юҡсы, – тигән булды Фәрит, һүҙ тәртәһенең үҙе яғына тартылғанын аңғарып. – Әллә ысынлапмы?

– Ысынлап. Хәҙер ирҙәргә һәм уларҙың запастағы йән киҫәктәренә тулы хөрриәт биреләсәк, тип һөйләп яталар мәктәптә. Айырыуса һеҙгә, аҙаштарға…

– Беҙҙе сәйнәйҙәрме? – Фәрит үҙҙәре хаҡында йөрөгән хәбәрҙе белә. Ләкин уға барыбер. Ул айырыла. Фәриҙәне аласаҡ! Тик ҡатыны менән нисек аңлашырға һуң? Уны сикһеҙ йәлләй ине.

– Һеҙҙе инде, һеҙҙе… Ҡатының ишеткәнме әле?

– Юҡ, әлегә ишетмәгән.

– Ну, түҙемлек һиңә, туған! Һәм рух ныҡлығы! – тип ярым шаяртып, ярым етди оҙатып ҡалды өй хужаһы.

Ысынлап та түҙемлек тә, ихтыяр көсө лә бик тиҙ кәрәк булды.

Март аҙаҡтарында район үҙәгенә «Ураҡсы ҡыҙ»ҙы алып барып ҡуйҙылар. Нәфисә уйында ҡатнашмай ине, быларҙы моңһоу ғына оҙатып ҡалды. Шәп үтте спектакль, Фәриҙә барлыҡ тамашасыларҙы үҙенә ғашиҡ итте. Уйын тамамланғас та, һәүәҫкәр артистарҙы ҡат-ҡат саҡырып сығарҙылар. Фәриҙәне иһә үрә тороп алҡышланылар. Сәхнә өсөн, сәнғәт өсөн генә тыуған ине был оҙон сәсле һылыуҡай. «Ауылдарҙан килтергән спектаклдәр араһында Ҡарағайлы мәктәбенеке бер башҡа юғары тора» тип баһаланы комиссии ағзалары.

Әммә өйҙә бәлә көтә ине. Интернат бинаһы алдында өс-дүрт кеше тапана, участка дауаханаһының «Ашығыс ярҙам» машинаһы тора.

– Нәфисә Хәмитовна үлеп бара! – Артистар алдына ҡобараһы осҡан, сәсебашы туҙған Маргарита йүгереп сыҡты.

– Нимә? – Аяҙ көндә йәшен йәшнәгәндәй булды. Фәриттең теҙҙәре ҡалтырап, йөрәге гөлп итеп ҡалды. Ут менән уйнау ана нимәгә килтерә! Фәриҙә лә таш һындай ҡатып ҡалды.

– Әйткәйне бит, әйткәйне бит! – тип хыялый кешеләй үҙ алдына һөйләнә башланы. Маргарита үҙенең һаҡауыраҡ телендә дауам итте:

– Дарыу йотоп ташлаған, күп итеп… Шыйыҡ май алып торайым тип инһәм, иҙәндә аунап ята…

Ир үкереп ебәрҙе лә эскә ынтылды.

Нәфисәне район дауаханаһында ике аҙна тоттолар. Фәрит көн аша барып йөрөнө. Ҡәйенбикәһе менән алмаш-тилмәш ҡаранылар ҡатынды. Күп нәмә тураһында һөйләштеләр. Элекке хистәре яңырғандай булды. Эйе, сабыйҙары булһа, бынамын итеп донъя көтөр инеләр ҙә бит. Яҙғы каникул тамамланыуға ҡоро һөйәккә ҡалған Нәфисә өйгә ҡайтты.

Был ваҡытҡа Фәриҙә Ҡарағайлынан киткән ине инде. Теге ҡаза булған кистән һуң Фәрит уны күрмәне лә. Мәктәптә төрлө имеш-мимештәр йөрөнө. Йәнәһе, спектаклдән һуң директор саҡыртып алған да ғариза яҙырға ҡушҡан.

– Ырғыҙбаевтар менән бер коллективта эшләргә, ғөмүмән балалар уҡытырға һеҙҙең әхлаҡи хаҡығыҙ юҡ! – тип әйткән, имеш. Күптәр быға ышанды. Ни өсөн тигәндә, балдыҙы өсөн үс алмай ҡаламы инде яһил хужа? Уның бисәһе бик яуыз, колхозда баш бухгалтер, ирен ҡаты тота.

Нәфисә генә ысын сәбәпте белә ине. Теге юлы булған һөйләшеүҙән һуң бер «тәҙрә» ваҡытында уҡытыусылар бүлмәһендә аулаҡта тап булыштылар.

– Нәфисә Хәмитовна, – тип һүҙ башланы ҡыҙ. – Яҙғы каникул бөтөү менән мин бынан китәм. Ирегеҙгә лә яҡын килмәйәсәкмен. Мин унан ауырлы. Баланы табасаҡмын, тик был турала Һеҙҙән башҡа һис кем дә белергә тейеш түгел.

Нәфисә ышанманы. Фәҡәт иренең һөйәркәһе ауылдан китеп юҡ булғас ҡына, еңел һулап ҡуйҙы. Дарыу йотоу «әкәмәте»нән һуң Фәрите ныҡ ҡурҡҡайны. Яйлап ул да тынысланды, тормоштары элеккесә дауам итте. Һөйәркәһенең шулай янъялһыҙ-ниһеҙ ғәйеп булыуына эстән генә шатланды. Тимәк, был мөхәббәт түгел, ә, бәлки, ҡыҫҡа ваҡытлы әүрәү генә булғандыр…

Ярты йыл самаһы үткәс, Фәриҙәнең күрше районға китеп, шундағы Хәмитов фамилиялы фермерға кейәүгә сығыуын ишеттеләр. Ғөмүмән, арыу йәшәй, имеш. Көнсөллөк хисе уянды ирҙә, әммә хәҙер бер нәмәне лә үҙгәртеп тә, кире ҡайтарып та булмай ине.

Фәритте райүҙәктәге төп мәктәпкә завуч итеп саҡырҙылар, яңы уҡыу йылын яңы урында ҡаршыланы. Шәп булды быныһы. Ни тиһәң дә, иҫке интернат та, мәктәп тә, ауыл үҙе лә күңелендә ауыр уйҙар тыуҙыра, хәтирәләрҙе яңырта, хәсрәт-һағышҡа һала ине. Ләкин теге иҫтәлекле ҡыш, Фәриҙә үҙе, уның менән уҙған татлы минуттар иҫенә төшһә, йөрәге талпынып-талпынып китә. Бәлки, ғүмерендәге иң бәхетле мәлдәре ана шул ғаилә бәхетенән урлап алған минуттар булғандыр…

Шунан кинәт үҫә башланы. Мәктәп директоры итеп ҡуйҙылар. Аҙаҡ район хакимиәтенә социаль мәсьәләләр буйынса башлыҡ урынбаҫары ҡәнәфийенә килеп ултырҙы. Ете йыл тартты был йөктө. Фәриҙәнең ағаһы район хакимы булып киткәс, бына ошо мәғариф өлкәһенә килтереп ултыртты. РОНО мөдире вазифаһын быйыл тәүге йыл атҡарыуы ине. Донъяһы түңәрәк, тик балалары ғына юҡ.

Фәриҙәне иһә теге ваҡиғаларҙан һуң өс йыл үткәс, күңел дауылдары баҫыла төшкәс, тимер юл вокзалында тап итте. Ҡатынды заман ныҡ үҙгәрткән ине. Юҡ, төҫ-башы шул килеш, фәҡәт тулҡын-тулҡын сәстәрен бер аҙ ҡыҫҡартҡан. Нығыраҡ, ҡуйыраҡ буяна башлаған. Шул ғына, ә былай элекке Фәриҙә инде. Тәбиғәте, фиғеле үҙгәргән. Уҫаллаша төшкән, ниндәйҙер кинәйәле хәбәрҙәре артҡан.

– Нимә, бисәң тереме әле? Башҡаса дарыу ашамаймы? – Бер аҙ һөйләшкәндән һуң шулай тип шаҡ ҡатырҙы.

– Юҡ та. – Фәрит бындай осрашыуҙы көтмәгәйне. Бәлки, тап булышһалар тип әллә ниндәй фәһемле лә, аяныс та, мөхәббәтле лә һүҙҙәр әҙерләп ҡуйғайны. Тик улары кинола ғына була, күрәһең. Быларҙың осрашыуы үтә лә ғәҙәти килеп сыҡты.

– Әйт һин уға, ирҙе ҡурҡытып тотҡан бисә барыбер юғалтасаҡ уны! Бөтәһе лә минең кеүек быҙау түгел бит! Берәй уҫалыраҡ туташ табылыуы ихтимал һинең кеүектәргә!

– Нисек минең кеүектәргә?

– Ярай, оноттоҡ!

– Һин теге юлы шулай килеп сыҡҡанға үкенәһеңме, Фәриҙә?

– Юҡ, үкенмәйем! Минең бынамын тигән донъям, ирем, балам бар. Үкенмәйем!

Фәриҙә тултырып ҡараны. Иларға етешкәйне, шикелле. Унан әүәлгесә сыңғырҙатып көлөп ебәрҙе лә ҡырт боролоп китеп барҙы. Сәйер ҡатын, ни тиһәң дә…

Уҙған йыл иренән айырылып, район үҙәгенә күсенеп килде. Осраҡлы булдымы-юҡмы, әммә Фәриттәргә яҡын өйҙө һатып алды ла йәнә күрше булып китте. Ун өс йыл үткәс.

Дүшәмбе иртәһе бик ҡыҙыу башланып китте. Эшкә килеүенә биш-алты кеше көтөп ултыра ине. Ғәмәлдә уҡытыусылар, мәктәп директорҙары. Оло ғына ҡатын менән ҡыҙыҡай мөйөшкә һыйынған. Ябай ғына, ауылса кейенгәндәр. Ауыр пакеттарын аяҡ аҫтына ҡуйғандар.

Өфө менән һөйләшеп бөтөүгә сиратһыҙ-ниһеҙ прокурор Ғәйзуллин килеп инде.

– Мотаһарыч, һыҙып ырғыт мине исемлегеңдән! – тип үгеҙҙе мөгөҙөнән алды.

– Ниндәй исемлектән? – тип ҡапыл баҙап ҡалды мөдир. Унан аңына барып етте.

– Нимә, ҡыҙың йәнә сирләп торамы? Баралмаймы?

– Баралмай шул, туған, – прокурор, тауышын баҫа төшөп, һүгенеп алды. – Ну, достал ул мине, һинең дуҫыңлы әйтәм. Теге алыпһатарҙы…

– Ғәлимде әйтәһеңме? – Фәрит ғәжәп ҡалды. Теге юлы булған әңгәмәнән һуң күңелен ниҙер тырнап торғандай ине. Әрһеҙ шул дуҫы, һәр саҡ үҙ яғын ҡайыра. Элек улай уҡ түгел ине.

– Шул, бүтән кем булһын? Кисә шешлеккә тип алып китте... – Был хәбәрҙе ишеткәс, Фәрит көлөмһөрәп ҡуйҙы, һуң, уны ла саҡырғайнылар бит тәбиғәткә, тик онотто дуҫы, башҡаса шылтыратманы.

– Мәжлес буйына мыжып сыҡты. Бик тә малайын Италияға ебәргеһе килә! Мәйтәм, ике мең долларлыҡ путевка һиңә моңмо ни? Һатып ал да ебәр! Юҡ, бушлай төшкәне кәрәк… Ризалаштым, әйҙә, йөрөп ҡайтһын балаһы.

– Улай икән…

– Шунан, иң ҡыҙығы, ҡайтһам, Өфөнән, республика прокуратураһынан минең ҙу-у-у-р нәсәлник шылтырата. Ғәлимдең әшнәһе. Теге үтенесте йәнә бер ҡат миңә еткерә. Мәйтәм, әгәр риза булмаһамсы? Юрамал ғына әйтәм инде. Ул әйтә, үҙең ҡара, ти. Тик аҙаҡ ауырлыҡ килмәһен, ти. Эйе-эйе, нәҡ шулай ти. Ауырлыҡ килмәһен, һине ҡайғыртам бит, ти. Мәйтәм, ҡайғыртаһығыҙ шул, инде ысынлап ҡайғыра башланым, тим. Көлә бәдбәхет. Ҡайғырма, ти…

Ысынлап та прокурор бик ғәҙел, намыҫлы кеше. Бынаһын Фәрит яҡшы белә ине. Район түрәләре араһында ышанып хәбәр һөйләрҙәй берҙән-бер кеше. Шуға ла, теләктәшлек белдереп, баш ҡағып ҡуйҙы.

– Күптән компромат йыялар, ҡәбәхәттәр, тик сәбәп табып бушата ғына алмайҙар. Мин ҡарышып торманым инде. Мәйтәм, тынысланығыҙ, мәсьәлә хәл ителде. Мәйтәм, минең ҡыҙыҡайҙы исемлектән сыйҙылар инде...

– Тимәк, Ғәлим дуҫ өҫтән дә, аҫтан да эш итә. Бына шаҡшы!

– Ярай, шулай ҙа булһын, ти. Бәлки, был яҡшығалыр ҙа.

Фәриттең иҫенә келт итеп күрәҙәсе әбейҙең риүәйәте килеп төштө:

– Имеш, заставала йәшәгән бабайҙың аты юғалған. Ул бик ҡайғырған, ти. Әммә тиҙҙән һуғыш сыҡҡан һәм атлы егеттәрҙең барыһын да үлемгә алып киткәндәр. Ә байталы юғалған ҡарттың балаһы өйҙә тороп ҡалған.

Прокурор әкиәткә ышанмай ине. Ҡул ғына һелтәп ҡуйҙы:

– Суҡынып китһендәр...

Ғәйзуллин сығыуға, кеçә телефоны шылтыраны:

– Алло, Фәрит, һинме?

Мөдирҙең йөҙө һытылды. Фәриҙә ине был. Ҡайҙан тапҡан телефон номерын, хәҙер тағы ла юллама тураһында һүҙ сығасаҡ. Ҡәһәр төшкән Италия...

– Фәрит, мин... һине мотлаҡ күрергә тейешмен.

– Нимә булды? Фәриҙә, минең ваҡытым юҡ, ғәфү ит...

– Ярай, әйтәм улайһа! Шамил – һинең малайың! Ишетәһеңме? Һинең малайың! Һин уны ебәрергә тейешһең!

Телефон һүнде. Фәрит хәлһеҙләнеп ҡәнәфигә сүгәләне. Уның малайы? Шамил? Нисек инде уның малайы? Туҡта-туҡта... Юҡ, иçәпләп ҡараһаң...Шул сама килеп сыға түгелме? Тимәк, был шаярыу түгел! Тимәк, был донъяла уның нәçелен дауам итерҙәй вариçы бар... Уның улы бар, улы! Фәрит Мотаһаровичтың ҡан баçымы күтәрелде шикелле, – йөҙө буҙарып китте. Ҡарһаланып теге номерға шылтыратырға тотондо. Тик Фәриҙә трубканы алманы.

Мәктәп директорҙары килеп тулды. Аңҡы-тиңке «летучка» үткәрҙе. Сәғәт ун берҙә район хакимында ҙур кәңәшмә була, ул-был ҡағыҙҙарын ҡараштырғылап ултырҙы. Ремонт эштәре буйынса хаким мотлаҡ һораясаҡ. Ныҡлап ҡаныҡыуы ла ихтимал, кем белә уны. Тик башына бер нәмә лә инмәне.

Сәркәтип ҡыҙ Италияға китеүселәрҙең төҙәтелгән яңы исемлеген килтерҙе. Шул саҡ ҡыйыр-ҡыймаç ҡына ишек асылды. Һаман ҡабул итеү бүлмәһендә ултырған әбей менән ҡыҙыҡай килеп инде. Баҡһаң, Һаҡмарбайҙан килгәндәр. Теге етем бала Фәғилә Һамарова менән уны аçраған инәһе. Пакетынан ҡаҙ килтереп сығарҙылар.

– Бына, улым, беҙҙән күстәнәс. Килен бешерер берәй ҡунаҡ килгәндә...

– Китсәле, апай, ул ниндәй күстәнәс ул?

– Ал-ал, мин бит ихлас күңелдән бирәм. Шуны әйтергә килдек. Беҙ сит илгә бармайбыҙ!

– Нисек бармайбыҙ?

– Мин бармайым! – тип аныҡланы ҡыҙыҡай, телгә килеп.

– Нисек бармайым?

– Шулай... Эш күп!

– Ниндәй эш ул тағы? – РОНО мөдире таң ҡалды.

– Картуф күмәһе бар.

Һаҡмарбайҙар сығып киткәс, Фәрит исемлекте йәнә бер ҡарап сыҡты ла ҡыҙсыҡтың исемен сыйып ташланы. Үҙ улының фамилияһын теркәп ҡуйҙы. Шамил Ғайса улы (Ғайса улы, имеш?) Хәмитовты... Шәп булды. «Бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуя юлына» тигәне шулдыр. Сәркәтип ҡағыҙҙы факс аша министрлыҡҡа оҙатты.

Кәңәшмә үткәс, Камил Хөсәйенович РОНО мөдиренә ҡалырға ишараланы. Район хакимының яландай киң эш бүлмәһендә тыныс һәм еләç, фәҡәт бер-ике себен генә бызылдап осоп йөрөй. Йөҙө буҙарынып, нисектер сәйерерәк ултырған мәғариф башлығына текләп ҡараны ла һүҙ башланы хаким:

– Нисек әйтергә, Мотаһарыч? Ну, ней... теге Италияға барыусылар исемлеген әҙерәк рәтләргә кәрәк булыр.

– Нисек рәтләргә?

– Мотаһарыч, һинән сер юҡ. Ләкин беҙҙең икәү араһында ғына ҡалһын был һөйләшеү, килештекме?

– Әлбиттә, – Фәрит Мотаһар улы был шыпыртын әңгәмәгә аптыраманы. Ғөмүмән, һаман нисектер вайымһыҙыраҡ ултырыуын белде. Башынан Фәриҙә еткергән яңылыҡ сыҡмай ине.

– Таң менән Өфөнән шылтыраттылар. Тегенән! – Хаким өҫкә күҙ һирпте. Тимәк, хөкүмәттән йәки берәй министрлыҡтан. – Беҙҙең яҡташтың улын ебәрергә кәрәк. Ҡоролтайҙа ултыра бит әле, ну, һин беләһең…

Бохарғәлинды әйтә инде. Аяғын йылан ҡырҡҡан һөмһөҙ бер бәндәне.

– Ә нисек улай? Малайы бит Өфөлә теркәлгән. Министрлыҡтың шарты буйынса, юллама ошо районда йәшәгән уҡыусыға тейешле. Өҫтәүенә, исемлекте оҙаттыҡ бит инде!

– Уныһы пүстәк, яңынан ебәрерһегеҙ. Ә инде теркәү буйынса. Марат Ғәзимович бөгөн үҙе килә, улы ауылда йөрөй бит каникулда. Ул-был рәсми ҡағыҙҙарҙы йүнәтеп, малайын ваҡытлыса районда теркәй ҙә бергә алып китә Өфөгә. Һинең министр ҙа белә, ул ҡаршы түгел.

– Тимәк, минең ризалыҡ кәрәкмәй килеп сыға?

– Шулай инде. Бына мин риза булдым бит. Ә риза булмай ни ҡылаһың?

– Ә Фәриҙәнең малайы һуң? Мин бит уны индерҙем Һамарованың урынына!

Фәритте еңелсә ҡалтыраныу биләп алды. Ғәзиз балаһы, улы өсөн тырышыуы ине.

– Нисек Фәриҙәнең малайы? Ә теге ҡыҙҙы нишләтәһең?

– Ул бармай. Әле генә инеп сыҡтылар.

– Улай икән. Ярай, Фәриҙәнекен сыйып ырғытаһың, исемлеккә депутат малайын индерәһең. Шамил икенсе юлы барыр.

– Юҡ, Камил Хөсәйенович, улай булмай.

– Нисек булмай?

– Шулай. Мин бит Фәриҙәгә шылтыратып өлгөрҙөм. Балаға ни тип әйтербеҙ?

– Әйтмәйһең, ул бит – хулиган!

– Һеҙҙең бер туған һеңлегеҙҙең улы!

– Булһа ни! Миңә урыным ҡәҙерлерәк, дөрөҫөн әйткәндә!

Хаким ялтыр йөҙөнә аңлау, ирҙең хәленә инеү ғәләмәте сығарҙы:

– Мотаһарыч, мин аңлайым, һеңлекәш менән һинең арала мөхәббәт булған! Уныһы булған, быныһы булған... Ну, булған икән булған. Булған да бөткән! Хәҙер һин уның алдында бурыслы түгел. Ул малайҙың, Шамилдың, ҡойто ғына булһа ла үҙ атаһы бар. Уның башы ауыртырға тейеш, һинеке түгел, төшөндөңмө? Бер һүҙ менән әйткәндә, ҡаңғырма! Йәме?

– Юҡ, улай булмай. Мин хатта Фәриҙәнең улын ебәрмәҫкә риза. Юлламаны икенсе берәй етемгә бирергә кәрәк! Етем балаға, ишетәһегеҙме?

– Тимәк, мин һиңә указ түгел?

– Булмай улай!

– Улай булмаһа, икенсе төрлө була! Хәҙер үк яҙаһың ғариза! «Үҙ теләгем буйынса китәм» тип яҙаһың! Аңланыңмы-юҡмы?

– Һеҙ генә мине бушата алмайһығыҙ, министр…

– Нимә, әллә министр һине яҡлап ултырыр тиһеңме? Төкөрҙө ул һиңә! Урыныңа әллә кеше тапмаҫ тип беләһеңме? Вон отсюда!

Фәрит ҡабул итеү бүлмәһендә ашыҡ-бошоҡ ғариза яҙҙы ла сығып китте. Бөгөнгө бәрелеш район башлығы менән былай ҙа шәп булмаған мөнәсәбәттәр турһығынан сайпылған һуңғы тамсы ине…

Төштән һуң көтмәгәндә йәнә берҙе осраштылар. Дежур магазин алдында. Асфальт түшәп өлгөрмәгән урамда туҙанлы ҡойон ҡупты, район хакимының машинаһы хасил булды. Бер аҙ «ҡыйышыраҡ тейәгән» Фәрит пакетҡа коньяк шешәһе, колбаса һалып сығып килә ине. Туҡтап ҡалды. Ағаһы янында Фәриҙә ултыра. Ҡайҙан килеп сыҡтылар, ҡәһәрең. Әллә аңдып торғандармы?

– Бына нимә, Мотаһарыч, һин иртәнге өсөн кисер, зинһар. – Камил Хөсәйенович тынып торҙо ла хужаларса ҡәтғи өндәште. – Кил яҡыныраҡ, һүҙ бар!

Машинанан төштөләр. Ҡулын Фәриттең яурынына һалды. Теләһәң, бынының да ғәфү үтенеү тип аңларға була ине:

– Һеңлекәш менән кәңәш-төңәш иттек тә шундай ҡарарға килдек. Ҡыҫҡаһы, теге бизнесмендың балаһы әлегә ҡалып тора. Һеңлекәштең улын ебәрәбеҙ, Шамилды…

– Нисек?

– Шулай. Һинһеҙ исемлекте ебәреп булмай. Имзаң кәрәк. Министрлыктан фарман сыҡҡанғаса һин мөдир һаналаһың.

– Юҡ! Мин риза түгел!

– Әпәт ҡаңғыраһың, иҫәүән. Бына хәҙер риза тип әйтәһең һәм бөттө! Ебәрәбеҙ малайыңды!

«Малайыңды»? Тимәк, ағаһына һөйләгән… Әммә үҙ һүҙенән сыҡманы:

– Юҡ!

Фәриҙә телгә килде. Тауышында асыу зыңлап китте:

– Эх һин! Сепрәк, тфү!

Фәрит Мотаһарович ары атланы. Ҡатындың әсе һүҙҙәрен ҡолаҡ ситенән генә үткәреп ебәрҙе. Донъялағы иң бәхетле кеше ине ул. Хатта эштән яҙыуы ла, ҡатыны менән ыҙғышыуы ла ул ҡәҙәре мөһим түгел. Иң мөһиме, уның улы бар…

Шишәмбе кис РОНО мөдире урынбаҫары министрлыҡҡа иң һуңғы, төҙәтелгән исемлекте ебәрҙе. Унда ике уҡыусының фамилияһы күрһәтелгәйне: Низаметдинов Эдуард Ғәлим улы һәм Бохарғәлин Марсель Марат улы.

Шул уҡ кистә Өфө ҡунағы балаларҙы алып юлға сыҡты. Йөҙҙәре ҡояштай балҡыған Ғәлим менән ҡатыны юл сатына тиклем оҙата килделәр. Ҡыҙмаса ине Марат Ғәзимович, ҡыуанyслы ине. Барыһы ла ул теләгәнсә килеп сыҡты!

Нәҡ ошо мәлдә алыҫ урман ауылында тәпке күтәргән арыҡ ҡына ҡыҙсыҡ эштән ҡайтып килә ине. Арығайны, асыҡҡайны, әммә үтә лә ҡәнәғәт ине ул. Әйтерең бармы, шунсама ҙур баҡсалағы картуфты күмеп бөткәйне. Эйе, бөгөнгә эш тамам, ә иртәгә таңдан аръяҡтағы Һуҡыр бабайҙыҡына бара. Ул – һуғыш ветераны, ауылдағы иң бай кеше. Мең тәңкә түләйем, тип әйтеп ебәргән. Тиҙҙән компьютерлы буласаҡ.

Юлламаһыҙ тороп ҡалған башҡа балалар ҙа йоҡламай ине. Прокурорҙың зәғиф ҡыҙы бесәй менән уйнай, ә Шамил йылға ярында тәмәке көйрәтә ине.

Район эске эштәр бүлеге хәбәр итә: «Кисә 22 сәғәт 15 минуттар тирәһендә тимер юл киҫелешендә Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Бохарғәлин М.Ғ. идара иткән «Тойота Лэнд-Крузер» автомобиле локомотив менән бәрелеште. Джип хужаһы һәм юлаусылар, ун ике һәм ун дүрт йәшлек балалар, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ҡаза урынында һәлäк булды. Локомотив машинисы зыян күрмәне.»

ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ШИҒРИӘТЕНДӘ СОНЕТ ЖАНРЫ

Сонет – ҡалыплашҡан шиғри форма: 14 юлдан тора. Строфалар ике дүрт юллыҡҡа (катрендарға) һәм ике өс юллыҡҡа (терцетҡа) бүленә. Шиғыр шулай уҡ өс катрендан һәм ике юллыҡтан да торорға мөмкин. Сонетта, ғәҙәттә, катрендарҙың ике рифманан, ә терцеттарҙың ике йәки өс рифманан ҡоролоуы шарт. Рифмаларҙың урынлашыу ысулына ҡарап, сонеттарҙы төрлө формаларға бүлеп йөрөтәләр. Уларҙың ике төрө киң таралған. Тәүгеһе – итальян форма: рифмаларҙың схемаһы abab abab cdc dcd (cde cde) рәүешендә килә. Сонеттың француз төрөндә рифмалар катрендарҙа ҡаймаланып килеүе һәм терцеттарҙа өс рифма булыуы менән айырыла: abba abba cce dde. Бынан тыш, инглиз формаһы йәки Шекспир сонеты ла ярайһы уҡ киң таралған. Унда рифмалар һаны арта төшә: abab cdcd efef gg[1]. Сонет жанры рус әҙәбиәтендә XVIII быуатта уҡ тамыр йәйеп, традицион жанрға әүерелгән. А. Пушкин, Ю. Лермонтов, XX быуат башында ижад иткән шағирҙар ижадында рус сонеты яңы үҫеш алған[2].

Башҡорт шиғриәтендә тәүгеләрҙән был жанрға М. Хәй мөрәжәғәт итә. Артабан сонетты милли ерлектә Я. Ҡолмой, М. Ғәли, Ә. Таһирова үҫтерә. Я. Ҡолмой сонеттың классик структураһын һаҡлап ҡалһа, М. Ғәли әҫәрҙәрен форма йәһәтенән иркенерәк ижад итә. Мәҫәлән, уның “Ҡурай сындары” шиғырҙар шәлкеме сонет ҡанундарынан бер аҙ алыҫлашып китә. Әммә был шиғырҙарҙы йөкмәтке йәһәтенән циклөүгә кәртә ҡуймаҫҡа булышлыҡ итә. Ә. Таһированың сонеттары ла Европа ҡанундарынан бер аҙ ситләштерелеп яҙыла. Уның сонет катрендарында, традицион башҡорт строфаһында кеүек, икенсе, өсөнсө юлдар рифмалашып килә. Ә. Таһирова, шулай итеп, сонет юлдарын һәм милли традицион строфаны берләштереп, үҙенсәлекле яңы шиғри форма барлыҡҡа килтерә. Шулай ҙа, башҡорт әҙәбиәтендә сонет киң үҫеш алды, тип әйтеп булмай. Был жанр айырым авторҙар ижадында ғына киң ҡулланылыш тапты. Күп осраҡта иһә сонет тәжрибә яһау рәүешендә генә файҙаланылды.

XXI быуат башындағы башҡорт шиғриәтендә лә сонет жанры актив ҡулланыла, тип әйтеп булмай. Бөгөн сонеттар Ә. Таһирова, А. Ғарифуллина, Р. Ҡәҙерғәлин, Р. Дауыт шиғриәтендә, йәш ижадсыларҙан Р. Фәтҡуллина, Р. Зәйнуллин авторлығында осрай. Һәр автор жанрға үҙенсә мөрәжәғәт итә. Шуға күрә лә сонеттың поэтик структураһы ла хәҙерге башҡорт шиғриәтендә төрлөсә сағылыш таба. Тәү сиратта улар рифма ҡоролошо буйынса айырылып тора. Әнисә Таһированың әҫәр өлгөләренә күҙ һалһаҡ, автор элекке стиленә тоғро ҡалыуын күрәсәкбеҙ. “Йылдар үткәс” тигән сонетын ҡарап үтәйек. Әҫәр ике катрендан һәм ике терцеттан тора. Дүрт

[1] *Гаспаров М. Л. Очерки истории европейского стиха: Метрика. Ритмика. Рифма. Строфа. М, 1984.С.320.*

[2] *Герасимов К.С. Диалектика канонов сонета /Гармония противоположностей: аспекты теории и истории сонета. Тбилиси, 1985. С. 17—51.*

юллыҡтар асыҡ рифма ҡоролошона нигеҙләнә кеүек. Әммә асылда 1-се, 3-сө юлдар рифмалашмай. Рифмаларҙың схемаһы – abcb abcb:

Йылдар үткәс, һин эҙләрһең мине,
Ишегемде килеп ҡағырһың.
Ләкин хәтирәләр тороп ҡалған
Эҙҙәремде генә табырһың.

Күренеүенсә, был дүрт юллыҡ сонет срофаһына ҡарағанда, күберәк йыр строфаһын хәтерләтә. 10-9 ижектәр үлсәме лә строфаны йырға тартым итә. Әҫәрҙең өс юллыҡтары сонет жанрына тап килеп тора. Әммә рифма ҡоролошо классик формаларҙан айырыла: dee ded. “Хәй Мөхәмәтйәровҡа” сонетында катрендар abcb dede ҡоролошона нигеҙләнә, терцеттар иһә француз сонетындағыса – ffg hhg:

Түбәнәйҙе инде беҙҙең күктәр,
Ауырайҙы инде беҙҙең йөктәр,
Тәләфләнде иркен, күркәм ҡырҙар.

Йөрәктәрҙе хәсрәт өткәнгәләр,
Ваҡытынан алда киткәнгәләр
Һинең кеүек аҫыл затлы ирҙәр.

Классик Европа жанрында катрендарҙа ике генә рифма булырға тейеш, йәғни дүрт юллыҡтар үҙ-ара рифмалашып килә. Ә. Таһирова сонеттарында был һыҙат күп осраҡта күҙәтелмәй.

Айһылыу Ғарифуллинаның сонеттары рифмалар структураһы буйынса Ә. Таһирова әҫәрҙәренә оҡшаш. Катрендағы юлдар шулай уҡ abcb defe рәүешендә рифмалаша. Ләкин өс юллыҡтар башҡа төрлө. Ә. Таһирова сонеттарындағы терцеттар аҙмы-күпме классик ҡанундарҙы һаҡлаһа, А. Ғарифуллина әҫәрҙәрендә улар үтә ирекле күренә. “Мираҫ” сонетында, мәҫәлән, терцет строфалары:

Ул бит сит-яттарға кәрәк түгел –
Өҙөлмәһен, тиеп, сәйләнгенәм,
Һеркелдәй ҙә тора һиҙгер күңел.
Аманат ул балам балаһына –
Тапшырһын да килер быуындарға
Һаҡлап ҡына күҙе ҡараһылай.

Күренеүенсә, ике терцетта ике рифма ҡоролоп килә. Әммә һәр терцеттың икенсе юлы рифмаһыҙ килә: aba cdc. Авторҙың башҡа сонеттарында ла терцеттағы рифмалар төрлөсә ҡоролоп килә. “Маҡсат” әҫәрендә улар – aab cdc, “Ижад” сонетында aab cdd рәүешендә килә.

Риф Ҡәҙерғәлиндың сонеттары иһә классик өлгөләргә тоғролоғо, рифмаларҙың теүәллеге менән айырылып тора. “Асыҡ хат” әҫәре француз төрөндә яҙылған, рифмалар ҡоролошо – abba abba ccd eed. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: сонеттың тап ҡаймаланған рифмаға ҡоролған формаһы иң матуры һанала. Шулай уҡ ике катрен үҙ-ара рифмалашып килһә, был әҫәрҙең юғары стиле хаҡында һөйләй[3]. Ысынлап та, сонеттың классик ҡануны үтәлгән осраҡта, жанрҙың таҙалығы төҫмөрләнә төшә, ул, традицион йыр строфаһынан алыҫайып, ғәҙәти булмаған яңғыраш бирә:

Йыраҡ ҡалды беҙҙең тәүге ихлас ғәмдәр:
Күңел бер ҡатлығы, йәм-паклыҡтар,
Уртаҡ йыуаныстар, көр шатлыҡтар –
Көс-ғәйрәттәр ярҙарынан
ташҡан мәлдәр.

Ҡытлыҡта ла һүндерелмәҫ
ине шәмдәр...
Йылдар, дуҫтар аға
ҡомдай тар ярыҡтан.
Булмаҫ, тинек, арабыҙҙа
йән-һатлыҡтар –
Шулар уңға китте,
һулда тапмай йәмдәр.

Әммә Р. Ҡәҙерғәлин сонеттарында ла классик ике рифмалы катрендар һәр ваҡыт осрамай. Мәҫәлән, “Көҙ сонеты” әҫәрендә рифма ҡоролошо түбәндәгесә: abba ccdd. Автор жанр юҫығында башҡа формалар ҙа эҙләп ҡарай. Мәҫәлән, “Яуап” тигән әҫәрҙең жанр төрө сестина сонеттары тип аталған. Сестина – итальян әҙәбиәтендә шиғри форма. Ул 6 строфанан тора, һәр строфа үҙ сиратында 6 юлдан ҡорола. Строфаларҙа рифмалар булмаҫҡа ла мөмкин, әҫәр структураһы тәү сиратта һүҙҙәрҙең билдәле бер тәртиптә ҡабатланып килеүенә нигеҙләнә. Автор әҫәре сестинаның теүәл формаһында түгел. Ул 9 строфанан тора,

[3]*Литературная энциклопедия. Словарь литературных терминов. В 2-х т. М., 1925.*

шиғырҙың сестина тип аталыуы иһә һәр строфаның алты юлдан ойошоуына бәйле. Бынан тыш, һәр строфа сонеттың берләштерелгән ике терцетын хәтерләтә:

Осрашыуҙың тәмен белмәҫ инек,
Айырылышыу татын тоймаҫ элек –
Улар ялғай осраш араһын.
Илаһи ҙа хәтирәләр! Әммә
Яндыр күперҙәрҙе! Һис йәлләмә!
Уңалтайыҡ йөрәк яраһын...

Күренеүенсә, рифмалар ҡоролошо сонеттың ccd eed рәүешендә ойошҡан терцеттарына оҡшаш.

Башҡорт сонеттарының ритмик ҡоролошо ла классик жанр өлгөләренән айырыла. Улар тел үҙенсәлектәренә яраҡлаштырылып яҙылған. Европа, рус сонеты силлабо-тоник шиғыр ритмына нигеҙләнеп, ямб, хорей үлсәмдәре менән ижад ителһә, силлабик ритмына ҡоролған башҡорт шиғриәте жанр алдында башҡа талаптар ҡуя. Үлсәм ижектәр һанына нигеҙләнеп килә. Ғәҙәттә, юлдар 10-9 ижектән тора. Ҡайһы бер сонеттарҙа башҡорт шиғриәтендә шулай уҡ традицион булған 8-7 үлсәме ҡулланыла:

Ғазаптар аша тыуа ул,
Һыҙланыу аша килә.
Ҡайсаҡ керпек остарына
Быяла сәйлән элә.

(“Ижад”, А. Ғарифуллина)

Шулай уҡ 10-10 ижекле үлсәм дә йыш ҡулланыла.

Сонетта өндәрҙең яңғырашына, музыкаллегенә айырым иғтибар бирелә. Л. Г. Гроссман ошо хаҡта былай тип яҙа: “Термин үҙе үк шиғыр яңғырашына бәйле булған юғары поэтик кимәл тураһында иҫкәртеп тора. Строфалар ҡоролошо, ритмик теүәллек, рифмаларҙың көйләнеше – барыһы ла әҫәрҙе музыкаль яҡтан ойоштороуҙы талап итә”[4]. Тимәк, музыкаллек сонеттың бер атрибуты булып тора. Асыҡ һәм ябыҡ ижектәрҙең сиратлашып килеүенә ҡоролған рифмалар шуның бер нигеҙе булып тора. Әммә, был талап авторҙар тарафынан махсус рәүештә үтәлә, тип әйтеп булмай. Күп осраҡта асыҡ һәм ябыҡ ижеккә тамамланған һүҙҙәр ҙә рифмалашып килә:

Ап-аҡ күперектә көҙгө талдар –
Һырт ҡабарта күкшел бөрөләр.
Көҙгө әсе елдәр ыңғайына
Япраҡ бурандары өйөрөлә.

(“Алданыу”, А. Ғарифуллина)

Бында, “бөрөләр-өйөрөлә” рифмаһы теүәл булмағанлыҡтан, өндәрҙең музыкаллеге бер аҙ юғала бирә.

Строфа эсендәге һүҙҙәр өндәр яңғырашы буйынса бер гармонияны тәшкил итеп килергә тейеш. Был йәһәттән М. Хәй сонеттары башҡорт авторҙары өсөн бер өлгө булып торалыр. Уның сонеттары, милли үҙенсәлек менән һуғарылып, тәү сиратта музыкаллеге менән айырылып тора. Автор әҫәрҙәрендә ассонанстарҙы киң файҙалана. Был сонеттың ҡаты формаһын йомшартып, юлдарҙың моңло яңғырашын, телдең тәбиғилеген юғалтмаҫҡа булышлыҡ итә. Хәҙерге сонеттарҙа иһә йыш ҡына өндәр гармонияһы боҙолоп ҡала. Шуға күрә лә, был етешһеҙлекте урап үтер өсөн, башҡорт авторҙары Европа формаларынан бер аҙ ситләшергә мәжбүр. Катрендарҙа традицион йыр строфалары ҡулланылыуы тәү сиратта тап ошоға бәйле.

Йөкмәтке йәһәтенән дә сонет структураһы билдәле бер формаға нигеҙләнә. Классик сонетта фекер үҫеше бер тәртиптә килә: тезис – антитезис – синтез – сиселеш. Йәғни лирик сюжет диалектик ҡапма-ҡаршылыҡҡа нигеҙләнә. Был һыҙат башҡорт сонеттарында ла урын алған. Мәҫәлән, Р. Ҡәҙерғәлиндың “Көҙ сонеты”нда тәүге катрен лирик геройҙың яҡты кисерештәре менән һуғарылып килһә:

Көҙ һарыһы ҡунды ағастарға.
Йылы ҡояш еҙ батмустай балҡый.
Ә һауанан ҡар тындары аңҡый,
Ә йөрәгем сорнала наҙ, моңдарға;

Икенсе катренда ҡапма-ҡаршы – һағышлы тойғолар һүрәтләнә:

[4]Гроссман Л. П. Поэтика русского сонета// Борьба за стиль: Опыты по практике и поэтике. М., 1927.

Күңел рухым – көҙгө, нанлы миҙгел,
Иләҫ-миләҫ мәйел генәм һиҙгер.
Әсирләүсе һары һағыш тирәләй
Илаһи моң тиртеп кенә тирбәлә.

Өсөнсө строфала ике тойғо берләшә кеүек, лирик геройҙы күңел тыныслығы биргән моңһоулыҡ биләп алғандай:

Көн менән төн тигеҙләшкән мәлдә,
Асылыма ҡайтам өтәләнмәй –
Өләшергә шатлыҡ, йәм йәлләмәй.

Күренеүенсә, хатта поэтик деталдәр ҙә (көн-төн) ике хис-тойғоноң тигеҙләшеүенә ишара булып тора. Һуңғы өс юллыҡ алдағы терцеттың йөкмәткеһен ҡеүәтләп ҡуя:

Ҡөҙрәтемдә әле дәрт етерлек,
Хазинам бар ырыҫ бүлешерлек –
Хаҡ Тәғәлә илһам биргән хәлдә.

Ләкин сонеттарҙа башҡа сюжет ҡоролошо ла булыуы ихтимал. “Төш” (Ә. Таһирова) әҫәрендә эпик сюжет өҫтөнлөк итә. Лирик герой төш күрә – имеш, сират күперендә йәндәрҙе тамуҡҡа һәм ожмахҡа оҙатып торалар:

Ерҙә ҡара машинала ғына елгән
Уғры берәүҙе ул йәһәт эҙләп тапты.
Утлы һәнәгенә элеп, болғай-болғай,
Тамуғының уртаһына алып атты.

Шыбырланы шул саҡ арыҡ байғош әҙәм:
Балда, майҙа йөҙгәйне – булды әрәм!

Был сонет, шулай итеп, диалектик түгел, ә драматик структуралы төргә ҡарай: әҫәрҙә төйөнләнеш – үҫеш – кульминация – сиселеш өлөштәре бар. Ғөмүмән, классик жанр талабы буйынса, һәр строфа бер тамамланған фекерҙе белдереп, нөктә менән тамамланып килә. Был ҡанундан да ситләштерелгән үҙенсәлекле ижад өлгөләре бар. Мәҫәлән, Рәшит Зәйнуллиндың “Галлюцинация” тип аталған сонетында айырым бер фекерҙе белдергән һөйләм строфанан строфаға күсеп килә:

Теләнем мин хистәр ялҡынында
йылы тойғоларҙа янырға,
яндым, эйе... Ал ҡан һул ҡулымдан
тамды... Оҡшап алһыу ямғырға.
күктән утлы наҙҙар түгелделәр,
сәскәләр ҡояшҡа эйелделәр,
бәхет хәтерләтте ташҡынды.

Күренеүенсә, ошо рәүешле яҙыу йөкмәтке төҙөклөгөнә генә түгел, сонетҡа хас булған ритмик теүәллеккә лә шаҡтай үҙгәреш индерә. Йыш ҡына сонеттарҙа фекер “тема – үҫеш – һығымта” формаһында ҡорола. Был сонет йөкмәткеһенең элегия, ода жанрҙарына тартым булыуы менән бәйле булһа кәрәк. Элегия, одаға хас булған лирик сюжет үҙенсәлектәре сонет структураһына йоғонто яһамай ҡалмай. Элегик йөкмәткеле сонетҡа медитативлыҡ, ассоциатив башланғыс, образлылыҡ хас (“Маҡсат”, А. Ғарифуллина; “Күркәм билән”, Р. Ҡәҙерғәлин; “Күҙҙәремә яҡты таң күренде”, Р. Зәйнуллин). Ода төҫөн алған сонет күтәренке кисерештәр, пафослығы менән айырылып тора (“Петраркаға бағышлау”, Ә. Таһирова).

Шулай итеп, сонет жанры башҡорт шиғриәте ерлегендә үҙ классик ҡанундарынан шаҡтай айырылып тора. Был тәү сиратта тел, башҡорт шиғырының метрик үлсәмдәре менән бәйле. Шулай уҡ сонетҡа традицион милли формалар ҙа йоғонто яһамай ҡалмай. Һөҙөмтәлә, авторҙар, төрлө стилдәрҙе уҡмаштырып, үҙенсәлекле шиғыр формаларын барлыҡҡа килтерә. Икенсе яҡтан, сонеттың бөгөн дә башҡорт ерлегендә ныҡлап таралып китә алмауы уның форма ҡатылығына бәйле. Был жанрҙа юғары художестволы кимәлдәге әҫәр тыуҙырыр өсөн байтаҡ ижади көс һәм ваҡыт талап ителәй. Форма ирекле меғнән айырылып торған башҡа жанрҙар өлгөләрен бер тынала яҙыу мөмкинлеге булһа, бында фекерҙе билдәле бер формаға һыйҙырырға кәрәк. Юғары стиль һаналған сонет формаһын һәм моңло, халыҡсан телде гармоник рәүештә берләштереүгә өлгәшкән осраҡта иһә, ысынлап та һоҡланғыс ижад өлгөһө тыуа.

Мөнир ИҠСАНОВ.

ТЕЛ ТИГӘН ДИҢГЕҘ БАР...

(Марат Зәйнуллиндың һайланма мәҡәләләре сығыу айҡанлы)

Башҡорт тел ғилемендә атаҡлы ғалим Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың ниндәй роль уйнауы яҡшы билдәле. Уның шәкерттәре күп. Улар остаздың белем тәрәнлеген, фекер йөрөтөү офоҡтары киңлеген аңлаған шәхестәр. Шуларҙың береһе – филология фәндәре докторы, академик Марат Вәли улы Зәйнуллин. Ул 1969 йылда Башҡорт дәүләт университетындағы тарих-филология факультетының филология бүлеген (рус теле һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы) дәрәжәле диплом (диплом с отличием) менән тамамлай. Аспирантурала уҡый. 1963 йылда кандидатлыҡ, 1988 йылда докторлыҡ диссертацияһы яҡлай.

Марат Зәйнуллиндың «Башкирское, тюркское и сопоставительное языкознание» тигән китабы (Уфа, «Гилем», 2012, 456 стр.) башҡорт, рус, инглиз телдәрендә яҙылған. Китаптың, бүлектәрҙең атамаһы рус телендә. Беренсе бүлек: «Башкирскому государственному университету – 100 лет. ФБФ и Ж – 20 лет». Икенсе бүлек: «Башкирский язык как государственный язык РБ». Өсөнсө бүлек: «Теоретические проблемы башкирского и тюркского, сопоставительного языкознания». Дүртенсе бүлек: «Грамматический и лексический строй башкирского языка». Бишенсе бүлек: «Язык и культура». Алтынсы бүлек: «Персоналии».

Мин был мәҡәләлә һәр бүлеккә ҡарашымды әйтеү маҡсатын ҡуймайым, ә «Грамматический и лексический строй башкирского языка» тигәненә генә туҡталаһым килә.

Автор грамматиканың беренсе киҫәге булған морфология өлкәһендә күп яңылыҡтар асты. Башҡорт телендәге бәғзе морфологик категорияларҙың эске тәбиғәтен, әгәр шулай әйтергә яраһа, һөйләм эсендә генә йәки синтаксиста ғына асыҡлап була. Бындай осраҡта ғалим был категорияның эске алтынын тышҡы көмөш ҡәрҙәшлеге менән бер яҫылыҡта ҡарай. Шуның менән ул алтын һәм көмөш эсендәге зәррә серлелектәрен асыҡлай. Был осраҡта телсенең сағыштырыуҙар менән оҫта эш итеүе ярҙамға килә. Ябай ғына бер миҫал. Башҡорт телендә: «Уҡыу – яҡшы шөғөл»; руста: «чтение – хорошее занятие»; инглиз телендә: «reading is good accupation (ridiң is гут акюпейшен)». Уҡыу – ҡылым, чтение – исем, reading – герундый (исем менән ҡылым араһында торған грамматик категория). Башҡорт (уҡыу, уҡымау), татар (уку-укумау) телдәрендә исем ҡылымға хас булған грамматик категория бар. Шуға күрә исем ҡылым, исем фиғел тип йөрөтөлә улар. Башҡа төрки телдәрҙә (үзбәк, уйғыр, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ) улар исемләшеп киткән.

Һәр бала үҙ атаһының күркәм сифаттарын башҡа балалар атаһындағы шундай уҡ күркәмлелеккә сағыштырып белергә тырыша. Әгәр грамматика телдең атаһы икән, айырым бер

милли телде алһаҡ, грамматика – ата был милли телдең донъя даирәһендә балҡышы өсөн көрәшергә тейеш. Үҙ атаһы аҡылын башҡаларҙыҡы менән сағыштырып белергә теләгән бала яңылышырға ла мөмкин бит әле. «Сағыштырыу – танып-белеүҙең әсәһе» тигәнебеҙ ҙә ул, немец халҡы был хаҡта башҡасараҡ фекер йөрөтә: «Һәр сағыштырыу аҡһай». Французлдарҙың: «Һәр сағыштырыу дәлилләү була алмай әле», – тигәне лә бар. Төркиҙәр грамматиканы күберәк урыҫтарҙыҡына сағыштырып яҙа. Грамматика – атайыбыҙҙың да атаһы – иман бар бит әле. Иман һыҡырҙарса эйәреүҙәрҙе хупламай. Уның шулай икәнлеге грамматика фәненең нәзәри (теоретик) ҡиблаһын ғәмәлләштереүҙә лә һиҙелә. Бәғзе ғалим раҫлауынса, грамматика – яҙырға, уҡырға өйрәтә торған фән. Ләкин уның менән генә сикләнмәй. Сикһеҙлекте профессор М. В. Зәйнуллин төрлө-төрлө хеҙмәттәре менән күрһәтә. Уның шулай түгеллеге әлеге беҙ фекер йөрөткән капитал хеҙмәттең 316 – 364 биттәрендә бик асыҡ сағылдырыла: «Основные проблемы лингвокультурологии», «Родной язык и национальная культура (проблема соотношения и взаимодействия», «Туған телем – мәңгелек хазина», «Башҡорт лингвистик картинаһында «Туған тел» концепты, «Родной язык как феномен национальной культуры», «Языковая личность и национальный менталитет», «Синергетический подход в исследовании языка и культуры» и т.д. Ошо миҫалдар ғына ла Марат Зәйнуллиндың билдәле башҡорт тел белгесе һәм тюрколог икәнлеген итәғәтләй.

Фәлсәфә фәнендә берҙән-берлек, дөйөмләлөк, айырымлылыҡ тигән категориялар бар. Һуңғы ваҡытта тел фәлсәфә фәненә бәйле рәүештә лә өйрәнелә. Әйтәйек, милли тел – башҡорт халҡы өсөн берҙән-бер. Дөйөмләлөк – башҡа телдәр менән сағыштырып ҡарау. Айырымлылыҡ – туған телдең үҙ эске хосусиәте. Хеҙмәттә был үҙенсәлектәр ҙә заман заңы юғарылығы талаптарына яраҡлаштырылып өйрәнелә. «Сағыштырыу» тигән һүҙҙе күп телгә алдыҡ. Сөнки уның ҡанаты бик киң. Тел фәнендә ул һүҙ һүҙтеҙмә, һөйләм яһаусы грамматик категория булараҡ ҡарала.

Шуныһы шатлыҡлы:М. В. Зәйнуллин теге йәки был теманың дилбегәһен «бисмилла» әйтеп тотҡансы, уның халыҡ, фән, йәмғәтселек өсөн әһәмите хаҡында уйлана, Нәзәри (теоретик), ғәмәли (практик) ҡиблаһын асыҡлай. Һуңғы йылдарҙа яҙыусылар теле мәктәптә лә, юғары уҡыу йорттарында ла айырым фән булараҡ та өйрәнелә башланы. Был яңы фәндең методикаһы сит илдә лә, рус филологияһында ла, төркиҙәрҙә лә һаман ныҡлап асыҡланмаған әле. Әйтәйек, грамматика фәнендә махсус ҡағиҙәгә таянып фекер йөрөтөлә. Әҙәби әҫәр телен тикшереү өсөн махсус ҡағиҙәләр юҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, йөрәкһенеп, стилистика фәненә Мостай Кәрим кеүек нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы әҫәренең телен тикшереп аяҡ баҫа ғалим. Әгәр грамматика телдең атаһы, этимология әсәһе икән, ата-әсәнең балалары ла булырға тейеш бит. Балалары – ауазхәреф, һүҙ тамыры, һүҙ нигеҙе, һүҙ ҡушымсаһы, төрлө типтағы һөйләм һ.б. Тел фәненә мөкиббән, ихлас, ялҡынлы дәрт, ҡайнар дарман менән керешкән Марат Вәли улы башта «балаларҙың» тәртибенә, мәғәнә билдереү сифатына, фәнни телдә әйтһәк, семантикаһына ғына иғтибар итте. Тора-бара ғалим «балаларҙың» хистойғоһо, моңо, эмоцияһы, экспрессивлығы менән ҡыҙыҡһына башланы. «Ҡылым формаларының эмоциональ-экспрессив мәғәнәләре», «Башҡорт телендә заман формаларының стилистик функциялары», «Хәҙерге заман формаларының стилистик ҡулланылышы», «О выражении экспрессивности и эмоциональности в башкирских народных сказках» тигән фәнни хеҙмәттәр баҫтырҙы. Ә Мостай Кәримдең

һүҙ сәнғәте оҫталығын «һүҙ-һүрәт», «һүҙ-фекер», «һүҙ-тойғо» кеүек парлы һүҙҙәр нигеҙендә асыҡланы. Быларға һүҙбиҙәк (эпитет), һүҙалмаштырғыс (метафора), сағыштырыу, йәнләндереү, мәҡәл-әйтем, фразеология һ.б. һүрәтләү-тасуирлау саралары инә. Саралар аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатырға, йәнле картина тыуҙырырға, образлылыҡҡа ирешеүгә, әҫәрҙең идея-йөкмәткеһен асыҡлауға ярҙам итә. Халыҡ уйлап тапҡан тел диңгеҙе түбөндәге ынйы-мәрйендең эске мәғәнәһе ғәжәп серле ул.

Мостай Кәримдең ҡәләм оҫталығы шөһрәтен тикшереү төрлө грамматик сараларҙан уҡ башлана:«Мостай Кәрим ижады, стиле башҡорт әҙәби телен үҫтереүҙә ҙур урын биләй. Мәҫәлән, ул телдә һирәк ҡулланылған сараларҙы даими файҙалана. Морфологик формаларҙы байытыуҙа ла Мостай Кәримдең ижады баһалап бөткөһөҙ. Мәҫәлән:

Яуҙа яуҙаш, дандаш һәм ҡәберҙәш
Изге һуғыш барған майҙанда.

Миҫал итеп продуктив булмаған -ҙаш/-даш аффиксын телмәр ерлегендә активлаштырҙы. Уның шиғри һәм драматик әҫәрҙәренең стилистик сараһы булып-маҡ, -мәк аффиксы боронғо ҡылым формаһы йыш осрай:

Ҡулыбыҙға ҡәләм-таш алмаҡ булдыҡ,
Ҡош телендәй сәләм-хат яҙмак булдыҡ.

Оло әҙиптең ижады башҡорт теленең лексикаһын һәм фразеологияһын үҫтереүҙә лә бай сығанаҡтарҙың береһе һанала. Уның үҙенсәлекле фразеологик берәмектәре, диалект ерлегенән, халыҡтың йәнле һөйләү теленән алынған телмәр берәмектәре әҙәби телдең һүҙлек составын бермә-бер байытты. Мәҫәлән: үс бауырҙы талай, йөҙ түңәрәкләнеү, мәсьәләгә төтөн өрөү, Алланың алтмыш йыл беселмәгән һарыҡ тәкәһе, имандан йәйәү ҡасыу, быраматта йөрөү…

Мостай Кәрим әҫәренең сәнғәтсә эшләнеше, тел-стиль үҙенсәлеге тураһында хаҡ, төплө, аҡыллы, хисле фекер әйткәндә, стилистика маһирлыҡтың ҡылдай нескә яҡтарына ла иғтибар итә ғалим. Хеҙмәттән бер өҙөк: «Мостай Кәримдең ижады күп яҡлы: ул талантлы шағир ҙа, көслө прозаик та, мәшһүр драматург та һәм ялҡынлы публицист та. Уның шиғырҙары тәрән мәғәнәле, юғары идеялы, киң йөкмәткеле. Ул үҙенең ана шул шиғриәте менән донъя халыҡтары күңелендә танылыу яуланы. Мәҫәлән, «Россиянмын» шиғыры ғына ла дуҫлыҡ күгәрсененә бәрәбәр булды. Уны Ер шарының барлыҡ уҡыусылары дәрестәрҙә уҡыйҙар, ятлайҙар. Был донъяла дуҫлыҡ күпере ана шунан һалыналыр. Бөтә ҡитға һине уҡый икән, тимәк, шағир тураһында, уның халҡы хаҡында ла барлыҡ донъя белә тигән һүҙ».

Һүҙ аҙағында тел атаһы – грамматика, тел әсәһе – этимология һәм уларҙың балалары тураһында йәнә бер уйланыу. Бала атаһын, әсәһен тыңламаһа, өй эсендә ғауға ҡуба. Үҙ телеңдең иманын, моңон, эске һәм тышҡы хосусиәтен аңламайынса яҙһаң, уҡыусының кәйефе ҡырыла. Барлыҡ жанрҙарҙа ла (проза, шиғыр, драма) русса уйлап, башҡортса яҙыу сире һиҙелә. Һөйләм төҙөүҙә миллилек биҙәге айырыуса тәмһеҙләнә. Был – грамматикала милләт нағышын боҙоу биҙаһы. 75 йәшлек тел ғалимы әле яңынан-яңы ынйы-мәрйендәр йыйыу менән мәшғүл.

Суфиян ПОВАРИСОВ,
БДУ профессоры.

«Ағиҙел»гә – 90 йыл

Нәфис әҙәбиәт:
ХЫЯЛ, ЫСЫНБАРЛЫҠ, ТОРМОШ ТАЛАБЫ

«ӘҘӘП», «ӘҘӘБИӘТ» – БЕР ТАМЫРҘАН

(Мәрйәм Бураҡаева, Ғәлим Хисамов менән әңгәмә)

Фәнил КҮЗБӘКОВ:

– Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы, «Ағиҙел» биттәрендәге әңгәмәләрҙә бөгөнгө әҙәбиәт кимәле, милли рух, нәфис әҙәбиәттә үткәрелеүсе идея, идеология, әҙәби тәнҡит кеүек проблемаларға бәйле фәһемле генә фекерҙәр әйтелде. Мәктәп уҡыусылары өсөн дәреслектәр яҙған, халыҡ эсендә ҡайнаған, йәмәғәтселек эшендә әүҙем ҡатнашҡан әҙибә булараҡ танылыу яулаған Мәрйәм Бураҡаеваның да, моғайын, әйтер һүҙе барҙыр...

Мәрйәм БУРАҠАЕВА:

– Әҙәбиәт кимәле, билдәле, халыҡтың әҙәби әҫәрҙәргә мөкиббән китеүе йәки битарафлығы менән билдәләнә. Яҙыусы заманды, ил мәнфәғәтен, уҡыусының ихтыяжын тойоп ижад итә икән – әҙәби әҫәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу ҙа, мохтажлыҡ та арта. Әҫәр үҙенең идея йөкмәткеһе, идеяны елкәһендә күтәреүсе төп герой яҙмышы менән йәшәп итә. Уҡыусы уны тиҙ тоя, үҙенең зауығына, талабына тап килгән әҫәр хаҡында йә уҡып, йә ишетеп белә, эҙләй, таба, башҡаларға тәҡдим итә. Ошо юҫыҡта, әлбиттә, әҙәби тәнҡит ҙур роль уйнай. Бәлки, тәнҡит тигән һүҙ урынлы ла түгелдер. Икенсе төрләрәк термин кәрәктер. Әҙәби тәнҡит ул бит тәнҡитләү бурысын ғына күтәрмәй, ә әҫәргә дөрөҫ баһа бирергә лә тейеш. Бөгөн ысын тәнҡит юҡ һымаҡ. Ысын тәнҡитте әҫәрҙе һәм авторҙы тетеп бөтөрөп ташлау йәки юбилейға арналған мәҡәләләрҙә күккә күтәреп маҡтау тип кенә аңлай башланыҡ. Ә әҙәби тәнҡиттең бурысы – уҡыусыға әҫәрҙең ябай күҙ менән күренмәгән ҡиммәтен, төп идея-йөкмәткеһен асып биреүҙәлер, ул саҡта «иҫкергән, заман талабына яуап бирмәгән» әҫәрҙәр ҙә булмаясаҡ. Юғиһә, ниндәй матур әҫәрҙәребеҙ уҡыу программаһынан да, әҙәбиәт һөйөүселәрһеҙ өҫтәл китабы булыуҙан да төшөп ҡала бара. Башҡорт әҙәбиәтендә генә түгел, рус әҙәбиәтендә лә. Демократик үҙгәреш елдәре иҫә башлағас, миңә бик күп уҡытыусылар шундай һорау бирә ине:

– Хәҙер «Ырғыҙ», «Еңелгән ятыу», «Ҡара йөҙҙәр» әҫәрҙәрен ни эшләтәбеҙ? Бөгөнгө заман ҡарашына тап килмәй бит улар.

Минең яуабым шулай булды:

– Был әҫәрҙәр – классика. Улар бер ваҡытта ла үҙ ҡиммәтен юғалтмаясаҡ. Был

әҫәрҙәргә фәҡәт заман күҙлегенән ҡарау һәм авторҙың кинәйә менән әйтелгән төп фекеренә иғтибар итеү генә кәрәк.

«Ырғыҙ» романы – кешелек донъяһының, халыҡтарҙың, һәр айырым кешенең ғүмер буйы азатлыҡҡа, сафлыҡҡа, матурлыҡҡа ынтылыуы тураһында. Күңеле йырлап торған башҡорт халҡының да (әҫәрҙә йырҙарға ҙур ғына урын бирелә) матурлыҡтан тағы ла матурыраҡ тормош ҡororға ынтылыуы, ошо ынтылышын тормошҡа ашырыу өсөн төрлө юлдар эҙләүе һәм, Октябрь революцияһын үҙ хыялының ғәмәлгә ашыуы тип ҡабул итеп, көрәшкә күтәрелеүе тураһындағы әҫәр. Октябрь революцияһына, артабанғы үҙгәрештәргә, Коммунистар партияһы тотҡан юлға ышаныс шул тиклем ҙур була – яҡты киләсәк өсөн үҙ ғүмерҙәрен дә аямай көрәшкә ташланалар. Әммә матурлыҡ тыуҙырыусы матур күңелле кешеләргә бер ваҡытта ла еңел булмаған, сөнки булдыҡһыҙҙар уларҙан көнләшкән. Ә көнсөллөк, шул уҡ яманлыҡ, төрлө кимәлдә була: ике йөҙлөлөк, аҫтыртынлыҡ, уҫаллыҡ, яуызлыҡ, мәкер, үс, ҡара эслелек һәм башҡалар. Урал батыр ҙа Шүлгәнде үлтермәй бит. Яҡшылыҡ менән йәнәш Яманлыҡ йәшәй. Яҡшылыҡ фәҡәт көрәш, һынауҙар аша ғына һабаҡ ала, көс туплай, еңә, юғарыға үрләй. Яманлыҡ та йоҡламай. Яҙыусы быны әҫәрҙең башында уҡ кинәйә менән генә һүрәтләй. Диләфрүз болонда йүгереп йөрөп сәскәләр йыя һәм бик матур гөлләмә яһай. Гөлләмәнең матурлығын күргән, әммә Диләфрүздең маһирлығынан көнләшкән Хаят («тормош» тигән һүҙ) уны йолҡҡолап ырғыта. Үҙе йолҡа, үҙе үк ҡысҡырып илай. Был – халҡыбыҙҙың бай күркәм рухи донъяһы сәскәләренән тағы ла гүзәлерәк «гөлләмә» яһаусы – ғәжәп романы менән рухи донъябыҙҙы тағы ла байытыбыраҡ ебәреүсе Һәҙиә апайҙың үҙ яҙмышы. Диләфрүз – бихисап Һәҙиәләр Яҡшылыҡҡа хеҙмәт итеүселәр яҙмышын сағылдырһа, Хаяттар – Яманлыҡ сағылышы. Бына ҡайҙа ул тормош дөрөҫлөгө. Ошондай көрәш бара кешелек донъяһында. Һәҙиә апайҙың үҙ яҙмышы ла йолҡҡоланып ташланған гөлләмә кеүек булһа ла, донъяла Хаҡлыҡ-Яҡшылыҡ бар. Ул еңде. Яҙыусы уҡыусыны Яҡшылыҡтың еңеренә ышандыра, Диләфрүздәр менән Хаяттарҙы айыра белергә өйрәтә. Был йәһәттән, әлбиттә, тәнҡитселәр ярҙамы мотлаҡ. Улар уҡыусыға дөрөҫ йүнәлеш бирергә тейеш. Уҡыусының төрлөһө бар: әҫәрҙең төп әрәсәһен элеп алғаны, аңламайыраҡ ҡалғаны. Мәжит Ғафури әҫәрендә кемдәр ул «ҡара йөҙҙәр»? Дин әһелдәреме? Хәҙер дингә ҡараш үҙгәрҙе тип, уҡыу программаһынан алып ташларға тейешбеҙме? Ҡара йөҙҙәр – ул күркәм маҡсатлы тәғлимәтте лә үҙ файҙаһына бороп, гүзәллектән үс алырға ынтылып тороусы көнсөл бәндәләр. Мулла ошаҡсы егеттәрҙән үҙ хәбәрҙәрен ҡабат-ҡабат раҫлата, дөрөҫлөктө асырға, Ғәлимә менән Закирҙың, ысынлап та, дини ҡанундар тыйған гонаһ ҡылыуҙарына инанырға тырыша. Ә көнсөл егеттәр, дини ҡанундарға һылтанып, сафлыҡты бысраҡҡа буяй. Беҙҙең заманда ла ниндәй матур закондар сығарыла. Әммә уны боҙоп, тар ғына мәнфәғәттәрендә файҙаланыусы, кеше намыҫына нахаҡ яғыусы «ҡара йөҙҙәр» бар. Ундайҙарҙан һаҡ булырға, уңды-һулды айырмайынса, ашығыс хөкөм сығарып, Ғәлимәнең атаһы һымаҡ, сыбыртҡыға тотоноу, балаң яҙмышын боҙоу – үтә лә аяныслы хәл.

Теге йәки был идеяға битараф булған әҙәбиәт ул әҙәбиәт булмай. Донъяны алға этәргән, бөгөн кешелек донъяһы әҙәбиәте өсөн дә дөйөм идея бар: ул да булһа, әйтеп китеүемсә, – яҡшылыҡ. Яҡшылыҡтың нигеҙен тәшкил иткән идея – классик идея. Әҙәбиәттең маҡсаты – уҡыусыға кешелек донъяһы йәшәйешенең төп идеяһын аңлатып биреү. Ошо идеяны тормошҡа ашырыу өсөн көрәш, көрәш барышындағы ҡаршылыҡтарҙы, ҡара йөҙҙәрҙе, Хаят ишеләрҙе айыра белеү өсөн ҡулына компас тоттороу. Әҙәбиәт – ул компас, ә әҙәби тәнҡит – компас менән эш итергә өйрәтеү.

Әҙәбиәт тарихы – ул халыҡтың ғилем тарихы ла. Беҙҙең күршеләребеҙ әҙәби байрамдарға ҡунаҡҡа килгән саҡта сығыштарын һәр ваҡыт: «Мең йыллыҡ әҙәби тарихы булған татар халҡынан сәләм!» – тип башлай. Беҙ: «Дүрт мең (йәки биш мең) йылдар элек ижад ителгән «Урал батыр» ҡобайыры булған башҡорт халҡынан сәләм!» – тип һүҙ башлайбыҙ икән, халҡыбыҙ тарихын сағылдырасаҡбыҙ.

Әҙәбиәт – ул сәйәсәттең дә сағылышы. Әҙәбиәт – сәйәси идеяны халыҡ күңеленә үтемле һүҙ, сәпкә тейҙерерлек үткер фекер менән аңлатып биреүсе сара. Әйтәйек, һуғыш аяуһыҙлығын тарих фәне аша, миллионлаған кеше юҡ ителгән, тип аңлатыуға ҡарағанда, бер әҙәби герой яҙмышы аша һүрәтләү күпкә отошло, йоғонтоло. Халыҡ яҙмышындағы ҡатмарлы осорҙа шағир һүҙе иҫ китмәле ҙур роль уйнаған. Шәйехзада Бабич Зәки Вәлидиҙең һатлыҡ булмауын ялҡынлы шиғырҙары менән аңлатып биргән, депутаттар һайлағанда, кемдәргә өҫтөнлөк биреү, ерҙе ҡулдан ысҡындырмау тураһындағы шиғырҙары бөгөн дә актуаль. Совет осоронда (ул саҡтарҙа ғынамы һуң?) бер телле халыҡҡа әйләндереү сәйәсәте алып барылған заманда Рәми Ғариповтың «Аманат»ы, «Туған тел»е иҫ китмәле әһәмиәтле булды.

Әҙәбиәт йәмғиәт ҡоролошонда өҫтөнлөк иткән айырым идеологияға түгел, ә дөйөм кешелек донъяһын йәшәтеүсе, алға әйҙәүсе төп идеяға, халыҡ мәнфәғәтенә хеҙмәт итергә тейеш. Идеологияға хеҙмәт иткән идеяларҙың төрлөһө була. Ғүмерлеһе, ғүмерһеҙе. Илебеҙҙә коммунистик идеология сәскә атҡан заманда, власть башында Сталин ултырғанда, шиғри йыйынтыҡтарҙа иң тәүге шиғыр мотлаҡ уға арналырға тейеш булған. Бөтөн әҙәби әҫәрҙәр ҙә коммунистик идеология күҙлегенән сығып ижад ителгән. Айырым әҫәрҙәрҙең авторҙары төп фекерҙәрен ап-асыҡ әйтә алмаған, кинәйә менән биргәндәр. Шул уҡ Диләфрүз менән Хаят образдары, йәнә ошо уҡ романда иғтибар итегеҙ: яҡшы күңелле, яҡшылыҡ өсөн көрәшеүселәр барыһы ла йырлай. Яманлыҡты сағылдырыусылар йырлау һәләтенән мәхрүм. Күңеле матур кешеләр йә үҙҙәре йырлай, йә йырға мөкиббән. Дауыт Юлтыйҙың Ҡарағол драмаһын алайыҡ. Драманың төп әрсәһе – Ҡыраубикәнең һүҙҙәрендәлер, тип уйлайым һәм әҙәбиәт дәрестәрендә шулай тип аңлата ла торғайным. «Бәндәне бәндә көнөнә ҡалдырмаһын». Был бит иҫ китмәле фекер. Кешене кешегә ҡол итмәһен. Башҡорттоң быуаттар буйы ихтилалдарға күтәрелеүенең төп маҡсаты ла шул бит. Кешегә ҡол булмау, рухи азатлыҡ! Бына бит башҡорт әсәйҙәре уландарын ниндәй рухта тәрбиәләгән! Бына нисек тәрбиәләргә тейешбеҙ бөгөн дә. Тар ғына, бәләкәй генә маҡсаттар менән түгел. Ысын йәшәү таты, ысын йәшәү мәғәнәһе, ысын йәшәү бәхете рухи азатлыҡта – әҫәрҙең идеяһы.

– Һин дә «Тормош һабаҡтары»ң менән тарихта ҡаласаҡһың, – тине бер яҙыусы миңә. Күрәһең, ул күңеле менән үҙен күптән инде халҡыбыҙ тарихының иң күркәм биттәренә индереп ҡуйғандыр. Юғиһә, «һин дә» тип әйтмәҫ ине.

– Мин бит тарихта ҡалыр өсөн түгел, ә башҡортобоҙҙоң исеме тик тарихта ғына ҡалмаһын өсөн ҡулымдан килгән тиклем өлөш индермәк булып тырышам, – тинем.

Ысынлап та, яҙыусылыҡтың төп маҡсаттарының береһе – халҡың ғүмерен оҙайтыуҙа түгелме икән? Ижадың менән генә түгел, үҙеңдең булмышың, ғәмәли эштәрең, йәшәйешең менән дә. Һәр быуын яҙыусылары, һис юғы, үҙ балалары һәм ейән-ейәнсәрҙәренә, үҙе йәшәгән быуын уҡыусыларына, уларҙың балаларына халҡы рухын һала ала икән, тимәк, рух шәжәрәһенең ҡулсалары артабан ялғана бара тигән һүҙ бит. Ижад – халҡыңды үҙ булмышына, яҙмышына, йәшәйешенә, киләсәгенә ҡарата битараф булмаҫҡа өндәүҙер, халҡыбыҙҙың аманаты булған «Урал батыр» эпосының төп идеяһына тоғро ҡалыу юлдарын өйрәтеүҙер. Ниндәй

ысулдар менән, ниндәй жанр аша еткерә үҙ фекерен – уныһы инде ижадсының һәләтенә ҡайтып ҡала.

Фәнил КҮЗБӘКОВ:

– Әҙәм балаһы үҙенең ижади эшмәкәрлеге менән генә тарихта ҡалыуы мөмкин. Эшен сәнғәт юғарылығында башҡара алыуға ирешкән һәр һөнәрмән үҙе лә, хеҙмәт емеше лә үлемһеҙ (Зәйнәб Биишеваның «Һөнәрсе һәм Өйрәнсек» хикәйәте был йәһәттән классик ғибәрә өлгөһө ул). Ә инде ижад милли рух менән һуғарыла ҡалһа, һөнәр эйәһе үҙен генә түгел, халҡын да мәңгеләштерә.

Һеҙ атаған классик әҫәрҙәр рәтен, башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондына инеү өсөн дәғүәләшерҙәй әҫәрҙәр улар, тип тағы ла тулыландырып булыр ине. Дауыт Юлтый, Ғәлимов Сәләм, Баязит Бикбай, Рәшит Ниғмәти ижады, мәҫәлән, шулай түгелме ни?!. Әлбиттә, һәр ижадсы – үҙ заманының балаһы. Әммә заман идеологияһына улар араһында ла бар ихластан инанып ижад итеүселәр, бар тамаҡ һәм дан хаҡына «эш» күрһәтеүселәр. Тик, нисек кенә булмаһын, теге йәки был әҫәрҙе «ниндәйҙер идеяға хеҙмәт иткән» тип кенә юҡҡа сығарыу үҙен аҡлап бөтмәйәсәк. Сөнки уның баһаһы ваҡыт һынауҙарын үткәндән һуң идеяға бирелгән-бирелмәгәнлеге менән түгел, ә сәнғәт әҫәре, ижад емеше булараҡ, тормош дөрөҫлөгөн бар ҡапма-ҡаршылығында аса алыу-алмауы менән билдәләнәсәк. Был критерийҙар күҙлегенән ҡарағанда, «Ырғыҙ»ҙы һис икеләнмәйенсә үлемһеҙ әҫәрҙәр биләмәһенә индерергә мөмкин. Ә инде кемдер быға бәйле ниндәйҙер шик белдерә икән, был ҡараштар эйәһе бөгөнгө алыпһатарҙар бизмәне менән генә эш итә, тиергә ҡала. Асығын әйтер кәрәк: «Ырғыҙ»ҙа ла бар идеяға хеҙмәт итеү, әммә ул, беренсенән, художестволылыкты баҫып китмәй, икенсенән, әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғалар үҫеше логикаһы характерҙар бәрелеше һөҙөмтәһе итеп ҡабул ителә, өсөнсөнән, авторҙың идеяға ихлас бирелгәнлеге лә яҙмышы менән нығытылған. «Ҡара йөҙҙәр», был йәһәттән, бер ни тиклем ҡатмарлыраҡ. Эш нимәлә һуң? Башҡортостанда ислам диненең мең йылдан ашыу тарихы булыуына ҡарамаҫтан, башҡорттоң мосолманлығы тәрән тамырлы, тип әйтеүе ҡыйын. Һәр хәлдә ата-бабаларыбыҙҙың бер генә дәүерҙә лә (хатта Батырша ислам әләме аҫтында ихтилал ойоштора алған тип ҡараған сүрәттә лә) мөкиббән рәүештә дингә бирелгәнлеге тарихи мәғлүмәттәр менән нығытылмай. Олатайҙарыбыҙ дини тәртип-йолаларҙы теүәл үтәргә тырышһа ла, уның эске ҡанундары менән бигүк иҫәпләшмәгән. Иҫ китмәле бай ауыҙ-тел ижады тап шул турала һөйләй. Ғөмүмән, кешелек үҫеше тарихы шуны күрһәтә: әҙәми заттың тәбиғи булмышы рухи яҡтан иректә мәлендә генә тулыраҡ асыла, шәхес булараҡ үҫешергә мөмкинлектәре киңәйә. Былай фекерләү динде инҡар итергә тырышыуҙы аңлатмай, ә хәл-әхүәлдәрҙең булмышын нисек бар – шулай күрһәтергә ынтылыу менән бәйле. Ошоларҙы күҙ уңында тотҡанда, йәштәрҙе осрашып-һөйләшеп торған өсөн генә, дин талаптарына таянып (Урта Азияла түгел, ә Башҡортостанда!), хөкөм итеүҙе ғәҙәти күренеш, художестволы әҫәр өсөн типик ваҡиға тип ҡарай алабыҙмы?! Әлбиттә, биттәрен ҡоромға буяһалар ҙа, Ғәлимә менән Закир уҡыусы күңелендә яҡты йөҙлө, уларҙы хурлаусылар иһә, теләктәренә, маҡсаттарына тулыһынса ирешһә лә, «ҡара йөҙлө» булып һынлана. Автор дини тәғлимәтте үҙ файҙаһына ҡулланыусыларға ғына түгел, ә диндең үҙенә лә тел тейҙерә. Күренеүенсә, һүҙ Мәжит Ғафуриҙың «Ҡара йөҙҙәр» повесын уҡыу программаһында ҡалдырыу-ҡалдырмау, тәрбиә эшендә файҙалана алыу-алмау тураһында түгел, ә нисек ҡабул итеү кәрәклеге тураһында барыуы

мөмкин. Әҫәрҙең, әҫәрҙәге ваҡиғаларҙың, автор позицияһының бәхәсле булыуы уҡыусылар иғтибарын йәлеп итерлек дәрестәр, фекер алышыуҙар ойоштороруға киң мөмкинлектәр аса. Уҡытыусының үҙ һөнәренә ижади ҡарауы ғына шарт. Был йәһәттән «Еңелгән ятыу»ҙың да уҡыусы балалар менән фәһемле һөйләшеүҙәр ойоштороу өсөн киң мөмкинлектәре бар. Тиҫкәре Шәрәфи яңы ҡоролоштоң (колхозлашыуҙың), автор һүрәтләүенсә, ҡеүәтле аҙымдары аҫтында ҡалып, үҙенең хосуси милекселек ҡараштарының сикләнгәнлеген танырға мәжбүр, йәнәһе. Һөҙөмтәлә уның аңындағы үҙеңдең мәнфәғәттәреңде генә ҡайғыртыу тойғоһо – төпкөл аңдағы «тәрән ятыу» – еңелә була. Эйе, шулай булыуы ла бик ихтимал. Әммә етмеш йыллыҡ социализм дәүере әҙәм балаһының үҙ мәнфәғәттәренә, ҡағиҙә рәүешендә(!), бер ҡасан да ҡаршы бармағанлығын кире ҡаҡҡыһыҙ итеп раҫланы. Шулай ҙа үҙенекен генә үҙәккә ҡуйғандар ылыҡтырғыс шәхес була аламы һуң? Уҡыусылар менән дә был иғтибарға һис шикһеҙ лайыҡ әҫәргә бәйле һөйләшеүҙе ошо ыҙанға төшөрөп ебәрә алғанда ҡыҙыҡлыраҡ булмаҫ инеме ни?

Әҙәп һаҡлап, өлөшһөҙ ҡалыу... Бәлки, өлөшһөҙ ҡалған осраҡта ла, үҙеңде «өлөшһөҙ» итеп тоймау мөһимерәктер? Эске рухи ныҡлығың бар икән, һин бер ҡасан да өлөшһөҙ булмаясаҡһың, үҙеңде өлөшһөҙ итеп һиҙмәйәсәкһең! Эйе, үҙ мәлендә әйтә лә белер кәрәк, терһәккә лә көс төшөрөргә тура килеүе мөмкин. Төп ҡоралы һүҙ булған әҙиптең генә терһәгенә «эш ҡушыуы» килешеп бөтмәҫ...

Һеҙ, Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы: «Теге йәки был идеяға битараф булған әҙәбиәт ул әҙәбиәт булмай. Донъяны алға этәргән дөйөм идея бар: ул да булһа – яҡшылыҡ, – тип тораһығыҙ ҙа аҙағыраҡ: – Әҙәбиәт идеяға түгел, халыҡ мәнфәғәтенә хеҙмәт итергә тейеш. Идеяларҙың төрлөһө була. Ғүмерлеһе, ғүмерһеҙе. Айырым идеяға хеҙмәт иткән әҙәбиәт яҙмышы идея яҙмышы менән бәйле», – тип раҫлайһығыҙ. Әҙәбиәттең теге йәки был идеяға битараф була алмауы аксиомаға тиң хәҡиҡәт инде ул. Һеҙ, аңлауымса, үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртыу арҡаһында сикләнгән ғүмерле фирҡәләрҙең идеяларын күҙ уңында тотҡанға, әҙип бындай идеяға түгел, ә халыҡ мәнфәғәтенә хеҙмәт итергә тейешлегенә баҫым яһайһығыҙ. Шулай, әлбиттә. Тик халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыусы ҡараштар ҙа, билдәле бер идеяға берләшеп, тотош бер идеология барлыҡҡа килтерә алыуын күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Йәғни, тота килеп, «идея» һүҙе ҡулланылған өсөн генә ниндәйҙер ҡараштарҙы инҡар итеү мәғәнәһеҙлек булыр ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлегә күпселекте иртәгәгә әйҙәрлек, күңелдәрен елкендереп, аҡылдарын биләп, оптимистик уйҙар ҡуҙғытырҙай, өмөттәрҙе баҙлатырҙай идея табылмаған. Ә һеҙ әйткән яҡшылыҡ – дөйөм төшөнсә генә шул. Кемдер өсөн яҡшы булған күренеш, икенсе берәүгә бик насар булыуы ихтимал, ә өсөнсөһөнә һыуыҡ та, эҫе лә түгел. Шулай ҙа әҙип, рух илсеһе булараҡ, үҙ һүҙен мәлендә әйтергә бурыслы.

Ғәлим ХИСАМОВ:

– Нәфис әҙәбиәт, ғилми әҙәбиәт, ләстит әҙәбиәт. Ғөмүмән, әҙәбиәт тураһында уйланғанда һәр саҡ ҙур ҡала урамы иҫкә төшә. Урам тулып машиналар елдерә (елдерерһең Өфөлә, тип ауыҙ йыра инде кемдер), уңға, һулға, тура киткәндә, береһе, ҡаршы яҡҡа сығып, кире борола, икенсеһе юл ситендә туҡтай. Ҡыҙыл ут янһа, бөтөнөһө лә шаҡ ҡата, йәшел күренеү менән ғыж-ғыж алға уҡталалар... Себен-серәкәй, күбәләк менән күгәүен, ҡарға менән ҡарлуғас, ыласын менән күгәрсен... Яҙ менән көҙ, ямғыр менән ҡар, йылы менән һыуыҡ... Бала менән

ҡарт, егет менән ҡыҙ, ир менән ҡатын... – бөтөнөһө лә донъяға һыя, барыһы ла хәрәкәтләнә, йәнләләре лә, йәнһеҙҙәре лә – һәр тереклеккә лә урын етерлек, берәү ҙә икенсеһенән кәм йә артыҡ түгел, хәр донъя. «Әммә анау барған ҡыҙыл машина тәртипте боҙҙо һәм икенсеһенә төкөлдө. Арттан килгәне – унығына, өсөнсөһө дүртенсеһенә һуғылды... Һағыҙаҡ бал ҡорттарының умартаһына бик яҡын килгәйне, ҡорттар, ҡаяуҙарын тоҫҡап, уға ташланды... Күгәрсендәр ояһына ҡыйыҡтан ала ҡарға килеп ҡунғайны, күгәрсендәр сар-сор осошоп тегене ҡамап алды, бына-бына күҙен соҡомаҫ тимә... Сәскәле болонда баҫтырышып уйнаған малай менән ҡыҙ араһына йәнә бер үҫмер килеп инде лә малайҙы этеп йыҡты. Быны күргән малайҙың әсәһе сарылдап үҫмергә ташланды. Үҫмерҙең әсәһе был ҡатынды әрләргә тотондо. Был ғына аҙ, ғауғаға ирҙәре ҡушылды. Тегеләрҙең береһе сыбыртҡы, икенсеһе күҫәк тотҡан. Ауыл ҡапма-ҡаршы осҡа бүленеп һуғышырға тотона ине инде, ярай, аҡһаҡал ирҙәрҙең сыбыртҡы менән күҫәген тартып алды, тегеләрҙең бисәләрен тыҡып ҡуйҙы... ГАИ хеҙмәткәре оҙаҡ мыштырланы, әммә өймәкләшкән машиналар яйлап-яйлап китеп бөттө... Ҡарға ҡасҡайны, күгәрсендәр кире өй ҡыйығына ҡунды...

Яҙыусы яҙғанды артист халҡы яттан ҡабатлап сәхнәлә уйнаны, тамашасылар рәхәтләнеп ҡул сапты. Яҙыусыһы Ҡол Ғәли булған, ти.

Был донъяла бөтөн нәмә лә, һәммә кеше лә бер-береһе менән бәйле. Береһенең йәшәйешенән тыш икенсеһенеке юҡ, береһе юҡҡа сыҡһа, бүтәнен дә шул көтөүе ихтимал. Сөнки үләнде ҡуян ашай, ҡуянды – төлкө, төлкөнө – айыу, айыуҙы – кеше, кешене – вирус һәм микробтар, улары тупраҡҡа әүерелә, тупраҡта үлән үҫә, үләнде ҡуян ашай... Ошолар тураһында яҙыусы яҙа, ул яҙғанды уҡыусы уҡый, тамашасы ҡарай һәм ҡул саба. Яҙыусыһы Флорид Бүләков булған, ти.

Күреүебеҙсә, ер йөҙөндәге бөтөн нәмә лә, бөтөн ҡиммәт тә: яҡшылыҡ менән яманлыҡ, ямаҡ менән матур, ҡара менән аҡ быуат-быуаттар буйы үҙгәрешһеҙ ҡала. Бары тик исемдәр генә алмашына. Бүтән төрлө әйтһәк, бынан күп мең йылдар элек тыуған «Урал батыр» ҙа, Булат Рафиҡовтың яңыраҡ яҙылған «Ахрызаман көткәндә»һе лә бер үк нәмәгә – мәңгелек ҡиммәттәрҙе үҙенсә сағылдырған ғына, ҡалғаны шул көйө ҡалған. Шуға күрә мәңгелек ҡиммәттәрҙе һүрәтләүсе әҙәбиәт (ул башҡа төрлө нәмәләрҙе сағылдыра алмай) мәңгелек булып ҡала, ә иҫкермәй, үҙгәрмәй торған тыуыу, үлеү, мөхәббәт, батырлыҡ, бахырлыҡ хаҡындағы бәйеттәр, ҡобайырҙар, дастандар, романдар, поэмалар һ.б. шулай уҡ мәңге уҡыласаҡ. Тик яҙыусыһы ғына бүтән буласаҡ. Шуға күрә әҫәрҙәрҙе ниндәйҙер идеологик ҡараштан бүлгеләргә ярамай. Идеология, замана һүрәттәре, ҡорал-ҡорамалдар, машина-осаҡтар – бөтөнөһө лә эске конфликтты ҡаплап торған шаршау ғына. Шаршау асыла ла эсендәгеһе күренә: тыуғандан үлгәнгә тиклем баяғы ҡиммәттәрҙең үҙ-ара көрәше. Былары – мәңгелек, ҡалғаны – шаптырлап ҡойолор тышлыҡ.

Һәр кешегә яҡшы билдәле йәшәү менән үлемде, кешелектең бар булыуынан киләсәккә китеп барыуын, йыһан менән ерҙе, оло менән баланы, нәфсе менән тотанаҡты һүрәтләгән «Урал батыр» бөтөн әҙәмгә лә аңлайышлы ла ҡыҙыҡлы, һәм бөтөн телдә лә был шулай буласаҡ.

Беҙ әйткән кисәге, бөгөнгө, иртәгәге әҙәбиәт, әгәр мәңгелек ҡиммәттәрҙе сағылдыра икән, уҡыласаҡ, онотолмаясаҡ. Ә уның юғары, түбән урында тороуы – бары авторҙың оҫталығына ғына бәйле. Оҫталыҡ иһә, уны талант тип тә атайҙар, берҙәй түгел. Оҫталыҡ әҫәрҙең уҡыусыға, тамашасыға өҫтәмә белем биреү-бирелмәүе менән генә үлсәнә. Уйландырыу, көлдөрөү – былары оҫталыҡтың

тышы-ҡоршамы ғына. Әҫәрҙе уҡып бөткәс, кешенең хәтерендә тик яңы белем (информация) ҡала, уйланғаны, күлгәне онотола. Йыш ҡына оҫталыҡты әҫәргә һалынған мәғәнә (белем) йәһәтенән түгел, ә уйландыра, көлдөрә белеүенән баһалайҙар. Шуға ҡарап Социалистик Хеҙмәт Геройы, халыҡ шағиры, әллә ниндәй премиялар, лауреат исемдәре, орден, миҙалдар бирәләр – былары бөтөнөһө лә ярамһаҡланыу, ярай белеү билдәһе. Яҙыусы, шағир, драматург булып йөрөгән кешенең исем-шәрифтәре аҡ ҡағыҙҙы тултырып тора икән, – тимәк, ул ярай белеү оҫтаһы. Ә уны биреүселәре – бая әйтелгән идеологияның башында тороусылар. Сөнки улар маҡталған әҫәрҙе үҙ идеологияһына ярашлы тип ҡабул итә һәм яҙыусыны ошо идеологияға тағы ла нығыраҡ хеҙмәт иттерер өсөн мөнйөп бөтөлмәгән тауыҡ бото менән һыйлай.

Шул уҡ ваҡытта идеология аждаһалары мәңгелек ҡиммәттәрҙе аса алған яҙыусыларҙы аҫа-киҫә, яҙа алмағандарҙы икмәк ҡатыһы менән һыйлай ҙа ҡул һелтәй: йөрөй бирһендәр, уға тейеп ус бысратҡансы... Салауат Юлаев, Ҡол Ғәли, Шәйехзада Бабич, Афзал Таһиров, Дауыт Юлтый, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Бишеваларҙың әҫәрҙәре бер идеологияға ла буйһонмай.

Фәнил КҮЗБӘКОВ:

– Әҙип, әлбиттә, уҡыусыһының мәнфәғәттәрен дә, рухи кимәлен дә белеп, иҫәпкә алып эш итһә, насар түгел. Ә бына «Уҡыусы ошоно ярата бит, ошоно үҙ итә» тигән принцип ҡына өҫтөнлөк итә башланымы – ижадсының кәсепсегә әйләнеүен көт тә тор (бөгөн беҙ бындай күренештәрҙең тере шаһиты). Эйе, кәсепсенең эшләгәне лә баҙарҙа үҙ алыусыһын табыр. Ә Хоҙай мөһөрө менән тамғаланғанын күрмәй үтеүҙәре лә бик ихтимал. Сөнки, әгәр ҙә һәр нәмә, һәр күренеш, һәр бер әҙәм балаһы, исеме есеменә тап килеп, тәбиғәтенә, булмышына ярашлы тәғәйен генә баһаланһа, кешелек донъяһы күптән ожмах баҡсаһында ғына йәшәр ине. Әлегә, ошо бер генә «әгәр» менән сикләнеп, шуны айырымасыҡ билдәләйек әле, йәмәғәт: ысын мәғәнәһендәге ижад емеше, һатыуға сығарыла ҡалған хәлдә лә, һис кенә лә баҙар бизмәне менән генә үлсәнә алмаған! Беҙ иһә, күптәребеҙ социализм дәүерендә формалашҡан быуын, баҙарҙы һүгә-һүгә, ул тыуҙырған шарттарға яраҡлашырға маташабыҙ. Һәм... яраҡлашасаҡбыҙ. Сөнки әҙәм балаһына, биологик затҡа, иң ябай ғына булһа ла йәшәрлек шарттар кәрәк. Әммә ул биологик зат ҡына түгел бит. Ул – Кеше! Хоҙай яралғыһы, тик ошо яралғыға Иблис тә үҙ өлөшөн индереп өлгөргән. Бына ошо ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан тыуған яралғыны һүрәтләүсе әҙип үҙе лә әүлиә түгел бит. Ул да әҙәм балаһы: берәүҙе хәҡиҡәт эҙләй, үрһәләнә, нимәлер таба, ниҙелер юғалта; икенсеһенә бындай ғазаптар бөтөнләй хас түгел, әммә һәләтенә ярашлы «баҙар» хаҡтарын, «баҙар» талаптарын белеп эшләгән «әйберҙәр»е бар; өсөнсөһө, дүртенсеһе... Һәр ҡайһыһының әйтер һүҙе бар. Булһын, әйтелһен! «Әйт, кем икәнең асыҡланыр», – ти бит аҡыл эйәһе. Ана шул әйтелгәнгә, яҙылғанға тәғәйен баһа бирә алһаҡ икән дә бит...

Мәрйәм БУРАҠАЕВА:

– Йоҡоларыңды ҡасырып, ете төн уртаһында уятып, әйтәһе һүҙең алҡымыңа килеп тығыла икән, бер нәмәгә ҡарамай – әйтәһең. Аҡсаң бармы, юҡмы – уныһы ул мәлдә онотола. Тик, әлбиттә, аҡсаһыҙ йәшәп булмай. Мәҙәниәтте, әҙәбиәтте үҫтереүҙә, әлбиттә, хөкүмәт ярҙамы кәрәк. Тик ниндәй формала булырға тейеш ул? Хөкүмәт ярҙамынан кемдәр файҙаланыр? Хөкүмәттең матур-матур ҡарарҙарынан

ысын талантлар файҙаланамы, әллә әрһеҙҙәрме? Эш күрһәтеүселәр бар, үҙен күрһәтеүселәр бар. Кеше хеҙмәтенән файҙаланыусылар ҙа юҡ түгел, үгеҙ мөгөҙөндәге себен кеүек. Ашханаларҙа, рестирандарҙа тәмле итеп аш бешереүсе ашнаҡсы рәхмәт аламы, әллә ошо ашты таратып биреүсе официанткамы?

Хөкүмәт ярҙамы – яҙылған әҫәрең өсөн гонорарҙы арттырыу рәүешендә булһа, иң яҡшыһы, тип уйлайым. Ул ғәҙел ярҙам булыр ине. Элегерәк йәшәү арзан булдымы, хеҙмәтең сағыштырмаса юғарыраҡ баһаландымы – белмәйем. Мәҫәлән, 1975 йылда «Ағиҙел» журналында баҫылып сыҡҡан «Шишмә» повесым өсөн алған 1200 һум гонорар баҡса һатып алырға еткәйне. Хәҙер гонорар күпме лә баҡсалар нисә һум?! Аҡса – ижад офоҡтарын киңәйтеү өсөн тәү шарт.

Йөҙ әҫәр – беҙҙең үҙ әҙәбиәтебеҙҙә лә бар ул. Иң мөһиме – һан түгел, балаларыбыҙҙы әҙәби әҫәрҙәр уҡырға ылыҡтырыу. Бала күңелендә әҙәби әҫәр уҡыуға әүәҫлек була икән, үҙ зауығына тап килгән әҙәбиәтте үҙе һайлап ала. Мотлаҡ тип һаналған әҙәби әҫәрҙәр араһында уның зауығына тап килгәндәре булмаһа, әҙәби әҫәрҙән һыуыныуы ихтимал. Зауыҡ өйҙә һәм мәктәптә тәрбиәләнә. Был – оло бурыс. Әле әҙәбиәт программаһы шул тиклем тыңҡыслап тултырылған, әйтерһең, мәктәп фәҡәт әҙәби әҫәрҙәр уҡытыу өсөн генә тәғәйенләнгән. Һөҙөмтәлә, уҡыусы бер генә әҫәрҙе лә тулыһынса уҡымай ҙа, өлгөрмәй ҙә, уҡырға ла теләмәй. Баш ҡалабыҙҙағы башҡорт гимназияларының береһендә унынсы класс уҡыусыларының бер нисәһенән «Ырғыҙ» романын кем яҙғанлығын һораным. Һораған уҡыусыларҙың береһе лә белмәне. Ә мин был һорауҙы осраҡлы бирмәнем. Был роман унынсы класта үтелә. Әҫәрҙең йөкмәткеһен түгел, авторын да белмәү мине шаҡ ҡатырҙы. Мәктәптә баланы әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһындырып сығарыуҙы маҡсат итеп ҡуйырға кәрәк. Ә ялҡытып, әҙәбиәттән төңөлдөрөп-һыуындырып түгел.

Мәктәптә, әлбиттә, белем биреү беренсе планда ҡуйылған. Әммә белем биреү тәрбиә эше менән бергә алып барылырға тейеш... Әҙәби әҫәр уҡымаған, идеал итеп алған әҙәби геройы булмаған бала үҙтәрбиә менән дә шөғөлләнмәй инде.

– Бөгөнгө ыңғай герой. Кем ул?

Мәрйәм БУРАҠАЕВА:

– Ыңғай герой тигән һүҙбәйләнеш менән килешә алмайым. Ул – коммунистик идеология емешелер. Ә әҙәби герой – ул кешенең рухи булмышын, эске донъяһын, күңел донъяһын сағылдырыусы. Күңел донъяһында бөтөн төҫтәр бар: сағыуҙары ла, баҙыҡтары ла, тоноҡтары ла. Бер үк кешелә. Минеңсә, әҙәбиәттә ике төп герой – Яҡшылыҡ һәм Яуызлыҡ. Ошо геройҙарға яҡынайыу йәки алыҫлашыу төҫтәрен: юлын, йүнәлешен һайларға ярҙам итеү – әҙәбиәтебеҙ бурысы.

Ғәлим ХИСАМОВ:

– Әҙәбиәт фәнендә ҡабул ителгән герой атамаһы – беҙҙең мәҙәниәттән бик йыраҡ торған төшөнсәләрҙең береһе һәм әле әйткән идеологияға хеҙмәт итеү өсөн уйлап сығарылған. Боронғо латин һәм грек телдәренән килгән Герой яртылаш илаһ, яртылаш кеше тигәнде белдергән. Йәмғиәтте ҡапма-ҡаршы көстәргә бүлеү хәжәте тыуғас, ыңғай һәм кире геройҙар төшөнсәһе уйлап табыла. Беҙҙең фекерләү һәм тасуирлау ҡағиҙәләренә тап килмәй. Ниндәй генә яҡшы кеше булмаһын, уның кире сифаты бар. Нисек кенә насар булмаһын кеше, ыңғай яғы ла бар. Шуға әҫәрҙәрҙә лә тик ыңғай йә кире геройҙың булыуы мөмкин түгел.

Ошонан сығып, башҡорт әҙәбиәте фәнендә был атаманан баш тартыуға саҡырам. Фекерҙе раҫлар өсөн Әмир Әминевтың «Танкист» повесын алайыҡ. Кем ул танкист? Ыңғай героймы, киреме? «Аҡмы, ҡарамы?» тигән һымаҡ. Ҡапылғара ғына бүлә лә алмаҫһың. Ыңғай сифаттары менән ҡуша бихисап кире яғы бар уның. Әйтәйек, үҙ һүҙлелеге. Үҙ һүҙлелек бер мәл яҡшы булырға мөмкин, ә икенсе осраҡта – киреһенсә. Танкист үҙһүҙләнеп ҡыҙының фатирын ташлап сығып китте. Яҡшы булдымы инде? Ҡыҙына ла ҡыйын, үҙенә лә. Үҙһүҙлелегенә, бүтәндәрҙең һүҙен өҫтөн сығармаҫ өсөн, йылы йортҡа ҡайтмайынса, һәйкәл танк эсендә туңып үл әле – кемгә булды бынан яҡшы?! Йәмғиәткәме, танкистҡамы? Шуға күрә уны ыңғай ҙа, кире лә тип әйтеп булмай.

Уҡыусы бөгөн яҙыусынан ниндәй әҫәр көтә? Берҙән, милли. Йәғни башҡорт яҙыусыһы һүрәтләгән мөхиттә милли сифаттарға эйә шәхестәр булырға тейеш. Башҡорт яҙыусыһы тигәндән башҡортса ғына түгел, урыҫ, татар, сыуаш, мари, украин һ.б. телдә яҙған, Башҡортостанда йәшәгән әҙипте күҙ уңында тотам. Әгәр уларҙың әҫәрҙәрендә күп милләтле Башҡортостан биҙәктәре һәм ошо ерҙе меңәр йылдар буйы тәрбиәләгән башҡорт һүрәтләнмәй икән, ул яҙыусыны беҙ ни эшләп үҙебеҙҙеке тип атарға һәм Башҡортостан яҙыусылар берлегендә үҙ күреп йөрөргә тейешбеҙ?

Икенсенән, бөгөнгө уҡыусыны оҙон яҙылған әҫәрҙәр ҡыҙыҡһындырмай. Уҡып осона сығып булмай, тип зарлана улар.

Өсөнсөнән, яҙыусының әҫәренән бөгөнгө ауыр, ҡатмарлы тормоштан сығыуға ниндәйҙер юл булмаһа ла, исмаһам, бер ишараға өмөт итә уҡыусы. Ә ҡалғаны – мәңгелек ҡиммәттәргә ҡоролған хәл-ваҡиғалар.

Уҡыусының теләге яп-ябай һәм аңлайышлы. Уға яп-ябай телдә ҡыҫҡа ғына итеп яҙылған әҫәрҙәр, йәшәргә өндәп, матур тормош ҡорорға әйҙәп торған шәхестәр яҡыныраҡ.

Фәнил КҮЗБӘКОВ:

– Һеҙҙең, Ғәлим Афзал улы, атайҙың ризалығынан тыш уның ауылдағы өйөн һатып машина алғас, уны пропискаға индереү арҡаһында иркенәйткән фатирҙан сығып китеүен – үҙһүҙлелек, йәғни еңмешлек арҡаһында ғына, тип аңлатыуығыҙ менән килешеп бөтөп булмай. Геройҙың был ҡылығы – еңмешлек түгел, ә үҙең менән шәхес булараҡ иҫәпләшмәүселәргә ҡарата протест билдәһе. Ҡыҙы менән булған диалогҡа ғына иғтибар итәйек:

– Йортоң, йоҡлап йөрөр урының бар, ас ултырмайһың. Тағы нимә кәрәк?

– Эш бит, Гөлсөм, урында, тамаҡта ғына түгел, күңел тигән нәмә лә бар. Нисек булһам да, мин һиңә атай бит әле... Кешесә мөнәсәбәт кәрәк...

Бына бит хикмәт нимәлә: үҙен Кеше итеп тойған әҙәм балаһына Кешесә мөнәсәбәт кәрәк! Яугир рухлы танкист Тимерғәлегә лә кәрәк бындай мөғәләмә. «Һуңғы плацдарм» танк булып сығыуы ла уның характерына тап килә. Ул бөгөнгө алдаҡҡа ҡоролған тормошто, хөкүмәт яғынан, йәмәғәтселек тарафынан, хатта үҙ ҡыҙынан, ейәненән олатайға, атайға, ветеранға – яугирға булған мөнәсәбәтте ҡабул итә алмай. Уның йәшәү рәүеше, йәшәүенең мәғәнәүи асылы булған ҡиммәттәр бөгөнгө ысынбарлыҡҡа ҡаршы баш күтәрә. Эйе, ул өндәшмәй, ейәне уң битенә һуҡһа, һулын ҡуйып, ҡыҙы ни әйтһә, шуны теүәл үтәп, бөгөнгө йәмғиәт талап иткән ҡағиҙәләр менән ризалашып, баш баҫып йәшәй ҙә алыр ине. Тик ... әҙәмсә йәшәргә мөмкинлек биргән «плацдармды» –

Кешегә Кеше булып ҡалыу өсөн кәрәкле булған һыҙатты юғалтыр – икенсе кеше булыр, Әмир Әминев тасуирлаған танкист булмаҫ ине. Ғүмеренең иң ауыр һынауға дусар иткән аяныслы һуңғы мәлендә лә ул сая рухлы булып ҡала, әҙерлекле уҡыусыны ветерандарға бәйле һиҫкәнеп уйланырлыҡ иткән образ дәрәжәһенә күтәрелә, һуңғы юлға ла дошманды (ни тиклем тәрән символика!) ҡыйраҡҡан танкыһында «рычагтарға ныҡ йәбешеп, кәүҙәһен тура, сал башын ғорур тотоп» ҡуҙғала.

Ғәлим ХИСАМОВ:

– Танкистың үҙ һүҙләнеп булһа ла «плацдарм»ын һаҡлап ҡалыуы менән килешергә мөмкин. Тик был «плацдарм»дан кемгә яҡшы һуң? Уның ҡылығы тыуҙырған һөҙөмтә лә ныҡ ҡаршылыҡлы. Тимәк, геройҙы ла ыңғай яҡтан ғына баһалауы бик ҡыйын.

Фәнил КҮЗБӘКОВ:

– Танкисты ыңғай герой тип тамғалау шартлы, әлбиттә. Файҙалы-файҙаһыҙ, килемле-килемһеҙ кеүек төшөнсәләр менән генә эш иткән алыпһатарға ветерандың ҡылығы – «ҡартлыҡ касафаты» ғына ул. Бындай «уҡыусы» өсөн, ғөмүмән, кешеләрҙең күпселеге уның тауарын алыусылар һәм алмаусыларға бүленеп ҡаралһа ла, ғәжәп түгел.

«Плацдарм»ды – ниндәй осраҡта ла Кеше булып ҡала алыу, үҙеңдең Кеше булараҡ бәҫеңде төшөрмәү һәм төшөрттөрмәү тип аңлаған плацдармды бер кемгә лә бирергә ярамай! Тап шундай плацдармдан тороп ҡына кешемен тигән кеше артабанғы камиллашыуға еңеүҙәр йәйелдерә. Юл ыңғайы шуны ла билдәләйек: танкист үҙенең яҙмышы, оло ҡорбандар хаҡына яулап алынған тормоштоң ҡәҙерен ебәреүҙәре тураһында ғына уйланмай. Ә милләт күҙ ҡараһылай һаҡларға тейешле «плацдарм»дың да тарая барыуын күреп, һыҙлана, өҙгөләнә, үҙ-үҙенә ябайҙан булмаған һорауҙар ҡуя.

Кешенең ҡапма-ҡаршылыҡлы һыҙаттар, ҡылыҡтар йомғағы булыуы бәхәсһеҙ. Әммә бит уның булмышының ниндәйҙер һыҙаттары барыбер өҫтөнлөк итә. Мостай Кәримдең «Ярлыҡау»ында, мәҫәлән, Любомир Зух, мөхәббәт тойғоһонан иҫереп, аҙаҡ дезертирлыҡта ғәйепләнерлек «егетлек» эшләп ташлай: белә-күрә тора хәрби устав талаптарын тупаҫ боҙа. Тик уны Гоголдең «Тарас Бульба»һындағы Андрий менән йәнәш ҡуйып буламы? Минеңсә, юҡ! Сөнки Любомирҙың Терезаға ҡарата булған хис-тойғолары, уставты боҙоуға килтереүенә ҡарамаҫтан, дөйөм алғанда яугир бурыстарын атҡарырға ҡамасауламаясаҡ. Ә Андрий, дошман ҡыҙына ғашиҡ булып, иманын һата, атай-олатайҙарының изге ҡанундарына юйылмаҫлыҡ тап төшөрә. Любомир ҙа, Андрий ҙа ҡаты яза алалар, әммә уҡыусы симпатияһы Любомир яғында. Уны, «кире» һыҙаттары булыуына ҡарамаҫтан, шартлы рәүештә ыңғай герой тип ҡарап булмаймы ни? Ә Андрийҙы? Күренеүенсә, ыңғай геройҙы идеаллаштырырға, ә киреһен иблис менән сағыштырырға ярамай.

Әгәр ҙә әҙәбиәт белгестәре, әҙиптәр, уҡыусылар, әҙәбиәттең шартлылығын иҫәпкә алһа, геройҙы ыңғай йәки кире тип дөйөмләштереүҙе аҡҡа-ҡараға бүлеү тип кенә аңламаһа, ысынбарлыҡты художестволы сағылдырыуҙың мөмкинлектәре сикһеҙ булыуы менән килешә алһа, тулайым әҙәби процесты тормоштоң хәрәкәттәге образлы панорамаһы рәүешендә теүәл ҡабул итә алырбыҙ.

Әңгәмәне Фәнил КҮЗБӘКОВ ойошторҙо.

ҠАҒЫҘҒА ТУЙМАҪ ИНЕ АТАЙЫМ...

Минең атайым, билдәле башҡорт яҙыусыһы Ғәли Ибраһимов (1919 – 1991), 1959 йылдан башлап «Әҙәби Башҡортостан» журналының редакцияһында яуаплы секретарь булып эшләне. Тиҙҙән журналдың исеме «Ағиҙел»гә әйләнде, атайым шул уҡ вазифала 1973 йылға тиклем хеҙмәт итте.

1970 йылдарҙың башы.
«Ағиҙел» редакцияһының бүлмәһендә:
Ғәли Ибраһимов, Йыһат Солтанов, Рафаэль Сафин.

Белемле кеше ине ул, хәтере иҫ киткес шәп ине. Яуаплы секретарь ҡулынан бихисап материал үтә. Әҫәр ҡабатланмаһын, плагиатлыҡ булмаһын, цензура ла бәйләнмәһен – яуаплы секретарь шуға яуаплы ла инде.

БДУ-ның башҡорт филология факультетын тамамлаған талантлы йәш егет үҙен автор итеп ҡуйған да матур ғына хикәйә килтергән.

– Шуны уҡып ҡараһам, шәйләп ҡалдым, – тип һөйләгәйне атай. – «Северная Двина» гәзитендә рус телендә ошо хикәйәне уҡығайным. Егет башҡорт теленә тәржемә иткән дә беҙгә килтергән. Аңлатып бирҙем дә егетте кирегә борҙом, хикәйәне алманым баҫмаға.

Әллә ҡайҙағы «Северная Двина» гәзитен уҡығанын да иҫендә ҡалдырған бит әле.

Ҡағыҙ мәсьәләһе еңел булманы атайымдар заманында. Ҡараламаға ҡағыҙ эҙләп «деү» килә ине яҙыусылар. Бер заман С.М. Киров исемендәге заводта социолог булып эшләнем. ЭВМ-ға ҡуллана торған рулон ҡағыҙының 15 см тирәһе киңлектә бер яҡ ситен ҡырҡып, ташлағандарын күреп ҡалдым. Һорап алып, самалап ташыным атай өйөнә. Вәт шунда ҡағыҙға туймаҫ яҙыусы атайым кинәнде!

Әхмәт Әһлиуллиндың «Эстәрле» романының ҡульяҙмаһын уҡып, төҙәтмәләрен яҙып биргәс, Әхмәт ағай бик аптыраған. Һуңыраҡ минән һораны:

– Ғәли ағай ниндәйҙер тар киңлектәге оҙон ҡағыҙҙа үҙенең фекерҙәрен күп итеп яҙып бирҙе. Ундай ҡағыҙҙы ҡайҙан тапҡан икән?

1960-сы йылдарҙың аҙағы ... Эш көнөнән һуң атай оҙаҡ ҡайтмай торҙо. Төндә ҡайтып керҙе: өҫ кейемдәре бысранған, үҙе арыған, хәле бөткән, әҙерәк араҡы еҫе лә сыға. Әсәйем, асыуланып, быны әрләп ташланы:

– Эсеп, аунап ҡайҙа йөрөйһөң? – тип. Шунан тауыш, ығы-зығы булды. Атайҙы тынысландырайым тип, инеп киттем бүлмәһенә.

1960 йылдар. «Ағиҙел» редакцияһында:
Ғ. Хөсәйенов, Ғ. Ибраһимов.

– Тимер юлынан редакцияға хәбәр иттеләр, эш көнө бөтә барғанда. Бер нисә ҙур рулон ҡағыҙ килгән дә, шуны бөгөн үк вагондан бушатып, алып китегеҙ, ҙур штраф һалабыҙ, тип.

Хәким Ғиләжев ағай, журналдың баш мөхәррире, бойороҡ биргән:

– Ир заттары, кем бар, бөтәгеҙ ҙә – разгрузкаға!

– Ҡағыҙ рулондары шундай ауыр булды. Вагондан саҡ-саҡ бушатып, унан йөк машинаһын табып, илтеп ҡуйҙыҡ типографияға. Редакцияла грузчиктарыбыҙ юҡ, үҙебеҙҙең башҡа төшә ул эш. Юғиһә, журнал ваҡытында сыға алмай бит! – тип көйөндө атай.

Быңдай ваҡиғаның бер нисә тапҡыр ҡабатланғаны хәтерҙә.

Бер заман беҙҙең ғаилә Цюрупа урамының 37-се йортонда йәшәне. Боронғо ағас йорт: ихата кәртә менән уратылған, урам яғында – ҡапҡаһы. Ихата эсендә алма ағастары үҫеп, емеш бирә, һәр хужаның һарай-каретнигы ла бар ине.

1 май йә 7 ноябрҙә Совет майҙанынан демонстрация ағымы үтә, Цюрупа урамына боролоп, беҙҙең йорт янына байраҡтар, Политбюро ағзаларының портреттарын, плакаттар күтәреп, арып-талып бөткән кешеләр ҡайтыуға табан йүнәлә торғайны. Башҡортостан нәшриәтендә эшләүселәр, «Ағиҙел» журналы редакцияһы хеҙмәткәрҙәре, Ғәли Ибраһимов йорто тәңгәленә еткәс, ҡапҡанан кереп, үҙҙәренең демонстрацияла күтәреп үткән нәмәләрен беҙҙең һарайға ҡуйып тороп, өйөбөҙгә кереп, сәй эсеп, ял итә биреп, ҡулдарын бушатып ҡайтып китәләр ине. Байрам үткәс, йөк машинаһы килеп, ул әйберҙәрҙе алып китә. Партия, профсоюз ойошмалары етәкселәренең елкәһенән ауыр йөк төшкәндәй булғандыр.

Командировкаларға, төрлө осрашыуҙарға атайым йөрөргә яратмай ине. Ләкин дуҫлыҡ делегацияһы менән сыуаш яҙыусыһы Константин Ивановтың тыуған яғына – Ыҫлаҡбаш ауылына (Бәләбәй районы) бер нисә тапҡыр барҙы. Әсәйемде лә алып барғайны бер заман. Ҡайтҡас, әсәй ғорурланып балаларына:

– Атайығыҙ йыйылған сыуаш халҡы алдында сыуашса сатнатып сәләм телмәре һөйләп бирҙе. Алҡыштар оҙаҡ яңғыраны! Бик матур йөрөп ҡайттыҡ, – тип һөйләне.

«Ағиҙел»дең редакция бүлмәһенә, атайым янына, кәрәккәндә кереп сыҡҡылай инем. Бер яҡ стенаһына донъяның ҙур ғына политик картаһын беркетеп ҡуйғандар. Башҡортостандан бер нөктәнән ҡыҙыл һыҙыҡтар төрлө яҡтарға нур һибелгәндәй һыҙылған. Атайым ҡыҙыл һыҙыҡтарҙың нимә икәнлеген аңлатты:

– «Ағиҙел» журналын АҠШ–та ла, Австралияла ла яҙҙырып алдыралар, уҡыйҙар. Журналдың сифатын, тиражын арттырырға тырышып йөрөйбөҙ инде, – тине. Баҫманың хәтәр ҙур тираж менән баҫылған йылдары булғандыр.

Бөгөнгө «Ағиҙел»селәргә илһам, һәйбәт кәйеф, ижады уңыштар теләйем.

Һөйөклө ИБРАҺИМОВА.

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ БЕРЕНСЕ ХАЛЫҠ ЯҘЫУСЫҺЫ[1]

(Зәйнәб Биишеваның тыуыуына – 105 йыл)

Башҡорт әҙәбиәтенең бөтә жанрҙарына ла һиҙелерлек өлөш индергән Зәйнәб Биишева ижады социаль-көнкүреш йүнәлешле булыуы менән айырылып тора. Уның үҙенсәлекле стилдәге, юғары поэтикалы әҫәрҙәренә лирик-психологик ағым да, күтәренке романтик яңғыраш та, киң һәм талғын эпик хикәйәләү ҙә хас. Әҙибә үҙ ижадында халҡының бай традицияларына ла, туғандаш әҙәбиәттәрҙең ҡаҙаныштарына ла таяна.

З. Биишеваның «Гөрләүектәр араһында» тигән тәүге хикәйәһе 1930 йылда «Октябрь» журналында сыға. Бынан һуң ул яҙғандарын матбуғатҡа бирергә ашыҡмай. Тик 1942 йылда ғына «Партизан малай» тигән повесын баҫтыра. Балалар өсөн яҙылған был әҫәрендә әҙибә ун дүрт йәшлек Ирек тигән пионерҙың фашистарға ҡаршы һуғышта күрһәткән батырлыҡтарын кәүҙәләндерә. Ошонан аҙаҡ З. Биишева балаларға арнап күп кенә әҫәрҙәр ижад итә. Уның яҙғандары конкретлығы, мауыҡтыра алыуы менән уҡыусыны йәлеп итә. Хәреф өйрәтеүҙе тормош хаҡында төшөнсә биреү менән бәйләй алған «Йәнле хәрефтәр» ошо яғы менән ҡыҙыҡлы.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ижад ителгән әҫәрҙәрендә З. Биишева балаларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрен, уҡыуға, хеҙмәткә булған ҡараштарын, дуҫлыҡтарын асыҡ ҡына һүрәтләгән образдар аша күрһәтә алды. «Ярҙамсы» (1946), «Башаҡ» (1947), «Ҡояш нимә тине?» (1947) һәм һуңыраҡ – алтмышынсы йылдарҙа баҫылып сыҡҡан «Өмөт бөрөләре», «Йәшел йүгән» исемле хикәйәләрендә яҙыусы үҙ геройҙарын һәр саҡ хеҙмәткә мөнәсәбәт аша, әхлаҡи планда күрһәтергә тырышты. Ошо йәһәттән уның «Дуҫ булайыҡ» (1954) повесы балалар әҙәбиәте өлкәһендә эҙләнеүҙәренең етди һөҙөмтәһе булды. Авторҙың иғтибары беренсе сиратта ике үҫмер – Юлдаш һәм Ҡыҙрас образдарына йүнәлдерелгән.

Повесть балалар донъяһына үтеп инә алыуы менән әһәмиәтле. Яҙыусы төрлө ваҡиғалар аша геройҙарының үҙ-ара мөнәсәбәттәрен, бороһош, үҙгәреш моменттарын, тәртип-холоҡтарын ышандырырлыҡ итеп күрһәтә алды.

---

[1]*Мәҡәлә ҡыҫҡартып баҫыла.*

З. Биишева өсөн илленсе-алтмышынсы йылдар – жанр һәм форма өлкәһендә лә актив эҙләнеүҙәр, ҙур табыштар осоро. Шиғри әҫәрҙәренең күбеһе шулай уҡ ошо йылдарҙа яҙылды. Шағирә Тыуған ер, Ватан, кеше, уның хеҙмәте, бәхете хаҡында уйланды.

З. Биишева шиғри әҫәрҙәрендә йөкмәткегә ярашлы форма таба, һүрәтләү сараларын уңышлы ҡуллана. Шиғырҙарҙа «Һөйөшмәй ҡауышып йәшәүҙән ҡалтырап, Һөйөшөп тә ҡауышмау ғазабы татлыраҡ», «һөйөү менән йәшәү икеһе лә үлемһеҙ һәм азат берҙәй үк» кеүек афоризмға тартым, бай мәғәнәле юлдар йыш осрай.

З. Биишева поэзияһында граждандлыҡ мотивтары тәрәнәйә барҙы. Граждандлыҡ пафосы З. Биишеваның Тыуған илде, уның ҡаҡшамаҫ нигеҙе – халыҡтар дуҫлығын данлаған шиғырҙарында патетик телмәр алымы менән көсәйтелә.

Һикһәненсе йылдарҙа, илдәге ҡатмарлы ижтимағи үҙгәрештәр осоронда З. Биишева «Салауат монологы» һәм «Имән» исемле поэмаларын яҙҙы. Шәхестең халыҡҡа, тыуған ергә тоғролоғо, кешенең рухи ныҡлығы – «Салалауат монологы»нда һүҙ бына шулар хаҡында бара. Һикһәненсе йылдар аҙағында – туҡһанынсы йылдар башында милләттең тарихи яҙмышы, уның уҙғаны һәм киләсәге мәсьәләләре тағы ла киҫкенерәк һәм төрлө яҡлап күтәрелгәндә, шағирәнең был әҫәре айырыуса мөһим булды. Ә инде «Имән» поэмаһындағы ҡала урамында асфальтҡа сәтләүектәрен ҡойоусы ағас фажиғәһе етмешенсе-һикһәненсе йылдарҙа халыҡтың ижад рухын быуыусы таш ҡалыптарҙы күҙ алдына баҫтырҙы. Ләкин әҫәр өмөтһөҙлөк менән түгел, ғорур имәндең йәшәү көсөнә, халыҡтың киләсәгенә ҙур ышаныс менән һуғарылғайны.

Тормошто эпик һүрәтләүҙә байтаҡ йылдар буйы ҙур ғына тәжрибә туплаған З. Биишева ҙур күләмле эпик әҫәр – «Гөльямал» (1949–1951) исемле шиғри повесть баҫтырып сығарҙы. Был әҫәрендә яҙыусы тарихи үткәндәрҙән алып хәҙерге заманға тиклемге оҙон осорҙо һүрәтләргә ынтылды.

Үҙенең сюжет ҡоролошо, ваҡиғаларҙың «хикәйәләнеүе» менән был шиғри повесть проза әҫәренә яҡын. Айырым исемдәр менән аталған бүлектәре үҙҙәренең билдәле дәрәжәлә тамамланған булыуҙары менән сюжетлы шиғырҙарҙы хәтерләтә.

З. Биишева ижадының көсө, бөгөнгө көн темаһына, актуаль проблемаларға яҙылған повесть һәм хикәйәләрҙән бигерәк, халыҡ һәм революция, тыуған ер һәм азатлыҡ темаһына ижад ителгән әҫәрҙәрендә асығыраҡ күренде.

Уның халыҡ ижады традицияларына нигеҙләнеп алтмышынсы йылдарҙа яҙылған әҫәрҙәре тағы ла нескәрәк һәм ҡатмарлыраҡ төҫ алды. «Мөхәббәт һәм нәфрәт» (1965), «Һөнәрсе һәм өйрәнсек» (1965) хикәйәттәре кеше хаҡында, уның тормоштағы урыны, тәртибе, әхлаҡ йөҙө тураһында тәрән философик уйланыуҙарға нигеҙләнгән. Яҙыусының тормош, ғүмер, эш хаҡында уйланыуҙарын, үҙ эстетик ҡараштарын поляр сиккә ҡуйылған, ҡабартылған образ-символдар аша материаллаштырыуы осраҡлы күренеш түгел. Сөнки яңы йәмғиәт төҙөү осоронда һәр бер шәхестең әхлаҡи сифаттарының саф булыуы мөһим, шуның өсөн кешене тәрбиәләү иң актуаль әҙәби-художестволы проблемаға әйләнде.

Ике хикәйәттә лә сюжет риүәйәт-легенда фабулаһына тартым. «Мөхәббәт һәм нәфрәт»тә ваҡиғалар тәүҙә Башҡортостанда йәшәгән, ләкин аҙаҡ унан ситкә киткән ырыу тормошона бәйле. Унда Уралдан алыҫта, күк диңгеҙ буйында йәшәгән балыҡсылар ырыуынан булған Юламан ҡарт, уның улы Буранша, ейәнсәре Зөлхизә аҙмыштары хикәйәләнә.

Әйткәндәй, «Һөнәрсе һәм өйрәнсек» хикәйәтендә лә ваҡиғалар Башҡортостандан ситтә, Кавказ яҡтарында, был юлы инде тау халыҡтарының тормошона бәйле. Ысын һөнәрсе, илаһи талант эйәһе, халыҡ көнкүрешенә бик кәрәкле көршәктәр эшләй торғас, үлеп китә. Ә өйрәнсек, һөнәрсе үлгәс, уның көршәктәренә үҙ исемен яҙып һатып көн күрә. Ләкин ялған барыбер фашлана, һөнәрсе күптән үлһә лә, эше ҡала, шул уның исемен мәңгеләштерә.

Ваҡиғаларҙы бөтөнләй башҡа халыҡ тормошона бәйләү эпостарҙа, әкиәт сюжеттарында йыш осрай. З. Биишева хикәйәттәренә, халыҡ ижады әҫәрҙәрендәгесә, ҡабартылып һүрәтләнелгән контраст күренеше хас. Киң контраст яҡшыны – яманға, яҡтылыҡты – ҡараңғылыҡҡа, батырлыҡты – ҡурҡаҡлыҡҡа ҡапма-ҡаршы ҡуйып һүрәтләү алымынан килеп тыуа. Образдарҙың ошолай ике поляр ҡаршылыҡта бирелеше уларҙы ҙурайтып күрһәтергә, айырым һыҙаттарҙы ҡабартырға мөмкинлек тыуҙыра.

«Һөнәрсе һәм өйрәнсек»тә бына шундай ике поляр ҡаршылыҡ: бер яҡта – бер ҡасан да тынғылыҡ белмәүсе, һәр ваҡыт эҙләнеүсе, өйрәнеүсе, шуға ла көндән-көн оҫтара барған һөнәрсе, икенсе яҡта – көршәкте нисек тә күберәк һатыу яғын ғына ҡайғыртҡан өйрәнсек. Хикәйәттә хатта уларҙың исемдәре лә бирелмәй. Был яғы менән дә ул ҙур дөйөмләштереүгә ишара яһай.

Яҙыусы үҙ ҡәләмен реалистик повесть жанрында ла һынап ҡараны. «Көнһылыу» (1946) шул эҙләнеүҙәрҙең һәйбәт үрнәге булды. Һуғыш башланғанға тиклем ауылда уҡытыусы булып эшләгән Көнһылыуҙы көсөргәнешле заман көрәштең иң алғы һыҙығына, халыҡ менән етәкселек итеүселәр сафына баҫтыра. Ул яуға киткән ире Ғәлим урынына колхоз председателе булып эшләй. Хәҙер инде уға үҙе уҡытҡан класы, эшләгән мәктәбе өсөн генә түгел, бөтә ауыл, уның кешеләре өсөн яуап бирергә кәрәк.

Халыҡ менән бергә булыу, осорҙоң яҡты идеалдары, еңеү өсөн үҙ-үҙеңде көрәшкә арнау Көнһылыуҙы һәм башҡа хеҙмәт кешеләрен шәхес булараҡ юғары күтәрә. Кешеләр менән бергәләп эшләү, ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу төп героиня Көнһылыуҙың характерын сыныҡтыра, уны ойоштороусы итеп формалаштыра.

«Көнһылыу» З. Биишеваға повесть жанрын үҙләштереүҙә үҙенсәлекле тәжрибә булды. Уның «Сәйер кеше» (I960), «Уйҙар, уйҙар...» (1961) повестары тап бына «Көнһылыу» әҫәре тәжрибәһен үҫтерә. З. Биишеваның был повестары үткәнде хәтерләү («Сәйер кеше») йәки үҙ күңеленде асып һалыу формаһында («Уйҙар, уйҙар...») яҙылғандар.

Шулай итеп, З. Биишева үҙенең ижади үҫеү юлында әҙәбиәттең бөтә тармаҡтарына ла – прозаға, поэзияға, драматургияға мөрәжәғәт итте, төрлө жанрҙарҙа ырамлы эшләп, ҙур тәжрибә тупланы.

Оҫталығы үҫә барған һайын, З. Биишева элек яҙылған айырым әҫәрҙәрен ҡайтанан эшләне. Был уның профессиональ, рухи һәм интеллектуаль

үҫешен сағылдырҙы, үҙе һүрәтләгән тормош күренештәрен, ваҡыт үтеү менән, ул асығыраҡ аңлап, тулыраҡ күҙ алдына килтерҙе.

З. Биишеваның ижады, жанрҙар буйынса нәҫер һәм хикәйәләрҙән – повестарға, шиғырҙарҙан – поэмаға, әкиәттәрҙән – хикәйәттәргә һәм философик драмаға табан үҫә барып, төрләнде, байыҡты. Яңы дәүер тыуҙырған кешеләрҙең үҙенсәлекле юлын яҙыусы әҫәрҙән әҫәргә тәрәнерәк сағылдырҙы, кешеләр араһындағы ҡатмарлы мөнәсәбәттәрҙе башта билдәләп кенә үтеүҙән художестволы логикаға ярашлы үҫештә һәм психологик тәрәнлектә һүрәтләүгә табан күтәрелә барҙы, халыҡ әкиәттәренә хас булған бер яҡлы статик характерҙағы образдарҙан ҙур философик дөйөмләштереүҙәргә килде, киң ҡоласлы образдар тыуҙырҙы. Бына шундай әҙәби оҫталыҡ мәктәбен үтеп, З. Биишева үҙенең төп китабы – «Яҡтыға» трилогияһын яҙыуға килде.

Трилогия З. Биишеваны оҫта һәм үҙенсәлекле романист итеп танытты. Тәүҙә «Бер ғүмерҙең тарихы», аҙаҡ «Яҡтыға» тип исемләнгән был трилогия яҙыусы ижадында ғына түгел, ә бөтә башҡорт әҙәбиәте өсөн дә яңы бер күренеш, ҙур ҡаҙаныш булды. Яҙыусы тәрән халыҡсан, милли колоритлы, бай идея йөкмәткеле, киң ҡоласлы эпик әҫәр ижад итте.

Трилогияға ингән романдар – сюжеты, композицияһы һәм, иң мөһиме, һүрәтләнгән образдары менән үҙ аллы әҫәрҙәр. Сөнки унда халыҡтың көнкүреше үҙенә бер оҫталыҡ менән бирелә, фольклор булараҡ бигерәк тә ҙур роль уйнай һәм халыҡ ижадындағы ҡайһы бер темаларҙың әҫәрҙә көсәйтелеп, ҡабартылып күрһәтелеүе лә «Кәмһетелгәндәр»ҙең характерлы үҙенсәлеген – уның социаль-көнкүрештә һүрәтләүсе һыҙатын барлыҡҡа килтергән. «Оло Эйек буйында» әҫәрендә халыҡтың героик көрәше һүрәтләнә. Был романда сюжет хәрәкәтен тарихи-революцион ваҡиғалар, шул ваҡиғаларҙың үҙәгендә тороусы халыҡ алып бара.

«Емеш» романында иһә автобиографик һыҙаттар көсәйә. Сөнки бында, бер яҡтан, яҙыусыны Емештең рухи үҫеш процесы ҡыҙыҡһындырһа, икенсе яҡтан, ул Илсеғол ауылында барған синфи көрәште конкрет һүрәтләү аша уны үҙгәртеп ҡороу процесын сағылдыра, шул хәрәкәттә кешеләрҙең сынығыуҙарын күрһәтә. Ана шуға ла яҙыусының үҙ трилогияһын социаль-тарихи роман тип атауында дөрөҫлөк бар. Сөнки ул автобиографик характерҙағы роман-хәтерләү тибындағы әҫәр генә түгел, ә шул һыҙаттарҙы ла үҙенә алған конкрет тарихи осорҙоң грандиоз ваҡиғаларын көнкүрештең ваҡ деталдәренә тиклем ҙур дөрөҫлөк менән һүрәтләүсе киң ҡоласлы әҫәр. Уға художестволы анализлау ҙа, ғилми тикшеренеү ҙә хас.

Трилогия башҡорт халыҡ тормошон, кешеләрҙең рухи эволюцияһын илебеҙ тарихындағы иң көсөргәнешле һәм ҡатмарлы осорҙарына бәйләп алып бара. Ашыҡмайынса һүрәтләнгән эреле-ваҡлы ваҡиғаларҙың киң эпик панорамаһы, йәғни «көслөнөкө донъя» тип йәшәгән байҙары һәм ҡараңғы тормоштан нисек ҡотолорға белмәй аптыраған ярлылары, икеләтә иҙелгән, кәмһетелгән ҡатын-ҡыҙҙары менән Октябрь революцияһына тиклем һәм унан һуңғы осорҙа синфи көрәштә яңынан тыуған башҡорт ауылдары күҙ алдына баҫа.

Әгәр тәүге китапта ваҡиғалар 1911–1918 йылдар эсендә барһа, икенсе һәм

өсөнсө китаптарҙа Граждандар һуғышы һәм колхозлашыуҙың тәүге йылдары һүрәтләнә. Тимәк, трилогияла барған хәл-ваҡиғалар егерме йылға яҡын осорҙо үҙ эсенә ала.

«Кәмһетелгәндәр»ҙә З. Биишева революцияға тиклемге һәм революция көндәрендәге башҡорт халҡының тормошон, көрәшен айырым халыҡ вәкилдәре яҙмышы аша дөйөмләштерә. Үҙ геройҙарын яҙыусы ҙур һынауҙар, ауыр ҡаршылыҡтар аша үткәрә.

Икенсе китап — «Оло Эйек буйында» уҡыусыны Граждандар һуғышы һәм тыныс тормоштоң тәүге көндәрендәге ваҡиғалар эсенә алып инә, «Граждандар һуғышы, аслыҡ, тиф менән ауылдарҙа тәүге уяныш, күтәрелеш» һәм шул йылдарҙа мәғрур, яугир йөрәкле кешеләрҙең һәр саҡ еңеп, алға барыуҙары тураһында һөйләй.

«Емеш» тип аталған өсөнсө китап инде революция һәм Граждандар һуғышынан һуңғы шарттарҙа кешеләрҙең рухи яҡтан үҙгәреүен, үҫешен һүрәтләүгә арналған. Йыйып әйткәндә, «Яҡтыға» тип аталған трилогияһының беренсе китабында автор «Бер ғүмерҙең тарихы»нан уның бала сағын, ә икенсеһендә йәшлеген бирә. «Емеш» романында инде уның өлгөргән шәхес булып сынығыу йылдары күрһәтелә.

Трилогияла халыҡ тарихын кәүҙәләндереүсе характерҙар – көрәш кешеләре булып беренсе сиратта Тимербай һәм Хаммат тора.

Ғорур рухлы, сая Ҡарасәс әбейҙең улы Тимербай башта уҡ азатлыҡҡа ынтылыусы, бай һәм муллаларға ҡаршы көрәшкә өндәүсе булып сығыш яһай. Бөтә яҙмышы һәм характер һыҙаттары менән дә ул халыҡ йырҙарында йырланған батыр рухлы ир-азаматтарға бик яҡын тора. Йырсы ла, ҡурайсы ла, бейеүсе лә, шағир һәм рәссам да ул Тимербай. Тимәк, бөтә яҡлап та ул поэтик натура. Иштуған менән һөйләшкәндә лә ул каторгала бер докторҙың «уҡыу тейһә, бынамын тигән художник булыр инең һин» тиеүен хәтерләй һәм, һуғыштар тамамланғас, «шул юлда үҙемде һынап ҡарамаҡсы булам әле» тигән ҡарарға килеп ҡуя. Был бик характерлы деталь. Тап ана шул поэтик натура булған Тимербайҙың ауыл кешеләренә, йәш үҫмерҙәргә батыр Хәбир тураһындағы хикәйәтте һөйләүсе булып сығыш яһауы, туғанлыҡ төшөнсәһенең синфи икәнен аңлатырға тырышыуы иғтибарға лайыҡлы. Тимәк, ярлы халыҡты үҙенсә яҡлап сыҡҡан Хәбир батырҙың ирек, азатлыҡ өсөн көрәш эстафетаһы «һутлы тупраҡҡа төшкән».

Тимербай үҙе лә, халыҡ батырҙары кеүек, «ялған бәләләр тағып» Себергә ебәрелә. Ләкин ул Хәбирҙең байҙарға ҡаршы көрәше хаҡында йәш быуынға һөйләп өлгөрә. Уның Хәбир батыр тураһындағы хикәйәтен тыңлағас, Иштуған менән Әхәт кеүектәрҙә: «Үҫкәс, Хәбир ағай кеүек батыр булам», – тигән теләк ярала, һәм, ысынлап та, аҙаҡ улар азатлыҡ өсөн көрәшселәр сафына баҫа.

Себерҙә яңы кешеләр менән аралашыу, уларҙың фекерҙәрен тыңлау Тимербайҙың уй-ҡараштарын тағы ла асыҡлай.

Тимербай үҙенең бөтә көсөн, аҙаҡҡы һулышынаса ғүмерен ирек һәм азатлыҡ өсөн көрәшкә арнай һәм Граждандар һуғышында батырҙарса һәләк була.

Ләкин үлем генә батырҙың ғүмерен сикләй алмай. Яҙыусы Тимербай рухының Хаммат, Иштуған, Әхәттәрҙә, халыҡ күңелендә мәңге тере ҡалыуын

раҫлай. Уның ҡурайы ауылдаштарына ҡайтып етә. Иштуғандың: «Тимербай ағайҙан ҡалған ҡурайҙың тел аҫҡысын белерҙәй егеттәр үҫер әле», – тип әйтеүе үҙе үк символик бер мәғәнәгә эйә.

Әгәр Тимербай әҫәрҙә башта уҡ алдынғы ҡарашлы көрәшсе булып сығыш яһаһа, Хаммат был юлға ҙур ғына һынауҙар аша килә. Ул, батыр Хәбир, уның эстафетаһын дауам итеүсе Тимербай, Байгилде кеүек үк, ҡыйыу, батыр рухлы шәхестәр затынан, хеҙмәт һөйөүсе тырыш эш кешеһе. Ауыл халҡы уны ла, яратып, «Хаммат батыр» тип йөрөтә. Яҙыусы Хамматтың тышҡы портретына ныҡ баҫым яһай. Уны «мыҡты кәүҙәле», «шат, уйынсаҡ холоҡло», «ут сәсеп торған бөркөт күҙле» йәки «бөркөт ҡарашлы» тип характерлай. Шул уҡ ваҡытта Хамматҡа тәрән кисерештәр ҙә хас. Был уның Сәлимәгә булған мөхәббәтендә бигерәк тә асыҡ күренә. Әсәһе бик йәштән көсләп тип әйтерлек Өммөгөлсөмгә өйләндергәндән һуң, бер көндө килеп Сәлимәгә булған «ниндәйҙер ят, иҫ киткес татлы, яңы бер тойғо уяна башлауын, был тойғо хатта бөтә йәнен-тәнен биләп барыуын» һиҙгәс, ул үҙ мөхәббәте алдында туҡтап ҡала алмай. Бында әле йәш, тик йөрәк тауышына ғына ҡолаҡ һалған Хаммат сығыш яһай. Аҙаҡ, революция, Граждандар һуғышы уттарында сыныҡҡас, тормош тәжрибәһе туплап, ир ҡорона ултырғас, ул үҙ бәхете өсөн генә түгел, ә халыҡ бәхете өсөн көрәшеүҙе төп маҡсат итеп ҡуя. Ләкин Сәлимә фажиғәле рәүештә һәләк булғас та, Хаммат үҙ мөхәббәтен онота алмай. Шул уҡ ваҡытта ул кешеләр өсөн йәшәргә, көрәшергә кәрәклеген дә яҡшы аңлай. Тормош уны «йөрәк тауышына ғына түгел, аҡыл тауышына ла ҡолаҡ һалырға» өйрәтә.

Тимербай кеүек үк, Хаммат та яңы тормош өсөн көрәш юлында һәләк була. Яҙыусы бында батыр шәхестең халыҡ күңелендә мәңге йәшәп ҡаласағы тураһындағы фекерҙе артабан үҫтерә.

Тимербай менән Хаммат көрәш майҙанына сағыштырмаса тура юл менән килһәләр, Байгилденең юлы оҙайлы ла, ауыр ҙа. Уның менән уҡыусы ярлылыҡ һәм бөлгөнлөктөң иң һуңғы сигенә килеп еткән мәлендә осраша. Байгилде – ярлы крәҫтиәндәрҙең типик бер вәкиле. Яҙыусы, был образды һәр яҡлап асыҡлау маҡсаты менән, уның нәҫел-ырыуы, быға тиклемге «тарихы» менән таныштыра, уларҙың ырыу-араһы хаҡындағы легенданы әҫәргә индерә. Ошонда уҡ Байгилденең бик иртә етем ҡалыуын, йәштән үк әсе тир түгеп ҡаты эштә үҫеүен ҡат-ҡат һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Бәхетле көндәр хаҡында хыялланып, ул Ҡормош байҙа ғына ла нисәмә йылдар хеҙмәтсе булған, ләкин барыбер үҙ көнкүрешен бөтәйтә алмаған. Трилогияла ирек, азатлыҡ өсөн көрәш эстафетаһын дауам иттереүселәр булып икенсе быуын вәкилдәре Иштуған, Айһылыу, Әхәттәр сығыш яһай. Әҫәрҙең башында улар йәш балалар ғына. Революция көндәре килеп еткәндә инде улар үҙ бәхеттәре өсөн көрәшерлек йәшкә аяҡ баҫҡан булалар. Яңы осор был романтик рухлы йәштәргә ҡанат ҡуя. Иштуған менән Айһылыу үҙ мөхәббәттәре, үҙ бәхеттәре өсөн көрәшеү аша халыҡ ирке, азатлығы өсөн көрәштә үҙ урындарын табалар. Иштуған да, Хаммат кеүек үк, үҙен халыҡ бәхете өсөн көрәшкә арнай. Ул «тыуған ауылына, халыҡҡа хеҙмәт итергә ялҡынлы теләк менән ашҡынып» ҡайта. «Иҙелгән, кәмһетелгән халҡын уятырға, бил турайтып тороп баҫырға ярҙам итергә».

Әҫәрҙә өсөнсө быуын вәкилдәре лә хәрәкәт итә. Ике дуҫ – береһе башҡорт егете Байрас, икенсеһе рус егете Алешаның рухи яҡтан үҫә, күтәрелә барыуҙары өсөнсө романдың идея-эстетик йөкмәткеһендә ҙур роль уйнай. Өлкән быуындың ыңғай йоғонтоһо аҫтында улар ҙа синфи көрәшкә килеп ҡушыла.

Халыҡ тарихын көрәшкә бәйләп, уны шулай быуындан-быуынға күсә килеүсе эстафета итеп ҡарау – үҙе үк тарихи законлылыҡтың әҫәрҙә сағылыш табыуын күрһәтеп тора.

Трилогияла шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙың оригиналь образдары кәүҙәләндерелә. Әгәр Тимербай, Хамматтарҙы яҙыусы күберәк үҙе характерлаһа, ҡатын-ҡыҙҙарҙың образдары бөтәһе тип әйтерлек Емеш күҙәтеүенә һәм ҡабул итеүенә бәйләп һүрәтләнә. Яҙыусы Емеште күп ваҡыт уны уратып алған кешеләр менән бергә күрһәтә. Әйтәйек, бала сағында Емеш тормошто Сыуаҡай, Ҡарасәс әбейҙәр һөйләүенсә хыял һәм әкиәт донъяһы аша ҡабул итә. Аҙаҡ уның ошо «бәләкәй» донъяһына үҙенең ғәжәп реалистик ҡарашы менән Таибә әбей килеп инә. Сыуаҡай әбейҙе халыҡ «яҡты күләс йөҙлө, йомшаҡ яғымлы һүҙле, изгелексән, яҡшы күңелле» булғаны өсөн, яратып, «Сыуаҡай әбей» тип атап йөрөтә. Үҙенең донъяға ҡарашы, ҡылыҡ-ғәҙәттәре менән ул – иҫке тормош кешеһе. Сыуаҡай – тормошонан риза һәм кешеләрҙе ул баш эйеп, «теге донъяға» әҙерләнеп йәшәргә өндәй. Был яғы менән ул Ҡарасәс әбейгә ҡапма-ҡаршы тора. Әхмәҙулла мулла Сыуаҡай әбейҙең ана шул яғынан бик оҫта файҙалана. Сыуаҡай әбей үҙ ҡараштарының хата икәнен бик һуңлап төшөнә башлай. Аслыҡ йылынан һуң ул: «Бөтәһенән дә күңелем ҡайтты... Хатта им-томдан да, бынауы ҡомһоҙ байҙарынан да», – ти ул үҙе хаҡында.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының бер килкеһенең үҙенсәлекле характерын асыҡлауҙа Таибә әбей образы әһәмиәтле. Автор, уның холоҡ-ҡылығын характерлап, һәр саҡ «көслө ихтыярлы» булыуына баҫым яһай, Таибә әбей – «тормоштоң бөтә ауырлығын бер үҙе күтәргән» «ҡырҡыу, талапсан, ләкин ғәжәп ғәҙел холоҡло, ир йөрәкле» ҡатын. Ире япон һуғышында һәләк булғас, бөгөлөп төшмәгән, сөнки ул көйөнөстө лә, ҡыуанысты ла тыныс, олпат ҡаршылап өйрәнгән.

Беренсе сиратта Таибә – балалары хаҡында ла ҡайғыртыусы хәстәрлекле, тырыш әсә. Өс улын да уның батыр итеп күргеһе килә. Улдары, бигерәк тә Хамматы менән ғорурланып йәшәй ул. Шул уҡ ваҡытта ул Закирҙың фажиғәле үлемен бик ауыр, әммә ғорур кисерә.

Таибә кеүек үк үҙенсәлекле яҙмышлы ҡатын-ҡыҙҙарҙан әҫәрҙә Өммөгөлсөм, Шәмсиә, Сәлимә образдарын айырып күрһәтергә кәрәк. Хамматҡа һәр саҡ тоғро булып ҡалған, баҫалҡы, оло йөрәкле Өммөгөлсөмдө яҙыусы ғәжәп сабыр холоҡло, итәғәтле итеп кәүҙәләндерә. Тап ана шул арҡала ул Хамматтың Сәлимәгә булған мөхәббәтенә лә күҫәк күтәрмәй, эстән һыҙа бирә. Аҙаҡ, Сәлимә үлгәс, ирен ғәфү ҙә итә. Әҫәрҙә Өммөгөлсөм – хөрмәткә лайыҡлы, эшсән, баҫалҡы кеше, балалар тип ут йотоусы әсә һәм аҡыллы, яғымлы ҡатын булып күҙ алдына баҫа. Ул тормошта көнкүреш ығы-зығыһына бирелмәй, ҙур өмөт менән йәшәй.

Өммөгөлсөм янында Сәлимә – бөтөнләй икенсе характер. Ул ярһыу

холоҡло, һүҙен һүҙ итеүгә бөтә булмышын һалыусы, тойғо ҡоло булараҡ, мөхәббәтен яҡлап, үҙ-үҙенә ҡул һала.

Рухи үҙгәрә барыуы менән Емеш – бигерәк тә айырым урын биләгән образ. Ул әҫәргә бик бәләкәй ҡыҙ булып килеп инә һәм әҫәр барышында төрлө йәберләүҙәр, кәмһетелеүҙәр аша үтә. Ошо ваҡыт эсендә Емештең характеры, донъяға ҡарашы формалаша. Тәүҙә үгәй әсә Сәрбиямалға, аҙаҡ ауылдың мулла һәм байҙарына булған мөнәсәбәтен асыҡлай барыу ярҙамында автор уның синфи аңы үҫеүен күрһәтә. Батша төшөрөлгәндән һуң Иштуған, Емештәр үҙҙәрен «килмешәк» тип түгел, ә ерҙең хужалары итеп тоя башлайҙар. Яҙыусы тормоштоң тамырынан үҙгәреүе һөҙөмтәһендә үҙ героиняһының яңы үрҙәргә күтәрелеүен эҙмә-эҙлекле һүрәтләй.

З. Биишева әкиәт, балалар уйыны, айырым диалогтарҙа Емештең эске донъяһын, уның уй-тойғоларын асыҡлай. Был йәһәттән бигерәк тә әкиәттәрҙең роле ҙур. Сөнки тормошто Емеш һәр саҡ, балалыҡ дәүерендә бигерәк тә, әкиәттәге хәл-ваҡиғаларға сағыштырып ҡабул итә. Әйтәйек, ярлылар һәм байҙар араһындағы мөнәсәбәтте лә ул атаһы Байгилде һөйләгән Тоғро һәм Алдар батырҙарҙың көрәше һымаҡ ҡабул итә.

Яҡтылыҡҡа, матурлыҡҡа ынтылыусы Емештең күңел донъяһын байыҡтырыуҙа Закирҙың ҡомарткыһы – китаптары ҙур роль уйнай. Яҙыусы уның М. Ғафури, Ғ. Ибраһимов, Ш. Бабич әҫәрҙәрен уҡып, үҙенә белем-илһам алыуын күрһәтә. Шиғриәткә ынтылған йәш кешегә был яҙыусыларҙың әҫәрҙәре ыңғай тәьҫир яһай.

Педагогия техникумында уҡыу Емештең рухи үҫешендә тағы бер баҫкыс булып тора. Был уны «Сәрбиямалдар донъяһы»нан ҡотҡара, артабан белем алырға мөмкинлек бирә. Бында ул синфи көрәшкә ҡушылып китә, комсомол сафына инә һәм художестволы әҙәбиәттә үҙенең тәүге ижади аҙымдарын яһай. Трилогияның аҙағында яҙыусының уй-ниәтен Байрас бик асыҡ итеп әйтеп бирә: «Атайҙар иҫтәлеге алдында йөҙ ҡыҙармаҫлыҡ итеп йәшәргә тырышабыҙ. Ҡараңғынан яҡтыға табан юлға сыҡҡанбыҙ икән, түбәгә таш яуһа ла, кирегә боролоу булмаҫ», – ти ул, Емешкә төбәп. Эйе, Емеш үҙенә «уҡыу, үҫеү, юғарыға, яҡтыға үрләү», «аң-белем таратыу эшендә ысын-ысында белеп-бирелеп» эшләүҙе төп маҡсат нтеп ҡуйған.

Шулай итеп, З. Биишева – күп яҡлы таланты менән милләттең рухи үҫешенә ҙур өлөш индергән, башҡорт уҡыусылары араһында ла, алыҫ яҡтарҙа ла киң танылған әҙиптәрҙең береһе. Уның әҫәрҙәре рус, ҡаҙаҡ һәм башҡа телдәргә тәржемә ителеп, ҡат-ҡат баҫылып сыҡты һәм юғары баһаланды.

«Яҡтыға» трилогияһы Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды. Ижади хеҙмәттәре өсөн З. Биишеваға башҡорт әҙәбиәтендә тәү башлап «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы» тигән юғары исем бирелде.

Әнүр ВАХИТОВ.

ЗӘҢГӘР ҺАҒЫШ

(Ғәзим Аллаяровтың тыуыуына – 100 йыл)

Ғәзим Закир улы Аллаяров әҙәбиәткә оло тормош тәжрибәһе туплап килгән яҙыусыларҙың береһе ине. Ул 1913 йылдың 1 ғинуарында Учалы районының Ураҙ ауылында тыуған. 15 йәшенән комсомол сафына инә, колхоздар ойоштороуҙа актив ҡатнаша. 1933 – 1934 йылдарҙа Стәрлетамаҡ совет-партия мәктәбен тамамлағас, Учалы МТС-ы политбүлегендә эшләй.

Бөйөк Ватан һуғышына тиклем Ғәзим Аллаяров Ҡыйғы район газетаһында редактор урынбаҫары вазифаһын башҡара. Дүрт йыл фронтта була, япон милитаристарына ҡаршы һуғышта ҡатнаша. Демобилизацияланғандан һуң КПСС-тың Ҡыйғы район комитетында эшләй, 1947 – 1949 йылдарҙа Өфөлә Өлкә партия мәктәбендә уҡып сыҡҡас, КПСС-тың Ҡыйғы, Матрай, Мәләүез район комитеттарында секретарь була. 1955 йылдан – партияның Ҡырмыҫҡалы, аҙаҡ Бәләбәй район комитетының беренсе секретары.

Бер нисә тапҡыр КПСС Өлкә комитеты ағзаһы, ике саҡырылыш БАССР Верховный Советы депутаты итеп һайлана. Ғ. Аллаяров – партияның XXII съезы делегаты, ике Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены, ике «Батырлыҡ өсөн» һәм башҡа миҙалдар менән наградланды.

«Ғәзим Закирович, ғүмер юлығыҙҙа кисергән иң иҫтәлекле көндәр, ваҡиғалар хаҡында ни әйтерһегеҙ?» – тигән һорауға атайым 1983 йылдың ҡышы ошоларҙы һөйләгән:

– Әгәр ундай ваҡиғалар күп икән, әлбиттә, бер ауыҙ һүҙ менән генә яуап биреп булмаҫ. Шулай ҙа... Атайымдың арыҡ ҡына аты егелгән ҡаҡ арбаға ултырып һырттар аша Отасы (Магнит) тауына ҡарай юлланғаныбыҙ онотолмай. Магнитҡала 1929-1930 йылдарҙа бөйөк төҙөлөштә ҡатнаштым. Төрлө милләт кешеләре төрлө тарафтарҙан йыйылғайны. Йәшлек энтузиазмы менән эшләнек. Тимер юл һалынып бөткәс, тәүге поезд менән Бөтә Союз старостаһы Калинин иптәш килде. Уның һәм «тимер нарком» Серго Орджоникидзеның ялҡынлы телмәре һаман да күңел түрендә.

Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғалары йөрәккә мәңгегә уйылып ҡалды. Танкист булып хеҙмәт иттем мин. Хәрби наградаларға лайыҡ булдым, контузиялар алдым. Бер саҡ хатта танк эсендә иҫтән яҙҙым, кейемемә ут ҡапты... Иптәштәремде юғалтыуҙар... Оноторлоҡмо ни?!

...Ҡулыма бик йәшләй генә ҡәләм алдым. Шиғырҙар яҙа инем, алдынғылар тураһында һүрәтләмәләр, очерктар яҙҙым. Улар газета-журналдарҙа «Ғ. Аллай» псевдонимы аҫтында донъя күрә торғайны. Нисектер шулай килеп сыҡты: актив ижадҡа алтмышынсы йылдарҙа ғына ылыҡтым.

Тәбиғи, минең өсөн үҙем күргән-белгәнде, йөрәк аша үткәргәнде яҙыу ҡимматерәк тойола. Тәнҡитселәрҙең дә әйткәне булыр: «...әҫәрҙәре нигеҙҙә автобиографик характерҙа». Бында ғәжәеллек юҡ түгел. «Бер юлдан», «Үргә табан»,

«Һынау», «Хинган тауҙары аша», «Шифалы ямғыр», «Утлы ҡойон», «Ер һулышы» кеүек әҫәрҙәрем йә ауыл тормошон, йә һуғыш ваҡиғаларын һүрәтләй. Әҫәрҙәремдә үҙемдең замандаштарым, күңелендә ер йылыһы һаҡлаған, Ватанға оло һөйөү йөрөткән кешеләр яҙмышын сағылдырырға ынтылдым.

Партия работнигы булараҡ, илебеҙҙең күп кенә данлы кешеләре менән осрашырға тура килде.

Бынан утыҙ йыл элек «Совет Башҡортостаны» гәзите ойошторған әңгәмәнән («Ер йылыһы – күңелем йылыһы». С. Шәрипов, 1983 йыл) был фекерҙәр. Ғөмүмән, яҙыусы-фронтовик һәм әүҙем партия эшмәкәре булараҡ, уның архивында баҫылған һәм баҫылмаған ҡулъяҙмалар, бихисап фотолар һәм наградалар һаҡлана. Ә минең күңел һандығында – ғәзиз кеше хаҡында йылы хәтирәләр, һағыныуҙар һәм юҡһыныуҙар. Уның зәңгәр күҙҙәре зәңгәр һағыш булып уйылған шул бәғеремә.

...Атай... Уның хаҡында һөйләүе еңел дә, ауыр ҙа. Атайым ише кешеләр хәҙер бик һирәктер, тим. Ул берсә күңелсәк, берсә уйсан, ваҡыты менән үтә етди һәм ҡәтғи, бәғзе саҡтарҙа йомшаҡ күңелле, иғтибарлы, ярҙамсыл була торғайны. Иң мөһиме, мин уны гелән әҙәпле һәм намыҫлы шәхес тип күҙ алдына баҫтырам. Ул бик танышмаҡлы, ихлас, кешеләргә гелән ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булды. Көләмәс яратты, хатта уларҙы үҙе сығарып та һөйләй торғайны. Йырларға ла булдырҙы. Фронтта отоп алған украин көйҙәрен айырыуса мөкиббән башҡарып, «һуғышта беҙҙең танк экипажы – интернациональ ғаилә булды» тип хәтерләр ине. Башҡорт халыҡ йырҙарын иһә айырыуса аһәң менән, күҙҙәренә йәш алып һуҙғаны хәтерҙә. Шул саҡта әсәйем уға, ярым шаяртып: «Бәй, бабай, һинең күҙҙәрең зәңгәр имеш тәһә» – тип тә әйткеләй торғайны.

Атайым ейәндәрен һөйөп туйманы, улар ҙа, ҡартатай тип, эргәһенән китмәне. Сөнки ул балалар менән үҙен балалар тәрбиәсеһе һымаҡ тотто. Кәрәк икән – шахмат уйнаны, кәрәк икән – Яңы йыл ҡаршылағанда Ҡыш бабай булып кейенде. Шыршыны иһә беҙ бөтә ғаиләбеҙ менән күмәкләп биҙәй торғайныҡ. Тыуған көндәребеҙҙә саҡырылған бала-саға менән бергә ашар, бергә уйнар ине.

Әйткәнемсә, ҙур вазифалар биләһә лә, атайым кешеләргә һәләк иғтибарлы булды, юҡҡа ғынамы ни, күптәр, бигерәк тә ябай колхозсылар, совхоз эшсәндәре уны «Батя» тип ололоҡлаған. Был хаҡта атайымды йөрөткән водителдәрҙең береһе әҫәрләнеп һөйләгәйне. Инде үҙем шаһит: ул һуғыш, хеҙмәт һәм тыл ветерандары, студенттар, мәктәп коллективтары менән аралашырға, хатлашырға йыбанманы. Күптәренә фатирҙарын яҡшыртырға ярҙам итте, шуға күрә лә ул өй туйлау мәжлестәренең түренә ултыртылды. Китабын һорап үҙенә мөрәжәғәт иткәндәргә йүгереп йөрөп йомоштарын үтәне, байтаҡ китаптарын, сауҙала бөтһә лә, нисектер эҙләп табып, автографлап, изге теләктәр күндереп, почта аша ебәрер булды.

Атайым йәнтөйәген һағынып йәшәне. Ул хатта башҡорт халҡының «Азамат» көйөнә «Ураҙ» тип тә бик моңһоуланып йырлар ине. Әлбиттә, болоҡһоу мәлдәрендә.

Бирегеҙсе ҡәләм,
Яҙайымсы сәләм.
Тыуып-үҫкән
Ураҙҡайым һау микән?

Ауыр сир менән түшәктә ятҡанында уның: «Их, Йайыҡ һыуҡайҙарын туйғансы бер эсһәм икән!» – тигәне лә онотолмай.

Йәнә атайымдың ҡайһы бер кешеләргә бик нык йәне көйгәне лә иҫтән сыҡмай. Бигерәк тә үҙе ышанып, яҡын күреп йөрөгән бәндәләрҙең хыянатын ауыр кисерҙе. Был хаҡта, әлбиттә, бары тик әсәйем менән генә уртаҡлашыр ине серҙәрен.

Шуғамы уның архивындағы блокнотта ошондай строфа ла һаҡлана. «Пушкиндан» тигән белешмәне лә уҡырға мөмкин.

Так было, так и будет,
Таков издревле белый свет –
Ученых много, умных мало,
Знакомых тьма, а друга нет.

Атайым әсәйемде бик тә яратты һәм уны «ышаныслы тылым» тип маҡтар ине. Эйе, улар илле өс йыл буйы ҡулға-ҡул тотошоп, бер-береһен ярты һүҙҙән, бәләкәй генә ым-ишаранан да аңлап-аңлашып йәшәнеләр. Был хаҡта уның «Аҡ ҡайыным минең» тигән йыр-шиғыр һүҙҙәре лә асыҡ һөйләй. Эпиграф тапҡырына бик матур почерк менән «Маһинурыма» тигән аныҡламаһын да өҫтәүҙе кәрәк тапҡан.

Үҙ ҡулдарым менән һылап-һыйпап
Ултырттым мин тәҙ(е)рәм төбөнә
Аҡ ҡайындың иң йәш үҫентеһен,
Тиңдәш булырһығыҙ тип үҙемә.

Йылдар үтте, тамырҙары нығып,
Тәлгәшләнде минең аппағым,
Мин бер йәшкә олоғайған һайын,
Япраҡтарын ҡойҙо аҡ ҡайын.

Һары япраҡтарға ҡарап торам,
Ҡасан әле шулай шиңдегеҙ?
Хәтер, мин үҙем дә был донъяға
Ҡыраулы сәс менән килдемме?

Аҡ ҡайын ул – яҙҙар килгән һайын
Йәшел япраҡ менән күмелер.
Тик кирегә сәстәр ҡараймаҫтар,
Көр булһа ла минең күңелем.

Кеше барҙа ла, кеше юҡта ла атайымдың әсәйемә «Майнур» тип өндәшкәне хәҙер ҙә ҡолағымды наҙлап торғандай. Ул быны нисектер яғымлы, итәғәт һәм инсаф менән әйтер ине: «Был тормошта нимәгәлер өлгәшһәм, унда һинең дә өлөшөң бар бит, Майнурым». Ул хатта ысын донъяларға әсәйемдән алдараҡ китергә теләүен дә йәшермәне. Ғәмәлдә шулай килеп сыҡты ла: ул, һикһән бере тулырға аҙналай ғына ғүмере ҡалғас, баҡыйлыҡҡа күсте.

Атайымдың йән һәм тән сирҙәрен белмәгән кешеләр, уның ярайһы оҙон ғүмерле икәненә ишаралап, «ҡарамаҡҡа типһә тимер өҙөрҙәй егет кеүекһегеҙ...» тип тә ирәбеләнер инеләр. Хатта бер саҡ радио аша атайым ошо халәте хаҡында түбәндәгеләрҙе әйтте: «Аңланым. Был һорауҙың бер ҙә зыяны юҡ. Һаулыҡ бөтә кешеләргә лә ғәзиз. Эш шунда: бәләкәйҙән ҡара эштән ҡурҡманым мин. Өҫтәүенә, һәр көнөм гимнастиканан башлана. Гимнастика комплексын үҙемә үҙем төҙөп алғанмын. Уның менән хатта данлыҡлы санаторийҙарҙың белгестәре ҡыҙыҡһынғаны бар».

...Атайым менән әсәйемдең ҡәбер һәйкәлдәрен ҡайын япраҡтары биҙәй. Һөймәлекле, ҡәҙерле һәм абруйлы ине улар.

Рәмилә АЛЛАЯРОВА,
Рәсәй Федерацияһы мәғарифының
почетлы хеҙмәткәре.

КӨНГӘККӘ СЫҒЫУ

Тарихи-документаль очерк

Аяғы һыҙлап, йоҡо алмаған, Усман таңға тиклем һуҡыр шәм яҡтыһында яҙышып ултырҙы. Ырымбур баҙарынан алып ҡайтҡан ҡара һауыты менән ҡаурыйын ҡәҙерләп кенә өҫтәлдән ситкә, тәҙрә төбөнә, алып ҡуйҙы ла мөйөштәге һандыҡ янына килеп, ипләп кенә уның ҡапҡасын асты. Билдәле урынға, китап, ҡулъяҙмалар араһына, йәшереп тигәндәй һалып ҡуйған бер ҡағыҙҙы ҡулына алды. Боронғо бабаһы – Тамъян ырыуы бейе Шағәле Шаҡмандың Рус дәүләте батшаһы Иван Грозный, йәғни аҡ батша биргән «Жалованная грамота» ине ул. Икенсе төрлө уны башҡорттар «ярлыҡаш» тип тә йөрөткән. Был үтә ҡиммәтле лә, ҡәҙерле лә ҡомартҡыны Усман Мөхәмәтғариф улы күрше Мәмбәтҡол ауылындағы туғаны Ғәбиҙулла Мәмбәтҡоловтан алып ҡайтҡайны. XVI быуат урталарында яҙылған әлеге документ, бер уйлаһаң, бик күп дәүер-быуаттар аша бөгөнгәсә килеп еткән бит. Заманында ул «Жалованная грамота» кемдәрҙең ҡулы аша ғына үтмәгән дә ҡайҙарҙа ғына булмаған! Ни мөғжизә менәндер хәҙер Усмандың ҡулына килеп эләкте.

Уҙаман тағы ла бер ҡағыҙҙы алып, оҙаҡ ҡына ҡат-ҡат уҡып сыҡты. Үҙе яңыртып төҙөгән Шағәле Шаҡман нәҫеленең шәжәрәһе ине был. Нәҫел тармағын тағы бер тапҡыр күҙ уңынан кисерҙе Усман. Ул үҙе Шағәле Шаҡмандың туғыҙынсы быуын варисы икән. Шәжәрәне һандыҡтың билдәле урынына һалып ҡуйғас, өҫтә ятҡан китап араһынан бер фоторәсемде ҡулына алды. Сәсән, драматург Мөхәмәтша Буранғолов менән Мәләүездә иҫтәлеккә төшкән ваҡытҡа ла байтаҡ ғүмер үтеп киткән икән.

Мөхәмәтшаны Усман 1917–1922 йылдарҙағы Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенән бирле белә. Икеһе лә уға үҙ өлөшөн индерҙе. Аҙаҡ сәсән Усмандың тыуған яҡтарына йәшәргә килер ҙә элекке дуҫлыҡтары яңы ерҙә, яңы шарттарҙа яңыса дауам итер, тип кем уйлаған инде?

…1924 йылдың көҙөндә Усман Әбүбәкеров Мәләүез баҙарына барғайны. Көтмәгәндә Мөхәмәтша тап булды. Ҡуш ҡуллап күрешеп, ҡосаҡлашып, иҫәнлек-һаулыҡ һораштылар:

– Әссәләмәғәләйкүм!

– Вәғәләйкүмәссәләм!

– Һин бында ниндәй яҙмыш елдәре менән?

– Сәй артында яйлап һөйләшербеҙ ул турала. Әйҙә Түләккә – беҙгә, – тине Мөхәмәтша.

– Бәй, һин Түләктә йәшәйһеңме ни? – Усман аптыраны.

– Эйе.

Усмандың арбаһына ярышлап ултырып, ике дуҫ Түләк ауылына йүнәлде.

* * *

1921 йылғы аслыҡтың дәһшәте Туҡ буйындағы Үрге Ильяс ауылына ла бихисап ҡаза килтерҙе: кешеләр генә түгел, мал-тыуар ҙа ҡырылды. Ауылдағы 90 йортҡа ни бары 12 һыйыр, һигеҙ ат тороп ҡалды. Бөлгөнлөктән сығыу юлын эҙләп күп баш ватты Мөхәмәтша. Уйлана торғас, Үрге Ильястан 18 саҡрымдағы Бүләк тигән утарҙа күмәк хужалыҡҡа тартым артель ойошторҙо. Оҙаҡламай ун ике ғаилә ошонда күсеп килеп ултырҙы ла яңы тормош башлап ебәрҙе.

Йәйге көндәрҙең береһендә Мөхәмәтшаның бажаһы, күрше Абдулла ауылы уҡытыусыһы Ғәббәс Дәүләтшин Өфөнән ялға килгән ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы – ирле-ҡатынлы Һәҙиә менән Ғөбәй Дәүләтшиндарҙы алып килде. Хужалар уларҙы яҡты сырай, һый-хөрмәт менән ҡаршы алып, ҡунаҡ итте.

Йәмле иртәләрҙең береһендә Ғөбәй былай тип һүҙ башланы:

– Мөхәмәтша ағай, йәшәгән урынығыҙ ожмах та ул, тик һеҙгә Башҡортостанға күсеү отошлораҡ булыр, сөнки әҫәрҙәрегеҙҙе донъяға сығарыу өсөн бында бер ниндәй ҙә шарттар юҡ бит.

– Был хаҡта күп уйландым мин, тик ишле ғаилә менән ҡайҙа барып морон төртөрмөн икән? Мәҙрәсәлә бергә уҡыған дуҫым Нурулла Вахитов әллә ҡасандан тыуған ауылы Түләккә саҡыра ла ул, – тип яуапланы хужа.

Өфөгә лә ат менән ни бары ике-өс көнлөк юл икән, унан һуң Нурулланың Мөхәмәтша дуҫының бер улына килен булырға тейешле ҡыҙы Мәстүрә лә үҫеп, буй еткергән. Сәсән бер нисә йыл уйланды-уйланды ла, Башҡортостанға күсергә, тигән ҡәтғи ҡарарға килде.

1924 йылдың йәйендә Буранғоловтар, улар менән бергә тағы ла биш хужалыҡ Туҡ буйҙарының икһеҙ-сикһеҙ далаларын ҡалдырып, Көньяҡ Уралдың гүзәл тәбиғәте ҡосағына – Ағиҙел буйындағы Түләк ауылына килеп төйәкләнде. Уларға яңы ауыл, яңы ерҙәр бик тә оҡшаны, сөнки урман да яҡын, ерҙәр ҙә иркен, ә мул һыулы Ағиҙел – эргәлә генә.

Мөхәмәтша ижадының иң емешле йылдарын хозур тәбиғәтле Ағиҙел буйҙарында, Көнгәк тауы итәген төйәк иткән Түләк менән Мәләүез ауылдарында йәшәп үткәрер, «Башҡорт туйы», «Ялан Йәркәй», «Ҡара юрға», «Шәүрәкәй», «Мөфтөй ҡыҙы Фатима» тигән сәхнә әҫәрҙәрен ижад итер, тип кем уйлаған инде.

Яңы урында Буранғоловтар тиҙ арала үҙ кеше булып китте. Күсеп килеү менән Мөхәмәтша Түләктә мәктәп астырыу хәстәрлеген күрҙе, ул эшләй башлағас, балаларҙы үҙе уҡытты, ололар өсөн ликбез ойошторҙо.

Мәләүез олоҫонда Мөхәмәтша күптәрҙең хәтеренә яғымлы, алсаҡ, мөләйем, нурлы күҙле бер зат булараҡ инеп урынлашты. Уның атлап йөрөшө үк күптәрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп итә ине. Ҡатыны Зәйнәп тә яңы ерҙә уңған хужабикә булып танылды: бешереү-төшөрөүгә оҫта. Ул әҙерләгән аш-һыу телеңде йоторлоҡ, ҡабарып бешкән икмәктәренең хуш еҫлелеге, тәмлелеге! Унды Мөхәмәтша хәләл ефетенән, икеләтә-өсләтә унды! Һәр иртә һайын ярты ауыл ҡатындары Буранғоловтарҙың сепараторына һөт айыртырға йөрөй, бының өсөн улар ауылдаштарынан ярты ҡалаҡ та гәрнис алмай.

* * *

Ике дуҫ, донъя, ил-йорт хәлдәре хаҡында ашыҡмай ғына әңгәмәләшә-әңгәмәләшә, Ағиҙел буйына килеп еткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ана, аръяҡтағы Түләктең өйҙәре лә күҙгә салына. Улар ярты саҡрым түбәндәрәк урынлашҡан кисеүҙе аша сыҡты ла йылға яры буйлап тигәндәй көньяҡҡа – ауыл яғына ыңғайланы. Йорт алдына үтеп, хужабикә, бала-саға менән иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, атты туғарып, малайҙарҙың береһенә уны һуғарырға ҡуштылар ҙа өйгә инделәр. Тиҙ арала түр яҡтағы өҫтәлгә йыуан ҡорһаҡлы самауыр килеп ҡунаҡланы, төрлө һый-ниғмәттәр ҡуйылды.

Был көндө бик оҙаҡ гәп һуҡты Мөхәмәтша менән Усман. Бигерәк тә бер-ике йыл элек кенә һүрелеп ҡалған башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, унда ҡатнашҡан арҡаҙаштары, Зәки Вәлиди шәхесе, башҡорт халҡының бөгөнгө хәле, киләсәктә уны ни көтөрө хаҡында оҙаҡ һүҙ алып барҙылар, төрлө фараздар ҡорҙолар. Ваҡыт-ваҡыт оҙон-оҙайлы иҫтәлек-хәтирәләргә лә төшөп киткеләнеләр.

Атын һуң ғына егеп, Усман Йомағужаға ҡайтырға сыҡты. Мөхәмәтша уны:

– Иҫәнлектә күрешергә яҙһын! – тип ҡапҡа тышына сығып оҙатып ҡалды.

Аты ашыҡмай ғына бара, уның аҙымдарына яйлашҡандай, Усмандың хәтеренән бер-бер артлы ғүмер юлының айырым ваҡиғалары үтә.

Беренсе донъя һуғышы башланыу менән, уны батша армияһына алдылар. Күп тә үтмәй, бер көслө һөжүм ваҡытында Усмандың аяғы һынды. Госпиталдә оҙаҡ ҡына дауаланғас, артабан хәрби хеҙмәткә ярамайһың тип, ҡайтарып ебәрҙеләр. 1917 йылғы Февраль буржуаз-демократик революцияһы булғас, башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте барлыҡҡа килде. Усман Мөхәмәтғариф улы уға бәйле ваҡиғаларҙан ситтә ҡала алманы, йөрәге, намыҫы ҡушыуы буйынса, бик күп яҡташтары менән бер рәттән, халҡына ирек яулаусылар сафына баҫты. Бигерәк тә 1918 – 1919 йылдарҙа Зәки Вәлиди менән берлектә Теміәстә башҡорт хөкүмәтенең эшен ойоштороşоу, яйға һалышыуҙа ең һыҙғанып ҡатнашты. 1919 йылда башҡорт хөкүмәте Совет Рәсәйе менән ике яҡлы килешеү төҙөп, үҙ дәүләтселеген рәсми танытыуға өлгәшкәс, Усман Мөхәмәтғариф улы тыуған ауылына әйләнеп ҡайтты.

Большевиктар башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтен ауыҙлыҡлауға өлгәшкәс тә, Усман уның етәксеһе Әхмәтзәки Вәлиди менән бәйләнеште өҙмәне. Бер көндө, йәғни сит илгә сығып китере алдынан, баштан-аяҡ тиерлек ҡоралланған алты һыбайлы эйәртеп, Әхмәтзәки Йомағужаға Усман Әбүбәкеров йәшәгән йортҡа килеп төштө.

– Усман, әйҙә, ситкә сығып китәйек, беҙгә бында барыбер көн булмаҫ, – тине Әхмәтзәки.

– Тыуған ауылымды, тыуған илемде ташлап сит тарафтарға китәһем юҡ. Ни яҙһа, шуны күрермен, – тип тәҡдимдән баш тартты Усман.

* * *

Усман менән Мөхәмәтша араһындағы дуҫлыҡ йылдан-йыл нығый барҙы. Һыу үткеһеҙ булып ҡатышып, аралаштылар. Тирә-яҡ ауылдарға ла халыҡ ауыҙ-тел ижады өлгөләрен яҙырға бергәләп йөрөр булдылар. Ул яҡтан Мөхәмәтша бигерәк ҡомарлы ине. Халыҡ ижады тиһәң, йәнен бирергә әҙер. Һис бер ауырлыҡтарға ҡарамайынса, шул эшен дауам итте. Хатта бер ваҡыт,

кеҫә яғы ҡойто булыуға ҡарамаҫтан, танаһын һуйып һатып, шуның аҡсаһына оҙон юлға сығырға ҡарар итте. Быға ризалашмаған Зәйнәп унының менән һүҙгә килеште. Аҙаҡ күнде, ҡайҙа барһын инде: ире изге юлда йөрөй бит.

Мәләүезгә бер барғанында Мөхәмәтша Усман дуҫын «Көнгәккә сығыу» байрамын ойоштороп, үткәрешеүҙә ҡатнашырға саҡырҙы. Был йола хаҡында Усмандың электән дә ишеткәне бар ине. Әле сәсән дуҫына Көнгәккә бәйле әллә күпме легенда, йыр-риүәйәт, ҡобайыр-тәүарихтар һөйләне.

* * *

Көнгәк тауы – Мәләүездән алыҫ түгел, Ағиҙелдең көнбайышҡа боролған ерендә, йылғаның уң яҡ ярында. Көн битенә ҡарап ятҡанға, исемен шулай ҡушҡандар. Бейеклеге – 500 метр. Унын иҫ киткес күркәм, гүзәл тәбиғәте һәр кемде лә арбарлыҡ. Көнгәккә етер алдынан Ағиҙел Урал тауҙары ҡуйынынан сабып килеп сыҡҡан аҫау айғырҙы хәтерләтә. Тап бына ошо күкрәк киреп ултырған баһадирҙай тауға яҡынайған һайын, ул ағышын яйлап аҡырынайта төшә, әйтерһең дә, Көнгәк уны тотоп туҡтатып, йүгән кейҙереп, ауыҙлыҡлағас, йылға бөтөнләй йыуашланып ҡалған…

Көнгәк – үҙендә бик күп тарих һаҡлаған серле, ымһындырғыс тау ҙа ул.

Мөхәмәтша дуҫы:

– 1920 йылда Стәрлетамаҡта үткәрелгән ҡурайсылар бәйгеһендә остазым Ғәбит Арғынбаев «Байыҡ Айҙар сәсән» тигән ҡобайыр яҙҙырғайны миңә, – тип ҡулъяҙмалары араһынан береһен эҙләп табып, Усманға уҡырға бирҙе. Ҡобайырҙа башҡорттарҙың нисек итеп 1812 йылда Наполеонға ҡаршы яуға ҡуҙғалыуы хаҡында түбәндәге юлдар бар ине: «Йөҙ йәшәр Байыҡ сәсәндең һүҙен ишеткәс, кантон башлыҡтары ат-хат еткән ергә сабарҙар ебәреп, сер алышып, Иҙел терһәге Көнгәккә йыйылырға булып һүҙ ҡуйышҡандар, ти. Һәр ерҙә йәштәр, ат һайлап, нуҡта һуғылмаған аҫауҙарҙы тотоп өйрәткән. Урманда уҡ юнып, аласыҡта ҡыҙатар һаҙаҡ һуғып, тана-турпы һуйып, ит ҡаҡлап, эркет ҡайнатып, ҡорот йәйеп, ҡаймаҡ яҙып, май таҫҡып, тире ыҫлап, турһыҡ тегеп, көн-төн ағытмай бейә һауып, ҡымыҙ йыйып, кейем-һалым тайярлап, яуға әҙерләнгәндәр. Байыҡ та, үҙенең атын эйәрләп, ҡулына ҡылысын тотторол, улы Әхмәтте яуға кейендергән.

Кантон башлыҡтарын – ҡор башы, ҡош семәрен тоттороп, батырҙарын – мең башы, ырыу ағаһы семәрен тоттороп, ырыу уҙаманын – йөҙ башы, яу япрағы менән берәүҙе алдан сабар итеп, яуға ат менгәндәр. Бөтә ҡарт-ҡоро, бисә-сәсә, әбей-һәбей, ҡыҙ-ҡырҡын, бишектән төшкән, түшләп шыуған, аяҡҡа баҫҡан бала-сағаның бере ҡалмай, оҙатырға килгәндәр. Әбей-һәбейҙәр, яуға китеүселәрҙең юлы ҡыҫҡа булһын тип, тегер еп биргәндәр. Бисә-сәсәләр, күкрәктәрегеҙгә уҡ-һөңгө теймәһен тип, ирҙәренең түштәренә тәңкә теккән. Ҡыҙ-ҡырҡындар, сер һаҡлаусы булығыҙ тип, егеттәргә нағышлы янсыҡтар биргән».

– Ошонда, Көнгәктә, туғыҙ полк тупланған, – тип һүҙен дауам итте Мөхәмәтша, Усман ҡулъяҙманы уға биргәс. – Башҡорт яугирҙары тап бына Көнгәк тауы итәгендә яуға китергә фатиха ала. Ҡаһым түрә етәкселегендәге ир-егеттәребеҙ яуҙа һынатмай, изге тау фатихаһына тап төшөрмәй.

Башҡорт яугирҙары француздарҙы еңеп ҡайтҡас, барса халыҡ яңынан Көнгәккә йыйылып, дошманды еңеүҙе тантаналы байрам итә, һуғышта һәләк

булып ҡалған, иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан батырҙар алдында баш эйә. Шул ваҡиғаларҙан һуң был яҡтарҙа йәшәгән башҡорттар араһында Көнгәккә сығыу йолаһы барлыҡҡа килгән. Ул дәүерҙән бирле йөкмәткеһе лә ныҡ ҡына үҙгәргән. Инде хәҙер Ағиҙел, Нөгөш, Ашҡаҙар, Һуҡайлы, Эйек, Наҡаҫ, Мәләүез, Керәүле, Көйөргәҙе, Юшатыр яҡтарынан килгән йәш-елкенсәк төрлө бәйге, ярыштарҙа көс һынашып, оҫталығын күрһәтә. Еткән ҡыҙҙар менән егеттәргә танышыу, һөйөшөү, аҙаҡ, күҙле-башлы булыу өсөн дә бик ҡулай был байрам. Йыл да май аҙаҡтарында, бөтә тирә-яҡ йәшеллеккә, төрлө-төрлө төҫтәге хуш еҫле сәскәләргә күмелгән бер мәлдә үткәрелә ул.

* * *

Быйыл Усман да Көнгәккә сығыу йолаһынан ситтә ҡалманы. Йомағужа, Илкәнәй, Ялсыҡай, Таймаҫ кеүек ауылдарҙың йәштәрен Көнгәк тауына сығыу йолаһына йәлеп итеште. Иртәгәһенә байрам тигән көндө йәнә лә атын егеп, Түләккә дуҫы янына ҡуҙғалды. Иртәнге сәйҙе эскәс, Көнгәк тауына юлға сыҡтылар. Тауға күтәрелгән һайын, тирә-яҡта иҫ киткес матурлыҡ асыла барҙы. Көнгәктең иң бейек түбәһенә етер саҡтарында Бағра менән Нәтәҙе тауҙары, Ағиҙел менән Нөгөш йылғалары быға тиклем күҙ күрмәгәнсә бер хозурлыҡ менән балҡый башланы.

– Ата-бабаларыбыҙҙың, тамъяндарҙың, әлмисаҡтан бирле килгән ерҙәре, – тип ҡуйҙы Усман.

– Эй, дуҫ, ҡара әле, үҙ ырыуыңдың, нәҫелеңдең тарихы менән ҡыҙыҡһынғаның бармы? – тип һораны Мөхәмәтша.

– Бар, күп нәмәләр беләм.

– Һин, Усман, ана шул белгәндәреңде киләсәк быуындар өсөн яҙып та ҡалдырһаң ине. Минән һиңә бына шундай кәңәш.

Улар ҡараштарын Көнгәккә ағылыусы кешеләргә төбәп, байтаҡ ҡына өндәшмәй-тындашмай барҙы. Тауға тирә-яҡ ауылдарҙан кемдәрҙер йәйәү йә һыбай, ҡайһылары арбала килә ята. Йәштәре лә, ололары ла яһанып-биҙәнеп, һыланып-һыйпанып, ашамлыҡ-ниғмәттәр һалынған төйөнсөктәр тотоп алған. Тауҙың байрам үтәсәк урынына тиклем байтаҡ ара бар әле. Көнгәккә сығыусы халыҡтың иҫәбе-һаны, осо-ҡырыйы юҡ кеүек.

Ә байрам – үҙе оло тамаша, театр. Ул ҡурайсы, тальянсылары, ул бейеүсе, йырсылары йән-тиргә төшөп тигәндәй үҙ-ара ярыша, һәр ҡайһыһы үҙ оҫталығын күрһәтергә, үҙ ауылының данын яҡларға, күтәрергә тырыша. Йәштәрҙең шат тауышынан бар тирә-яҡ яңғырап тора. Байрамды ойоштороусылар, Мөхәмәтша менән Усман да бер тирәләрәк булды.

* * *

Сәсәндең кәңәшен тотоп, байрамдан Йомағужаға ҡайтҡас, Усман Мөхәмәтғариф улы ауылының тарихын яҙырға ултырҙы. Был уның өсөн әллә ни ауырға тура килмәне, сөнки кәрәкле ваҡиға-факттарҙы күп белә, хәтерендә яҡшы һаҡлай ине. Был эшен тамамлағас, Шағәле Шаҡман нәҫеле шәжәрәһен төҙөргә тотондо, уның өсөн Иҙел-Нөгөш тамъяндары йәшәгән ауылдарҙы йөрөп, аҡһаҡал-уҙамандар менән әңгәмәләшеп, уларҙан нәҫел быуындарын яҙып алды, аҙаҡ уларҙы ағас формаһына тура килтереп берләштерҙе.

Бер аҙҙан күмәк хужалыҡтар төҙөү эштәре башланды. Усман да тыуған ауылында колхоз ойоштороуға ең һыҙғанып тотонДо. Аҙаҡ үҙен ауылдаштары

колхоз рәйесе итеп һайланы. Күрәһең, уның етәксе булып китеүе кемдәргәлер оҡшап етмәне: 1917 йылғы революциялар осорондағы эшмәкәрлеген соҡоп сығарҙылар, милләтселектә ғәйепләргә тотондолар. 1932 йылда биш йылға хөкөм итеп, төрмәгә ултыртып ҡуйҙылар. Ике йыл ярым ултырып ҡайтты уҙаман. Шул саҡтар һаулығын да ныҡ ҡаҡшатты уның. Герман һуғышында алған яраһы ҡаты һыҙлап, тән йоҡоларын алыр булды. Был яҡты донъя менән хушлашырын белгән һымаҡ, Усман хәләл ефетенә һандығындағы ҡулъяҙмаларҙы ныҡлы һаҡларға, балалары үҫә төшкәс, уларҙың ҡулына тапшырырға ҡушты.

Илкәнәй ауыл Советы сәркәтибе вазифаһын башҡарып йөрөгән ерҙән бер көндө ауырып түшәккә ятты ла, шунан һуң аяғына баҫа алмай, вафат булып ҡуйҙы.

Ә ул төҙөгән шәжәрә менән Йомағужа ауылы тарихы һандыҡ төбөндә оҙаҡ йылдар ятҡандан һуң ғына Әнүәр Әсфәндиәров атлы тарихсы ғалимға бер туған ҡустыһы Ғәли Әбүбәкеров аша барып ирешә.

* * *

Халҡыбыҙҙың «Аҡбуҙат» эпосы, – «Урал батыр»ҙан ҡала, киң билдәле ауыҙ-тел ижады хазинаһы. Был эпик ҡомартҡыны 1917 йылда фольклорсы Мөхәмәтша Буранғолов хәҙерге Көйөргәҙе районының Урта Бабалар ауылында йәшәүсе сәсән Ғәтиәтулла Биҡҡужиндан яҙып алған. Ә кем, ниндәйерәк шәхес булған һуң ул Ғәтиәтулла Биҡҡужин? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның хаҡында башҡорт фольклористикаһында бер ниндәй мәғлүмәт тә юҡ, дөрөҫөрәге, фольклорсы ғалимдарыбыҙ уның биографияһы, шәхесе менән ныҡлап ҡыҙыҡһынмаған. М. Буранғолов та, «Фольклор ижадсылары» тигән хеҙмәтендә тиҫтәгә яҡын сәсәндәр тураһында яҙыуға ҡарамаҫтан, «Аҡбуҙат» эпосын берҙән-бер вариантта беҙгә килтереп еткереүсе тураһында мәғлүмәт бирмәгән. Бының үҙенә күрә берәй сәбәбе булғандыр, моғайын. Мин быны, Ғ. Биҡҡужиндың 1917 – 1920 йылдарҙағы башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыуына бәйлелер, тип уйлайым. 1974 йылда Мәскәүҙә «Наука» нәшриәтендә донъя күргән «Башкирский народный эпос» йыйынтығында ла «Сведений о сказителе не сохранилось» тигән юлдарға ғына тап булабыҙ. Шул бушлыҡты ҡайһы бер мәғлүмәттәр менән тултырыу маҡсатында, уның тыуған яғындағы ҡайһы бер оло быуын кешеләренә мөрәжәғәт иттек.

Урта Бабаларға күрше Ҡотлоюл (Йыуасалы) ауылы аҡһаҡалы, 1914 йылда тыуған Ямалетдин Ибраһимов:

– Ғәтиәтулла Биҡҡужин, сәсәнлеге өҫтөнә, элекке Ырымбур губернаһы Ҡыпсаҡ-Етерыу кантонының 2-се Бөрйән олоҫонда старшина вазифаһын башҡарған, – тип һөйләй. – Олоҫ үҙәге хәҙерге Яҡуп ауылында булған. Уның бинаһын заманында Татар Ҡарғалыһы сауҙәгәре, татар милли буржуазияһы вәкиле Әхмәт бай Хөсәйенов һалдырған.

Ямалетдин бабай Ибраһимов һөйләгәндәргә өҫтәп шуны әйтке килә: Ғәтиәтулла Биҡҡужиндың нәҫел-нәсәбе бөгөн дә бар. Улар – сәсәндең тыуаһы, йәғни дүртенсе быуын вариҫы Рәфис Һиҙиәтулла улы һәм тыуаяты – бишенсе быуын вариҫы Илнур Рәфис улы Биҡҡужиндар.

Етерлек мәғлүмәттәр булмау арҡаһында, Ғәтиәт сәсәндең нәҫел ебен төпкәрәк төшөп юллай алыу форсаты теймәне. Уның тыуған ауылы тәүҙә

«Бикҡужа» исемен йөрөткән. Ауылды нигеҙләүсе уға нисәнсе быуын тура киләлер, әлегә быны төпсөрләп, асыҡлайһы бар. Профессор Ә. З. Әсфәндиәров Х рәүиз ҡағыҙҙарынан Бикҡужаның Абдулҡадир (73 йәш), Әлмөхәмәт (57 йәш), Мәһәҙи (54 йәш) исемле улдарын табып күрһәткән (2,199). Ғәтиәтулла Бикҡужин заманына күрә уҡымышлы кешеләр ҡатарында ла абруйлыларҙан һаналған. Старшиналыҡ вазифаһын намыҫ менән башҡарыу, олоҫ халҡының социаль-көнкүрешен ҡайғыртыу менән генә сикләнеп ҡалмай, халҡының рухи-мәҙәни донъяһын һаҡлау, үҫтереүҙе лә хәстәрләгән. Быға 1913 йылда 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүҙең 100 йыллығын тантаналы билдәләүгә арнап тәүҙә Ырымбурҙа, аҙаҡ Ҡыпсаҡ-Етерыу кантонының 2-се Бөрйән олоҫона ҡараған Яҡуп ауылы янында үткәрелгән Губернатор йыйыны сағыу миҫал булып тора. Шундай ҙур сараларҙы үткәреүҙә, башҡа уҙамандарыбыҙ менән бер рәттән, Ғәтиәтулла Бикҡужиндың да ойоштороу эшмәкәрлеге ҙур була.

1917 – 1921 йылдарҙағы башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә хәҙерге Көйөргәҙе районы ауылдары вәкилдәре лә әүҙем ҡушыла. Шулар араһынан сәсән Ғәтиәтулла Бикҡужиндың исеме күптәргә яҡшы таныш. Ул 1917 йылғы Февраль-буржуаз демократик инҡилабын ҡыуанып ҡаршы ала. Был ваҡытта Ғ. Бикҡужин Мораптал олоҫо старшинаһы вазифаһында эшләп йөрөй.

1917 йылдың октябрь аҙағы – ноябрь башында Башҡорт Өлкә Шураһы олоҫ йыйындары уҙғара. Ғәтиәтулла старшина ла Башҡорт милли автономияһы өсөн оло өгөт-нәсихәт үткәреүҙә, олоҫ ҡоролтайын ойоштороуҙа ең һыҙғанып ҡатнаша. Ҡыпсаҡ-Етерыу кантон башҡарма комитеты ул ваҡытта хәҙерге Ырымбур өлкәһенә ингән Ташлы ауылында Тимаш баярҙың элекке төп имениеһында урынлашҡан була. Ғәтиәтуллаға олоҫ башҡарма комитеты эштәре менән был яҡтарға ла аҙ юлланырға тура килмәй. Башҡа инҡилапсылар кеүек, халҡым, илем, тупрағым тип ваҡытын да, һаулығын да аямай ул. Тап бына ошо йылдарҙа уға икенсе бер башҡорт сәсәне Мөхәмәтша Буранғолов менән яҡындан танышырға тура килә лә инде, һәм Ғәтиәтулла уға башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадындағы киң билдәле «Аҡбуҙат» эпосын әйтеп яҙҙыра.

Яҙыусы Йыһат Солтанов Сөләймән Мырҙабулатов тураһындағы бер мәҡәләһендә әле беҙ һүҙ алып барған шәхестең башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыуын түбәндәгесә телгә ала: «1917 йылдың октябрь аҙағы – ноябрь башында Башҡорт Өлкә Шураһы уҙғарған район йыйындарында кемдәр башлап һәм етәкселек итеп йөрөгәнен большевизм күҙлегенән ҡарағыҙ: Мораҡ – Ташлы төбәгендә Әбдрәхимов Шакир мулла (эре кулак), Морапталда – улус старшинаһы Бикҡужин Ғәтиәт, Бөрйән-Ҡыпсаҡта – Исхаҡов Мөхәммәтсәлим бай, Ейәнсурала – Ҡазан университетының юридик факультетын тамамлаған юрист (дворян) Юныс Бикбов, йәнә килеп Ишдәүләтов Зәйнулла мулла һәм Алсынбаев Мирсаяф имам, ә Хәйбуллала – Аллабирҙин Заһит мулла, Баймаҡта – атаҡлы мулла Ханнан хәҙрәт, Темәстә – атаҡлы Хөсәйенов Әбүбәкер мулла, Әбйәлилдә – Яҡшымбәтов Хажимөхәммәт мулла (Ә. Вәлидовтың буласаҡ ҡайныһы), Ҡырғыҙ-Миәкәлә – Имашев Әбделхәйер мулла, Әлшәй-Раевкала – Арыҫланбәков Юлмөхәмәт, Борайҙа – Мирбаисов Насретдин, Балаҡатайҙа – Мөхәмәтов Хәкимйән мулла… Улар бөтәһе лә Башҡорт милли автономияһы өсөн оло өгөт-нәсихәт үткәргәндәр, йән атып көрәшкәндәр, әммә… береһе лә ярлы-ябаға түгел бит!»

Ысынлап та, Ғәтиәтулла Бикҡужин хәлле башҡорт булған. Яҡуп ауылында йәшәүсе Нурия Искәндәрованың (1938 – 2012) иҫтәлектәрендә шундай юлдар бар: «Ғәтиәтулла олатайым тәүҙә үҙәге Яҡуп ауылында урынлашҡан 2-се Бөрйән, аҙаҡ Мораптал олоҫтарында старшина булып тора. Уның йылҡылары күҙ ҡыҙырлыҡ ғәләмәт шәп булған. Көн һайын тырантасҡа егелгән атта Урта Бабаларҙан Яҡупҡа йөрөп эшләгән. Ул эшкә килгәндә, юлдарын алдан һепереп ҡуйып, хөрмәтләп ҡаршы алыр булғандар.

Ғаилә хәленә килгәндә, тәүге ҡатыны, өс балаһын ҡалдырып, донъя ҡуя. Өс балаһы өҫтөнә йәш кенә Бибиямал өләсәйемде ала. Унан һуң Яҡуп ауылында бер ҡыҙға күҙе төшөп, икенсе ҡатынлыҡҡа Хәмиҙә өләсәйемә өйләнә. Ике ҡатын менән татыу ғүмер итә Ғәтиәтулла олатай. Бибиямал өләсәйем 12 бала таба. Шуларҙың дүртәүһе иҫән ҡала, ҡалғандары төрлө ауырыуҙарҙан йәшләй үлә. Хәмиҙә өләсәйемдән дә 13 бала тыуа. Шулай уҡ өсәүһе йәшәй, ҡалғандары сабый йә кескәй көйө үлә.

Олатайым күп ерҙәрҙә йөрөгән, күп кешеләр менән аралашҡан. Төрлө халыҡтарҙың ниндәй хужалыҡ төрҙәре менән шөғөлләнеүен күҙәткән. Шуға бәйле, ул тыуған ауылында, Урта Бабаларҙа, беренсе булып картуф сәскән. Ауылдаштары, Ғәтиәт урыҫ булған, урыҫ ашы ашай, тип тәүҙә уның был «ҡылығы»нан көлгән, аҙаҡ, үрмәксенән күрмәксе тигәндәй, үҙҙәре лә сәсә башлағандар. Һөт айырта торған сепараторҙы ла ауылға тәү башлап ул алып ҡайтҡан. Унан күреп башҡалар ҙа һатып алған».

Ике революция, Граждандар һуғышы осоронда башҡорттарҙың милли азатлыҡ яулауы бик ҙур ауырлыҡтар аша бара. Тарих фәндәре докторы, профессор Марат Ҡолшәриповтың «Башкирское национальное движение (1917 – 1921 г.г.)» тигән китабында килтерелгән бер факт, моғайын, Ғәтиәтулла Бикҡужин менән бәйлелер, тигән фаразға урын ҡалдыра: «…представитель Совета уполномоченных Х. Кучуков в своем докладе отмечает, что он был командирован в Бурзянскую волость, где посетил ряд башкирских деревень. В д. Нижне-Бабаларово им был освобожден арестованный милиционерами житель этой же деревни Биккузин, которого обвинили в «контрреволюционной деятельности». Он же организовывал волостные собрания в д. Верхне-Бабаларово, давал разъяснение по поводу Башкирской автономии, образовал волостную милицию, совет».

1920 йылда башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтен ауыҙлыҡлау, уны большевистик сәйәсәт сиктәренә ҡыуалап индереп тонсоҡтороу маҡсатында, Ленин менән Сталин Зәки Вәлидовты, Харис Йомағоловты Мәскәүгә саҡыртып алғас, башҡорттар араһында ризаһыҙлыҡ тыуа. Ғ. Бикҡужин етәкләгән Ҡыпсаҡ-Етерыу кантоны Мораптал олоҫоноң Ҡалта ауылы граждандары йыйын үткәреп, был мәсьәләгә үҙ мөнәсәбәтен белдерә һәм резолюция ҡабул итә:

«Ысын-ысындан пролетар революция – эшсе-крәҫтиән революцияһына Көнбайыш Европа дәүләттәре буржуйҙары тарафынан ярҙам күрһәтелгән поляк буржуазияһының ҡаршы сығыуы беҙҙең асыуыбыҙҙы сикһеҙ ҡабартты. Иманыбыҙ камил, Совет власын быуырға теләп ҡараған Колчак, Деникиндар һәләкәткә осраған һымаҡ, поляк буржуазияһы ла тар-мар ителәсәк. Беҙ РСФСР-ға ҡул һуҙыусыларға ҡаршы йән-тәнебеҙҙе аямай көрәшергә ант итәбеҙ.

Шул уҡ ваҡытта беҙҙе иреккә сығарыусыбыҙ, башҡорт халҡын һәр төрлө йәбер-золомдарҙан ҡотҡарыусы юлбашсыбыҙ Вәлидов иптәштең Мәскәүгә ҡалдырылыуы сикһеҙ борсой. Башҡорттоң ғына түгел, бәлки, бөтә Шәреҡ пролетариатының яҙмышы хәл ителгән ошо бөйөк осорҙа беҙҙең ҡәҙерле юлбашсыбыҙ, Шәреҡ хәрәкәтенең һөйөклө юлбашсыһы Вәлидовты унда ҡалдырыу бөтә Шәреҡ пролетариатының хәрәкәте тамырына балта сабыу булыр ине. Шуға күрә Вәлидов менән Йомағолов иптәштәрҙе һайлауығыҙҙы ҡәтғи талап итәбеҙ. Тик беҙҙең ҡәҙерле Вәлидов һәм Йомағолов иптәштәр генә Шәреҡ пролетариатын яҡты киләсәккә сығара ала.

Йәшәһен Вәлидов һәм Йомағолов иптәштәр һәм Шәреҡтең башҡа сәйәси эшмәкәрҙәре!

Йәшәһен Шәреҡтең революцион хәрәкәте!

Йәшәһен бар донъя революцияһы һәм Өсөнсө интернационал!

Ҡалта ауылы кешеләре: *Т. Бикҡолов, Г. Бикҡолов, Ә. Исхаҡов, Х. Ҡустов, Х. Байгилдин, А. Ишкинин, И. Байгилдин.*
Дөрөҫлөгөн нарыҡлайым.
Ҡалта ауыл Советы рәйесе: *(Бикташ)*
Секретарь: *(Ҡунаҡкужин).*

Ошо тарихи документтарҙан күренеүенсә, олоҫ старшинаһы Ғәтиәтулла Бикҡужиндың Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең аҙағына тиклем көсөргәнешле эшмәкәрлек менән шөғөлләнгәнлеген аңлап була. Н. Искәндәрова иҫтәлектәрендә олатаһының был осорҙағы ғаиләһе тураһында түбәндәгеләрҙе яҙа: «Өлкән улы Төхвәтулланы Граждандар һуғышы осоронда аҡтар, икенсе улын, Ғәфиәтулланы, ҡыҙылдар алып киткән. Шулай итеп, бер өй эсендәге өс кеше өс яҡта һуғышып йөрөгән. Ә Бибиямал, Хәмиҙә өләсәйемдәр ваҡ ҡына балалары менән өйҙә ҡалған». Башҡорт халҡы автономия алыуға өлгәшкәс, Ғәтиәтулла әйләнеп ҡайта. Донъяһын тергеҙер өсөн яңы кантон үҙәге Йылайырға барып, унан ссуда алып ҡайтып, донъяһын рәтләп, мал-тыуарын ишәйтеп ебәрә.

Бер аҙҙан, аҡса әҙерләгәс, ссудаһын түләр өсөн Йылайырға юллана ла шул китеүенән әйләнеп ҡайтмай. Аты ҡайта, үҙе юҡ. Күрәһең, уның күп аҡса менән киткәнен белгән кешеләр артынан барып үлтергәндәрҙер. Бына шулай тамамлана уның ғүмер юлы.

Ә балалары, Ғәтиәтулланы һағынып, йыш ҡына былай тип йырлар булған:

Атайымдан ҡалған бүре толоп,
Яҡаларын һелкеп кем кейер,
Атайым китте, аты ҡайтты,
Арҡаларҙан ҡағып кем һөйөр.

Тәлғәт ШАҺМАНОВ.

Рауил
БИКБАЕВ

Уҙған ғына ғүмер, ҡалған хәтер...

Барлыҡ замандарҙан өҫтөн,
Бар йәмдән ғәзиз йәме –
Әле баҫып торған ерем,
Әле осоп барған күгем,
Әле йәшәгән мәлем.

Йәнем донъяға тик был мәл,
Был ер аша тоташа.
Тик бөгөнгөгә мин хужа,
Тик бөгөнгөгә батша.

Үкендерһә лә үткәндәр,
Унда ҡайтыр әмәл юҡ.
Иртәгәһе көн ҡапҡаһын
Әллә аса, әллә юҡ...

Мин күптән инде көндәлектәр яҙам. Ҡырҡ йылдан ашыу ваҡыт эсендә күргәндәрем-кисергәндәрем теркәлеп барған дәфтәрҙәрем хәҙер бер нисә китап булырлыҡ. Тормошом сәхифәләре тәүге осорҙа онотҡанда бер тигәндәй ҡағыҙ битенә төшһә, ғүмер үткән һайын уларға йышыраҡ иғтибар иттем. Көндәлектәр асылда минең ижадымдың үҙенсә бер мөһим өлөшөнә әйләнде.

Оҙон ғүмер юлымда мин күпме ғәзиз туғандарымды, серҙәш дуҫтарымды, тоғро юлдаштарымды юғалттым. Ә бына көндәлектәрем һәр ваҡыт янымда. Был серҙәштәремдең һис ҡасан хыянат иткәне юҡ. Шиғри ижадымда, мәҡәләләремдә, ғилми хеҙмәттәремдә,

сығыштарымда әйтеп йәки яҙып өлгөрмәгән һүҙҙәремде мин бына ошо дәфтәрҙәремә яҙып барҙым. Уларҙа төрлө ваҡиғалар уртаһында яҙмышыма уйылған уйланыуҙарым, мине һоҡландырған матурлыҡтар, инандырған изгелектәр, табындырған тоғролоҡтар, һыҙландырған ғәҙелһеҙлектәр, яралаған хыянаттар үҙҙәренең эҙҙәрен ҡалдырған. Юғалтыуҙарым да, табыштарым да, моңһоу шатлыҡтарым да, ҡәҙерле һағыштарым да, йөрәгемдең тибеше, яҙмышымдың һулышы, заманымдың яңғырашы булып, ошо көндәлек биттәрендә нисәмә йылдар буйы тупланды.

Ижадсылар – яңғыҙлыҡҡа дусар ителгән ғазаплы йәндәр. Ғүмерҙәренең күпселек көндәрен һәм төндәрен улар, аҡ ҡағыҙға эйелеп, бер үҙҙәре үткәрә. Уныһы шулай. Ләкин ижадсылар кешеләр менән иң тығыҙ бәйләнештә йәшәүселәр түгелме ни? Улар күпме уҡыусылары, күпме тамашасылары менән аралашыу, фекер уртаҡлашыу, серләшеү бәхетен күреп йәшәй. Ысынлап та, «мин ғүмерем буйы яңғыҙ булдым, мин ғүмерҙә яңғыҙ булманым». Ҡайҙарҙа ғына йөрөһәм дә, иң яңғыҙ саҡтарымда ла янымда ғүмерем сәхифәләре – көндәлектәрем.

Яңыраҡ шиғыр тураһында «тиҙерәк баҫылһын тип яҙылмай ул, йөрәк баҫылһын тип яҙыла» тигәйнем. Көндәлектәргә лә йөрәк баҫылһын тип тотонаһың, улар менән серләшеп, күңелеңде бушатҡан һымаҡ булаһың. Ләкин был аралашыу күңел бушлығына килтермәй, киреһенсә, яңы көс өҫтәй, ышанысты арттыра, шик-шөбһәләрҙе тарата, алдағы юлдарыңды, маҡсаттарыңды нығыраҡ асыҡлай.

Донъя булғас, барыһы ла була. Шулай ҙа һәр кемдең үҙ яҙмышы. Ә бына был көндәлектәрҙә минең яҙмышым, минең ваҡытым, минең донъям. Ләкин улар замандаштарымдың күргәндәренән айырылғыһыҙ.

Был яҙмаларҙа беҙгә тиклем уҙған дәүерҙәр тураһында ғорурланып һәм һыҙланып уйланыуҙарым да, киләсәгебеҙ хаҡында борсолоуҙарым да теркәлгән. Ләкин үҙәктә, әлбиттә, үҙемдең күргәндәрем, минең заманым, күбеһендә үҙем ҡатнашҡан, ҡайһыларына мин шаһит булған хәл-ваҡиғалар. Һәр кем бөгөнгөһөндә йәшәй, бөгөнгөлә һынала. Үткән тарих та, киләсәк яҙмыш та бер-береһенә тик бөгөнгө аша ялғана.

Дәүерҙәрҙе дәүерҙәргә һүҙ бәйләй, хәтер тоташтыра. Кешеләрҙе бер-береһенә һүҙ яҡынайта йәки һүҙ ситләштерә. Көндәлектәремдә – хәтер дәфтәрҙәремдә йылдар буйы йыйылған һүҙҙәрҙең кескәй бер өлөшөн, яңы фекерҙәштәремде табырмын, тигән өмөт менән «Ағиҙел» уҡыусыларына тәҡдим итәм. Ул яҙмалар менән тулыраҡ танышырға теләгәндәргә шуны ла әйтәйем: ике том булып сыҡҡан көндәлектәремде китап магазиндарында табырға мөмкин.

13.10.2012.

14 ноябрь 1968 йыл.

**Иртә менән йөрөп керҙем. Урмандың һәр миҙгелдә үҙенсә матурлығы бар. Уның аҡ ҡар ябынып ултырған сағы айырыуса матур. Бөгөн ағастар нәҡ бына шулай. Ҡыуаҡтар бөтөнләй ап-аҡ. Ҡайындар ҡалтырағанда уларҙан аҡ саң бөркөлөп ҡала. Имәндәр ҡулдарындағы ҡарҙы тиҙ генә ысҡындырып бармай.*

28 февраль 1969 йыл.

**Институт Фрунзе, 40-тан Пархоменко урамына, баҙар янына күсә. Йома көн башлап телселәр менән беҙ күсендек. Ким, Сафуанов, мин бер бүлмәлә.*

5 – 25 апрель 1969 йыл.

**Мәскәү. Килгәс тә Казанцевтар менән зоопаркта. Күбеһе таныш, күңелһеҙ. Иң иҫтә ҡалғаны – йыландар, кеҫәрткеләр бүлеге. Быяла аҫтында йылан йоҡлап ята йәки аҙ ғына ҡыбырҙап ҡуя. Уның эргәһендә бәләкәй генә матур аҡ сыҫҡандар арлы-бирле яй ғына йөрөп яталар. Улар – йыландың ризығы. Уларҙы йыланды туйҙырыу, аҫрау өсөн быяла аҫтына бергә бикләгәндәр. Улар – обречены. Йылан – уларҙың әжәле. Әжәлде үҙ күҙем менән күрҙем. Баш өҫтөндәге ҡылыс. Шул уҡ хәл кеҫәрткеләр, крокодилдар йәшәгән ерҙә: бында баҡа һ.б. йән эйәләре үҙҙәренең әжәлен көтөп ята.*

Бүреләрҙе, төлкөләрҙе ашатҡан ваҡытҡа тура килдек. Бизон, зубрҙар ҡарап торғанда үтә ҙур булһалар ҙа, ҡараштары бик аҡыллы, йыуаш кеүек.

**Сиркәү тәреһенең өҫтөнә ҡунған яңы тыуған ай. Сәйер тойғолар уята. Сит илдә ҡаңғырып йөрөгән башҡорттоң (һуғышта, һөргөндә һ.б.) ошо картинаны күреп, ниндәй уйҙарға төшмәүе мөмкин. Был деталде тик мосолманға ҡарата ғына файҙаланып була.*

**Икенсе йыл (1968, 1969) ләйсән ямғырына Мәскәүҙә мансылам, күк үләнде Мәскәүҙә күрәм. Тик быларҙың матурлығын яландағыса күреп булмай. Шаулы ҡалала күк үлән нисектер етем кеүек. Ул ер тишеп донъяға сыҡҡан да ҡояшҡа баға һәм янынан үкереп үткән машиналар, поездар тауышынан тертләй, ер менән бергә ҡалтырана һәм кире ергә керерҙәй була һымаҡ. Ун көндән һуң Мәскәү ялҡыта башлай. Уның ритмына күнегеү өсөн күберәк кәрәктер. Шау-шыу айырыуса арыта.*

**Берәүҙәрҙең өйөндә йәшәгән маймыл. Уларға ҡунаҡҡа килгән негр. Маймыл уны ҡосаҡлап ала һәм мәжлес буйына уның иңенән төшмәй. Хайуандағы ил тойғоһо. Шиғыр итә алһаң – иҫ киткес ситуация һәм мәғәнә!*

6 май 1969 йыл.

**Төштә лампочка һүнде. Һис яндырып булмай. Был төштө нимәгә юрарға икән?*

Тағы ла төш. Айҙар биш-алты ҡат кейенгән. Бер ҡат ҡара, бер ҡат

аҡ. Ул сапандарҙы саҡ-саҡ һалдырҙым. Кешегә йылдар ҙа шулай урала бара инде. Бер ҡара, бер аҡ. Тик был символды улыңда күреү ҡот осҡос.

**Ҡунаҡбайҙан Бикбаев Ҡужахмәт бабайҙың хатынан алынған минең шәжәрә (дөрөҫөрәге, бер олоно ғына): атайым Төхфәт – ҡартатайым Шәрәфи – артабан Мөхәммәтша – Хәсән – Ҡотлоәхмәт – Бикбай – Аҫылгәрәй. Аҫылгәрәй бик даһи ҡарт булған, бер туғаны Туҡ буйында ултырған, тип яҙған. Бикбай ҡарт менән Табулды ҡарт бер туған булған, тиелгән. Ҡунаҡбайҙа нигеҙҙә шул ике фамилия: Бикбаевтар менән Табулдиндар.*

Июнь 1969 йыл.

**«Ностальгия» йыл башынан бирле «Ағиҙел»дә номерҙан номерға күсеп килде. Шәп яҙылған һ.б. һүҙҙәр байтаҡ булды. 8-се номерға конкрет килеп терәлгәс, өрктөләр – үтмәне. Шиғырҙар ғына ҡалды.*

11 сентябрь 1969 йыл.

**Айҙарҙы мәктәпкә алып барғас, баҡсала йөрөнөм. Төнө буйы тирәктәр илаған тиерһең. Башҡа ағастарҙың япраҡтары ҡоро. Ә тирәктәр үҙенең тирә-яғындағы ваҡ ҡыуаҡтарҙы еүешләп бөткән, асфальтты дымландырған. Төнө буйы тирәктәр илаған. Көндәр һыуытып китте. Йәй буйы ямғырҙан һуң августың икенсе яртыһы, сентябрь башы бик матур торғайны. Хәҙер – көҙ. Поэма ҡыйын яҙыла.*

13 сентябрь 1969 йыл.

**Уйҙарҙы ҡағыҙға төшөрөүе ҡурҡыныс. Уйлағанда улар балҡып тора, ҡулға алһаң, һүнгән ҡуҙ һымаҡ төҫһеҙләнә.*

**Йәшен менән йәйғорҙо бергә ҡушһаң ине.*

21 апрель 1970 йыл.

**Дилми менән миңә Ғ.Сәләм премияһын биреү тураһында ҡарар баҫылып сыҡты. Отзывтар ҙа, рецензиялар ҙа байтаҡ булғайны. Былар бөтәһе лә яуаплылыҡ өҫтәй.*

29 сентябрь 1970 йыл.

**Күҙ йәше кеүек саф, сабый күңелдәге кеүек ихлас поэма яҙғы килә. Һис бер ҡапараныуһыҙ, иң тәбиғи һүҙҙәр табып, иң ғәҙәтиҙең бөйөклөгөн асһаң ине. Ошолай хыялланып бер нәмә яҙған булам. Ауылдағы тәьҫирҙәр, ҡайтыу, айырылышыу, тамырҙарым. Ауыл яҙмышының ил яҙмышына үрелеүе.*

15 октябрь 1970 йыл.

**Иртә менән Киевҡа килеп төштөк. Һыуыҡ. Юлда боҙ туңған. Икмәк-тоҙ менән ҡаршылау. Кагарлик (Ҡәһәрлек), Канев (Ҡан һүҙенән). Ҡанлы замандарҙан ҡалған.*

Каневта Гайдар музейы. Мальчиш-Кибальчиштағыса – тау башына күмелгән. Т. Шевченконың ҡәбере ҡаланан ситтә, Днепр ярында. Музей, һәйкәл һәм бөтөн был урындар тетрәткес тәьҫир итә. Фашист

пуляһы Тарастың һәйкәлен 17 ерҙән уйған. Музей бик һәйбәт ойошторолған. (Черкасс өлкәһе).

**Архитектура. Һәр таштан, һәр ағастан матурлыҡ таба белеү. Ябай һәм бай фантазия. Ситән менән бүленгән гардероб. Ағастан төрлө биҙәктәр. Таш мозаика.*

Ауылдар төҙөк. Өйҙәр иркен һалынған.

19 февраль 1971 йыл.

**30-35 йәш. Кешенең һынылыш осоро. Күңелдең бушап ҡалған сағы. Бер ҡатлы табыныу юғалған. Оло идеалдарҙың ваҡ яҡтары ла күренеп тора. Ҡурҡыныс миҙгел. Таймай ғына, һөрлөкмәй генә, аҙашмай ғына, йондоҙоңдо юғалтмай ғына нисек атлап үтергә? Эштең олорағын, маҡсаттың бөйөгөрәген нисек табырға? Күңелдәге юшҡынды нисек йыуып төшөрөргә? Аҙыры аҙылған да бит, яҙыры яҙылмаған. Биткә бәхеттең күләгәһе генә төшә. Шул уҡ боронғо бер юл ғына ҡала – яратҡан эшеңдә яныу. Тик уныһы ла биҙҙереп тора.*

14 апрель 1971 йыл.

**«Улдарыбыҙҙа беҙҙең тормош ҡабатланыр…» Был фекергә ҡул ҡуя алмайым. Аталарының хаталары, боҙоҡлоҡтары, ялҡаулыҡтары һ.б. шулай уҡ улдарында ҡабатланырға тейешме? Һис ҡасан ҡабатланмаҫ тормош менән янырға кәрәк. Башҡалар яҙмышы башҡаса балҡыһын.*

26 май 1971 йыл.

**Тойғоноң, һөйөүҙең һәм, ғөмүмән, ике кеше араһындағы эмоциональ мөнәсәбәттәрҙең приливтары һәм отливтары (ташыуҙары һәм һайығыуҙары) була. Тик быһың ритмикаһын һаҡлауы ғына ҡыйын. Һиндәге ташҡын ундағы һайығыу менән тура килһә лә ҡыйын, ике ташҡын бергә ҡушылһа ла – ҡурҡыныс.*

**Ташҡын булып тындың. Яҙмышым ярында сүп-сар араһынан, ылымыҡтар эсенән һин ҡалдырған гәрәбәләрҙе эҙләйем.*

28 май 1971 йыл.

**Ташбаҡа. Имәнес тә, ҡыҙғаныс та. Ғүмер буйы үҙенең ҡабырсаҡ-төрмәһендә. Уныһыҙ йәшәй ҙә алмай, унан ҡотола ла алмай. Кешенең дә ғүмер буйы иңенән төшмәгән ошондай ҡабырсағы – төрмәһе була.*

8 август 1971 йыл.

**«Ерәнсә сәсән» әкиәтенән:*

…Яҡыныраҡ барып ҡараһам, өйҙө ете башлы аждаһа уратып ятҡан. Уның бер башы уҫалланып ажғырып тора. Икенсеһе кешене, өсөнсөһө аяҡлы малды йота, дүртенсе башы көй уйнай, бишенсеһе таҡмаҡ әйтә, алтынсыһы ел кәрәк булһа – ел, һыу кәрәк булһа – һыу өрҙөрөп тора, етенсеһе менән тын ала – кешене йәки малды икенсе, өсөнсө баштарынан йотторорға тыны менән тартып килтерә. (Халыҡ хатта аждаһаны – дөрөҫө дейеүҙе – йыр-моңһоҙ ҡалдырмай. Ләкин иң

мөһиме был ғына түгел әле.) Артабан: Мин йә баш, йә мал тинем дә, ҡылысымды тотоп, аждаһаға ташландым. Уңлы-һуллы сапҡылай торғас, аждаһаның биш башын ҡыйратып төшөрҙөм, көй уйнай торған башы менән таҡмаҡ әйтә торған башы ғына ҡалды. Ғәжәп символика! Зыянлы баштар киҫеп бөтөлә. Ләкин кеше дошманының да йыр-моңона ҡылыс сапмай.

23 август 1971 йыл.

М. Харистың комсомол билетын пуля тишеп үткән.

30 август 1971 йыл.

**Ғәжәп зифа буйлы, ҡыйғыс ҡашлы бер ҡыҙ. Ҡыҙығып ҡарағайным – бер күҙен тотош аҡ ҡаплаған. Тетрәп киттем. Минең дә ике күҙемде бер юлы ап-аҡ шекәрә ҡаплағандай булды, күҙ ҡабаҡтарым ауырайып китте. Күҙҙәремдән саҡ-саҡ шәкерәне һыҙырып алып, керпектәремде күтәрҙем.*

**Троллейбуста. Бында һине иң-иң ныҡ аңлаған бер йән эйәһе бар кеүек. Һин уның арттараҡ ҡына, яҡында ғына ап-аҡ күлдәген күрептойоп та тораһың, тик әйләнеп ҡарамайһың. Аҡ шәүлә әкрен-әкрен һинән алыҫлаша бара һәм ниндәйҙер туҡталышта төшөп ҡала. Хәҙер троллейбус эсе буп-буш, ҡараңғы, өҫтөңә ниндәйҙер имәнес бәндәләр ауып бара.*

22 сентябрь 1971 йыл.

Трамвай юлына һыйынып үҫкән саңлы ромашка. Ул – мин.

5 – 20 ноябрь 1971 йыл.

**Аяҡты бешереп, йөрөй алмай өйҙә яттым. Ялҡытты. Шуныһы һәйбәт: иҙәндә түшәлеп ятып, Бабичтың беренсе бүлеген яҙып бөтөрҙөм.*

14 декабрь 1971 йыл.

**Атай йәшен уҙҙым, 34-кә аяҡ баҫтым. Йәш ҡар яуа. Донъя йомшаҡ, саф. Бөтә нахаҡҡа әрнеүҙәр, рәнйеүҙәр, яраны ышҡыған һағыш ошо ҡар аҫтында ҡала кеүек. Мин үҙем дә ҡарға күмелеп йөрөйөм, ағастар араһында ҡалырмын да яҙын йәш имәндәр менән күкрәп япраҡ ярырмын кеүек. Эй, хыялдар… Юҡ, берәһе лә ҡар аҫтында ҡалмай. Күмелһә лә, шатлыҡтарым араһында яҙға ғазаптар дегәнәк кеүек һерәйеп ҡалҡыр. Ни эшләйһең, сәнскәкле дегәнәктән дә бал ҡорттары бал йыя бит. Һағыштарҙан һығылып тамған шатлыҡтар…*

22 март 1972 йыл.

**Оло юл менән йәнәшә һәр ваҡыт тиерлек арба юлы, йәйәүле һуҡмаҡтары һуҙылып бара. Уларҙың үҙ йәме бар. Бында аулағыраҡ, тынысыраҡ, тәбиғәткә яҡыныраҡ. Әҙәбиәттә лә шулай. Оло талант-тар, генийҙар һалған үҙәк юл-магистраль бар. Әҙәбиәттең төп йөгө*

ошо юлдан аға. Пушкин, Гоголь, Толстой, Горький, Блок һ.б. бына ошо юлды киңәйтеп, нығытып, уны киләсәккә һуҙа. Тик ошо магистраль менән йәнәшә күпме һуҡмаҡтар, ауыл юлдары бергә килә. Пушкинды күпме ҡәләмдәштәре уратып алған. Гений янында улар бер ни тиклем төҫһөҙләнеп тә ҡалалар. Ләкин уларҙың һәр береһе – ғәжәп үҙенсәлекле поэтик характер. Йәки Блок һәм уның замандаштары. Йәки Олешаның яҙмышы. Күпме һиҙгерлек, үткер күҙ, сос ҡолаҡ был яҙыусыла. Поэтик деталь оҫтаһы. Уның оло юл янынан һуҙылған ғәжәп ҡыҙыҡ һуҡмағы бар. Ул оло юл менән киҫешмәй, уға ҡаршы килмәй, ошо төп йүнәлештең тирә-яғын йәмләп, байытып, яңы ауаз, буяу өҫтәп, бергә һуҙыла. Оло юлды ғына түгел, ошо һуҡмаҡтарҙы ла барлап сығырға кәрәк беҙҙең әҙәбиәттә лә. Ошондай «икенсе дәрәжә» һаналған яҙыусыларҙан тыш әҙәби процесты тулы күҙ алдына килтереү мөмкин түгел.

25 – 31 март 1972 йыл.

**Ҡазан. «Татарстан» гостиницаһы. № 421. Бабич тураһында ла, башҡорт әҙәбиәтенә ҡағылышлы ла йүнле материал табып булманы. Исҡужин архивын бирмәнеләр. Эшкәртелмәгән хәлдә, имеш.*

25 апрель 1972 йыл.

**Йәшен ялтлағандан һуң кеше бер ни тиклем ваҡыт һуҡрайғандай булып ҡала. Йәшен булып ялтлауыңа күпме ваҡыт үтте, ә минең күҙҙәрем һаман элекке хәленә ҡайтмай. Ә күктә шул йәшендән тороп ҡалған осҡон кеүек яңғыҙ яҡты йондоҙ балҡый.*

24 май 1972 йыл.

**Өҙөлөп-өҙөлөп һыҙланы бәхеткә сарсаған йөрәгем. Шул тиклем аулаҡ таңдар. Ағастар бәхет өсөн генә йәшәргән. Донъя бәхеттең күҙҙәренә мөлдөрәмә ҡарай. Ошондай таңдарҙа күкрәктән өтөп алып бәхеткә һыуһата, ташҡан даръяларға ташланырһың.*

6 июнь 1972 йыл.

Поэзияның йыллыҡ отчеты. Минең һәм Марат Минһажетдинов докладты. Һәйбәт үтте кеүек. Дүрт сәғәт буйы фекер алышыу барҙы. Байтаҡ кеше һөйләне. Тешләрәк тәнҡит ҡайһы бер кешеләрҙе өркөттө, әлбиттә. Әммә принципиаль һөйләшеүгә халыҡ күптән һыуһаған.

22 июнь 1972 йыл.

**Берәй музыканы тыңлап, уйланып ҡалһам, минән ҡайһы саҡта: «Был кем әҫәре, әйт әле?» – тип һорайҙар. Матурлыҡтың исемен ҡайҙан белеп бөтмәк кәрәк? Матурлыҡҡа һоҡланыу өсөн уның исемен белеү ҙә мотлаҡмы ни? Был – наҙанлыҡты аҡларға тырышыу түгел. Ерҙә мин күпме аҡландарҙы, тауҙарҙы, тоғайҙарҙы күреп һоҡландым. Уларҙың күбеһенең исемен белмәйем. Мин һоҡланған таңдарҙың,*

эңерҙәрҙең, томандарҙың, ямғырҙарҙың да һәр береһенең исеме юҡ. Көн һайын урамдан күпме буй-һындың гүзәллегенән йөрәгем тетрәп, таң ҡалып атлайым. Уларҙың исемен белмәү генә минең һоҡланыуымды баҫа алмай, бәлки, көсәйтә генәлер ҙә әле.

12 сентябрь 1972 йыл.

**Морг кеүек һалҡын йортта мәйет кеүек хәрәкәтһеҙ яңғыҙ ҡарт. Уны хатта эҙләп килеүсе лә юҡ.*

**Мин этика көтһәм, ул эт икән.*

**Иң аҫыл көндәрен таш ҡала йотҡан, таш ҡала отҡан, тотҡан, тотҡон.*

2 октябрь 1972 йыл.

**Әхмәт Лутфуллин портретты яҙып бөтөрҙө. Мәскәү күргәҙмәһенә ебәрмәксе. Художниктың эше тураһында беҙ (һәр хәлдә, мин) ни тиклем аҙ беләбеҙ.*

11 октябрь 1972 йыл.

**Лесопарк районында яҙыусылар йәш кенә шыршылар, ҡарағайҙар ултырттыҡ. Был ағастарҙың ғүмере менән берәү ҙә ярыша алмаҫ, әлбиттә. Тик берәй генә әҫәребеҙ булһа ла ошо ағастарҙан оҙағыраҡ йәшәһен ине.*

28 ноябрь 1972 йыл.

**Шиғыр кисәһе (17 ноябрь, Актерҙар йорто) күңелле генә үтте. Марат менән алып барҙыҡ. Эпиграммаларҙың байтағы уңышлы кеүек. М. Кәрим дә килгәйне. Бик һәйбәт уҡыны. Тимер ҙә һәйбәт тәьҫир ҡалдырҙы. Ә күберәге – иҫкене уҡынылар. Сифат мәсьәләһе уртасараҡ килеп сыҡты. Быйыл ниңәлер былтырғынан халыҡ кәмерәк булды.*

3 ғинуар 1973 йыл.

**Яңы йыл алдынан бөтә ағастар бәҫкә күмелгәйне. Бәҫ – ағастың ҡышҡы көмөш япрағы кеүек. Бөтә тирә-яҡта иҫ киткес серлелек, матурлыҡ.*

**Йылы ел (яҙғы ел) тәҙрәнең боҙон ҡыра.*

25 ғинуар 1973 йыл.

Йәш буранды ҡосағыма алып,
Йәш ҡарҙарҙа ярһып туланым.

30 ғинуар 1973 йыл.

**Беҙҙең ауылдан күсеп килгән апайҙың һүҙҙәренән: «Форточканан башымды сығарам да урамға ҡарап илап тик торам»; «Һарыҡтарымды, һыйырымды һағынам»; «Алма алып ҡайта ла ике балаһына ашата ла бөтөрә. Шуға исмаһам кеше саҡырһа. Һис кеше саҡырмайҙар. Улай нисек йәшәйҙәрҙер инде, аптырайым».*

9 февраль 1973 йыл.

**Кисә кис Бабичтың икенсе бүлеген яҙып бөтөрҙөм: 1914–1916 йылдар. Ижадының төп өлөшө тиерлек. Ат арыһа, ҡыуып ҡал, тигәндәй, кисә 8 бит (машинкала ярты табаҡҡа яҡын) яҙып ташланған.*

5 март 1973 йыл.

**Ырымбурҙа "Оренбург" гостиницаһында туҡтаным.*

Һуңғы ҡайтҡандағы кеүек, әле лә күктә еп нәҙеклек кенә йәш ай ҡаршыланы. Ул Каруанһарай манараһына ҡуна алмай Ырымбур күгендә ҡаңғырып йөрөй кеүек.

30 ноябрь 1973 йыл.

Ғилми советта – Бабич. А. Ҡудаш "хәтәр" сығыш яҙып, әҙерләнеп килгән. Һуңғы йылдарҙағы иң ҙур хеҙмәте. Миңә асыу түгел, Бабичҡа үс. Тикшереү күсерелде.

1 апрель 1974 йыл.

**Яҙғы шаярыуҙар, алдашыуҙар көнө. Кеше йыл һайын бер генә көн алдашып, ҡалған көндәрҙе тик дөрөҫтө генә һөйләһә, ниндәй ғәжәп булыр ине. Алдашыу көнөн, хәйер, уйлап сығараһы ла юҡ. Көн һайын күпме кеше күпме алдаҡ һөйләй. Ә шулай ҙа кеше "дөрөҫлөк көнө" тигән йола уйлап сығармаған. Сөнки һинең һәр көнөң бары дөрөҫлөктән генә торорға тейеш.*

6 апрель 1974 йыл.

**"Тихая поэзия" һ.б. тураһында Мәскәү матбуғатында байтаҡ һүҙ булып алғайны. Яңыраҡ "ЛГ"-ла С. Наровчатовтың "бөгөнгө йәш шағирҙәр – лидерһыҙ" тигәнерәк фекере күренеп ҡалды. Һуңғы йылдарҙа поэзияла байтаҡ үҙгәрештәр булды. Хәҙер әҫәрҙәр, ысынлап та, бер тигеҙерәк, шиғри мөхит тынысыраҡ, дөрөҫөрәге, һүлпәнерәк. Тағы ла шунылы: элегерәк (алтмышынсы йылдарҙа, мәҫәлән) әҙәбиәткә үтә алмай йонсоған бер төркөм кешеләр бөгөн һин дә мин шағир исеме күтәреп йөрөй башланы. Һәләтте үгеҙ елкәһе менән компенсировать итергә тырышыу. Былар барыһы ла бөгөнгө сифатҡа насар тәьҫир итә. "Уртаса коэфициент"ҡа һуктырыу көсәйҙе. Тематиканан сығып, талантты мөтәшағир менән йәнәшә, хатта тигеҙ ҡуйыу бәләһе.*

25 июнь 1974 йыл.

**Таллин, Палдиски. Палдискиҙа Салауат исеменә бәйле, шул осорҙан ҡалған бер нәмә лә һаҡланмаған тиерлек. Бары тик ер, диңгеҙ, утрауҙар, таштар.*

Таллиндың бер ҡосаҡ киңлеге урамдары, Вышгородтан күренеш.

Аҙым һайын сәскә һаталар. Таллин Риганан да үҙенсәлеклерәк кеүек, кешеләре лә, урамдары, йорттары ла. Эстон ҡалаһы икәне айырыуса нык күҙгә ташлана.

Салауат һәм Михельсон. Михельсон – эстон, элекке крепостной, тиҙәр (тарих музейенең сотрудниктары әйтеүенсә). Башҡортостанды

ҡыра, яндыра. Яҙмыш Салауатты Эстонияла ыҙа сиктереп, үлемгә килтерә.

29 июнь 1974 йыл.

**Ҡаршылағы ағастарҙа ҡайһы бер көндө тейен уйнағаны күренеп ҡала. Илһам да шул тейен кеүек. Ҡайһы саҡта көтмәгәндә килеп, бөтә эштәреңде, пландарыңды ҡыйрата. Ә башҡа бер ваҡытта күпме көтһәң дә килмәй. Илһам ғына көтөп ултырған шағир тейен көтөп ултырған һунарсы кеүек. Эҙләргә, эҙләргә. Тейен эҙләгән һунарсы затлыраҡ кейеккә килеп осрап ҡуя ҡайсаҡ.*

17 – 24 июль 1974 йыл.

**Нәжип Асанбаев, Рәми Ғарипов менән Илеш районында (барыһы ла – айырым блокнотта). Илеш – ил һәм эш тигән ике бөйөк һүҙҙән тора. Илештә бөтә ил эштә. Бөгөнгө генә түгел, киләсәктең офоҡтары ла балҡып китә был бейеклектәрҙән. Ауыл тураһындағы бик күп иҫке төшөнсәләрҙең емерелеүе. Әҙәбиәт һәм тормош тураһындағы уйланыуҙар. Аҙ йөрөйбөҙ, аҙ күрәбеҙ. Халыҡ тигәнде тар аңлау, тар күреү бәләһе. Илеш тә башҡорт йөрәгенең ҡайнар бер өлөшө.*

9 август 1974 йыл.

**Милли йөҙҙө юғалтыуҙар ғына түгел, уның ҡайһы бер һыҙаттарын юғалта алмауҙан ҡурҡырға кәрәк. Мәҫәлән, наҙанлыҡ, ярлылыҡ, сикләнеп йәшәү һ.б. – былар барыһы ла милли тормошобоҙҙоң иң үҙенсәлекле яҡтарынан түгел инеме? Шул һыҙаттарҙы юғалтыу арҡаһында күпме яңы матурлыҡтары асылды халыҡтың. Йәки әҙәбиәттең милли үҙенсәлектәрендәге ҡайһы бер артҡа һөйрәүсе, сикләүсе моменттәр, мәҫәлән, фольклор стихияһынан сыға алмау, тар төбәктә тапаныу, прозалағы статичность, күп һүҙлелек, нәҫерлелек, ғөмүмән, һәр жанрҙа ла уҡыусы артынан эйәреү, уның йомшаҡлығын белеп уйнау, ҡыланыу – бындай “милли” сифаттарҙан арынмаған булһа, әҙәбиәт ни тиклем күпте юғалтыр ине. “Милли” ул “һәйбәт” тигәндең синонимы түгел, ғәжәп ҡатмарлы һәм һәр саҡ хәрәкәттәге төшөнсә.*

13 август 1974 йыл.

**Йыһат менән оҙаҡ һөйләшеп йөрөнөк. Ең һыҙғанып эшләп ултыра. Һөйләүе буйынса, бик ҙур эштәргә тотонған. Ҙур пландар менән, алыҫҡа ҡараш ташлап йәшәй.*

20 август 1974 йыл.

**Ғариф Ғүмәр ағай 83 йәшендә вафат булды. Табутта тыныс, йылмайып ҡына ял иткән кеүек ята. Табуттағы сәскәнән сәскәгә ҡунып, иңкеш осоп йөрөй.*

27 август 1974 йыл.

Ғәли ҡорҙаш Ильясовтың үлеүе тураһында уҡып, ышанмай торҙом.

Яңы эштең айышына төшөнөп эшләй башлағанда, йәшәүҙең мәғәнәһен аңлап йәшәй башлағанда ғына…

16 – 22 сентябрь 1974 йыл.

**Баймаҡта әҙәбиәт аҙналығы. Ете кеше. Ете көн. Иҫке Сибай, Таллыбай, Төрөкмән, Юлыҡ, Йомаш, I Этҡол (Ямаш), Ярат, Темәс, тағы ла Күсей, Әбделкәрим, Нигмәт, Таулыҡай һәм Баймаҡ. Бик тығыҙ программа. Иң теңкәгә тейгәне – ямғыр. Тубыҡтан батҡаҡ (тулыраҡ айырым дәфтәрҙә).*

5 – 7 октябрь 1974 йыл.

**Бөрйәндә. Шүлгән мәмерйәһе. Балҡып торған көҙгө көн. Ҡаялар (айырым дәфтәрҙә).*

Ҡыңғыраулы аттар. Ғүмер буйы уның тауышынан айырыла алмай. Иҫтәлектәр – ошо ҡыңғырауҙар кеүек. Һәр саҡ бергә сыңлай.

15 октябрь 1974 йыл.

**Көмөш ҡыңғырау кеүек ҡойоп ҡуйған матур шиғырҙар. Тик уларға бер нәмә генә етмәй – телдәре юҡ. Шуға ла улар йәнһеҙ, өнһөҙ. Улар телһеҙ кеше менән бер.*

29 ноябрь – 20 декабрь 1974 йыл.

**Мәскәүҙә, Добролюбова, 9/11, комната 125. Ленин библиотекаһы, Рерих күргәҙмәһе, Литинститут (Евтушенко менән осрашыу).*

28 ғинуар 1975 йыл.

**Прозаның һәм поэзияның йыллыҡ йомғаҡтары буйынса һөйләшеү. Әнүр менән минең доклад. Иртәгеһенә – йәштәр семинары (Мәүлит, Зөбәржәт, Гөлшат, Самат Фәйзуллин, аҙаҡ Салауат Рәхмәтуллин, Земфира). Йәштәр барыбер аҙ килә, ағым бик шыйыҡ, өмөтлөләр һирәк. Докладты маҡтаусылар күп булһа ла, дошмандарым артҡанын һиҙәм. Артта башҡаса һөйләйҙәр, шыш-быш.*

21 февраль 1975 йыл.

**Институтта Ғүмәров Исхаҡ Идрисович менән осрашыу. 1911 йылғы, Баймаҡ районынан, һуғышҡа тиклем үк Фрунзе исемендәге хәрби академияны бөтөргән. Полковник. Һуғыштың башынан аҙағына тиклем фронтта. Полк командиры, дивизия штабы начальнигы. Һуңғы батырлығы – Гитлерҙың бункерен алыу, тәүге парламентерҙар менән һөйләшеү. Бай биографиялы, бай күңелле шәхес. Һуғышты белгән яҙыусы өсөн бынамын тигән роман геройы. Поэма яҙырлыҡ.*

Человек – чело века.

15 март 1975 йыл.

**Благовар районында (Н.Мусин, Р.Ғәлиев). Тәүге сығыш "Октябрь"ҙә, Күсәрбай ауылында клуб (50-се йылдар клубы) тулы, күбеһе йәштәр. Колхоз алдынғы, РСФСР байрағын алған. Һөтсөлөк комплексы төҙөлә.*

Ауыл ҙур, ике ҡатлы гостиница, универмаг. 1-се секретарь – Дәүләтшин Әхмәт Йыһаншинович.

19 март 1975 йыл.

**Был сәйәхәттә М. Кәрим ижадында, дөрөҫөрәге, шиғриәтендә үҙем өсөн яңы яҡтар астым һәм уның көсөн, кешелеклелеген тулыраҡ аңлай төштөм кеүек. Рафаэль Ғәлиев уны ғәжәп үҙенсәлекле башҡара, улай ғына түгел, үҙенсә аңлата, күрһәтә. Беҙ шиғырҙарыбыҙҙы бигерәк уҡый белмәйбеҙ икән шул.*

Сынташтамаҡ тигән урын – һынташ һүҙе ҡалған.

20 март 1975 йыл.

**Ауыл характеры, һәр ауылдың ҡабатланмаҫ үҙенсәлеге. Бына кисәге Яныш, Шырлыҡ ауылдарында халыҡ клубҡа ниндәй дәррәү йыйылды, зал шығырым тулы, һәр һүҙҙе йотлоғоп тыңлайҙар. Ә бына һуңғы кисә – Ҡашҡалаша ауылында. Зал да тулы түгел, халыҡты ла ҡуҙғатыуы ҡыйыныраҡ. Эш һәр ауылдың үҙ характерында ғына түгел, бында тәрбиә, традицияны үҫтереү кеүек эштәр ҙә мөһим.*

15 май 1975 йыл.

**"Кеше йылы" тигән цикл кеүек әйбер бер формаға килгәндәй булды. Әгәр шулай тип атарға мөмкин булһа, мин был шәлкемде шиғри симфония тип атар инем. Былай тип әйтеү, әлбиттә, шапыртыуға тарта. Ләкин цикл менән симфония араһында бик күп уртаҡлыҡ бар. Төрлө вариацияларҙа үҫә барыусы үҙәк фекер, үҙәк идея – төп үҙенсәлек шунда.*

25 – 30 май 1975 йыл.

**Сыуашстанда башҡорт әҙәбиәте көндәре. Әсхәт Мирзаһитов, Ғ. Рамазанов, М. Кәримов, Ә. Атнабаев, А. Филиппов, Ә. Таһирова, мин. Артистарҙан Р. Хазиева, А. Хәлфетдинов, В. Килмөхәмәтов, Л. Әхмәтйәнова, Ф. Арыҫланғолов. Бик ихлас ҡаршыланылар. Осрашыуҙар, һөйләшеүҙәр һәйбәт, яҡшы кимәлдә үтте. Халыҡ алдында йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәнек шикелле. Чебоксар бик ыҡсым, йәм-йәшел ҡала, баҡса эсендә ултырған кеүек. Волганың яр буйы ла бик йәмле. Ғөмүмән, Сыуашстан күңелдә яҡты тойғолар ҡалдырҙы. Яҙыусылары алсаҡ, күңелле кешеләр. Республиканың 70% , ҡалаларҙа 51% – сыуаштар. Компактно.*

11 июнь – 30 июнь.

**Тамъянда, Динистең йортонда (23-25/VII – Һәргәйҙә). Нөгөш буйҙары, туйғансы ҡыҙыныу, ҡойоноу, ҡармаҡ һалыу. Айҙар менән Нәтәҙе тауында. Унан Ағиҙел менән Нөгөш ҡушылған ер, Мәләүез, бик күп ауылдар күренә.*

Ҡарсығалар ҡуна, һай, ҡалҡыуға,
Ҡар һыуҙары аға һарҡыуға.

Беҙгә лә генә иткән хөрмәтегеҙ
Нигеҙ булһын бәхетегеҙ артыуға.

* * *

Иртән дә генә тороп тышҡа сыҡһам,
Ағас башҡайҙары шеш кеүек.
Уҙған ғүмерҙәрҙе уйланиһәң,
Уяулы-йоҡоло күргән төш кеүек.

(Инәйемдең Һәргәйҙә йырлағаны)

**Балыҡтан ҡайтып килгәндә күпер янында Нөгөш өҫтө хайран ҡалырлыҡ матур. Бер яҡтан уға шәфәҡ ҡыҙыллығы төшкән, икенсе яҡтан ай юлы һуҙылған. Күҙ бәйләнә башлаған ваҡыт. Айҙар юл буйынса шуға ҡарап туймай һөйләнеп килә. Етмәһә, балыҡ та һәйбәт эләкте. Кәйеф шәп.*

5 ғинуар 1976 йыл.

**Иҫке дәфтәрҙән ошо яңыһына адрестар күсергәндә генә лә тормоштоң ни тиклем үҙгәргәнен күрәһең. Берәүҙәр инде юҡ, икенселәре булһа ла, күңел уларҙы инде ҡабул итмәй, ә өсөнсөләрен ҡайҙан табаһың?*

4 февраль 1976 йыл.

**Яңы йортҡа күсеү. Элекке урында (Репина,3, кв.4) ун йылға яҡын ғүмер уҙған, мажаралар осоро. Йәшлек менән хушлашыу. Был һүҙҙәрҙә бөгөн һис бер яһалмалылыҡ юҡ; ҡыҙғанысҡа ҡаршы, аяуһыҙ дөрөҫлөк.*

5 февраль 1976 йыл.

**Йылдың әҙәби йомғаҡтары тураһында һөйләшеү. Ә. Вахитов, М. Ғәли, Ә. Атнабаев докладтары. Һөйләшеү бик йәнле, ҡыҙыҡ булды.*

23 май 1976 йыл.

**Иртүк Ҡариҙел буйында өҙҙөрөп һандуғастар һайрай, кәкүк саҡыра. Ҡайһы бер урындарҙа бар ҡоштар ҙа шул тиклем ярһып һайрай, хатта улар араһында һандуғастың да тауышы күмелеп, тоноҡланып ҡалған кеүек була. Тик уға ҡарап ҡына башҡа ҡоштарҙы тыйып ҡуйып булмай бит. Шиғриәттә лә шулай. Һәр хәлдә, шулай булырға тейеш.*

**Донъяла ике нәмә айырыуса ҡыйын: матур иҫереү һәм матур ҡартайыу.*

8 июнь 1976 йыл.

Томандарҙы йырып сыҡҡан саҡта
Донъя асығыраҡ күренә.

Тормошта ла онотолоп, шаңғып, төрлө юҡ-бар менән мауығып йәшәп алғандан һуң йәшәүҙең мәғәнәһен, оло маҡсаттарҙың ни тиклем кәрәклеген, ваҡланмаҫҡа тейешлегеңде нығыраҡ аңлайһың.

12 июль 1976 йыл.

Бөтә ерҙә үҫеүсе күк сәскә. Төҫө гәжәп, тик һабағы йәмһеҙ. Матур күҙле, шыҡһыҙ кәүҙәле ҡыҙ кеүек.

18 июль 1976 йыл.

**Агиҙел буйында яр аҫтында ҡармаҡ һалғанда йәшенле ямғыр. Айҙар менән икебеҙҙең арабыҙҙан һап-һары ут булып йәшен үтеп китте.*

4 август 1976 йыл.

**Польшала «Әсә йөрәге» тигән орден (орден Материнского сердца) бар икән. Донъялағы иң ҡәҙерле, иң кешелекле һәм мәңлегек орден ғына күтәрерлек бөйөк исем.*

14 – 21 октябрь 1976 йыл.

**Ҡаҙағстанда башҡорт әҙәбиәте көндәре. Ғүмерҙә онотолмаҫлыҡ байрам. Шатлыҡ, ғорурлыҡ һәм яуаплылыҡ. (Барыһы тураһында айырым блокнотта.)*

3 март 1977 йыл.

**Ҡағыҙға тотона алмай, ҡулға ҡәләм ала алмай күпме ваҡыт йөрөнөм. 20 февраль, 21 февралдең иртәһе, Актерҙар йорто, ике көн конференция, семинарҙы алып барыу, 23 февраль, зыярат, буран, ҡар, көрт, сәскәләр. Ҡара таҫмалар, күҙ йәштәре, шиғыр уҡыу һ.б. – былар барыһы ла төштәге кеүек. Рәми ағай үҙе менән тормоштоң иҫ киткес оло бер өлөшөн алып китте. Уның һымаҡ бер кем менән дә йөрәк серҙәре бүлешеп булмаясаҡ, бер кем дә һине аңлай аңламаясаҡ, бигерәк тә бер кем дә һиңә уның һымаҡ хәстәрлекле, эскерһеҙ кәңәштәр бирә алмаясаҡ, һинең тормошоңдо уның һымаҡ ихлас күҙәтмәйәсәк, уныштарыңа ихлас, һис бер көнсөллөкһөҙ ҡыуана, хаталарыңа бөтә йөрәктән аңлап көйөнә белмәйәсәк. Быларҙың барыһына оло йөрәк, аҡыл ғына түгел, барыһынан элек кешелекле, йомарт рухлы, киң тәбиғәтле булыу кәрәк бит. «Киң донъяға һыймай ваҡ кешеләр, киң күңелгә һыймай ваҡ тойғолар», – тип яҙғайным. Рәми ағайҙың киң күңеленә һис ҡасан ваҡлыҡтар, ваҡ кешеләр һыйманы. Ауыр тормош юлында уның, бәлки, көндәренә ҡарағанда төндәре, шатлығына ҡарағанда һағыштары күберәк булғандыр. Хәҙер уның төндәре бөттө, көндәре генә ҡалды. Башҡорт халҡының нисә көнө, нисә быуаты булһа, уның да шуныңса ғүмере буласаҡ. Ағайҙың әүлиәлеге, үлемен әллә ҡасандан алдан һиҙенеүе. Блокноттарында ошо хаҡтағы һүҙҙәр, 19 февралдә (бер көн ҡалғас!) үлем хаҡында яҙған шиғыры («Ах, түҙә алмам, ахыры, түҙалмам…»)*

12 февраль 1978 йыл.

**26-да Зәйнәб апайҙың етмеш йәше театрҙа шаулап үтте. Тик йондоҙ тағырлыҡ кешегә орден йәлләү генә сәйерерәк.*

**Рәми ағайҙың китабын нәшриәткә алып барып бирҙем. 198 баҫылмаған, китаптарына ингән 50-нән артыҡ шиғырҙары.*

**Бөгөн Рәми ағайҙың тыуған көнө. 8-дә "Совет Башҡортостан"ында шиғырҙары сыҡты (һүрәте, минең инеш менән). Халыҡ оҡшатҡан.*

26 февраль 1978 йыл.

**17,18,19-ы Рәми ағайҙың тыуған көнөн дә, йыллығын бергә үткәреп, яраларҙы яңынан аҡтарҙыҡ. Бер йыл ағайһыҙ йәшәгәнгә һис күнегеп тә, ышанып та булмай. Ғүмер буйы күнекмәҫлек, ышанмаҫлыҡ юғалтыуҙар була, күрәһең.*

29 март 1978 йыл.

**Быуылып ятҡан гөрләүеккә юл асып ебәреүҙә үҙенсә ҡабатланмаҫ ҡыуаныс, ихлас тулҡынланыу бар икән. Гөрләүек, рәхмәт әйткән кеүек, тағы ла көслөрәк гөрләп-йырлап, аҫҡа, түбәнгә йүгерә. Гөрлә, гөрләүек. Һинең дә ғүмерең артыҡ ҡыҫҡа – бары бер нисә көн, бары бер нисә аҙым.*

27 апрель 1978 йыл.

**Урманда ниндәйҙер таныш булмаған тауышҡа туҡтап ҡалдым. Һаҡ ҡына ямғыр күҙе төшә башлаған кеүек, ә көн ап-аяҙ! Көн йылы, йылы ғына ел иҫкеләп ҡуя. Баҡһаң, былтырғы япраҡтарҙы үләндәр ҡаға, көндөң йылыһынан дәртләнеп өҫкә үрләй, донъяға сығыр өсөн үҙенә ишек шаҡый. Быға тиклем был хаҡта шиғырҙа уҡыһам да (мәҫәлән, Рәми ағайҙа, Игорь Шкляревскийҙа), үҙем ишеткәнем юҡ ине. Йәшәүҙең ғәжәп музыкаһы.*

15 май 1978 йыл.

**Лесопаркта тәүге кәкүк саҡырыуы. Йылы ямғыр һибәләй башланы. Ике сәғәт ямғыр аҫтында йөрөнөм.*

**Урман юлынан арбала икәү үтеп китте, ҙур ялбыр эт менән бәләкәй генә ҡолон эйәргән. Ошо ла хәҙер ниндәйҙер алыҫ идиллия булып күренә.*

15 июнь 1978 йыл.

**Әхмәт ағайҙың күргәҙмәһе. Башҡортостанда тәүге ҡат. Таланттың тормошонда ғына түгел, халыҡтың культура тарихында бөйөк ваҡиға.*

26 июнь 1978 йыл.

**Сәғәт 11-ҙә Якутск – Братск – Өфө.*

Байымаусы ҡояш. Офоҡтарҙың буталған, ҡибланың аймылышҡан мәле.

1 июль 1978 йыл.

**Якутстандың аҡ төндәре. Ваҡыт оҙоная, киңәйә, уға ҙурыраҡ мәғәнә һыя, ғүмер ғәҙәттәгенән артығыраҡ һуҙыла кеүек.*

**Болот нисек кенә бейек булһа ла, ҡояштан бейек була алмай.*

23 июль – 7 август 1978 йыл.

**Тыуған яҡтар буйлап ғаилә менән сәйәхәттә. Ырымбур, Яңауыл, Ҡунаҡбай, Әхмәр, яңынан Яңауыл, Ҡотломбәт, тағы ла Ырымбур, Өфө. Ауылдарҙың тышы ла, эсе лә бик ныҡ үҙгәргән. Прозаик өсөн ғәжәп бай материал, үҙенсәлекле характерҙар.*

Ауылдағы хәҙерге процесс айырым быуынға йәки төркөмдәргә генә түгел, бөтөн милләт яҙмышына ҡағыла. Халыҡтың рухи яңырыуындағы был бөгөнгө үҙгәрештәрҙе, бәлки, хатта революция һәм 30-сы йылдар менән сағыштырып булалыр! Кешенең бер-береһенә мөнәсәбәте, ергә, эшкә, рухи традицияларға, изге төшөнсәләргә һ.б. ҡарашы…

**Илгә килгән уртаҡ ҡайғы, оло бәлә тиҙ күренә. Тыныс ваҡытта кешенең ғазап-хәсрәттәрен күреүе ҡыйыныраҡ. Икенсе төрлөрәк иғтибар кәрәк.*

26-27 октябрь 1978 йыл.

**VIII съезд булып үтте. Дөйөм һүҙ күберәк булһа ла, былай һәйбәт кенә барғандай тойолдо. Ҡыҙыҡлы, үткер генә сығыштар (мәҫәлән, Ғ.Хөсәйенов, Х.Ғиләжев). Минең сығыштан һуң бер "ҡараҡтың бүрке янды". Һайлауҙар ҙа уйландырырлыҡ (Пальгә – 38 ҡаршы, Атнабайға – 25, Сафингә – 24). Әхиәр ағай менән 2-3 көн йөрөп алынды, тик осрашыу ҡыҫҡараҡ булды.*

6 декабрь 1978 йыл.

**Теге донъяла батша менән ябай кеше (йәки уның ҡоло) осраша. Ҡол хужаһына өндәшә:*

– Бына, падишаһым, минең ҡаҫҡым килмәй, һинең ҡыуғың килмәй; минең, бәлки, һуғылғым да киләлер, тик һин һуға алмайһың. Хәҙер икебеҙ ҙә тип-тиң, тип-тигеҙ. Тик шуны аңламайым: һин түбән төштөңмө, әллә мин юғары күтәрелдемме? Аңлатсы!

– Мин бында күпте аңланым. Хәҙер мин һинән һуғылырға ла ризамын да бит… (пьесаға өҙөк).

5 февраль 1979 йыл.

**Авиациялағы звуковой барьер шиғриәттә ҡатмарлыраҡ, бер телдән икенсе телгә күскәндә уны еңеүе ауырыраҡ: шиғырҙарҙың ҡанаты йыш таралып төшә, йөҙө, төҫө юғала.*

**Ҡарағайҙарҙағы ҡарҙы ел өрөп төшөргән, тик быуындарында ғына эләгеп ҡалған. Хәҙер улар быуынлы бамбук кеүек.*

12 март 1979 йыл.

**Байрам номерында "Лит. газета"ла Игорь Шкляревскийҙың минең китапҡа рецензияһы баҫылған. Конкрет анализдан бигерәк дөйөм тәьҫир хаҡында, эссеға тартым.*

22 апрель 1979 йыл.

**Аҫтан ирегән ҡарҙар күпер кеүек яңғырап, ҡыуыш икәне беленеп тора.*

Гөрләүек тауышы ҡарҙарҙың йырлап иреүеме, әллә илап хушлашыуымы?

30 апрель 1979 йыл.

**Урмандағы ҡар сәскәһен ғүмерҙә өҙгәнем юҡ ине, тәүге тапҡыр йыйҙым. Яландың күпереп үҫкән умырзаяларын һағындырҙы.*

5 июнь 1979 йыл.

**Танышлыҡ арҡаһында! Донъя артынан ҡыуған күп кешеләр берәй моралына ирешкәндә, булмаҫтайҙы булдырғанда шулай аңлаталар. Танышлыҡ арҡаһында! Мин был һүҙҙәрҙе тәбиғәт менән мөнәсәбәткә ҡарата әйтергә теләр инем. "Был матурлыҡты ҡайҙан таптың? Был моңдо ҡайҙан ишеттең?" һ.б. "Уның сере ябай: һәр ҡайын, һәр аҡлан, һәр ҡош, һәр шишмә менән танышлыҡ арҡаһында!" Юҡ, танышлыҡ ҡына түгел, туғанлыҡ арҡаһында! Тәбиғәт менән тамырҙаш, күҙәнәктәш булыу.*

19 июнь 1979 йыл.

**1932 йылда фонтан атҡан тәүге башҡорт вышкаһы. Унда Рәми ағай менән булғайныҡ. Һинең ҡорҙашың бит, шиғыр яҙ, тигәйнем. Вышка эшләй, ағайҙың йөрәге туҡтаны. Ләкин вышка бер саҡ туҡтар, Рәми Ғарипов поэзияһы һаман йәшәр.*

Запорожьела металл заводында булғанда Назар ағай шағирҙы домна менән сағыштырғайны. Шулайҙыр ҙа. Ләкин домна һүнә һәм һалҡын металға әйләнә. Шағир ялҡыны ул үҙе һүнгәс тә кешеләр күңелен йылыта, донъяны яҡтырта.

22 июнь 1979 йыл.

**"Ашыҡма килергә, ҡартлығым"– М. Кәримдең үҙенсәлекле шиғыры. Тик кеше бер саҡ "Ашыҡма үтергә, ҡартлығым" тип тә әйтәсәк бит.*

5 июль 1979 йыл.

Берәүҙәр өсөн:
Барыһы ла миңә һуңлап килде… (Н. Нәжми)
Икенселәр өсөн:
Барыһы ла миңә иртә килде… (С. Ҡудаш)

**Рәсүл Ғамзатовта әллә ҡасан уҡ был шиғырҙарҙың (фекерҙәрҙең) икеһе лә бергә ҡушылған:*

Ғүмерем буйы шулай өмөтләнеп,
Ҡабаланам һаман, йүгерәм.
Тик барыбер йә бик иртә киләм
Йә мин һуңлап киләм бигерәк.

("Ахвах…")

**Һуңлауҙар ҙа, ашығыуҙар ҙа булырға мөмкин. Тик шағир барыбер үҙ заманында, тик үҙенә бирелгән ваҡытта тыуа, шул заманды ситләп үтә алмай. Самое трагическое для поэта – это оказаться вне времени. Тамырһыҙ ҡалған кеүек тәгәрләү, аморф ижад. Үҙ ваҡытыңдан алға һикерә алыу – уныһы икенсе мәсьәлә, уныһы юғары категория.*

10 июль 1979 йыл.

**Диеталы, режимлы көндәр. Ниндәй сәйер: "диета для поэта!" Быныһы ғына ярар. Иң яманы – тойғолар диетаһы, кисерештәр режимы, дәрт-ярһыуҙарҙың регламентланыуы. Быныһынан һаҡлаһын…*

20 сентябрь 1979 йыл.

**Шағирҙың халыҡ менән аралашыу ысулдары үҙгәрә бара (ауыҙ ижады, ташҡа яҙыу, китап баҫмаһы һ.б.) Ләкин шиғриәт үҙе һәр саҡ даими юғарылыҡ булып, мәңгелек бейеклек булып ҡала. Эвереска менгән кеүек, һәр шағир уны яңынан яуларға тейеш. Башҡаларҙың тәжрибәһенә таяныу – ҙур ярҙам. Ләкин шиғриәт бейеклегенә парашюттан һикереп булмай, үҙ аяҡтарың, үҙ ҡулдарың, үҙ ҡарашың менән юл ярып ҡына күтәрелергә мөмкин.*

31 октябрь 1979 йыл.

**Тормош яҙ һәм көҙ тигән миҙгелдәрҙән бигерәк "һинең менән" һәм "һинһеҙ" тигән араларға бүленә.*

15 ноябрь 1979 йыл.

**Ҡылған ҡылыҡтар, ҡылған гонаһтар күпме үкендерә… Ләкин уларҙың ҡайһы берҙәре һинең маңлайыңа яҙылған, һин уларҙы урап үтә алмайһың. Ә шағир өсөн ғазаптар мәктәбе – мотлаҡ. Хаталарҙан да таҙа көйө, гонаһтарҙан гонаһһыҙ сығыу – шағир бәхете. Түбән ситуацияларҙа ла юғары ҡалыу. Ошондай тетрәнеүҙәрҙе үтмәй тороп, шағир барыбер тормош асылын, кешеләрҙең күңелен бөтә ҡатмарлылығында аңлай алмаясаҡ.*

1 декабрь 1979 йыл.

**Йылдың һуңғы айы. Матур ҡарлы көн. Донъя быға тиклем ҡышҡа күсә алмай оҙаҡ йонсоно. Ҡышҡа керә алмай йонсо, аҙаҡ сыға алмай аҙаплан… Тәбиғәт тә кеше кеүек сәйер.*

**Бер нәмәңде лә ҡалдырма, бер рәхәтлегеңде, бер ләззәтеңде лә иртәгә тип бүлдермә, касаңды төбөнә тиклем эс, шәмдәрҙе аҙағына тиклем яндыр, ҡосағыңды ҡоласың еткәнсә кир – быларҙың береһенә лә кире әйләнеп ҡайта алмаясаҡһың.*

8 декабрь 1979 йыл.

**Спектакль ғүмер кеүек бер генә булмай, тағы ҡабатлана. Ләкин шул уҡ тамашасылар, шул уҡ темперамент һ.б. – былар береһе лә кире килмәй. Шуға ла һәр спектакль кеше ғүмере кеүек ҡабатланмаҫ яҙмышлы. Хатта тамашасыларҙы кире йыйып та булалыр, ләкин уларҙы, шулай кисер, шулай уйла, тип ҡабатлатып булмай.*

**Атай һағышы. Әсә һағышы, әсә мөхәббәте һ.б. – был хаҡта күп әйтелгән һәм тағы ла әйтелергә тейеш. Ләкин атай кисерештәре, атай һағышы – был турала хәҙер аҙыраҡ уйланабыҙ түгелме? Атайҙар һәм улдар… Был – мәңгелектән мәңгелеккә тоташҡан проблема. Әсәләр*

һәм ҡыҙҙар тигән мәсьәлә ҡуйылмаған тиерлек (гәрсә бөгөн был хаҡта ла уйланырлыҡ урын етерлек). Ләкин йәмғиәт үҫешендә атайҙар һәм улдар мөнәсәбәте үҙәктә булған. Бөгөн был гәжәп поэма йәки пьеса талап итеп тора бит! Мотлаҡ!

3 ғинуар 1980 йыл.

**Минең "Поющие скалы" тураһында "Лит. газета"ла (И. Шкляревский), "Вечерняя Уфа"ла, "Урал"да (Виктор Смирнов), "Лит. газета"ла (Хузангай).*

24 ғинуар 1980 йыл.

**Күңелдәге юғалтыуҙар. Бер уйлаһаң, юғалтыры бар ғына юғалта ала бит.*

28 март 1980 йыл.

**Бына бөгөн теүәл ике аҙна Красноусольск санаторийындамын.*

31 март 1980 йыл.

**Марттың һуңғы көнө балҡып тора. Офоҡтар киң, зәңгәр.*

**Тынлыҡ. Тып-тын һәм яп-яҡты донъя. Юл ситендәге селтәрләнгән ҡарҙарҙың сылтырлап емерелгәне генә ишетелә.*

**Был яҡтарҙың ҡара һылыу ҡыҙҙары күренеп ҡала. Уларҙың йөҙө-ҡарашы, күҙҙәрендәге осҡон баҙрап ятҡан ҡуҙҙарға оҡшаш. Ҡуҙҙар һүнеп, тынысланып бара кеүек, тик әкрен генә ел ҡағылһа, бөтөнләй яңыса балҡып китә. Уларҙың йөҙө лә ошолай берсә уйсанланып, берсә тыйнаҡ тоҡанып, туҡтауһыҙ үҙгәреп, тулҡынланып тора. Бындай йөҙҙәр әҙәбиәттә сағылмаған. Бындай тип матурлыҡ, ҡара ялҡынлы матурлыҡ беҙҙең сәнғәттә, сәхнәлә лә юҡ.*

3 апрель 1980 йыл.

**Бында тәү ҡараштa мөләйем генә күренгән ҡатын-ҡыҙҙың яҡындан ҡарағанда йөҙөндә һыр, күҙендә йәшерен ғазап күрәһең. Ауырыу барыбер үҙенең эҙен һалған. Ҡыҙғаныс булып китә.*

28 май 1980 йыл.

**Ваҡыт кеүек боронғо ҡара уйсан тау һәм донъяға бөгөн генә тыуған кеүек ҡыуанып йүгереүсе илгәҙәк шишмә. Тау ҡуйынынан сыҡҡан шишмә, бәлки, ошо тау кеүек ҡарттыр, әммә хәрәкәт уны һәр саҡ йәш, дәртле күрһәтәсәк.*

19 июль 1980 йыл.

**Насар шиғыр яҙыу - үҙе үк ҙур гонаһ. Насар шиғырға көй яҙыу – икеләтә гонаһ, сөнки ул ҡағыҙҙы ғына түгел, эфирҙы ла сүпләй. Һауаны насар промышленниктар генә түгел, насар йырҙар ҙа, радиотапшырғыс бағаналар ҙа бысрата, уның һөрөмө күңелдәргә ҡуна. Халыҡ йырҙарында сөй эҙләргә кәрәкмәй, бөгөнгө йырҙарҙағы бәйләнешһеҙ*

һүҙҙәр, буталсыҡ фекер тураһында күберәк уйларға кәрәк. "Йырҙың йыртығы юҡ" ти халыҡ. Ә бөгөн йыртыҡтары ла етерлек. Йыртыҡ йыр күңелде йырта.

12 август 1980 йыл.

**Сөгөлдөрҙө эш итеп тапшырғансы ҡатын-ҡыҙға баҫыу буйлап 75 км тубыҡлап үтергә тура килә икән. Етмеш биш – быны әйтеүе генә анһат! Ә беҙ йыш ҡына тыуған ерҙән эйелеп һыу эсергә лә йыбанабыҙ.*

21 август 1980 йыл.

**Беҙҙә йыш ҡына шиғырҙар хәрефтә ярала, йырҙар нотала ярала. Уларҙың барлыҡҡа килеүендә йөрәк менән зиһендең ялҡыны ҡатнашмай. Улар – рассаданан тупраҡҡа ултыртылып, тәүге ҡырауҙа һәләк булған үҫентеләр кеүек. Улар тупраҡтың үҙенә тамырланып ҡалҡҡан, уның һалҡындарында һәм эҫеләрендә сыныҡҡан ялан сәскәләре кеүек сыҙамлы һәм хуш еҫле булырға тейеш. Нотаоарға яҙылып йәнселмәгән, хәрефтәргә теркәлеп таушалмаған халыҡ йырҙары, халыҡ шиғырҙары нәҡ бына шулай бит.*

28 сентябрь 1980 йыл.

**Сәскәнең асылғанын, "сәскә ата" тигән процесты күргәнең бармы? Үлән үҫкәнен ишеткәнем бар, күргәнем юҡ. Шиғриәт тә шулай. Уның тыуыуын күҙ менән күҙәтеүе мөмкин түгел тиерлек.*

**Дим өҫтөндә көҙгө күш йәйгор. Баҡсанан ҡайтып килгәндә (21/IX, Мәжит, Фәриҙә, мин) поезд көткәндә бер сәғәт буйы ямғыр ҡойҙо. Шунан һуң балҡып ҡуш йәйгор ҡалҡты. Бындай йәйгорҙо күргәнемде хәтерләмәйем.*

**Хөрмәт итеп, күтәреп кенә йөрөтөү. Бүре лә һарыҡты елкәһендә генә йөрөтә.*

11 март 1981 йыл.

**Ҡыш ваҡытында мәлен белмәй ваҡытһыҙ уянған айыу кеүек ваҡытһыҙ тоҡанған тойғолар. Быуып та, ҡыуып та, тыйып та булмай. Сөйәл кеүек сөалдәр мәңге тынғы бирмәй.*

**"Дуҫтарымды һибеп йыям" тигән һүҙҙәре бар Фәйзуллин аҙашымдың. Һәйбәт әйтелгән. Тик йылдар үткән һайын дуҫтарҙы һибәһе килмәй. Кире йыйып ала алмам кеүек.*

**Яҙмыш ҡасандыр төрки балаларын донъя буйлап һипкән дә аҙаҡ йыйып алырға онотҡан.*

1 сентябрь 1981 йыл.

**Донъя! Һиңә шат күҙҙәрем менән, моңһоу күҙҙәрем менән ҡараным. Һиңә аҡ төндәрҙә, ҡара көндәрҙә баҡтым. Һине ҡарҙар аша, ямғырҙар аша күрҙем. Һиңә ялбарып ҡараным, тәкәббер ҡараным, тетрәп екләнем, ғәмһеҙ күҙәттем. Дуҫтар менән һоҡландым, яңғыҙым таң ҡалдым… Барыбер һиңә ҡарап туйғаным юҡ.*

Мин ҙурайҙым, мин кесерәйҙем, мин юғары остом, мин түбән төштөм, мин саф булдым, мин гонаһтарға буялдым – һин дә, донъя, гел аҡ ҡына булманың, тик барыбер бөйөклөгөң менән мине арбаның.

2 июнь 1982 йыл.

"Ерем балҡышы" баҫылып сыҡты. Тәүге китабымды ғына, бәлки, шундай түҙемһеҙлек менән көткәнмендер.

**Май байрамында инәйемдең етмеш йәшен үткәрҙек, һәйбәт булды. Арнап өс шиғыр яҙҙым.*

21 июль 1982 йыл.

**Урыҫтың туйҙа һауыт-һаба ватыу йолаһы беҙҙә юҡ. Беренсенән, рус туйҙары борондан хәмер менән шау-шыулы үткән. Унда һауыт-һаба ла ҡыйралғандыр һәм, бәлки, ҡунаҡтар алдында уңайһыҙ булмаһын өсөн, уны үҙенсә йолаға әйләндергәндәрҙер. Икенсенән, беҙҙең халыҡта күберәк ағас һауыт, тире һауыт булған, улар шалтырап ҡыйралып бармай.*

7 декабрь 1982 йыл.

**Бөйөктәр менән йышыраҡ кәңәшләшергә, уларҙың китаптарын йышыраҡ ҡулға алырға, аҡылдарын, рухтарын нығыраҡ аңларға. Шул саҡта тормоштоң ығы-зығыһы күберәк аңлашыла, томаланған маҡсаттарың, онотолған хыялдарың асығыраҡ күренә.*

**"Сов. Россия"ла "Заря" тигән өс табаҡлыҡ китабым сыҡҡан. Тышлығы үтә төҫһөҙ, үтә сыбар эшләнгән.*

20 апрель 1984 йыл.

**Берәүҙәрҙең тәрән зиһен-аҡылынан диңгеҙ төптәренән күтәрелгән һигеҙ аяҡтар, ҡомһоҙ акулалар, урман ҡуйынындағы быуар йыландар, сүлдәрҙәге йыртҡыс арыҫландар кеүек ҡара уйҙар сыға, мәкерле теләктәр ҡуҙғала.*

Икенселәрҙең йомарт зиһене, яҡты аҡылы сарсаған күңелдәргә йылы ямғыр булып һибелә, ҡараңғыла тонсоҡҡандарға алсаҡ нур булып етә, ғашиҡтарҙы һайрар ҡош булып тәбрикләй.

19 март 1985 йыл.

**Йәрәбә. Бер төшөмдә йәрәбәгә Ер шарын отоп алдым. Кешенең донъяға тыуыуы, – ғөмүмән, осраҡлылыҡ, лотерея, йәрәбә. Ләкин тыуыу менән ошо йәрәбәлә уның яҙмышына иң ҙур һәм ҡотолғоһоҙ отош – Ер шары төшә.*

30 ғинуар 1986 йыл.

**Элекке ауыл тураһында инәйем менән һөйләшеүҙәрҙән. Ауыл тәүге донъя һуғышына тиклем ныҡ күтәрелгән, төҙөкләнгән. Ҙур-ҙур ағас өйҙәр, ағас ҡапҡалар, сауҙа. Төҙөлөш материалын әллә ҡайҙарҙан ташығандарҙыр. Империалистик һуғыш, унан һуң Граждандар һуғышы, унан һуң ҡот осҡос аслыҡ – былар ауылды ныҡ ҡаҡшата, халыҡ*

ҡырыла, йорттар тарала, һатыла. Ул йорттарҙың ҡайһы берҙәрен беҙ ҙә күреп ҡалдыҡ, ҙур коридорлы, бейек нигеҙле, ике яҡлылары, хатта ике ҡатлыһы ла бар ине.

21 февраль 1986 йыл.

**Үлем – кешенең һуңғы кисереше, башҡа бер нәмәгә оҡшамаған (бәлки, иң ҙурылыр?)тойомлауы, ерҙәге һуңғы физик һәм рухи ощущениеһы. Ләкин ул был хаҡта бер кемгә лә һөйләй алмай, бер кем менән дә уртаҡлаша алмай.*

Әҙәбиәт үлемде, кешенең донъя менән хушлашыуын меңәр тапҡырҙар һүрәтләп ҡараған. Ләкин бында дөрөҫлөк мәсьәләһе бик сағыштырмаса. Уның шулай икәнен йәки түгеллеген иҫбатлап ҡара! А судьи кто? Кем иң гәҙел хөкөмдө сығара ала? Кем уны күреп ҡараған? Үлем менән йөҙгә-йөҙ килгән, мәрткә китеп терелгән һ.б. бик күп ситуациялар бар, әлбиттә. Ләкин улар бит береһе лә үлем түгел.

11 март 1986 йыл.

**Ностальгия. Был тойғо бар кешелә лә ҡайһы ваҡыт шулай өтөпяндырып тоҡана микән? Уҙғандарға, үлгәндәргә, киткән дуҫтарға юкһыныу ностальгияһына ҡайһы саҡта түҙеп торорлоҡ түгел. Бала саҡтың, йәшлектең, яҡын кешеләрҙең, онотолмаҫ осрашыуҙарҙың яңынан терелеүе, тауыштары яңынан сыңлай, буяуҙары балҡый, һалҡындары өшөтә, ямғырҙары күшектерә, елдә ҡылған һыу кеүек аға, йомрандар һыҙғыра, йырҙар ишетелә, юлдарҙа саң күтәрелә…*

9 апрель 1986 йыл.

**Тәбиғәт ҡыштан яҙға барыбер әкрен күсә. Бер көндә генә яҙ килмәй.*

Ә ҡыш бына бер көндә килергә мөмкин. Ундай хәлдәр беҙҙең күҙ алдында ла булды (сентябрҙең бер көнөндә килгән ҡыш).

Кеше тормошонда ла шулай түгелме ни? Йәшлек бер көндә генә килмәй (уның һөйөүе ҡапыл бер көндә тоҡаныр китергә мөмкин, әлбиттә).

Ә ҡартлыҡ бер көндә лә килергә мөмкин. Бер көндә аҫты-өҫкә килгән яҙмыштар, бер төндә сәсте ағартҡан ҡайғылар, кешене бөккән фажиғәләр…

18 апрель 1986 йыл.

**Ғүмер үткән һайын хәстәрҙәр арта, шатлыҡтар кәмей, уйҙар ауырая, ваҡыт ҡыҫыла, ваҡыт етмәй. Әле беҙҙең йәштә шулай, ә артабан? Элек һәр саҡ йылмайып ҡаршы алған Мостай ағайҙың ҡараштары һуңғы йылдарҙа ниңә моңһоулана, йөҙө борсола барғанын шунан да аңлап була. Шағир хәле, шағир яҙмышы, уның фажиғәле эволюцияһы.*

Элекке дыуамал йыллар хатамы, юҡмы? Нимәгә үкенергә, нимәгә үкенмәҫкә. Үкенмәҫлек саҡтарың булмау үҙе үкендерер ине.

28 – 30 июнь 1986 йыл.

**Ғүмер уҙған һайын дуҫтар һирәгәйә. Төркиәлә Мөхтәр Сәғитовтың*

фажиғәле һәләк булыуы. Ҡартлығыңа дуҫтар менән бергә барып етеү кешенең, бәлки, иң ҙур бәхеттәренәндер.

**Ҡош һайрауы кеүек инстинкт буйынса ғына яҙыу. Тәбиғилек бик һәйбәт, әлбиттә. Әммә ижад өсөн был ғына аҙ. Ҡош мең йыл элек нисек һайраһа, әле лә шулай һайрай, үҙенән бер нәмә лә өҫтәмәй. Һүҙ ҙә юҡ, улар араһында ла таланттар һәм талантһыҙҙар бар. Әммә төп асылы үҙгәрмәй. Шиғриәт, ғөмүмән, һүҙ сәнғәте меңәр йылдар буйы күпме үҫеш юлдары үткән. Ҡош һымаҡ һиңә тиклем тыуғанды ҡабатлап ҡына йәшәп булмай. Ә хәҙерге йәштәрҙең күбеһе шаблонды аша сыға алмай, ижадтың әлифбаһынан, элементар хисаптан уҙмай. Высшая математика тураһында һүҙ алып барыуы ла ҡыйын.*

20 август 1986 йыл.

**Үткән аҙнала Әнүрҙең шиғырҙарын уҡып сыҡтым. Күҙ йәше бәреп сыҡты. Күптән илаған юҡ ине. Кешене тере сағында барыбер аңлап та, ҡәҙерләп тә бөтөрмәйбеҙ. 1976 йылдың йәйендә Әнүрҙе әллә ниндәй шиғри ҡанаттар осороп йөрөткән. “Цельная натура” тигән һүҙҙәрҙе бына шул саҡтарҙа аңлайһың. Иң ҡыйын ваҡыттарҙа ла (улар Әнүрҙең тормошонда күпме булды!) ул үҙен юғалтманы, шәхес булып ҡалды. Ә күптәр уның “ысҡыныуҙарын” ғына күрҙе. Рәми ағайҙар, Кимдәр, Вафалар, Миәссәрҙәр киткәндән һуң тормоштоң бер сите кителеп кенә түгел, оло өлөшө умырылып, убылып ҡалды. Уларын ваҡыт нығыраҡ аңлатыр әле.*

3 декабрь 1986 йыл.

**Бөгөнгө төштәге осоуҙарым!.. Бала саҡтағы һымаҡ упҡындарға осоп китмәйһең, талғын ғына диңгеҙҙәр, урмандар аша осаһың. Әллә Тын, әллә Атлантик океан аша осоп сыҡтым. Осоу төштәре, моғайын, әле лә хәтерҙә ҡалған төштәремдер. Уянғас, уның төш кенә булыуына, кешенең ысынлап та оса алмауына нисектер күнегә, ышана алмай ятаһың.*

25 декабрь 1986 йыл.

**Международный стандарт огранки алмаза – 57 граней. Кеше ғүмеренең иң ныҡ балҡыған сағы нисә йәшендә? Әл дә гено бында донъя стандарттары юҡ.*

22 ғинуар 1987 йыл.

**Ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен ишетеү. Йылан – өнһөҙ тиерлек йән эйәһе. Ә бына шуның көйшәгәнен ете ҡат ер аҫтынан ишетеп ҡара (ул көйшәмәһә лә). Халыҡтың мәргән теле. Шағир донъяның ерҙәге, күктәге ете ҡаттарын шулай тойорға тейеш, бигерәк тә бөгөнгө заманда.*

**Переделкинола Бронтой Бедюров менән күберәк аралашылды. Төплө ғилемле, асыҡ ҡарашлы шағир. Өҫтәүенә үҙ фекерен яҡлай белеүсе, оратор тәбиғәтле шағир. Тик алтайҙарҙа берҙәмлектең етмәүе бик ҡыҙғаныс. Бронтой Укачинды яманлай, Укачин*

Бронтойҙы... 15 – 20 яҙыусы, әллә нисә төркөм. Бронтой быны халыҡтың тарихы менән, алтайҙың бер кемгә лә баш бирмәүе менән аңлатырға теләй. Белмәйем, сәбәп унда ғына микән?

23 февраль 1987 йыл.

**Илле йәш тә йәшәлмәгән, ә шул ғүмер эсендә лә, беҙҙең күҙ алдында күпме ҡаялар ауҙы, йылғалар ҡороно, урмандар ҡырылды, беҙ аунаптәгәрләп үҫкән икһеҙ-сикһеҙ ҡылғанлы, сәскәле далалар һөрөлөп бөттө.*

Күктә яңы йондоҙҙар тоҡанды. Ер йөҙөндә күпме һуғыштар башланды, бөттө, яңынан башланды һәм һаман да бара. Күпме ҡандар аҡты, һаман да аға. Һин белеп үҫкән, аралашып йәшәгән күпме кешеләр китте. Ер йөҙөнән хатта халыҡтар юҡ булды, милләттәр туҙҙырылды.

Нигеҙҙәр ҡороно, ауылдар юҡ булды, оло юлдарға үлән үҫте. Яңы ҡалалар ҡалҡты, яңы юлдар һалынды.

Күпме яңы быуындар үҫеп сыҡты, кешенең, хатта халыҡтың, милләттең, илдең, донъяның холҡо үҙгәрҙе.

Кеше ғүмере ҡыҫҡа, тибеҙ. Ә мин мәңге йәшәгән кеүекмен.

6 апрель 1987 йыл.

**Иртән урманда һелкенеп керәм. Ҡарағайҙарҙа тейендәр ҡыуыша. Шул хәтле етеҙҙәр, улар ҡыуышҡанда тырнаҡтары ағас ҡабығын һыҙыра, боҙҙоң сите бер-береһенә ышҡылып, сытырҙап ватылған тауыш сыға.*

**Бөгөн төшкөлөк – "Ағиҙел"дә. Килбәтһеҙ официантка, ҡорһағында сумкаһы. Хас та кенгуру һымаҡ. Шул сумканан балаһы башын сығарып ҡарар һымаҡ.*

Лимонлы сәй. Лимондары ҡап-ҡара, тәме лә юҡ. Әйтерһең дә, бер һауыттан икенсеһенә һалып күсереп йөрөтәләр.

**Сәскә күренер өсөн сәскә ата. Һөйөү йәшенер өсөнме? Ниңә көндән ҡаса?*

**"Никто не забыт и ничто не забыто". Бергольцтың был һүҙҙәре ташҡа уйып ҡына яҙылмаған, халыҡ йөрәгенә уйып яҙылған.*

Ләкин нисә йылдар буйы ундай һүҙҙәрҙе уйһыҙ ҡабатлайбыҙ, улар таушала, аҫыл мәғәнәһен юғалта.

Бер нәмә лә онотолмаған, тибеҙ. Күп нәмәне оноттоҡ, ай-һай, күп онотоҡ. Хаталарҙы онотоҡ. Улар һабаҡ булманы. Берҙе уйлап, икенсене эшләнек.

Беҙҙең быуын бәләкәстән иртәгә, иртәгә тип өмөтләнеп үҫте, шундай психологияла тәрбиәләнеп йәшәне. Бына һуғыш бөтөр – тормош һәйбәтләнер, бына һуғыштан һуңғы ауырлыҡтарҙы еңербеҙ ҙә рәхәт йәшәй башларбыҙ, бына-бына барыһы ла етеш булыр һ.б., һ.б. Йылдар үтә торҙо, ул рәхәт иртәгәне күрмәйенсә ҡартайып киләбеҙ.

12 июнь 1987 йыл.

**Республикала "Шакиров хаҡимлығы" дәүере үтә кеүек. 9-да пленум булды. Крокодил йәштәре менән илаусылар.*

18 июнь 1987 йыл.

**Барыһы ла Шакировты әрләй. Бик дөрөҫ һүҙҙәр һөйләйҙәр. Әммә элек улар ҡайҙа булған, егерме йыл буйы ниңә берәү ҙә бер нәмә лә әйтмәгән? Кеше ғүмере буйы гел яманлыҡ ҡына ҡылды микән ни? Ә ниңә ул саҡта күреүсе лә, белеүсе лә булмаған? Әгәр яҡшылыҡтары ла булған икән, ниңә барыһын да бер юлы һыҙып ташларға, кешене бысраҡҡа бутап, ҡартлығына типкеләп сығарып ташларға. Һәр Миҙхәтте миҙҙәт, һәр Мөхөтдинде мөхит тыуҙыра. Иң мөһиме: тирандар һәм уның әмерен һүҙһеҙ башҡарыусылар мөнәсәбәтен, ҡол психологияһын еңергә кәрәк.*

21 июнь 1987 йыл.

**Т. Ахуньянов галиянизировал башкирский театр, тальянизировал все башкирское исскуство, тигән обком пленумында Мирзаһит. Ысын булһа, сәсәндәрсә әйткән.*

**Йома, ун туғыҙында, Сәйфи Ҡудашта булдым. Кесаҙна кис телефондан һөйләшкәйнем, ҡыҙы Сөйөмбикә апай алды. Ҡарт, бик ауырып торам, бер ай больницала булдым, күҙемде бөтөнләй боҙҙолар, тип зарланды. Дүртөйлөлә Бабичҡа мемориаль бүлмә ойошторалар, киләсәктә музей булмаҡсы, шуға материал йыябыҙ, тип борсоуымдың сәбәбен аңлаттым. Осрашып булмаҫ, тигәйнем, ҡарттың хәле бик мөшкөлдөр, тигәйнем. Ризалашты. Иртәнге унда барып керҙем. Беҙҙең гәмһеҙлек. Бабич тураһында китап яҙып, бер тапҡыр ҙа был ҡартта булманым. "Һин мине эксплуатировать итергә тейеш инең",– тип үпкәләп алды. Дүрт сәғәт ярым һөйләшеп ултырҙыҡ. Ҡарттың хәтере хәтәр. Әллә бер үк ваҡиғаларҙы, факттарҙы төрлө кешеләргә йылдар буйы ҡабатлап һөйләүҙән, әллә информацион сүп менән мейеһе сүпләнмәүҙән, нисек кенә булмаһын, хайран итерлек. Был бер Сәйфи Ҡудашҡа ғына хас түгел, Буранғолдар, Ағиштар, Бикбайҙар ҙа шулай ине бит, әллә ҡасанғыны деталләп, тәфсилләп, көнөн, урынын, кешеләрен атап һөйләй торғайнылар. Улар ысын мәғәнәһендә интеллигенттар, наҙан халыҡтан күтәрелгән зыялыйҙар. Хәҙер халыҡ грамотный, бөтөн ғәләм белемле, ә интеллигент булырға тейеш кешеләр, һәр хәлдә эш-вазифалары менән, яҙмыштары менән шул исемгә лайыҡ булырға тейеш кешеләр күпселегендә – наҙан. Үҙенең байтаҡ уҡыусыларынан наҙанyраҡ. Ижад өсөн йәнен фиҙа ҡылыр кешеләр, бер-береһе менән осрашҡанда ижад, әҙәбиәт, тарих, төрлө шәхестәр, ваҡиғалар тураһында һөйләшеп туймаҫ кешеләр бик күпме һуң беҙҙең быуын араһында? Бармы һуң әле, тип тә уйлап ҡуяһың. Булһа ла, бер ҡулдың бармаҡтарынан артмаҫ. Тулһа әле. Рәмиҙәр, Әнүрҙәр, Вафалар кеүек егеттәргә һыуһай күңел.*

Сәйфи Ҡудашта булғандан һуң ошо хаҡта тағы ла нығыраҡ уйландырҙы. Моңһоу, обидно булып китте. Күбебеҙ ижад хаҡында онотҡанда бер генә уйлап йәшәй бит. Йәштәре лә, ололары ла. Йәштәрҙең шулай булыуы бигерәк тә хәүефле. Былай булһа, ҡайҙа ғына барып терәлербеҙ. Хәҙер перестройка тип ғөмүмән һүҙ һөйләүгә

күсеп бара халыҡ. Бабич буйынса дүрт папка ҡарап сыҡтыҡ. Билдәһеҙ шиғырҙарына тап булманым.

2 июль 1987 йыл.

**Йылдар ҡыҙҙар кеүек теҙелгән. Ымһынып, янып үткән саҡтарың күпме… Ҡыҙ булып ҡаршы ала ла ҡарсыҡ булып оҙата. Ҡайһы саҡта киреһенсә.*

**Бер чукчалар тураһында ғына күпме кино бар. Ә башҡорттар хаҡында? Бер-ике әкиәт йә уйҙырма… Бер башҡорт ҡына түгел, был яҡтан союзный республика булмаған бар халыҡтар ҙа үгәйһетелгән хәлдә.*

12 июль 1987 йыл.

**Ижад хаҡында фекер алышырлыҡ, бер-береңә ҡайраҡ булырлыҡ егеттәр (Рәми, Әнүр, Вафа, Ким) һағындыра.*

Бер-беребеҙгә байраҡ булмаһаҡ та,
Уй-хыялға байыраҡ булһаҡ ине.
Зиһенебеҙҙе сарлар - үткерләрлек
Бер-беребеҙгә ҡайраҡ булһаҡ ине.

2 сентябрь 1987 йыл.

**Мәктәп реформаһы тибеҙ. Иң элек уның материаль базаһын нығытырға кәрәк. Бер класта ҡырҡтан ашыу бала – белемдең сифаты тураһында нисек һүҙ алып барырға мөмкин? Ҡайһы бер ауылдарҙа бер балаға бер уҡытыусы тиерлек. Бынығы икенсе сик.*

Балалар баҡсаларының етмәүе. Инвалидтар, ҡарттар йорттары ни хәлдә? Йәберлеләр генә йыйыла торған урынмы ни? Ветерандар йорто. Яҙмыштар бер төрлө генә булмай бит.

3 сентябрь 1987 йыл.

**Элек тә бит ер һатып, сәй алғандар. Хәҙер урман һатып, план тултыралар. Ер-әсә менән һатыу итәләр.*

10 сентябрь 1987 йыл.

**4-5 сентябрь – Вафаның илле йыллығында. Ғайса ағай, Фәүзиә апай, Ирек, Ҡәҙим, Әнисә. Стәрлелә аҙаш ҡушылды. Фәриҙә, Нәркәс, Фәнүзә, Таң ағай. Юл буйынса тиерлек ямғыр һибәләй. Маҡарға етәрәк күтәрелгән юлға ҡом ташығандар, аҫҡа төшкәс, әҙерәк буксовать итеп алды беҙҙең "Рафик".*

Маҡарҙан һуң Ғүмәр 8 йыллыҡ мәктәбендә. Маҡарҙа 245 бала. Бында 53 уҡыусы, элек 260 булған. Рауил Нигмәтуллиндың әйтеүе буйынса, бынан 50 филолог, 20 инженер, 50 ауыл хужалығы белгесе сыҡҡан. Арттырһа ла, күп бит.

Вафа Әхмәҙиев тураһында тиҫтере, уҡытыусы Рәис Ильясовтың бик һәйбәт иҫтәлектәре. Клубҡа кисен, көн ямғырлы булһа ла, халыҡ тулды. Ике сәғәттән артыҡ барҙы кисә. Үҙҙәренең концертына ваҡыт та ҡалманы.

**Кеше башына (башҡорт уҡыусыһына) "Ағиҙел"де алдырыу буйынса Ишембай районы беренсе урында.*

21 сентябрь 1987 йыл.

**Яҙығыҙ, ғәйбәтселәр, яҙығыҙ, яҙған һүҙегеҙ ҡара үт менән яҙылған бит. Үҙ исемегеҙҙе ҡуйырға, үҙ йөҙөгөҙҙө асып яуға сығырға ҡурҡаһығыҙ. Битһеҙҙең нисек үҙ бите, үҙ йөҙө булһын, шуның өсөн дә битһеҙ бит ул. Яҙығыҙ ғәйбәт, барыбер ярылмаҫ, тик ҡаным ғына ҡайнар, йәшәүгә, ижадҡа сәмем генә артыр. "Правда"ға Дилә Булгакова менән Радик Хәкимйәновтың исемен ҡуйып, ҡурҡаҡ йәндәр хат яҙғандар, мине, Булатты, Тимерҙе, Солтангәрәйҙе сәйнәгәндәр. Нисек ҡойроҡтарына баҫып, ил алдында фаш итергә?*

1 октябрь 1987 йыл.

**Радиоға яҙылдым. Рәми ағайҙың "Табыныу"ы 14-дә, минең шиғырҙар 15-дә бара.*

**Береһе өҫтә, береһе аҫта шаулаған япраҡтар ергә төшкәс барыһы ла бер тигеҙ.*

8 октябрь 1987 йыл.

**"Йәйен йәйләү сәскәһе бул, ҡышын ҡышлау гөлө бул"– халыҡтың һүҙгә һиҙгерлеге. Сәскә яланда, гөл өйҙә үҫә шул.*

12 октябрь 1987 йыл.

**Илленсе йылдарҙың икенсе яртыһынан башланған, алтмышынсы йылдарҙа апогейына еткән әҙәбиәттәге күтәрелешебеҙ, яңы ижади быуындарҙың эркелеп килеүе… Егерменсе съезд килтергән дөйөм яңырыуҙың бер сағылышы.*

Әле лә илдә ошоға оҡшаш тарихи ваҡиғалар. Тик беҙҙең милли әҙәбиәттең, ижад донъяһының, ғөмүмән, рухи көстәрҙең яңынан балҡып асылыуы, ҡанатын нығыраҡ киреүе өсөн беҙҙә иң төп ерлек – мәктәптәр ултырып иларлыҡ хәлдә. Туған тел һәм әҙәбиәт хәҙер күпселек урындарҙа сит телдән дә ситтәрәк, ситерәк. Ә бит теге осорҙа барлыҡ башҡорт ауылдары ла башҡортса уҡый ине.

28 октябрь 1987 йыл.

**Троллейбустағы зәңгәр күҙле, аҡ сәсле ҡыҙ. Әхирәте менән һөйләшкәндә бөтөн йөҙө, күҙҙәре көлә, хәрәкәттә, ел ҡағылған һыу өҫтө кеүек, ҡояшта уйнап сылтырап аҡҡан шишмә кеүек. Әбей булғас, ул йөҙ нисегерәк булыр икән? Күҙ алдына килтереүе ҡыйын.*

9 декабрь 1987 йыл.

**Кисә Союзда йәштәр менән эшләү буйынса йыйылыш. Тимерҙең докладЫ. Һаман да, 300 йәш яҙыусыбыҙ бар, тип кәпәрәнеү. 15 – 20 йәш талант бирегеҙ, яңы әҙәбиәт тыуҙырасаҡмын, тинем. Бәлки, артыҡ яңғырауыҡлы һүҙ булып ишетелер, әммә шул тиклем яңы талант булһа, улар, һис шикһеҙ, яңы әҙәбиәт ижад итәсәк. Ә 300 йәш яҙыусы, бәлки, ил буйынса ла юҡтыр.*

20 декабрь 1987 йыл.

**16-да төштән һуң китапханаға тип институтка барғайным – бер ерҙә лә бер кем эшләмәй, ниндәйҙер техник сәбәп менән япкандар. Сыкһам, Н. Нәжмиҙе осраттым. Ул да ниндәйҙер йомош менән килеп, кайтып бара икән. Күҙ аяғын һындырғайны, әле таякка таянып йөрөй. Исәнлек-һаулык һораштык та ул үҙ юлы, мин үҙ юлым менән киттек.*

Шул сакта мин шағир халкының ни тиклем яңғыҙ икәнлеген, йөрәгем һыҙлап, тағы ла нығырак аңланым. Таякка таянып атлап барған сал шағирҙы күргәс, беҙ барыбыҙ ҙа ни тиклем яңғыҙбыҙ, тип тамакка төйөр килеп тығылды. Шул хәтле моңһоу булып китте. Горсоветка тиклем башты баҫып шуларҙы уйлап барҙым. Назар ағай минең менән нимәлер һөйләшер ҙә ине, беҙҙе ул һаман да бала-саға һымак күрәлер. Ә үҙ тиҫтеренән кем менән генә күңел бушап калгансы сер, һағыш уртаклашһын… Бер-береһе менән боҙолошоп бөттө бит акһакалдар. Чванов кисәһендә Мостай ағайҙы күрҙем, ул да кеше тулы залда сүлдәге яңғыҙ кеше һымак бер яңғыҙы ултырған шикелле ине. Хәйер, ололар ғынамы ни? Беҙҙең быуын да тырым-тырағай булып бөтөп бара бит инде. Кем менән генә уй уртаклашаһың да фекер алышып, зиһенеңде байытаһың. Шағир асылда ғүмере буйы яңғыҙ кеше, ул яҙмышы менән шул фажиғәгә дусар ителгән. Шуға ла ул туктауһыҙ яктылыкка, ихласлыкка, кешеләргә тартыла, дуҫлыкка, туғанлыкка сакыра, мөхәббәткә һыуһай. Шуға ла ул күптәргә диуана, сәйер булып күренә.

2 февраль 1988 йыл.

**Теоретик семинарҙа Нур Зариповтың докладыы, фольклор һәм халык тарихы, милли аң һ.б. тураһында. Беҙҙең байлык Ғилгәмештәрҙән алып бөгөнгә тиклемге араларҙа фекер йөрөтөрлөк күпме бай материал бирә. Эпос – халыктың иң боронго хазинаһы, иң боронго комарткыһы. Таштар онталып бөткәндә лә шул таштарға уйып яҙылған һүҙ халык күңелендә кала. “Ташкайҙарға сокоп яҙҙым каргыш, ейәндәрем укыр бер сакта”– ул таштар, ул таштағы яҙыуҙар кайҙа? Бармы бөгөн, юкмы? Ә ул һүҙҙәр, ул кәһәр, каргыш һаман халык күңелендә, ил бәгерендә.*

**Оло Ватан, берҙәм ил тойғоһо. Бер бола вакытында төрөктәр менәнме һуғыш башланғас, башкорттар үҙ теләктәре менән: “Беҙ әле Рәсәйебеҙҙе һаклар өсөн яуға китәбеҙ, шул аркала боланы туктатып торабыҙ, дошманды еңеп кайткас, батша, һинең менән яңынан һуғыша башлаясакбыҙ”, – тип алыҫ сәфәргә куҙғалалар. Яуҙан кайткас, үҙ хокуктарын яклап, яңынан баш күтәреүҙе дауам итәләр. Тарихыбыҙға алтын хәрефтәр менән яҙып куйырлык ни тиклем мәғәнәле вакиға бит был.*

24 февраль 1988 йыл.

**Кисә Союзда Рәшит Солтангәрәевтың ижади отчеты. Былай һәйбәт һөйләне, “шундай-шундай әйберҙәрем бар” кеүек шаблон түгел. Тик “иллегә тиклем концепциям булманы, неосознанно яҙҙым” тиеберәк йомғаҡлап ҡуйыуы оҡшаманы. Шуға һорау бирҙем. Етмәһә, ул һүҙҙәрҙе тотош быуын исеменән әйтә. Ишбулды 20 минутлыҡ телмәр әҙерләп килгән. Уның төп моменттарын ғына ҡалдырып һөйләһә лә етер ине. Хәким ағайҙың һөйләүенән һуң ашығып нәшриәткә киттем. Тик унда иртә таралғандар. Аҙаҡҡа тиклем ҡалаһы булған.*

2.10.88. Баҡсала.

**Шиғыр китаптарын уҡығанда әллә күпме биттәргә һуҙылған бушлыҡтарҙы үтәһең. Буш биттәр, йәнһеҙ донъя. Хәрефтәре бар, ысын һүҙҙәр юҡ. Йөкмәтке юҡ. Сүл менән дә сағыштырып булмай: сүлдә үҙенсә тормош бар, йән эйәләре бар.*

Ҡайһы бер йыйынтыҡтарҙа еләклеккә килеп сыҡҡан кеүекһең: һәр тарафта һутланып бешкән емештәр күҙҙең яуын ала.

**Ҡояш артынан бармайым, маҡсат артынан барам. Ҡояш әйләнгән һайын әйләнмәйем, ел боролған һайын боролмайым. Улар алға ла сығыр, артта ла булыр. Маҡсат ҡына – һәр саҡ алда.*

**Ике съезд араһында йөҙләп шиғри китап сыҡҡан, Мәскәүҙәген ҡушһаң, күберәк. 40-тан ашыуы – һуңғы яҙылғандарҙан. Шуларын байҡап сығылды. Кисә-бөгөн яҙа башлармын тигәйнем, старт алып булмай әле.*

11.10.88.

**Быға тиклем дә эштән баш сыҡманы. Бынан һуң ваҡыттың ҡәҙере һаман арта барасаҡ.*

Муйынымды һөлгө наҙламаны,
Ҡаты ҡамыт һуҡты муйынды.

Кисә, ниһайәт, докладты яҙып бөттөм. Материал күп йыйылған, индереп бөтөп булманы. Ике табаҡ самаһы булыр.

Съезд алды «әҙерлектәре». Әҙәбиәт тураһында һөйләгән кеше юҡ, кем түрә булыу тураһында төрлөсә баш ватыуҙар, «фараз итеүҙәр».

7.11.88.

**Йөҙ бесәйҙән бер арыҫлан эшләп булмай. Йөҙ ҙә нисә яҙыусылар союзы ағзаһы булғандан ғына гениаль әҫәр тыумай.*

**М. Булгаков. Мастер и Маргарита. Ошоға тиклем уны уҡымағаныма шул хаҡта һүҙ сыҡһа уңайһыҙ ине. Әллә ни күп нәмә юғалтмағаным икән. Бик үҙенсә күрә донъяны, тик барыбер мине тетрәтмәне. Подтекст та, ирония ла, ниндәйҙер шиғри моң да бар, тик шулай ҙа йөрәкте һыҙлатып, һулҡылдатып, һағыштарға һалып үтмәне был әҫәр. Әллә мин ортодоксаль бер ҡартҡа әйләнеп барам инде...*

6.01.89.

**Өс дан ордены кавалеры Хәниф Хажиғәли улы Абдрахманов институтҡа килеп, яҙмаларын ҡалдырып китте. Уйынлы-ысынлы: «Бәлки, берәй поэма яҙып ташларһың», – ти. Поэма яҙып булмаç, әлбиттә. Әммә баллада һымаҡ бер нәмә яҙмаçлыҡ түгел. Көрәшсе батыр, 15 йәшендә һабантуйҙа еңә, шул көндө һуғыш башлана. «Уның менән ат урларға мөмкин» тигән халыҡ һүҙе. «Уның менән разведкаға йөрөп була» тигән һуғыш һынауы. 17 йәштән – фронтта, 18 йәштән – член КПСС. Кандидатлыҡ срогын ҡыçҡарталар. Һуғыш күп сроктарҙы ҡыçҡарта. Разведчик, артиллерист, корректировщик, уҡытыусы, шахматист (I разряд), һәр көн халыҡ менән осрашыусы тәрбиәсе. «Пластунски» шыуышҡанда ергә йәшеренеп, ер ярығын табып булмай. Разведчик һәр саҡ әжәл менән күҙгә-күҙ осрашып йәшәй, уны һәр аҙымда үлем һағалай.*

16.01.89.

Үлгән телдең бер нисә һүҙен хәтерендә һаҡлап ҡалған попугай. Хәҙерге заманда кеше лә ошо бисара ҡош хәлендә ҡалырға мөмкин.

5.02.89.

**Кисә Әнүрҙең шиғырҙары менән ултырҙым. Ҡайһы берҙәренән һуң тамаҡҡа төйөр килеп тығыла. Тәүге шиғырҙарының күбеһе ҡоро, етмешенсе йылдарҙа – ихлас, хисле, яҙмышлы. Эш нимәлә һуң? Минеңсә, тәүгеләре матбуғат өсөн тип, икенселәре күңел өсөн, күңел бушаһын өсөн ҡуйын дәфтәренә яҙылған. Ысынлап та, шиғырҙар күңел көндәлеге булырға тейеш шул. Әнүр Вахитовтың күргән ҡайғылары... Баласаҡтан башлап фажиғәле яҙмышлы кеше.*

**Политизация литературы. Һуңғы ваҡытта был процесс ныҡ көсәйҙе. Был – илдең ижтимағи хәленән тыуған ҡотолғоһоҙ күренеш. Ләкин һәр кем, үҙенең ижади тәбиғәте, фекерләү, тойоу үҙенсәлеге, үҙ музаһы менән иçәпләшмәйенсә тороп, көсәнеп булһа ла «политизацияға», асыҡ публицистик рухҡа ынтылырға тейешме? Был – мотлаҡмы. Е. Гуцало («ЛГ», 1.02.89.) бик дөрөç әйткән, ҡайһы берәүҙәргә бынан тыйылып тороу, үҙ тәбиғәтенә хыянат итмәү хәйерлерәк. Шулай ҙа Женя политизацияның оҙаҡҡа барырына шикләнеп ҡуя. Минеңсә, тиҙ генә үҙгәрмәç кеүек. Әҙәбиәттең политизацияһы хөкүмәт, дәүләт үҙ вазифаһын тулыһынса үҙ ҡулына алғанда, бюрократия ныҡ ҡаҡшатылғанда (уның бөтөнләй бөтөүенә шикләнәм) ғына, әҙәбиәт үҙенең ысын художество функцияларын бөгөнгө кеүек дәүләт эшмәкәре йәки арбитрҙар, хөкөмдарҙар вазифаһын үтәүгә бүлмәйенсә, иркенләп башҡара алғанда ғына кәмейәсәк.*

(Дауамы бар.)

Венер Ғәзиз улы Сәхәүетдинов – Башҡортостанда киң билдәле шәхес. Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанган фән эшмәкәре, Башҡортостан Фәндәр академияһының мөхбир агзаһы. Атҡаҙанган табип булыу өҫтөнә, ижад менән дә күп йылдар шөгөлләнә. Уның «Мегаполис», «Тихая пристань» нәшриәттәрендә сыҡкан «Будь счастливым счастьем других», «Судьбы и времена», «Дети Агидели», «Забавы настоящего мужчины», «Мои руки, мои глаза, мое сердце – ваши» һ.б. китаптары бар. Уларҙа автор үҙе йәшәгән мөхит, ҡасандыр белгән, аралашҡан кешеләре тураһында тәрән фәлсәфәгә ҡоролган фекерҙәрен асып һала, теге йәки был ваҡигаларга шәхси ҡарашын белдерә.

Түбәндә журнал уҡыусыларга арҙаҡлы шәхесебеҙҙең бер нисә һүрәтләмәһен тәҡдим итәбеҙ.

Мәғрифәтсе

Бер нисә тиҫтә миллион ғүмерҙе алып киткән Бөйөк Ватан һуғышы барлыҡ совет ғаиләләренең дә тормошона ҡара ҡайғы алып килгән кеүек, минең бәләкәй генә тыуған ауылыма ла ҡағылды. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт гимназияһы, ә ул саҡта 9-сы мәктәп милли кадрҙар әҙерләү үҙәгенә әйерелде. Республиканың ҡайһы ғына тармағын алма, шунда уҡып сыҡҡан кешеләр эшләп йөрөй. Бәхеткә күрә, ул мәктәптә мин дә бишенсе класта бер йыл уҡып ҡалдым. Ә әсәйем тәрбиәсе булып эшләне. Ошо яҙмамдың төп геройы, ғаиләлә иң өлкән бала буларак, туғандарын аслыҡтан ҡотҡарған Мулләхмәт Аллағужин да ошо 9-сы мәктәптә белем алды. Уны «дүрт» һәм «биш» билдәләренә генә тамамланы. Өлкәндәр ҡорона ингәс, Мулләхмәттең ауыл хужалығы фәндәре кандидаты дәрәжәһен яҡлап, Тажикстан ауыл хужалығы институтында йылҡысылыҡ кафедраһы мөдире, доцент булып йөрөүе хаҡында ишетелде. Үҙем дә кафедра мөдире, профессор булып киткәс, Аллағужин менән осрашып-күрешеү тураһында хыялландым, һәм бер заман Дүшәнбе ҡалаһына ғилми командировкаға юл төштө.

Мине киң маңлайлы, ҡуйы ҡаштары аҫтынан төбәлгән ҙур ҡара күҙле, тар яңаҡлы интеллигент ҡиәфәтле кеше ҡаршы алды һәм уҡыусыһының машинаһында (үҙенеке юҡ икән) тәүҙә – ҡунаҡханаға, унан өйөнә алып китте. Өс бүлмәле «хрущевка» мебелгә фәҡир генә булһа ла, китаптар менән тулғайны. Тәү ҡарашҡа уҡ китаптарының һирәк осрай торғандары, уларҙы тәртип менән тотҡандары, китаптарҙы, бына күрегеҙ, беҙ ҙә уҡыйбыҙ, тип маһайыу өсөн йыймағандары күҙгә салынып тора.

Мулләхмәттең урыҫтан алған ҡатыны – аш-һыуға оҫталығын, ә улы Салауат менән ҡыҙы Эльвира скрипка һәм пианинола уйнап күрһәтте. Яҡташым менән әңгәмәнән һуң уның был яҡтарға нисек килеп сығыуын белештем. Мәктәп-интернатты тамамлағандан һуң ул бер дуҫы менән йылы яҡтарға китергә ҡарар

ҡыла, сөнки, ишетеп белеүенсә, был тарафтарҙа тормош еңелерәк, дүрт ай ҡыш булған Башҡортостандағы йыше йылы кейем һатып алырға кәрәкмәй. Бейек тауҙар араһындағы ҡышлаҡта ике йыл көтөү көткәндән һуң, Мулләхмәт ауыл хужалығы институтына барып инә һәм шунда аспирантурала ҡалып, уҡытыусы булып китә лә элекке СССР-ҙа ни бары өсәү булған йылҡысылыҡ кафедраһының береһенә мөдир итеп үрләтелә. Мулләхмәт Аллағужинды бөтә Тажиҡстанда, айырыуса – ауылдарҙа ниндәй ихтирам менән ҡаршы алғандарын күреп, иҫем китте. Тажиҡ телен бөтә камиллығында өйрәнеп, ул ауыл хужалығы белгестәренең бер нисә быуынын әҙерләгән, хеҙмәт һөйөүсәнлеге, аҡылы һәм бөтәһенә лә ярҙам итергә ихласлығы арҡаһында абруйлы кешегә әүерелгән. Һәр яҡлап белемле, Тажиҡстандың тарихын, көнкүрешен, сәйәси тормошоноң үҙенсәлектәрен энциклопедист кеүек белеүе менән ул миңә республиканың яртыһын тиерлек күрһәтеп сыҡты. Әлбиттә, Нурек ГЭС-ына һәм һыу һаҡлағысына ла алып барҙы. Айырылышҡас та беҙ оҙаҡ ҡына хатлашып торҙоҡ, китаптар менән алмаштыҡ.

Бына бер саҡ илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланды. Һуңғы хатында Мулләхмәт Салауат улының Иркутск ҡалаһында хәрби училищела, ә ҡыҙы Эльвираның медицина институтының икенсе курсында уҡып йөрөүе хаҡында хәбәр итте. Аллағужиндар фатирына ҡот осҡос һәләкәт көтмәгәндә килә: Тажиҡстан бойондороҡһоҙ дәүләт булып әүерелгәс, милләтселәр, моғайын, урындағы бандиттарҙыр, уларҙы байҙыр тип уйлап, фатирҙарына баҫып инә. Әлбиттә, бер ниндәй ҙә алтын-гәүһәрҙәр таба алмағас, язаларға тотоналар. Мулләхмәт, ир кеше булараҡ, ғаиләһен яҡларға тырышып ҡарағандыр инде, ләкин бандиттар уны ла, ҡатыны менән ҡыҙын да үлтереп сығып китәләр.

Шулай итеп, алыҫ Башҡортостандан килеп, бер нисә быуындың фәнгә күҙен асҡан, бәлә килгәндә ярҙамдан баш тартмаған, урындағы халыҡты үҙ туғаны кеүек яратҡан кешене әҙәм аҡтыҡтары яҡты донъянан яҙҙыра. Яҡташыма Башҡортостан ауыл хужалығы институтына кафедра мөдире булып күсергә, хатта фатир алырға ярҙам итергә йөрөгәндә ныҡышмалылыҡ күрһәтмәгенем өсөн генә үҙемде ғәйепләй алам. Бер хатында Мулләхмәт үҙенең күп һанлы туғандары килеп, маҙаһыҙлап йөрөүенән генә уңайһыҙланыуын белдергәйне.

Яҙмыштан уҙмыш юҡ, тип юҡҡа әйтмәгәндәр икән.

«Һуңғы могикан»

Аңлы бала сағым уның тирәһендә үтте: 1954 йылда ул мине комсомолға ҡабул итте. Мәскәүҙә кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлағандан һуң, «Минск» ресторанында банкетта ҡатнашты. Өфөгә ҡайтҡас, төп кәңәшсем булды һәм әле лә шул вазифала. Иң юғары дәрәжәләге чиновник, иҫең китерлек сәйәсмән, һәм уны яҡшы белгән кешеләр генә ул һөйләгәндәрҙе «юл аша» уҡырға кәрәклеген аңлай. Ҡаштары һәм сәсе тырпайып торған түңәрәк йөҙлө, һынап ҡараған бәләкәй эйәкле был кеше осрашҡанда беренсе булып йомшаҡ ҡулын бирә лә осло итеп уралған ҡағыҙ менән тешен таҙартырға керешә. Һиҙгерлеге, компьютерҙыҡылай хәтерле ағай һәр кем тураһында барыһын да белә, тәү күреүҙә үк кешегә баһа бирә һәм бик һирәк яңылыша. Уның көнкүреше лә ябай ғына, байлыҡ артынан ҡыумай. Ҡыҫҡаса, үҙе өсөн йәшәүҙән бигерәк, йәмәғәт өсөн йәшәй. Элекке етәкселәр, уның ошо һыҙатын иҫәпкә алыптыр инде, түбәнһетергә лә маташып ҡараны, әммә ул әле лә власта «политбюро» сифатында ҡала бирә.

Бер мәл мин ағайҙы шаяртып ҡарарға булдым: үҙеңдең ҡушаматыңды беләһеңме?

– Юҡ. Ҡыҙыҡ, ә кем тип әйтәләр?

– Микоян.

– Ни өсөн?

– Ул да бит Ильичтан Ильичҡаса инфарктһыҙ һәм параличһыҙ эшләгән, – тип көлдөм.

Һүҙ, әлбиттә, Анастас Иванович Микоян хаҡында. Ул карьераһын В. И. Ленин менән бергә башлай һәм ил өсөн иң ауыр мәлдәрҙе кисереп, КПСС Үҙәк Комитетының барлыҡ генераль секретарҙарынан һуң да иҫән ҡалып, Л. И. Брежневҡаса йәшәй.

Ағайым ихлас көлөп ебәрҙе. Мин:

– Тағы ла бер ҡушаматың бар бит әле, – тинем.

– Уныһы кем тағы?

– Дэн Сяо Пинь. Сөнки пәрҙә артында йөрөп етәкселек итәһең.

Ҡытай коммунистар партияһының генераль секретары Дэн Сяо Пинь 60 йәшкә етеп, пенсияға сыҡҡас та 20 йыллап кәңәшсе, ғәмәлдә Ҡытайҙың беренсе етәксеһе булып йөрөнө. Хатта ваҡ-төйәк ҡарарҙар ҙа уның ризалығы, раҫлауынан тыш ҡабул ителмәне. Ҡытайҙың донъя өҫтөнән хакимлыҡ итергә ынтылыуҙа ҙур уңыштарға өлгәшеүе уның исеме, уның идеологияһы менән бәйле. Донъя сәйәсмәндәренең уртаҡ фекеренсә, 20–30 йылдан һуң, йәғни 2040–2050 йылдарҙа, Ҡытай бөтә донъяға етәкселек итәсәк. Бөгөн уның үҙендә миллиард самаһы кеше йәшәһә, 200 миллиондан ашыу ҡытай башҡа тарафтарҙа: Америкала, Канадала, Европа илдәрендә көн итә. Рәсәй менән Ҡаҙағстанға сиктәш төбәктәрҙә ҡытай ғаиләһендә күпме бала тәрбиәләнеүгә сик ҡуйылмаған. Тимәк, 10–15 йылдан күп балалы ҡытайҙар күршелә буш ятҡан ерҙәргә ағыласаҡ, сөнки донъя сәйәсәтендә иҫәпләнеүенсә, биш квадрат километрҙа өстән дә аҙ кеше йәшәй икән, ул биләмәләр бер кемдеке лә түгел. Шуға күрә Ҡытайҙың география дәреслектәрендә, уҡыу карталарында бөтә Себер, Алыҫ Көнсығыш һәм Рәсәйҙең төньяғы, Ҡаҙағстан далалары Ҡытай төҫөнә буялған. Халыҡтың байтаҡ өлөшөн «бөйөк күсенеү»гә әҙерләй башлағандар ҙа инде.

Алда ни булырын кем генә белә. Хәйер, минең өҫтәлемдә дүрт изге китап та ята: Ҡөрьән, Библия, Тора һәм Буддизм. Уларҙың икеһендә иһә, донъя менән һары кешеләр етәкселек итәсәк, тип яҙылған. Бөгөн Германия мәктәптәрендә төрөк балалары күберәк уҡый, Францияла – ғәрәптәр. Канадала иһә ҡытайҙар миллионлап иҫәпләнә. Тимәк, ағайыма ҡушаматты дөрөҫ биргәндәр. Һоҡланырға кәрәк! Әммә ул йөҙөнә борсолоу ғәләмәте сығарҙы:

– Улай ярамаҫ ине. Ил менән бер кеше етәкселек итә – хөрмәтле президент.

Миңә әңгәмәләшемде, был хаҡта бер кемгә лә һөйләп йөрөмәм, тип тынысландырырға тура килде.

Ағайым «могикандарҙың һуңғыһы»на инә. Уның атаһы ла – «бөткән коммунист», колхозда ғүмер буйы партком секретары булып эшләне, халыҡҡа хеҙмәт итеүҙе үҙенең изге бурысы һанап, унан һуң ғына үҙе өсөн йәшәй торған кеше ине. Әлбиттә, Коммунистар партияһы ла үҙенә тоғролар҇ҙы әүрәтеп тотоу өсөн барыһын да эшләне: фатир алам тип интегергә түгел, махсус ашханала арзан хаҡҡа яҡшы туҡланыу, кейем-һалым, хужалыҡ кәрәк-ярағы алыу өсөн махсус магазиндар, буфеттар, махсус санаторийҙар, ял йорттары, махсус гараждар һ.б. Былар бөтәһе лә бушлай йәки ярты хаҡҡа һәм уларҙан ҡолаҡ ҡағып, ябай граждандар йәшәгән шарттарға кире ҡайтыу – үлемгә тиң баһаланды. Ауырып китеүҙән йәки операцияға ятыуҙан, етәксенән алда эштән ҡайтып китеүҙән Алла һаҡлаһын!

Етәксе, ғәҙәттә, Мәскәү ваҡыты менән, йәғни ике сәғәткә һуңлап эшен

йомғаҡлай, һәм унан алда эшеңде бөтөрөүҙең көтөлмәгән эҙемтәләргә килтереүе ихтимал. Ҡатыныңдың да ошо хәлдәрҙе аңлап эш итеүе мөһим, сөнки һин көнө-төнө эштә саҡта ғаилә мәшәҡәттәре уның өҫтөндә бит. Ҡыҙғаныска ҡаршы, атай кеше балаларына тәрбиә биреүҙә лә ҡатнашмай. Уларҙың улдары атай менән һунарға сығыу, ҡыр өйрәге атыу, төнгө усаҡ яҡтыһында уха бешкәнен көтөү, малайҙар менән һуғышҡанда яҡлашыусыны белмәй үҫә. Элита мәктәп (хәйер, ата-әсәһе йоғонтоло балаларға һүҙ әйтеү ҙә ҡыйын), иң яҡшы пионер лагеры, урам аша ғына институт һ.б. Уларҙы хатта эшкә урынлашыу мәсьәләһе лә борсомай, барыһы ла сираттан тыш. Әммә ғүмер буйы атай ышығында йәшәп булмай, үҙ аллы эшләргә лә ваҡыт етә. Ә ул ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы, коллективта үҙ-үҙеңде тота белергә лә кәрәк бит. Бына шундай һынауҙы күптәр үтә алмай, һына. Артабан ошондай ғаиләләргә, нәҫелде кем дауам итер икән, тигән кеүегерәк һорауҙар ҙа ҡабырғаһы менән килеп баҫа. Мин Башҡорт дәүләт медицина институты ректоры булып эшләгәндә, ғилми совет ағзалары менән ҡыҙыҡһындым. Ҡалала тыуып үҫкәндәр ни бары дүрт кеше булып сыҡты, ә 47-һе ауылдан килгән.

Олоғайыуы еткән булыуға ҡарамаҫтан, «Политбюро» һаман да хәрәкәтсән, уны ихтирам итәләр, республикала абруйы юғары. Күптәр унан кәңәш алыуҙы мәртәбә һанай, уның менән туғандарса мөнәсәбәтем өсөн көнләшеберәк тә ҡарай.

Фанатик

Фанатизмдың ни икәнлегенә мин 1997 йылда Мәккәгә хаж ҡылғанда, гүзәл Мәҙинәне күргәндә ныҡлап төшөндөм. Уның һуңғы сағылышы булып үлемде инҡар итеү иҫәпләнә, сөнки мөслимдәр был фани донъяла ҡунаҡ ҡына, ә мәңгелек тормош тегеһендә, бигерәк тә һин ожмахҡа барып эләкһәң. Был ләззәт донъяһына юлығыуҙың юлдары төрлө: фанилыҡта иман менән йәшә, ғәҙел бул, бер ҡасан да Аллаһы Тәғәләне иҫеңдән сығарма, ғәмәлдәрең Ҡөрьәнгә ярашлы булһын! Ожмахҡа хаж ҡылып та йәш килеш, мәҫәлән, Аллаһы Тәғәлә рухына ҡаһарманлыҡ ҡылып, йәғни изге юлда йөрөп һуғышҡанда шәһит китеп тә эләгергә мөмкин.

Фанатиклыҡ йоғонтоһон фани донъя һәр даим тойоп йәшәй. Кемдәрҙер төрлө дини секталар ойоштороп, үҙен-үҙе яндырыу юлы менән «теге донъя»ла ожмах вәғәҙә итә. Кешенең аңын үҙгәртеп, уны теләһә ҡайһы бойороҡ-күрһәтмәне лә үтәрлек хәлгә килтереү – хәрби лабораториялар, төрлө секта һәм ойошмалар башлыҡтарының хыялы ғына түгел, хатта төрлө йүнәлештәрҙә эш иткән сәйәсмәндәрҙең дә маҡсаты. Уны ғәмәлгә ашырыу өҫтөндә ғилми-тикшеренеү, психологик институттар эшләй һәм «юлбашсы» тирәләй уға тоғро һәм идея өсөн ғүмерен фиҙа ҡылырға әҙер кешеләр туплау өсөн бар һәләтен эшкә егә. Тәү ҡарашҡа барыһының да маҡсаты изге кеүек: бәләкәй йәки оло тыуған илде һөйөү, бөйөк милләткә тоғролоҡ һ.б.

Бер идеологияға ҡаршы икенсеһе тора, бер-береһенә ҡаршы мөнәсәбәттәрҙе ҡырҡыулаштыра барып, ҡан дошманға әүереләләр һәм үҙ-ара һуғышырға тотоналар. Мәҫәлән, Сталин менән Гитлер, Ираҡ менән Иран. Бында инде идеологтар ғына зыян күреп ҡалмай, олоһонан кесеһенә тиклем тиҫтәләрсә, хатта йөҙҙәрсә миллион кеше интегә. Һәр бомба, снаряд, пуля, дары менән бергә идеология ла буталған. Атом бомбаһы ла шуны ҡеүәтләй бит: ике идеологияның критик хәле саманы ашһа, мотлаҡ шартлау, һуғыш барлыҡҡа килә. Был осраҡта ла еңеү фанатиклыҡ көслө булған яҡҡа ауыша. Миҫалға америка-япон

һуғышындағы камикадзеларҙы килтереү ҙә етәлер. Тәүге һуғышта уҡ һәләк булған адмирал етәкселегендә ике меңләп һалдат бомба менән тулған тәгәрмәсһеҙ самолетта Америка караптарына һөжүм итә лә аҙна эсендә уларҙы тулыһынса ҡыйрата. Һәләк булған егеттәрҙең барыһы ла, билдәле, ожмахҡа эләкте. Ә бит пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт тә (уның даны быуаттарға етһен!) үҙенә фанатиктарса тоғро юлдаштары-сәхәбәләр менән үҙҙәренән күпкә көслө дошмандарын ҡыйратҡан һәм донъяла саф, кешелекле дин – Исламға нигеҙ һалған. Беҙҙең Советтар Союзы халҡы ла Бөйөк Ватан һуғышында Коммунистар партияһының көслө идеологияһы арҡаһында ғына еңеп сыҡты. Партияға йыш ҡына окоптарҙа, блиндаждарҙа ҡабул иткәндәр. Коммунистар һөжүмгә беренсе булып күтәрелгән. Тәүге дошман пуляһы ла уныҡы булған һәм коммунист идея өсөн ғүмерен биргән! Билдәле, КПСС сәйәсәте, уның сафтарына мәжбүри ҡабул итеү менән килешмәүселәр ҙә аҙ булмаған. Ул турала көләмәстәр ҙә ижад ителгән.

...Рядовой Мойше Абрамович, окопта ултырып, батальон комиссарына ғариза яҙа: «Әгәр ҙә мин иртәгә исемһеҙ ҡалҡыулыҡҡа һөжүм ваҡытында һәләк булһам, мине «коммунист» тип иҫәпләгеҙ. Юҡ икән – юҡ».

Йәки партия ағзалығына ҡабул итеү бара. Секретарь: «Тәмәке тартаһыңмы?» – тип һорай. Ир кеше: «Аҙ ғына, көнөнә ярты ҡап», – тип яуаплай. Секретарь: «Коммунист тәмәке тартырға тейеш түгел, – ти. – Эсәһеңме?» Ир кеше: «Әллә бармы?» Секретарь: «Партиялының эсергә хоҡуғы юҡ! Ҡатын-ҡыҙға мөнәсәбәтең нисек?» Ир кеше: «Ҡайһы саҡ гонаһ ҡылып ҡуйған бар». Секретарь: «Коммунист бер ҡатынды ғына яратырға бурыслы. Ә партия хаҡына ғүмереңде йәлләмәйһеңме?» Ир кеше: «Ризамын. Ундай тормоштан ни мәғәнә?!»

Һалдаттарҙың бихисаплығы менән нығытылған коммунизм идеяһы, беҙ 27 миллион, ә немецтар 14 миллион кешеһен юғалтыуға ҡарамаҫтан, фашистарҙыҡынан көслөрәк булып сыҡты. Бөйөк Еңеү донъяны, айырыуса Европаны фашизм ҡоллоғонан азат итте. Николай Островскийҙың «Ҡорос нисек сыныҡты?» романы ярты быуаттан ашыу миллиондарҙың яратҡан китабы, кемгәлер оҡшарға тырышыу өлгөһө иҫәпләнде. Авторҙың тормошона һоҡландылар, михнәт сигеү күренештәре әхлаҡи ҡәнәғәтлек тойғолары уятты. Ләкин һәр партия, теләһә ниндәй идеология үҙенең төп маҡсаты итеп власты ҡулға төшөрөүҙе иҫәпләй. Әгәр ҙә бындай идеология илдә берҙән-бер булһа, ул партияның ҡасан да булһа юҡҡа сығыуына килтерә. Бер-береһе менән тиңдәр позицияһынан тороп ярыша алған ике фирҡәлек йәмғиәт өсөн отошло, был партиялар, арбасананың ике тәртәһе кеүек, илде алға тарта, күршеһенең юлдан тайпылып китмәүен күҙәтә. Миҫалға республикандар һәм демократтар фирҡәһе булған АҠШты килтерергә мөмкин. «Өсөнсө донъя» тип аталған дәүләттәрҙә ундай мөмкинлек юҡ, уларҙа президентлыҡҡа кандидатты һайлаусыларҙың 95–99 процентының тауышын йыйыуы ла ихтимал.

Беҙҙең быуын «дәүерҙең аҡылы, намыҫы булған Коммунистар фирҡәһе» осоронда тәрбиәләнде. Мин дә уның яҡты идеалдарына ышана торғайным һәм әле лә әллә ҡасан алған партия билетын ҡулға алып, саң-туҙанын һөртөп ҡуям. КПСС-тың үрге баҫҡыстарында ниҙәр булып ятҡаны һуңғы партия конференцияһында ғына асыҡланды, сөнки колхоз һәм совхоздарҙа фирҡә йыйылыштары әҙәплерәк үтә торғайны.

Трибунаға сыҡҡан ошоғаса ихтирамлы, ил яҙмышын үҙ ҡулдарында тотҡан кешеләрҙең ауыҙынан сыҡҡандарҙы һеҙгә лә ишетергә кәрәк ине. Баҡтиһәң, был күптән инде коррупция ойлаған, үтәнән-үтә серегән төркөм, күп ҡатлы

йорт, дәүләт эсендәге дәүләт! Миллиондарса эшсе-крәҫтиән һәм интеллигент түләгән взностарға ашап һимергән партия элитаһы өсөн бихисап санаторий, курорт, ял йорттары, тулы метражлы махсус (ике кешегә 100 квадрат метрлы фатирҙар, өлкә партия комитетында – айырым коттедждар, хәҙер улары юҡ шикелле), профессорҙар хеҙмәтләндергән махсус дауаханалар, ҡиммәтле мехлы бүрек-тундар ҡайтарылған магазиндар, махсус транспорт, махсус гараж, йәғни «тулы социаль пакетлы» дәүләт. Ысынлап та, дәүләттә халыҡтың 5 проценты сыҙаша алмай башлаһа, ә ҡалған 95 проценты фәҡирлектә йонсоһа, «ҡыҙыл», «һарғылт», «йәшел» инҡилапты көт тә тор! Мәҫәлән, Румынияла Чаушескулар, Ҡырғыҙстанда Бакиевтар, Иранда Саддам Хөсәйендәр ғаиләләре менән шулай булып бөттө. Ошо рәүешле Коммунистар фирҡәһе лә тарихҡа инеп юғалды, күп өлөштәргә тарҡалды. Бәлки, уның ҡайһылыр сарпылары көлдән аяҡҡа баҫып, ҡайтанан үҙ хеҙмәте иҫәбенә көн күргән хеҙмәтсәндәрҙең өмөтө һәм аҡылына әүерелер.

Әйтеп үткәнемсә, беҙҙең быуын Николай Островскийҙың геройы Павел Корчагин, «Коммунист» фильмындағы төп образдар – фанатик коммунистар өлгөһөндә тәрбиәләнде. Ошоға ябай коммунист булған атай һәм ағайҙарыбыҙ – шофер, малсы, уҡытыусы һ.б. өҫтәргә кәрәктер. Партия саҡырыуына һуҡырҙарса эйәргән был кешеләр төрлө ҡаһарманлыҡҡа, хатта ғүмерен ҡорбан итергә лә әҙер булды. Ошондай кешеләрҙең сағыу өлгөһө булып КПСС-тың Мәләүез район комитетының элекке беренсе секретары Ә. Ваһапов хәтеремдә яҡшы һаҡлана. Хәҙерге кеүек, ул саҡтарҙа ла «район хужаһы»н «юғары»нан килтереп ҡуйғайнылар. Эре кәүҙәле, сөм-ҡара тимер сыбыҡ кеүек сәсле, төптән ҡараған зәңгәр күҙле, йүгерек иренле был кеше миңә беренсе ҡараштан уҡ был донъяныҡы түгел, ә психиатрия дауаханаһы, дөрөҫөрәге, психопатия пациенты булып күренде. Әгәр ҙә ул төнгө берҙәрҙә йоҡларға ятып та сәғәт дүрттә аяғына баҫа икән, был кеше тураһында башҡаса уйлау мөмкин түгел. Үҙе тороп ҡына ҡалмай, будильник кеүек, үҙенә буйһонғандарҙы ла аяғүрә баҫтыра, фермалар, баҫыуҙар буйлап йөрөй.

Бер саҡ Ваһапов кукуруз баҫыуын һөрөп йөрөгән ауылдашым-дуҫым Әнүәр янына килеп сыға. Резина итек, фуфайка кейгән был ирҙе Әнүәр күрмәй ҙә ҡала. Ерҙә ятҡан сыбыҡ киҫәген алып, Ваһапов һөргән ерҙең ҡалынлығын үлсәй ҙә, яман һүгенеп, тракторсыны әрләргә тотона.

– Һин ни эшләп миңә һүгенәһең? Кем һин, ҡайҙан килеп сыҡтың бында? – тип аптырай Әнүәр. – Һабан һуңғы сиккәсә төшөрөлгән бит, күрмәйһеңме ни? Оҡшамай икән, үҙең ултыр ҙа һөр!

– Ах, һин!.. – тип һүгенеп дауам итә Ваһапов. – Мин райком секретары. Миңә тупаҫлыҡ күрһәткәнең өсөн, беләһеңме, мин һине ни эшләтәм, – ти ҙә рация аша район прокурорына шылтырата. Иртәнге алтынсы ярты икәнен ул, күрәһең, башына ла килтермәй.

– Һинең маңлайыңа беренсе секретарь икәнлегең яҙылмаған бит, – тип үҙенекен ҡырталаша Әнүәр. – Мин уны ҡайҙан беләйем? Секретарь икәнһең, кабинетыңа инеп ултыр ҙа шунан командалыҡ ит! – Тракторсы ҡулына ҙур гайка асҡысы ала ла Ваһаповҡа ҡаршы атлай.

Бер һүҙ өндәшмәй, секретарь УАЗ машинаһына ултыра ла баҫыуҙан сығып китә. Иртәгәһен колхоз рәйесе үҙ ихтыяры менән эштән китеү тураһында ғариза бирә, ә Әнүәргә баҫыуҙа булған аңлашылмаусылыҡты бер кем дә иҫенә төшөрмәй. Ваһаповтың садистарса ҡыланыуын, йәғни колхоз рәйестәре менән бригадирҙарҙы һөрөлгән баҫыу ҡырына килтереп, үҙе машинаһы багажнигынан

итек алып кейеп, һөргән ергә инеп китеүен, моғайын, кемдәрҙер әле лә онотмағандыр. Ә туфли ғына кейгән теге меҫкендәр ни эшләһен, эре аҙымлаған секретарь артынан эйәрмәй саралары юҡ. Ҡайһы берҙәренең хатта бысраҡта аяҡ кейемдәрен һалдырып, ойоҡсан ғына килеп сыҡҡан мәлдәре лә булғылаған. Кәмһетелгән, әҙәм ҡолағы ишетмәҫ һүгенеүҙәрҙән һуң был етәкселәр яҡшы кейем, ялтырап торған ботинканы ябай крәҫтиән кейеменә алмаштырып йөрөргә мәжбүр була.

Бер кемдең дә үҙенә ҡаршы тора алмағанын күреп, Ваһапов тағы ла нығыраҡ ҡотора: әшәке һүгенеү хәҙер район комитетының бюро ултырышында ғына түгел, ҡала һәм район етәкселәре, шул иҫәптән ҡатын-ҡыҙ ҙа ҡатнашҡан планеркаларҙа ла яңғырай. «Насар немец» ҡушаматы алған Ваһапов бер нисә инфаркт һәм инсульт сәбәпсеһе лә була. Әммә уның күңеленең ҡайһылыр бер мөйөшөндә йәлләү тойғоһо һаҡланғандыр. Минең менән, мәҫәлән, ғүмеренең һуңғы көндәренәсә «дуҫ» булды. Бер мәл уның ауыҙынан түбәндәгеләрҙе ишеттем.

Бер мәл Ваһаповҡа М. колхозы рәйесе өйөндә туй үтеүе хаҡында хәбәр еткерәләр. Иртә менән барып инһә, өҫтәл артында бер нисә ир «баш йүнәтеп» ултыра. Уның: «Ҡайҙа председатель?» тигән һорауына ирҙәрҙең береһе урынынан тора ла, ҡаршы килә биреп: «Ана, карауат аҫтында ята, тапмаһаң, икмәк шүрлегеңә ҡундырам», – ти икән. Асыуынан шартларҙай булған беренсе секретарь баҫыуға комбайндар янына юл тота һәм колхоз рәйесен шунда осрата. Яҡыныраҡ барып еҫкәштереп ҡарай, әммә алкоголь еҫен һиҙмәй. Бер аҙнанан рәйес өҫтөнән исемһеҙ хат килеп төшкәс, Ваһапов тегене партиянан да, рәйеслектән дә һөрә.

Уның хәбәрен һөйләп бөткәнен дә көтмәй китеп барҙым. Күстәнәсенән (был Нөгөш һыу һаҡлағысында булды) баш тартырға тура килде. Артабан уның менән осрашмаҫҡа тырышһам да, уның үтенесе буйынса (мин табип бит әле) ҡыҙына операция яһарға, дауаларға тура килде.

Ул район менән ҡалаға етәкселек ҡылған йылдарҙа, артабан яҡташтарымдың һөйләүе буйынса, уның башбаштаҡлығынан, аяуһыҙлығынан бер нисә кеше ауырыуға һабыша, хатта һәләк була. Үҙенең ҡол биләүселәргә хас психологияһы менән «юғарыла»ғы түрәләргә нисек оҡшай алғандыр, һуңынан Ваһапов министр булып китте. Ышанһағыҙ ышанығыҙ, ышанмаһағыҙ – юҡ, министр үҙе лә анонимка арҡаһында оло ҡазаға тарыны. Өҫтөнән яҙған кеше лә уның ҡул аҫтында эшләгән булып сыҡты. Ә инде төптәнерәк соҡоп ҡарағас, әҙәм ышанмаҫ хәл асыҡлана: Ваһапов үҙе менән бергә эшләгән кеше исеменән үҙе өҫтөнән анонимка яҙа ла һуңынан был кеше өҫтөнән мәхкәмә ойоштора икән. Был уның ғорур һәм баш бирмәҫ кешеләрҙе һындырыу буйынса үҙенсәлекле алымы булған.

Ваһаповты вазифа баҫҡысынан юғарыға этәргән кешеләр был хурлыҡҡа нисек түҙгәндер, белмәйем, әммә уны Башҡортостандан ситкә һөрөү яғын хәстәрләнеләр: Коми АССР-ына совхоз директоры итеп оҙаттылар. Ә унда был «шәхес»тең ҡылыҡтары тураһында хәбәр тиҙ арала барып етеп, ни менәндер ҡурҡытып ҡуйғас, кисәге министр тиҙҙән ауылына ҡайтырға мәжбүр була. Бында ла ауылдаштары маҙа бирмәй, быуала батырырға маташып, ғаиләһендә лә хәлдәр ҡатмарлашҡас, Ваһапов ит комбинатының мал базаһына ветврач булып урынлаша һәм шунда уның ҡорос организмы тамам һына.

Бына шулай, бөйөклөктән хурлыҡҡа – бер аҙым. Хурлыҡҡа төшөргән һуңғы көндәрен власть даирәләрендә үткәргән көр тормошоңдо бер һелтәүҙә юҡҡа сығарасағын беребеҙгә лә оноторға ярамай.

Етем

Ярты быуат самаһы элек ырҙын табағы янынан үткәндә (ә ул ни эшләптер районда берҙән-бер урта мәктәп менән йәнәш урынлашҡайны) мин тарамыштарҙан ғына торған ҡыҫҡа буйлы малайҙың ике ботло герҙе уйнап ҡына күтәргәнен күреп, аптырай торғайным. Бәләкәйҙән атайһыҙ үҫкән был малай өйҙә хужа булырға иртә өйрәнгән: Ағиҙел үренән 30–50 саҡрым ары утын әҙерләү, уны һал менән ағыҙыу, артабан яр буйынан арбаға тейәп ташыу еңел эш түгел. Унан ары һарайҙағы малды ҡарау, баҡсаны тәрбиәләү, бесән әҙерләү ҙә уның өҫтөндә. Ауыр эш башҡарырға өйрәнеп, ҡәнәғәтлек алыу артабан егетте физкультура техникумына алып килә һәм, Н. С. Хрущевтың студент ашханаларында икмәк менән шәкәрҙе бушлай биреү тураһындағы указы арҡаһында, уҡыу йортон бик уңышлы тамамлап сыға. Ул 50 йәшкә еткәндә, Өфө ҡалаһында исеме бөтә донъяға билдәле күҙ ауырыуҙары профессоры Г. Т. Ҡоҙаяров, авиация институты ректоры А. П. Фенин, композитор З. Ғ. Исмәғилев, артистар, яҙыусылар һ.б. билдәле шәхестәр уның менән итәғәтле иҫәнләшеп үтә торғайны. Уның сере шунда: Әмир Ихсан улы Дәминев үҙенең иптәштәре менән бер нисә йыл уларҙың йорттарында булып, ҡыш буйына етерлек утын әҙерләне: бысты, ярҙы, әрҙәнәләргә өйҙө. Үҙ эштәрен иренә еткереп башҡарҙылар, шуға күрә эшкә яллаусылар көнөнә ике тапҡыр ашатыуҙан да баш тартманы. Хәйер, ул замандарҙа бындай йорттарҙа йыйыштырыусы-ашнаҡсылар тотоу, ә ризыҡты махсус урындарҙан алыу модаһы бөтмәгәйне. Утын әҙерләүҙең хаҡы 30 тин һәм уға туйғансы төшкө аш ашарға мөмкин ине.

Иң ғәжәбе шунда: алты спорт төрө буйынса беренсе разрядҡа эйә булып та, «СССР-ҙың спорт мастеры» исеменә лайыҡ була алмаған өсөн Әмир Дәминев һуңынан, әлбиттә, ҡаты үкенде. Ә бит тренерҙары уға чемпион титулдарын, айырыуса ирекле көрәш буйынса, аҙ фаразламаны. Эх!

Бына техникум йылдары ла артта ҡалды, йәш егетте үҙе кеүек йәш Күмертау ҡалаһына эшкә ебәрҙеләр. Бында ул, үҙенең ҡарамағына, бик аҡыллы ҡыҙ менән ғаилә ҡороп ебәрҙе, бер-бер артлы ике улдары тыуҙы. Яратҡан һөнәренә үҙен тулыһынса бағышланы Дәминев, уҡыусыларының, ҡала халҡының ихтирамын яуланы. Бер заман ошо ҡаҙанышы өсөн үҙен ҡаланың почетлы гражданины тип иғлан иттеләр. Ғөмүмән, тормош баҫҡыстарынан лайыҡлы күтәрелде ул. Бәләкәй улы юғары белем тураһында диплом алғандан һуң Әмирҙең ғаилә ҡоронда әйткән түбәнге һүҙҙәре мине тамам ғәжәпкә ҡалдырҙы.

– Ҡасандыр минең ғаилә хәлем вузға инеп, диплом алып сығырға мөмкинлек бирмәне, – тине ул. – Хәҙер улдарым, килендәрем, туған-тыумасам мине юғары белемле булмауҙа ғәйепләмәһен өсөн, ситтән тороп булһа ла институтҡа инергә ҡарар иттем.

Дәминев һүҙендә торҙо. Диплом алғандан һуң да балалар уҡытты, йәштәрҙе тәрбиәләне. Уға башҡаларҙың ихтирамы артҡандан-артты. Әммә яҙмыш һәр ҡайһыбыҙҙың өҫтөнән ҡаты һынауҙар ойоштормаһа, «яҙмыш» тип аталмаҫ та ине. Үҙ алдарына ғына йәшәп, ейән-ейәнсәрҙәре лә бер-бере артлы тыуа башлағас, пенсияға сығып тыныс ҡына донъя көтөргә ине лә бит. Транспорт фажиғәһендә ҡатыны һәләк булды. Иң үкенеслеһе шунда: руль артында Әмир үҙе ине. Элек ауыҙына иҫерткес эсемлектәрҙе бер ҡасан да алмаған ир эскелеккә һабышып ҡараны, ләкин ваҡытында туҡталырға үҙендә ихтыяр көсө тапты. Унан башкөлләй эшкә сумды һәм шунда ғына һөйөклө ҡатынын юҡһыныуҙан ниндәйҙер толҡа таба торған булды. Яңғыҙы йәшәгәнен белеп, йөрәгенә юл һалырға ынтылған ҡатындарҙың береһенә лә күҙ һалманы.

Ярты быуат самаһы дуҫ булып йәшәүебеҙ тураһында әллә нимәләр яҙырға мөмкин булыр ине. Беҙҙе бергә бәйләгән төп еп, моғайын, һыу туристары сифатында Ағиҙел үренән түбәнгә бергәләп сәйәхәт итеү булғандыр. Башҡортостандың иң оло йылғаһына һөйөүем шул саҡлы көслө ине, унда Йомағужа һыу һаҡлағысы төҙөлгәс, ултырып иланым. Сөнки бөтә бала сағым, йәшлегем уның буйҙарында үтте. Хәйер, был турала мин «Ағиҙел» журналының 2009 йылғы 2-се һанында яҙып сыҡҡайным инде.

Әмир үҙенең берҙән-бер һәм һуңғы мөхәббәте – Зина-Зинаидаға, ә үҙенең теле менән әйтһәк, Зинелгә тоғро ҡалды. Әлбиттә, уларҙың күңел йылыһын һаҡлаған фатирҙары буш тормай: йәй етһә, ейән-ейәнсәрҙәре килә, ҡышын – улдары, таныш-белеш, дуҫ-иштәр.

Шулай оҙон ҡышҡы кистәрҙең береһендә ишек ҡыңғырауы тауыш бирҙе. Асып ебәрһә, тупһала 16 – 18 йәштәрҙәге үҫмер баҫып тора. Йорт хужаһына уның йөҙө таныш кеүек күренде.

– Әмир ағай, был мин Йософ, Абакарҙың улы, – тип һүҙ башланы ҡунаҡ. – Беҙ Чечнянан килеп, һеҙгә ҡаршы фатирҙа йәшәп киткәйнек. Хәтерегеҙҙәме? Атайым, әгәр Күмертауҙа булып, ҡунырға урын таба алмаһаң, ҡаршылағы фатир ишеген ҡаҡ, тине. Унда бик игелекле Әмир йәшәй, ул һиңә ярҙамдан баш тармаҫ.

Хәтерләмәй буламы һуң инде? Ошо ҡара сәсле теремек малайға Әмир нисә тапҡырҙар кәнфит тотторop китте, уйынсыҡтар ҙа бүләк иткеләне. Ә бер мәл хатта техникумдың спорт базаһынан иҫке коньки алып ҡайтып бирҙе. Һуңынан чечен ғаиләһе ҡайҙалыр күсеп китте, һәм бына алты-ете йыл үткәс, инде егет ҡорона инеп барған Йософ уның ҡаршыһында баҫып тора. Өҫтөнә еңел генә куртка кейгән, арҡаһында юл тоҡсайы ла күренә. Кухняла икәүләп кенә киске ашты ашағандан һуң, Әмир үҙенең бик иртә балыҡҡа китәсәген әйтте лә, запас асҡыстарын ҡалдырасағын белдереп, егеткә залға урын йәйҙе, үҙе кухняға яҡын урында йоҡларға ятты.

Төнгө сәғәт өстәр тирәһендә Әмир ниҙәндер һиҫкәнеп күҙен асып ебәрһә, урамдан төшкән яҡтылыҡта бер ирҙең үҙенә тимер бырау менән киҙәнгәнен күрҙе. Тиҙ генә ялтанып, йорт хужаһы саҡырылмаған ҡунаҡтың эйәк аҫтына төрттө. Урынынан күтәрелеп, коридорға сыҡһа, теге әҙәм оло бысаҡ тотоп, уны көтөп тора. Тәү киҙәнгәнендә бандиттың бысағы Әмирҙең муйынын телеп үтте. Икенсе удар йөрәккә төбәп яһалһа ла, йорт хужаһы уң ҡулы менән ҡаршы торорға өлгөрҙө һәм усын яраланы. Ул арала саҡырылмаған ҡунаҡ күлдәксән генә урамға сығып ҡасты.

Муйынындағы яраһын таҫтамал менән урап ҡарағайны, ул тиҙ арала ҡанға батты. Ҡанын күп юғалтыуҙан хәле бөтә барған Әмиргә күршеләре «Ашығыс» машинаһын саҡыртты. Дауаханала уның муйынын 15 урындан тектеләр, ҡулындағы яраны ла дарыуланылар. Быны менән генә михнәт сигеү тамам булманы, тарамышы киҫелгән урта бармағы эренләй башлағас, уны бөтөнләй киҫеп ташланылар. Яралар менән бергә йөрәген дә дауаларға тура килде.

Беҙҙең дуҫлыҡ артабан да дауам итте. Ай һайын осрашып торабыҙ. Нөгөш йылғаһы буйлап сәйәхәт ҡылырға иҫәп бар. Ағиҙелдә плотина ҡорғандан һуң был йылғаның да кеше миһырбанһыҙлығы ҡорбанына әүерелеүе ихтимал. Беҙ балыҡ менән тулы йылғаларҙы, йыртҡыс йәнлек тулы урмандарҙы, һаҙ ташбаҡалары йәшәгән сихри күлдәрҙе, химикаттар менән ағыуланмаған болон һәм далаларҙы күргән һуңғы быуын булып ҡалыу ғына эсте бошора.

Оҡшаш яҙмыштар

Яҙыласаҡ хәтирәләремдең алфавитын төҙөп ултырғанда, «Я» хәрефенә еткәс, ниндәйҙер илаһи көс мине яңынан «А» хәрефенә ҡайтырға мәжбүр итте. Әйтергә кәрәк, минең тәүҙә үк был тарих тураһында яҙғым килмәгәйне. Эйе, ул саҡта беҙҙең барыбыҙға ла ни бары 18-19 йәш, йәғни ғүмеребеҙҙең иң гүзәл сағы һәм циркты хәтерләткән аудиторияла лекция тыңлау менән бергә яҡынтирәбеҙҙә ултырған ҡыҙҙарға күҙ атып, ҡараштарын тотоп алырға хыялланып йөрөгән мәл. Мин бәләкәйҙән ҡатын-ҡыҙға Аллаһы Тәғәләнең үҙе кеүек ҡараным, улар алдында һәр саҡ ҡаушап ҡала торғайным, һәм ҡыҙҙарҙың сәтәкәй бармағына ҡағылып алыу ҙа минең өсөн аңлатып биргеһеҙ рәхәтлек килтерә торған булды. Тап шул арҡала ҡыҙҙар менән бер нисә ай йөрөгәндән һуң улар мине ташлап китер булды. Ул «йөрөү» тигәнем дә киноларға барыу, урамдарҙа бергә саф һауа һулап йөрөүҙән уҙманы. Һуңынан, ир ҡорона ингәс, мин ҡыҙҙарҙың ни өсөн шулай ҡыланғанына яуап таптым. Үҙем дуҫлыҡ ептәре менән бәйләнергә теләгән ҡыҙҙарҙың бөтәһе менән дә тиерлек һөйләшеп сыҡҡандан һуң асыҡланған яуап мине тетрәндерҙе. «Һин быҙау кеүек инең бит. Ә беҙгә ҡосаҡлашырға, үбешергә кәрәк. Һинән бер һүҙ тартып алып булмай. Телеңә йә ҡулыңа иркенлек бирһәң, шунда уҡ ҡыҙарына торғайның, ә ҡыҙҙарға ысын ирҙәр кәрәк, улар менән ҡыҙыҡлыраҡ, күңеллерәк. Һинең ғалим, етмәһә профессор булып китәсәгеңде белгән булһам, бер кемгә лә бирмәҫ инем дә бит».

Рәмилә Ибраһимованың иғтибарын ниндәйҙер дәрәжәлә яулау өсөн миңә бик күп көс түгергә тура килде. Ҡалала тыуып үҫкән был ҡыҙыҡай төҫ-башҡа сибәр, өҫтәүенә, бик ыҫпай кейенә лә ине. Ҙур ҡара күҙле, оҙон керпекле, ҡуйы ҡара ҡашлы, ап-аҡ маңлайлы, ҡабарынҡы иренле һәм нәҙек билле, тулы күкрәкле ҡыҙға ғашиҡ булмау мөмкин дә түгел. Шулар өҫтәүенә Рәмилә игелекле лә булып сыҡты. Уның менән дуҫлашырға зар-интизар икәнлегемде һиҙеп, ул тәүге осрашыуға шунда уҡ ризалыҡ бирҙе. Көн иткән урындарыбыҙ ҙа яҡын ғына ине. Ни эшләптер уның менән үҙемде иркенерәк тоттом, осраша башлауыбыҙҙың икенсе йылында, башҡа егеттәр кеүек үк, миңә лә ҡыйыулыҡ өҫтәлде.

Мин йәшәгән фатир хужабикәһе Хәтирә инәй, мин уны үҙ әсәйемдәй күрҙем, Рәмиләнең ғаиләһе менән яҡшы таныш. Мин дә уларға иркен барып йөрөй башланым һәм дүртенсе курсты тамамлағандан һуң өйләнеү хаҡында пландар ҡорҙом. Иҫәп Хәтирә инәйҙең йортонда бергә йәшәү ине. Ләкин көтмәгәндә ябырылған бәлә, ә мин уны күп йылдар үткәндән һуң ғына асыҡлай алдым, пландарымды селпәрәмә килтерҙе. Баҡтиһәң, мин ауылда тыуып үҫкән егет булғас, ҡыҙҙың ата-әсәһе уны, ул яңы ғына кирза итектәрен һалып ташлаған ауыл кешеһе, һине районға алып китһә, унда һыйыр һауырға тура киләсәк, тип ҡурҡытҡан, имеш. Ә Рәмилә ғаиләлә тыңлаусан бала, ата-әсәһенең һүҙен йыҡмайым тип, күрәһең, минең менән араны өҙөргә ҡарар итә. Әлбиттә, был аҙымдың үҙе өсөн үлемесле, мине лә бик ауыр хәлгә ҡуясағын күҙ алдына ла килтермәй.

...Февраль кисе. Аҡрын ғына яуған эре ҡар бөртөктәре урам фонары яҡтыһында бик матур күренә. Рәмилә саҡырғас, мин тиҙ генә уның янына, урамға, атылдым. Ул минән ситкәрәк шылды ла ҡалтыранған тауыш менән былай тине:

– Венер, мине ғәфү ит инде. Һуңғы ваҡытта үҙемдең кисерештәремде аңлай алмай башланым кеүек. Тик һине лә, үҙемде лә алдарға йыйынмайым. Мәктәптә уҡығанда мин бер класташым менән дуҫлашып йөрөгәйнем. Һуңыраҡ беҙ әрләштек тә айырылышып торҙоҡ. Ул армия хеҙмәтенә китте. Өс ай элек ул егет ҡайтты, һәм мин уны ныҡыраҡ яратыуымды аңланым. Һин һәйбәт кеше, тормошоң алда әле, минән дә яҡшыраҡты табырһың.

Артабан ни кисергәнемде мин йүнләп хәтерләмәйем дә, тик Рәмиләнең ҡараңғылыҡҡа инеп юғалғаны ғына күҙ алдымда. Хәҙер генә ауыҙ асып әйтә алам, сөнки был хаҡта бер кемгә лә һөйләмәнем мин үҙемде үҙем юҡ итергә әҙер хәлдә инем. Миңә Хәтирә инәй ярҙамға килде. Иң элек ул Рәмиләнең атаәсәһе янына барып, барыһын да асыҡлай һәм үҙ фекерен әйтә. Артабан да мине, ул-был ҡылып ҡуймаһын тип, күҙәтеп йөрөнө, иптәштәремдә лә иҫкәртте.

Ваҡыт аға торҙо, мин бер кем менән дә аралашманым. Рәмилә дүртенсе курста уҡығанда ҡыҙ бала тапты һәм уға Гөлнара тигән исем ҡушты. Бер нисә тапҡыр ул минең менән һөйләшергә ынтылып ҡараны, тик мин, ҡыйырһытылған һәм тоғро йән, уға яуап ҡайтарманым, әле бер, әле икенсе ҡыҙ артынан саптым. Һуңыраҡ мин Рәмиләнең иренән айырылыуы хаҡында ишеттем, ә үҙем филармонияның талантлы бейеүсеһе менән ғаилә ҡороп, бер ҡыҙға атай булып киттем. Мин дә, ҡыҙым тыуғас, уға Гөлнара исемен бирҙем.

Институттың сығарылыш кисәһенән һуңғы төндө мин Рәмиләләр өйөндә уҙғарҙым. Ул әсәй, ә мин атай булған кешеләр илашып, бер-беребеҙҙе ғәйепләп сыҡтыҡ. Күрәһең, яҙмышыбыҙ шулай ҡушҡандыр инде, тинек. Ошонан һуң мин ҡатыным менән тәғәйенләнгән урынға – Сибай ҡалаһына китеп барҙым. Бер йыл уҙғас, Рәмилә лә, элекке класташы булһа кәрәк, Каспий флотилияһы офицерына кейәүгә сыҡты. Яңы ире Гөлнараны үҙ ҡыҙы итеп рәсмиләштерҙе, Ҡырғыҙстандың Майлы Сай ҡалаһына йәшәргә алып китте. Ул яҡтарҙан Рәмилә миңә бер нисә хат яҙып һалды, ә бер нисә йылдан һуң беҙгә осрашырға насип булды. Хәрби хеҙмәттән киткән ире Өфө ҡалаһының бер районында хәрби комиссариатта эшләне, ә Рәмилә бер поликлиникаға акушер-гинеколог булып урынлашты. Ҡыҙҙары Гөлнара мәктәпкә йөрөй ине. Мин дә ғаиләм менән баш ҡалаға ҡайттым, аспирантура тамамлап доцент, унан докторлыҡ диссертацияһы яҡлағандан һуң медицина институтында декан урынбаҫары булып киттем. Ҡатыным телевидениеға эшкә инде. Рәмилә менән мин бер нисә тапҡыр кәңәшмәлә осраштым. Арабыҙҙағы мөхәббәт ул саҡта ла, моғайын, һүнеп бөтмәгәндер, сөнки уның саҡҡыларын Рәмиләнең миңә мөнәсәбәтендә һиҙемләй, ә үҙемдеке хаҡында шикләнмәй ҙә инем. Берәй сәбәп табыла ҡалһа, бер-беребеҙҙең ҡосағына ташланырға әҙербеҙ кеүек тойолдо. Әммә ул иренең көнләшеүенән уттан ҡурҡҡандай ҡурҡа ине.

– Беләһеңме, Венерка (ул миңә шулай өндәшә торғайны), ул, моғайын, ауырыуҙыр, мине поликлиникала травматолог булып эшләгән ирҙән көнләшә. Һин ул ирҙе беләһең, был хаҡта һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел. Уның менән яҡынлашырға риза ҡатындарҙы был донъяла табыуы ла ҡыйындыр.

Был беҙҙең арала һуңғы һөйләшеү булды. Шулай бер көн пулянан үпкәһе яраланған ауырыуҙы килтерҙеләр. Йөрәгенә зыян теймәһә лә, эсенә ҡан күпләп ағыуҙан хәүефләнеп, ҡабул итеү бүлмәһендә ҡыҙыу эш башланды. Ҡан тамырына бер нисә система ҡуйылып, реаниматорҙар уны операция яһарлыҡ хәлгә килтереү өсөн тырышты. Ошо ҡыҙыу әҙерлек ваҡытында мин ошо кешенең ауырыуҙар алдында поликлиниканың гинекологын атып үлтереүен ишетеп ҡалдым. Ул ҡатындың исеме Рәмилә ине. Был минуттарҙа минең ниҙәр кисергәнемде аңларға мөмкиндер. Шулай ҙа көслөк менән үҙ-үҙемде ҡулға алып, табип эшен дауам иттем.

Күпмелер ваҡыттан һуң офицерҙың ҡан баҫымы күтәрелә башланы, һәм ул күҙен асыу менән:

– Рәмилә ҡайҙа? – тип һораны.

Мин, һуғып ебәреүҙән көскә тыйылып:

– Һин, ҡәбәхәт нәмәкәй, уны үҙ ҡулдарың менән атып үлтергәнһең бит! – тип ҡысҡырҙым. – Етмәһә, һорашаһың, әҙәм аҡтығы!

Ауырыу башын ситкә борҙо. Беҙ уны бер нисә минутҡа ғына ҡалдырып

торорға мәжбүр булдыҡ, сөнки кемдәргәлер ҡатмарлы операцияға әҙерләнергә, ә икенселәребеҙгә операция бүлмәһен әҙерләргә кәрәк ине. Әйләнеп килгәндә, ул ҡан тамырына ҡаҙалған барлыҡ энәләрҙе лә һурып сығарған, үҙе аңын юғалтҡан ине. Бер-беребеҙгә ҡараштыҡ та уның өсөн ошонан да дөрөҫ аҙым юҡлығын аңланыҡ. Был хәлдән һуң миңә Рәмилә янында уҡ тиерлек дуҫымды ерләргә тура килде. Хәҙер ваҡыты-ваҡыты менән уларҙың ҡәберендә булып китәм.

Рәмиләнең тәүге ҡыҙы Гөлнараны миңә элегерәк бер ҡасан да күрергә тура килмәне, әммә уның ошо медицина институтында белем алыуы хаҡында ишетелеп ҡалды. 1982 йылда мине институт ректоры итеп тәғәйенләнеләр. Шулай итеп, минең эш көнөм иртәнге 8-ҙә башланып, киске 11-ҙәргә саҡлы дауам итә торған булып китте, сөнки хирург булараҡ та мин бөтә көсөмә эшләнем. Рәссам – бумалаһыҙ, ә яҙыусы ҡәләмһеҙ тора алмаған кеүек, хирург өсөн дә операция эшләп тороу даими кәрәк. Ректорҙың эше лә ул саҡтарҙа бик күп ине: студенттар өсөн ҙур дөйөм ятаҡ төҙөү менән бергә, ашханаға нигеҙ һалына башлағайны. Институт биләмәләренән сығарылған сүп-сарҙың күләме 300 йөк машинаһы булды. Ҡайһы бер кафедраларҙы икенсе урынға күсерергә тура килде. Студенттар менән дә аңлашылмаған саҡтар килеп сыҡҡылап, ҡыҫылырға, сара күрергә мәжбүр булына.

... Алтынсы курста уҡып йөрөгән бер егет ике ирҙе туҡмап, береһенең ҡулын һындырған. Был инде – ауыр енәйәт, кәмендә ете йыл төрмә тигән һүҙ. Тәфтиш башланғас, егетте институттан ҡыуыу мәсьәләһе лә күтәрелде. Бер мәл эңер төшөп килгәндә, ректор кабинетына зифа буйлы, ҙур ҡара күҙле, матур ғына кейенгән йәш ҡатын килеп инде. Уны күреү менән мине электр тогы һуҡҡандай булды, сөнки алдымда һуйған да ҡаплаған... ҡыҙым Гөлнараның тере күсермәһе баҫып тора ине. Тик үҙ ҡыҙымдан буйға бәләкәйерәк.

– Венер Ғәзизович, мин Рәмиләнең ҡыҙы Гөлнара булам, – тип һүҙ башланы ул. – Өләсәйем, донъяла һиңә ярҙам итерлек кеше бар, тип әйткәйне. Мин һеҙҙең йәш саҡта әсәйем менән дуҫлашып йөрөгәнегеҙҙе яҡшы беләм. Әле институттан ҡыуылырға тейешле егет – минең икенсе ирем. Мин унан ауырлымын. Ни өсөн шулай ауыр хәлдә ҡалғаны миңә билдәһеҙ, ләкин ул әҙәпле, йомшаҡ күңелле изге йән. Әгәр уны ҡыуһалар, хатта ултыртып ҡуйһалар, мин ике бала менән яңғыҙ ҡалам. Һеҙҙән башҡа ярҙам итерлек бер кешебеҙ ҙә юҡ.

Үҙем йәш ҡатынды тыңлайым, ә башта төрлө уйҙар бөтөрөлә: бер йомортҡанан сыҡҡандай оҡшашлыҡ ҡайҙан? Ул бит беҙ Рәмилә менән февраль кисендә айырылышҡандан һуң йыл ярым уҙғас тыуған? Төрлө хәҡиҡәт һәм ялғанды егеп, беҙ ул саҡта һуғышыусыларҙы килештерә алдыҡ. Эш мәхкәмәгә тиклем барып етмәне, егет институтты уңышлы тамамланы. Улдары тыуҙы, Гөлнара клиника ординатураһында белемен арттырып сыҡты, өлкән улдары үҙебеҙҙең институтҡа урынлашты. Һуңыраҡ ғаилә башлығы медицинанан китте, эшҡыуарлыҡҡа тотоноп байығас, Мәскәүгә күсеп китте, шунда фатир һатып алдылар. Өлкән улдары институт тамамланы, ә кесеһе дүртенсе класта уҡығанда уҡ йөҙөү буйынса Мәскәү чемпионы исемен яуланы. Аталары ысын күңелдән мине үҙенең ҡайныһы иҫәпләй, бәлки, был хаҡта уға Гөлнараның өләсәһе «сер» асҡандыр? Бер мәл үҙ Гөлнара ҡыҙым:

– Атай, һинең тағы ла бер Гөлнара исемле ҡыҙың бармы ни? – тип һораны. Ни әйтергә белмәй, юғалып ҡалдым. Ә ҡыҙым:

– Күптән түгел беҙ бер кампанияла булдыҡ. Унда миңә бик ныҡ оҡшаған икенсе Гөлнара ла бар ине, – тип дауам итте. – Ҡунаҡтарҙың барыһының да иҫтәре китте, күҙҙәре тик беҙҙә булды.

Артабан ҡыҙым минең ҡасандыр Хәтирә инәйҙә фатирҙа торған саҡта Рәмилә менән булған романды хәтеремдә яңыртты. Ул хатта минең үҙ-үҙемде юҡ итергә йыйыныуым тураһында ла белә булып сыҡты.

– Дөрөҫөн әйт, сөнки был тиклем оҡшашлыҡтың башҡа төрлө булыуы мөмкин түгел. Хатта һинең секретарың да беҙҙе айыра алмай, – тип тамамланы ул хәбәрен.

Мин, әлбиттә, яуап бирергә маташып ҡараным, әммә ышандыра алманым шикелле. Хәҙер Гөлнаралар ғаиләләре менән ҡунаҡҡа йөрөшә, ә оҡшашлыҡтың ниҙән килеүен үҙҙәре лә белмәй. Был хәл мине лә бик ҡаты уйҙарға һалды: нисек инде ул беҙ айырылашҡандан һуң йыл ярым уҙғас тыуған ҡыҙҙың минең йәшкә унан да кесе ҡыҙыма ике тамсы һыуҙай оҡшауы мөмкин? Генетика өлкәһендә эҙләнеүҙәрем – тәбиғәттә иң изге серҙәрҙең береһе. Аллаһы Тәғәләнең үҙенә генә билдәле телегония өлкәһендә нindәйҙер мәғлүмәт алғанға тиклем был борсоулы уйҙар башымдан китмәне. Нимә була һуң ул «телегония»? Аңлайышлыраҡ булһын өсөн, миҫал килтерәм. Йылҡысылыҡ менән шөғөлләнеүсе билдәле бер поляк бароны Сахара сүллегендә аттан ике тапҡыр йылдамыраҡ сапҡан, сыҙамлы һәм, иң мөһиме – тәбиғәттең үҙе кеүек гүзәл зебра йәшәүен иҫенә төшөрә һәм үҙенең бейәләрен ошо мал төрө менән ҡушып, яңы тоҡом барлыҡҡа килтереү өсөн, бер нисә зебр-айғыр ҡайтара. Әммә ике йыл эсендә уның бейәләренән бер ниндәй зебра ла тыумай. Кәйефе ҡырылған барон айғырҙарҙы Африкаға ҡайтарырға мәжбүр була. Ни ғәжәп: өс йылдан һуң бейәләр зебраға оҡшаш буйлы ҡолондар тыуҙыра башлай. Был хәлде өйрәнеү менән ғалимдар шөғөлләнә һәм тормошта ошоға оҡшаш башҡа миҫалдарҙы ла өйрәнгәндән һуң шуны асыҡлай: енси бәйләнеш ҡайһы саҡ шунда уҡ ауырға ҡалыуға килтермәүгә ҡарамаҫтан, киләсәктә үҙенең эҙемтәләрен барыбер ҡалдыра. Хатта 10 йыл үткәндән һуң да уның үҙ-үҙен күрһәтеүе бик ихтимал. Мәҫәлән, тарихта элек алпауыт биләмәһендә крепостной ҡыҙ булып етешкән һәм үҙенең тәүге енси бәйләнешен ошо алпауыт менән үткәргән заттарҙың бер нисә йылдан һуң тап шул алпауытҡа оҡшаш бала табыуы, аҙаҡ был балаларҙың полководец йәки министр, хатта музыкант булып китеүе яҡшы билдәле. Мин был юлдарҙы ҡайһы бер ҡыҙҙар осраҡлы енси бәйләнешкә инеүҙән һаҡланһын өсөн яҙам.

Рәмиләнең Гөлнараһы менән сер уртаҡлашҡан саҡтарҙа ла беҙ был темаға инеп китмәйбеҙ, сөнки генетика алға киткән хәҙерге мәлдә атайлыҡты раҫлау өсөн әллә ни баш ватыу ҙа кәрәкмәй. Ейәндәрҙе лә борсоғо килмәй. Өлкән улдары институттан һуң уролог булырға теләне һәм, минең тәүге һөнәрем тап шул булыуын белеп:

– Бына бит, гендар ни эшләтә? – тип көлдө.

Алты йәшлек Наилдың бер нисә тапҡыр ҡатынымдан:

– Зилиә инәй, һин Венер Ғәзизович менән өләсәйемдең бер-береһен яратыуы хаҡында ишеттеңме? – тип һорағанын күрҙем.

Шулай бер мәл кухняла сәй эсеп ултырабыҙ. Наил килеп инде лә:

– Венер Ғәзизович, һеҙ минең әсәйемә кем булаһығыҙ? – тип өндәште. Мин көтөлмәгән һорауҙан ҡаушап ҡалдым. Гөлнара иһә аптырап ҡалманы:

– Ул, Наил, минең иң яҡын ағайым. Белдеңме? – тине.

Малай, ғәжәпкә ҡалып, барыбыҙға ла күҙ йүгертеп сыҡты. Уның ҡарашынан «Беләм мин һеҙҙе, барыһы ла һөйләй. Әйтерһең дә, мин генә һаңғырау» тигәнде уҡып була ине.

Рәмиләнең әсәһе үлер алдынан Гөлнараның кейәүе менән икәү-ара ғына һөйләшеү була һәм шунда был тарихҡа, минеңсә, нөктә ҡуйыла. Кейәү яғынан миңә хәҙер һорауҙар юҡ. Олоғая барған һайын мин Рәмиләнең балаларында, ейәндәрендә уның һыҙаттарын күреп шатланам да, борсолам да һәм Гөлнара йөҙөндә ошондай бүләк биргәне өсөн Хоҙайға рәхмәттәр уҡыйым.

Графоман

Ҡайһы берәүҙәр һөнәрҙе дөрөҫ һайлай алмағаны өсөн ғүмере буйына интегә. Мин һүҙ алып барған кешенең туған йәки таныштары араһында уны ошо һөнәргә димләүсе табиптар булмауға ҡарамаҫтан, яҙмыш ни өсөндөр уны медицина институтына алып килгән. Үҙемдең коллегаларым хаҡында ни ҙә булһа яҙырға теләгем ташып бармаһа ла, ректор вазифаһынан киткәндән һуң был уйымдан кире ҡайттым. Бер мәл Рәсәйҙең ул саҡтарҙағы һаулыҡ һаҡлау министры Шевченко үҙәк телевидение аша былай тине:

– Мин элек был хаҡта бик уйланмай инем, хәҙер һис бер икеләнеүһеҙ әйтә алам: элекке наркомандар булмай, сөнки наркомания дауаға бирешмәй. Наркотик таратыусыларҙы тотоп атмай тороп, был афәттән ҡотолоу юлы юҡ.

Министрға эйәреп, элекке ректор булараҡ мин дә, илдәге табиптарҙың 15 проценты ғына (бөгөн – айырыуса) һөнәрен яратып башҡара, тип әйтергә батырсылыҡ итәм. Ректор булып эшләгән саҡта беҙ алтынсы курста уҡығандар араһында исем-фамилияларын күрһәтмәй генә анкета үткәреп ҡараныҡ. Был сарала ҡатнашыусылар алдына «Һөнәрҙе йөрәгегеҙ ҡушыуы буйынса һайланығыҙмы?» тигән һорау ҡуйылды. Дауалау факультетының көндөҙгө бүлегендә белем алыусыларҙың 92 процентының «юҡ» тигән яуабы беҙҙе шаҡ ҡатырҙы. Киреһенсә, ҡасандыр медицина училищеһын тамамлап, ошо уҡ факультеттың киске бүлегендә уҡыусыларҙың 96 проценты «эйе» тип яуаплаған. Буласаҡ табиптарҙың 92 процентының үҙ һөнәрен кемдәрҙеңдер өгөт-нәсихәте йәки башҡа сәбәп арҡаһында «һайлап», исем өсөн генә атҡарыуы йәмғиәт өсөн һәләкәт түгелме ни? Ә инде медицина училищеһын тамамлап, буласаҡ һөнәре өлкәһендә ниҙелер белергә өлгөргән йәш кешенең юғары белем алып, артабан эшләргә теләк белдереүе, әлбиттә, ҡыуаныслы. Мин элек тә, медицинаға һуҡмаҡ инъекция яһау, банкылар һәм клизма ҡуйыуҙан, түшәктә ятҡан ауырыуҙы тәрбиәләүҙән башлана, тип иҫәпләй инем, әле лә шул фекерҙә торам, сөнки ошо процедуралар булмаһа, бик яҡшы үткәрелгән операцияның да күңелһеҙ тамамланыуы ихтимал. Әгәр ҙә табиптар ауырыу эргәһендә эш көнөн генә үткәрһә, сестралар (уларҙы данлыҡлы табип Пирогов «шәфҡәт туташтары» тип атаған)– тәүлек әйләнәһенә шулар янында. Ҡан тамырына инъекция яһай, клизма ҡуя белмәгән белгесте нисек итеп табип тип атамаҡ кәрәк!? Ә бит ул был һөнәрҙәргә үҙенең ярҙамсыларын да өйрәтергә бурыслы. Медицина өлкәһендә ҡырҡ йыл эшләгән кеше булараҡ, минең шундай хыялым бар: табиплыҡҡа күп баҫҡыслы белем биреү юлы менән өйрәтергә кәрәк. Мәҫәлән, тәүҙә училище, унан – институт, интернатура һәм биш йыллыҡ ординатура. Эш хаҡы ла уйланған булыуы мотлаҡ. Был тәҡдим-фекер менән мин Америка асмайым, цивилизациялы дәүләттәрҙә табип ауырыуҙы үҙ аллы дауалауға 35 – 37 йәштәрҙә, йәғни институтты тамамлап, 6 – 8 йыл тәжрибә туплағандан һуң ғына тотона.

Шуға күрә, минеңсә, бөгөн албаҫты полицейскийҙан йәки рэкетирҙан түгел, ә үҙ һөнәрен яратмай башҡарған фәҡир табиптан ҡурҡыу кәрәк. Ошо яҙмамдың геройы Зөфәр, медицина минең өсөн түгел, тип асыҡтан-асыҡ әйтеү менән бергә бер кемгә лә зыян килтермәне, сөнки һәр ваҡыт ғәмәлдә диагностика, фән менән шөғөлләнде. Башының теүәл эшләүе һәм ныҡышмалылығы арҡаһында күп кенә уңыштарға ла өлгәште. Бер аҙ алға бөкрәйә төшкән кәүҙәле, ҡуйы сәсле, тура танаулы, үтәнән-үтә ҡараған йәшел күҙле был кеше яҡын-тирәләгеләргә үҙ фекерен аныҡ һәм ҡыҫҡа ғына итеп еткереү һәләтенә эйә булыу өҫтөнә, башҡа талант эйәләре кеүек үк, ҡаршылыҡлы, тәртибен алдан күреп

булмағанса тәбиғәтле кеше булды. Ун минут эсендә ул, кеше менән дуҫтарса мөнәсәбәт урынлаштырыу менән бергә, дошман дәрәжәһенә етерлек әрләшеү өсөн күп тә һорамай. Холҡоноң ошондай тыйып тотҡоһоҙлоғо арҡаһында, ул теге йәки был хәйләләрҙән тамам азат та булып, дуҫтарын, ғаиләһен юғалтты. Зөфәр менән бик аҙ ғына аралашыуҙан да уның һис бер яҡтан яҡын килә алмаҫлыҡ нервы күҙәнәктәренән генә тороуын һиҙемләп була. Теләһә ниндәй хәлдә, хатта уға ҡарата изге ниәт менән башланған һөйләшеүҙә лә ул ниндәйҙер хилафлыҡ табып, бәләкәй генә осҡондо ла оло ялҡынға әйләндереп ебәрә. Зөфәрҙең фекеренә ҡолаҡ һалһаң, бөтә донъя уға ғына ҡаршы, бөтә тирә-яҡ уға хаслыҡ ҡылырға торған, йә булмаһа уның һәләтен тейешенсә баһаларға теләмәгән кешеләрҙән хасил булған. Шуға күрә был кеше менән бер-ике һөйләшкәндән һуң бер кемдә лә уның менән артабан да аралашыу теләге ҡалмай. Тап ошондай сәбәптәр арҡаһында ул гел генә «күләгәлә» ҡала килеп, уны бер ерҙә лә «юғары»ға үрләтеү теләге тыумағандыр. Теге йәки был вазифаға үрләтеү теләге лә уның үҙе тирәһендәгеләрҙе, шул иҫәптән уға буйһонғандарҙы ла, дошман яһау һәләтлегенә килтереп, уның өҫтөнән телдән дә, яҙма ла ялыуҙар күбәйеп, коллективта һиллек ул китһәс кенә урынлаша торған булды.

Бала-саға кеүек һәр нәмәгә ышанып барғанлыҡтан, Зөфәрҙе теләһә кем алдап китә ала ине. Максим Горький кеүек, ул да үҙ фекерҙәрен яҙма рәүештә теҙеп һаҡларға күнекте. Белеүемсә, бөйөк совет яҙыусыһы шундайыраҡ фекер әйткән: «Иптәштәр, мин һеҙгә яҙма рәүештә яуап ҡайтарырмын, сөнки телдән әйтә башлаһам, фекерҙәрем Каспий диңгеҙенә ҡойорҙан алда бик күп ҡултыҡтарға таралған Иҙел кеүек була һәм мин уларға эйәрә алмайым». Яҙмамдың башында уҡ мин йәш саҡта һөнәрҙе дөрөҫ һайлау тураһында әйтә биреп ҡуйғайным, хәҙер иманым камил: Зөфәр медицина институтына һынау тотҡансы, берәй вуздың филология факультетына барып инһә, Башҡортостанда унан да талантлы яҙыусыны, моғайын, табып та булмаҫ ине. Ҡулына ҡәләм алһа, ул үҙен ышаныслы тоя. Мәҫәлән, докторлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эшләгәндә булған хәл иҫтә ҡалған. Ғилми консультант булараҡ, ваҡ-төйәк кенә иҫкәрмә яһаһам да, ул шунда уҡ тоҡанып китә һәм 10 – 15 көндән һуң, диссертацияһының мәғәнәүи йөкмәткеһен үҙгәртмәһә лә, өр-яңы текст яҙып килтерә. Шулай яйлап уның бер бүлмәле фатирындағы мөлкәт һаҡлай торған келәте диссертациялар менән яртылаш тиерлек тулып китте. Иҫкәрмәләр яһауҙан арып, үҙемдең ҡәнәғәтһеҙлегемде белдергән битте генә үҙгәртеүҙе һорап ғарҡ булғандан һуң, диссертацияның бишенсеме, алтынсымы вариантына туҡталып ҡалырға мәжбүр булдым. Мәскәүҙә ошо диссертацияны яҡлағанда, моғайын, мин Зөфәрҙең үҙенән дә нығыраҡ борсолғанмындыр. Хәйер, был тойғо юҡҡа ла булғандыр, сөнки уның энциклопедик белеме һәм эрудицияһы докторлыҡҡа торошло ине.

Геройым холҡоноң ҡапма-ҡаршылыҡлылығы миңә уның тураһында ыңғай фекерҙе дауам итергә мөмкинлек ҡалдырмай. Ә инде уның ғаилә хәле, шәхси тормошо тураһында бик яҡшы белһәм дә, ирҙәргә хас принципҡа таянып, ул турала һөйләргә теләмәйем. Бик яҡын ҡәрҙәшем әйтмешләй, кешене нисек бар – шулай ҡабул итеү кәрәк, ә инде үҙгәртергә тырышыуҙың үҙ һаулығыңа зыян килтереүе ихтимал.

Венер СӘХӘҮЕТДИНОВ.

Яҡташтарым менән ғорурланам

Борай, Балтас һәм Мишкә райондары биләмәләре киҫешкән урында Иҫке Ҡарағош исемле, тарихы бер нисә быуатты үҙ эсенә алған башҡорт ауылы бар. Ҡасандыр ул Бөрө өйәҙе Ҡыр-Унлар олоҫоноң үҙәге һаналып, уға 29 ауыл буйһонған. Иҫке Ҡарағошҡа ҡасан нигеҙ һалынғаны билдәһеҙ, ләкин БР Үҙәк дәүләт тарих архивында табылған мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, 1742 йылдың 1 октябрендә ауыл башҡорттарының үҙ биләмәләренә Ҡазан губернаһынан алты татар ғаиләһенә күсеп ултырырға рөхсәт бирә.

Ауыл халҡы күп йылдар игенселек менән көн итә, йәшелсә үҫтереү менән дә шөғөлләнә. Үҙҙәренән артып ҡалған ауыл хужалығы продукцияһын Бөрө ҡалаһына илтеп һатҡандар. Ихаталарҙа мал да күп булып, йылҡы иҫәбе биш-алтыға, һауын һыйырҙар ике-өс башҡа еткән, ә һарыҡ-кәзәнең иҫәбе лә булмаған. Тарихи мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, иҫке ҡарағоштар шул тапҡырҙан ағып сыҡҡан Киҙгән йылғаһына биш тирмән ҡороп ултыртҡан.

Әлбиттә, ауылдың төп байлығы – эшлекле, тыныс холоҡло, аҡыл менән фекерләүсе кешеләр. Улар йәшәгән төйәген, сәсеүлектәрен, сабынлыҡ һәм тирә-яҡты әллә ҡайҙарҙан иңләп ятҡан урманын тәртиптә тотҡан. Мин тыуған ауылымдың тарихын күптән өйрәнәм, ошо хаҡта «Ағиҙел» журналы биттәрендә лә яҙмаларым донъя күрҙе, китаптарым да баҫылып сыҡты. Был юлы мин Ватаныбыҙҙы, ғаиләһен һәм үҙен яҡлап, ҡулына ҡорал алырға мәжбүр булған ауылдаштарым тураһында яҙырға булдым. Әйткәндәй, ауылыбыҙҙың ир-азаматтары Рәсәй ҡораллы көстәре алып барған бер генә һуғыштан да ситкә тайпылмаған, ил именлеген, бөтөнгөлөн яҡлап дошман менән яғалашҡан.

Быйыл илебеҙ йәмәғәтселеге 1812 йылғы Ватан һуғышында Франция императоры Наполеон ғәскәрен ҡыйратыуҙың 200 йыллығын байрам итә. Архивта ҡаҙына торғас, мин ошо яуҙа Иҫке Ҡарағоштан Мөхәмәтғәлин Ибраһимовтың ҡатнашыуын асыҡланым. 1839 йылда төҙөлгән француз яуында йөрөп ҡайтҡандар исемлегендә ул да күренә. Беҙҙең алыҫ ҡәрҙәшебеҙ, ул саҡта Яңы Әлим ауылында йәшәгән Абдулғафар Ишмәтов та башҡорт яугирҙары сафында дошман яуын ҡырыуҙа ҡатнаша. Абдулғафарҙың атаһы Хөсәйен – Ташбулат тоҡомоноң дүртенсе быуыны. Ташбулаттың беҙҙең боронғо ата-бабабыҙ булыуы хаҡында мин быға тиклем яҙғайным инде. Ишмәтовтарҙың береһе, танылған уҡытыусы, тел белгесе Әхмәтсафа менән миңә ике туған Ғилмиәхмәт Миңләхмәтов та йыш аралашҡан. Уның йоғонтоһонанмы, әллә уға оҡшарға тырышыпмы, гәзит-журналдарға мәҡәләләр яҙа башлай, хатта һуңыраҡ ул остазының фамилияһына күсеп, Ишмәтов булып китә. Ғилмиәхмәт ағай Борай районының «Ленин байрағы» гәзите мөхәррире булып та эшләне.

1812 йылғы Ватан һуғышында хәҙерге Борай районына ҡараған ауылдарҙан бик күп кеше ҡатнаша. Мәҫәлән, Ҡашҡалынан Рәхмәтулла Аҡъюлов, Дауытлынан – Рахманғол Мәхмүтов (урядник), Ҡуҙыбайҙан – Исмәғил Асаинов (урядник), Иҫке Таҙларҙан – Исмәғил Заһитов (зауряд-хорунжий), Борай ауылынан – Миңлебай

Килмәтов (зауряд-йөҙ башы) һ.б. Күптәре батырлыҡ күрһәтеп, тыуған яҡтарына иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан. Тарихи документтар, полководецтарҙың хәтирәләре башҡорттарҙың сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы һуғышын һоҡланып яҙған башҡа сығанаҡтар байтаҡ. Миңә, мәҫәлән, ошо яуҙа ҡатнашҡан генерал Ермоловтың мемуарҙары менән Ставрополь крайында эшләгән саҡта тарихи китапханала танышырға тура килгәйне. Өфө полкы Бородино ауылының Малахов ҡапҡаларынан уңдараҡ урынлашҡан була, күрәһең, резервта торған. Башҡорт һуғышсыларының хәрби рухы шул саҡлы күтәренке була, улар «ура!» ҡысҡырып, һөжүмгә ташланырға ынтыла. Әммә бойороҡ көткән Цыбульский, полк командиры, һуғышсыларын тыя, сөнки әмер булмай тороп, биләгән урынды ташлап китергә ярамай. Бына бер саҡ һөжүмгә күсергә бойорола. Ул мәлде генерал Ермолов хәтирәләрендә яҡшы һүрәтләгән.

Бородино һуғышының ҡыҙған осоронда ауыр хәл килеп тыуа. Француздар бик күп көс туплап, генерал Н. Раевскийҙың көслө нығытылған позицияларын ҡыйрата ла сигенергә мәжбүр итә. Тап ошо ваҡытта штаб начальнигы Ермолов фронт линияһы буйлап үтеп барған, һәм, дошмандың оборонаны өҙөүен күреп, Өфө полкына килгән. Үҙенең кемлеген төшөндөргәндән һуң, генерал былай тигән: «Французларҙы Раевский дивизияһы биләгән урындан бәреп сығарырға һәм позицияны кире ҡайтарырға!». Мин дә һөжүмгә һеҙҙең менән барам. Алға!». Күптән әмер көтөп торған яугирҙар һөжүмгә ташлана һәм французларҙы сигенергә мәжбүр итә. «Бик ҡаты һәм ҡот осорлоҡ был алыш ярты сәғәттән күберәк дауам итте, – тип яҙа Ермолов. – Дошман көслө ҡаршылыҡ күрһәтеүгә ҡарамаҫтан, ҡалҡыулыҡты ҡайтарып алдыҡ, орудиеларҙы ла. Беҙҙең яҡтан юғалтыуҙар бик күп. Һөжүмгә күтәрелгән батальондар менән сағыштырырлыҡ та түгел».

Башҡорттар француз яуында шундай батырлыҡ һәм тапҡырлыҡ күрһәтә, урыҫ ғәскәрҙәренең баш командующийы фельдмаршал М.Кутузов уларҙы: «Любезные вы мои башкирцы, хорошо деретесь, молодцы!» – тип маҡтай. Парижға ингән башҡорт атлыларының уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланғанына ишаралап, французлар уларға «төньяҡ амурҙары» тигән исем ҡуша. Башҡорт һыбайлылары уларҙа һоҡланыу ҙа, теремеклелеге менән ғәжәпләнеү тойғолары ла уятҡандыр.

1992 йылда «Китап» нәшриәтендә сыҡҡан «Любезные вы мои…» тигән китапта 1836 – 1839 йылдарҙа иҫән булған башҡорт яугирҙарының исемлеге урынлашҡан. Унда миңдән ашыу исем-фамилия атала, ә француз яуында күпме башҡорт ир-азаматының ҡатнашыуы Аллаһы Тәғәләнең үҙенә генә мәғлүмдер. Һуғыштан һуң үткән ун йыл эсендә күпме яугирҙың донъя ҡуйыуы ла билдәһеҙ. Нисек кенә булмаһын, уларға, илдең именлеген ҡурсалаусыларға, мәңгелек дан!

Иҫке Ҡарағоштоң ир-егеттәре, илде һаҡлап, башҡа яуҙарҙа, шул иҫәптән Беренсе донъя һуғышында ла, ҡатнаша. Миңә атайымдың ике ағаһы – Миңләхмәт һәм Зыятдин Ғәлләмовтарҙың унан яраланып, ғәрипләнеп ҡайтыуы яҡшы билдәле. Беҙҙең урамдан Шәйхетдин Ғәлиев, Әхмәтйән Нурғәлиев һәм Ғәлихан Саҙретдиновтар ҙа батша хәҙрәттәре именлеген һаҡлап һуғышта йөрөгән, иҫән-имен әйләнеп ҡайтҡан. Уларҙың хәтирәләренә ҡарағанда, Австрия фронтында йөрөгәндәр, Карпат тауҙары тураһында һөйләгәндәре иҫтә ҡалған. Үкенескә ҡаршы, был һуғышҡа бәйле тарихи мәғлүмәттәр бик аҙ, күрәһең, 1917 октябрь инҡилабы күп нәмәләрҙең күҙ уңынан төшөп ҡалыуына сәбәпсе булған.

Уның ҡарауы, беҙгә Икенсе донъя һуғышында ҡатнашҡан ауылдаштарыбыҙҙың тарихы барыһы ла билдәле. 40-сы йылдар башында Иҫке Ҡарағошта 204 өйҙә 539 кеше йәшәгән, уларҙың 227-һе (бер ҡатын һәм 227 ир-егет) һуғышҡа алынған. Хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип табылған 27 кеше хеҙмәт армияһында йөрөгән. «Бер ҡатын» тигәнем 1913 йылда тыуған Ғәтиә Хәбиб ҡыҙы Латипова. Тыуған ауылына иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан был ҡатындың исеме «Они вернулись с Победой!» тигән китапта ла телгә алына.

1904 йылғы Шакирйән Нурғәлиев һуғышҡа ике улы – Зөлфәр һәм Фәүзи менән бергә алына һәм өсөһө лә Иҫке Ҡарағошҡа имен-һау ҡайта. Нурғәлиевтарҙың өлкәне атлы дивизия составында һуғыша. Беренсе донъя һуғышында ҡатнашҡан Шәйхетдин Ғәлиевтың өс улы ла фронтҡа оҙатыла, Шәйхуллаһы ғына, башынан яраланған килеш тыуған яғына ҡайта. Хәбиб һәм Хәмит Мәрҙәновтарҙың икеһе лә һуғышта һәләк була. Ә бына Нурғәле һәм Рәхим Әхкәмовтарға тыныс тормошҡа әйләнеп ҡайтырға насип була.

«Китап» нәшриәтендә сыҡҡан «Память» һәм «Они вернулись с победой» тигән йыйынтыҡтарҙан күренеүенсә, тыуған иле азатлығы өсөн һуғышҡан 200 ауылдашыбыҙҙың 108-ҙе генә еңеү менән әйләнеп ҡайта. 92 ир-егет – бәләкәй ауыл өсөн оло юғалтыу. Әйтергә кәрәк, иҫке ҡарағоштарҙың күпселеге ябай һалдат булып һуғыша. Араларында ике офицер ҙа бар: кесе лейтенанттар Ҡәҙим Хисамов менән Мөхәтдин Ямалов. Тәүгеһе йәйәүле полкта взвод менән етәкселек итһә, икенсеһе штабта, һуңыраҡ санитарҙар часында хеҙмәт итә. Икеһе лә һуғыштан иҫән-аман әйләнеп ҡайта. Ҡәҙим Хисаев ауылда оҙаҡ тормай, Свердловск өлкәһенең Красноуральск ҡалаһына күсеп китә. Ҡала советының спорт комитетында, унан һуң ҡала гәзитендә фотохәбәрсе булып эшләй. Мөхәтдин Ямалов оҙаҡ йылдар Иҫке Ҡарағош мәктәбендә уҡытыусы булып эшләне, тарих һәм географиянан дәрес бирҙе. Әйткәндәй, мин дә унда һабаҡ алдым. 1996 йылда донъя ҡуйғас, яугир-ветеран ауыл зыяратында ерләнде.

Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан Ҡәҙим Әхмәтов тураһында мин үҙемдең «Иҫке Ҡарағош» тип аталған китабымда ҙур очерк урынлаштырҙым. Ауылдашым фронттың иң ауыр урындарының береһе булған Смоленск йүнәлешендә 122-се айырым уҡсылар бригадаһында һуғыша. Кешеләр менән тиҙ уртаҡ тел таба, телмәре менән дәрт уята торған егетте взводтың комсоргы итеп ҡуялар. Яңы гәзиттәрҙең йөкмәткеһе менән иптәштәрен таныштырып та бара ул. Ҡәҙим Хисай улы менән фронтта бергә булған яҡташы (артабан ул «Кызыл таң» гәзитендә эшләй, уның хаҡында «Йылға тиңдәшле көн» тигән мәҡәлә яҙып сыға. Унда шундай юлдар бар: «Бына Ҡәҙим алдымда ултыра. Беҙҙең айырылышҡанға ла утыҙ йыл булып киткән. 1943 йылда Әхмәтов Смоленск йүнәлешендәге ҡаты һуғыштарҙа ҡатнашты. Ошонда күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн миҙал менән бүләкләнде. Бер нисә тапҡыр контузияланды, һуңынан ауыр яраланды. Яралы һуғышсыны яу ҡырынан Йылайыр районы егете Түләкәев алып сыҡты».

20 августа була был хәл. Фашист пуляһы яҡташыбыҙҙың таз һөйәген зарарлай. Ошо яранан һуң Ҡәҙим Хисаев бер йылға яҡын госпиталдәрҙә дауалана. Иҫке Ҡарағош ауылына ул 1944 йылда ғарипләнгән килеш аяҡ баҫа. Агроном һөнәре ала һәм оҙаҡ йылдар ауыл Советы рәйесе вазифаһын атҡара. 1958 йылда Иҫке Ҡарағош ауыл Советы бөтөрөлгәс, «Волга» колхозының баш агрономы булып эшкә күсә. Ғәҙәттән тыш һәләтле кеше ине ауылдашым. Телмәр тоторға оҫта (юҡҡа ғына комсорг булып китмәгәндер), эшлекле һәм тәүәккәл. Тура һүҙле һәм принципиаль булыуға ҡарамаҫтан, хеҙмәт һөйгән кешеләргә ихтирамлы ине. 90-сы йылдар аҙағында донъя ҡуйғас, ауылда ерләнде.

Хәҙер Иҫке Ҡарағошта һуғыш ветерандарынан Рифҡәт Хәбиб улы Латипов яңғыҙы тороп ҡалды. Ул 1925 йылда тыуған, гвардия сержанты булып һуғышҡан. Ошондай ауылдаштарыбыҙ булыуға барыбыҙ ҙа ғорурланабыҙ. Дөрөҫ, улар араһында Герой исеме бирелгәндәр юҡ.

Мәңгелек дан яугирҙарға! Уларҙың батырлығы бер ҡасан да һүнмәҫ, башҡаларҙы ла, килер быуындарҙы ла, ҡаһарманлыҡҡа өндәп торор.

Сәләхетдин КАРАМОВ,
Журналистар союзы ағзаһы,
Бөйөк Ватан һуғышы ветераны.

Ҡороған тамыр

Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, яҙыусы Ринат Әлтәф улы Камаловтың (псевдонимы – Ринат Камал) “Әлфирә” исемле романдар йыйынтығын уҡығандан һуң, бик ныҡ уйға баттым.

Уйланыуымдың сәбәбе – романда башланған ваҡиғаларҙың атайым биографияһындағы ҡайһы бер осорҙар менән тап килеүендә һәм яҙмыштарының бөтөнләй ҡапма-ҡаршы йүнәлештә ҡоролоуында.

Ринат Камалдың “Әлфирә” романында, Империалистик һуғыш мәлендә Австрияла әсирлеккә эләгеп, иленә имен ҡайтҡан Ҡотлояр образы романдың тотош йөкмәткеһен биләп тора. Уның нәҫел-нәсәбе борондан ташсы, тимәк, баш нигеҙ ныҡлы булған. Әммә яу артынан яу тигәндәй, был нигеҙҙе урынында һелкетә, артабан хатта емереп ҡуя.

“Мәғҙән ауылы ураҡҡан Ҡаштаҡ битләүҙәрендә лә төҫтәр баҙыҡлана төштө. Унда-бында ҡалҡынған йәшел ҡыяҡтар өҫтөнә ҡояш нуры һибелде, уларҙы тағы ла матурыраҡ итеп таратып ебәрҙе. Йәшеллек – тәбиғәттең уяныу билгеһе, оҙаҡламай Ҡыштаҡ тауы итәктәре лә йәшелгә төрөнөр, сауыллыҡтар ҡупшыланыр”. Бына шундай тәбиғәт күренеше аша романда һүрәтләнәсәк ваҡиғалар башында торған Ҡотлоярҙың изге теләктәре (артель төҙөү) туғандарының, ауылдаштарының күңелен яңыртыр, уларҙы тағы ла матурыраҡ тормош ҡорорға этәрер һәм йәштәр быны күтәреп алыр, тигән уй уята.

Ҡотлояр Игентауға баш; Игентау – Ҡотлоярҙың нәҫел тауы: улар шунда тыуған, борон-борондан шунда таш һатып кәсеп иткән”, – тип яҙыусы баштан уҡ иғтибарҙы Ҡотлояр нәҫеленә йүнәлтә.

Ҡотлояр, бөтә кәртә-ҡаралтыһын таштан ҡорһа ла, Минтаһирҙы, Мөхәмәткәримде һәм башҡа күрше байҙарҙы ҡыуып етә алмай. Ашлыҡ та сәсеп ҡарай, әммә таштан йүкә һуйыу мөмкин түгел. Ситтә олтан булғансы, үҙ илендә солтан булырға теләй. Ошо потребителдәрсә маҡсаты менән, Австриянан әсирлектән ҡайтҡас та, большевиктар сафына яҙыла, волисполкомға һайлана. Ҡотлояр үҙен шул власть тип тоя. Уға волоста тәртип һаҡлау, бурҙарҙы тотоу һәм һалым йыйыу бурысы йөкмәтелә. Бурысын теүәл үтәргә тырышһа ла, уның күңеле һаман ҡәнәғәт түгел, һаман карьера эшләү хыялы уны тамам тура юлдан яҙлыҡтыра. Гел үҙен генә ҡайғыртып йәшәгән Ҡотлояр ауылдаштары, туғандары араһында ла яҡлау тапмай, шуға күрә артель ойоштороп, Мәғҙәнгә хужа булыу бәхете уға эләкмәй. “В основании любой собственности лежит только один мотив – конкуренция, – тип яҙған 1899 йылда Чикаго университеты профессоры Торстейн Веблен. – Жизнь праздного класса – это сплошное удовольствие. Это вечная погоня за нужными связами и одновременно бегство от любого, кто своей недостойной репутацией может нанести вред”.

Ул әсирлектән ҡайтҡансы Мәғҙәндә идеологик бәрелеш тулыһынса осланып, байҙар ҙа ҡалмаған тиерлек, синфи көрәш тынған кеүек. Әммә НЭП-тан һуң ауылда әллә ҡайҙан кулактар, “контр”ҙар пәйҙә була, һәм уны яңынан әрмегә алалар. Хыялдар өҙөлә, балалары үҫеп етә һәм һәр береһе үҙҙәренсә ата юлын ҡыуырға тырыша. Ата юлы улар өсөн ят, үҙ түгел, һөҙөмтәлә Ҡотлояр уландары ла берәм-берәм яҙмыш яры ситендә ҡала: биләгән юғары вазифаларынан төшөрөлә. Был нәҫел бер төрлө мәнфәғәт менән йәшәргә тырышһа ла, асылда улар араһында берлек юҡ. Үҙ-ара бер-береһенә терәк-кәңәшсе була белмәйҙәр, оло йортҡа ла онотҡанда бер күҙ һалалар. Бер атанан тыуһалар ҙа, “етмеш” әсә ғаиләне эстән емерә. Ҡатындар араһында ла яҡынлыҡ ҡалмай. Ҡотлоярҙың оло бисәһе ”Аҡ Хәмиҙә йөк аты, башын баҫып донъя йөгөн тарта...” Әммә бик үк аҡтан булмай Хәмиҙәнең дә күңеле, уның да тормошонда ҡара тап бар. Әлфирә “Олоно оло тип белмәй”, “Эшкә тотонһа, итәктәрен сатынаса күтәрә – ирҙәүкә”, “Сибәрлек кемдә юҡ – уны ҡалаҡҡа һалып йотоп булмай”, “сибәр, алабарман, тоҡҡан ерҙән һындыра”, “...уға беште ни ҙә төштө ни, иртәгәһен ишәк ҡайғыртһын”, “күҙен-башын һикертә, балаһыҙ ҡатындай ҡотороп тик йөрөй, уның теленә еткән зат юҡ”.

Ҡотлоярҙың күп бисә алыуы, уландарының ҡатын-ҡыҙға мас булыуы һәм йәш бисәһенең улы менән ҡан аралаштырыуы һәм башҡа уртаҡ сифаттар был нәҫелдең әхлаҡи яҡтан сереүен күрһәтә.

“Волисполкомдың үҙ планы бар: һалым йыйыу һәм заемға яҙҙырыу, ә халыҡтыҡы – үҙенеке башҡа: бөтә кешелә тамаҡ ҡайғыһы. Ә Ҡотлояр ошо халыҡ араһында, унда ла тамаҡ ҡайғыһы, әммә милиционер – хәрби кеше, ВЧК күҙәтеүе аҫтында, шуға волисполком начальнигы мишәр Хәбибуллиндарҙың ҡапҡанынан сыға алмай”, – ти яҙыусы. Ысынында Ҡотлоярҙың бар булған хыялы – үрҙән түбәнгәсә үҙ нәҫелен хужа итеп, солтан булып йәшәү. Яҙыусы махсус рәүештә уның кешелеклелек кеүек әхлаҡи сифаттарын һүрәтләмәй.

Ҡотлояр нәҫел ебенең өҙөлгән урындарын ямар өсөн, нәҫел яңыртмаҡтан затлы нәҫел һаналған Бәхтиәр ҡыҙын улына димләп ҡарай. “Большевиктар әйтә: нәҫел-нәсәп, түрәлектең бото бер тин тип”, – шулай яҙа атаҡлы Шәйехзада Бабич. Ринат Камал уны Ҡотлояр нәҫеленә ҡулайлаштырып: “Нәҫел-нәсәптең, түрәлектең бото ҡиммәт уға. Ҡотлояр нәҫел үҙенсәлектәрен киләһе быуынға тапшырырға теләй”, – ти.

Йомғаҡлап әйткәндә, мине романдағы психологик эҙмә-эҙлелек әсир итте. Бындай үҫешле дауамлылыҡ үткәнде бөгөнгөгә һәм киләсәккә, берәм-һәрәм ваҡиғаны айырым йәки дөйөм ваҡиғалар менән бәйләй. Романда көнкүреш кимәлендә берҙәмлек бар һымаҡ, ихата ҡапҡаһын асып сыҡҡан һәр кем шул берҙәмлекте юғалта. Атай кеше ғаиләһенә, балаларына иғтибарлы, ҡурсалап тора, киләсәктәре хаҡында хәстәрләй. Әммә атай менән бала араһында берлек бик үтә күренмәле, башлыса һүҙҙә генә ҡала. Әсәй – Аҡ инәй тип бөйөкләтелә, артыҡ яҡын да барып булмаҫлыҡ ҡырыҫ, бәләкәй балалар менән өйҙә генә ултыра. Хатта бер аҙ һалҡын да һымаҡ. Әсә – Тәбиғәт образын символлаштырған кеүек. Шуғалыр ҙа тәбиғәт тормошо кеше тормошо менән йәнәш кинәйәле һүрәтләнә, хатта образдарҙы асыҡлау өсөн ҡайһы бер тәбиғәт күренештәре ҡабатланып та китә.

Бик ҡатмарлы тарихи осор ҡайҙалыр алыҫта түгел, эргәлә генә йөрөй кеүек, шуға ла яҙыусы Ҡотлоярҙың һербертаһын иҫкә ала йәки баҡса үҫтереү кеүек көнкүреш эштәрендә булһа ла алыҫ Австрия хәтергә төшөрөлә. Ғаиләлә йәнле берлек тупланырға тейеш ине. Яҙыусы романдың йөкмәткеһен тап төрлө кимәлдәге, төрлө тәрәнлектәге ҡаршылыҡтар нигеҙендә ҡора. Ата кәңәшен уландары теләп тыңлаһалар ҙа, үҙ яҡтарын ҡайыра: улар эш, кеше һәм хатта үҙҙәре өсөн яуапһыҙ, дәрәжә менән ҡуҡырайып йөрөр һәм байрамса йәшәр түрә, ысынлап та хан-солтан булып үҫәләр. Был өлкәлә ата һүҙе үҙенекен итә.

“Всякое послабление умственной жизни общества неизбежно влечет за собой усиление материальных наклонностей и гнусно-эгоистических инстинктов”, – тигән бөйөк рус шағиры Ф. И. Тютчев. Әҫәрҙә был бик яҡшы күренә.

Ринат Камал “Әлфирә” романында илдәр, халыҡтар, ғаилә менән йәмғиәт, ир менән ҡатын, егет менән ҡыҙ, ата менән ул, өлкән һәм кесе бисә, ғаилә менән туғандар, айырым кеше менән халыҡ, туғандарҙың үҙ-ара, һәр кешенең үҙ-үҙенә мөнәсәбәте аша шул тиклем ҡатмарлы психологик тормош динамикаһын биргән: бында һәр яҙмыш күтәрелә, үҫә һәм тарҡала. Бөгөнгө кешенең әхлаҡи йөҙө үҙгәргән, тәрбиә тигән төшөнсәнең юҡҡа сыҡҡан, мәҙәниәттә ят тенденциялар үҫешкән, уҡымышлы кешеләр һанға һуғылмаған заманда “Әлфирә” романы көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәрә: сит илдә йөрөп тә ғибрәт алмаған Ҡотлоярҙың, ФЗУ-ны ташлап ҡайтҡан, эшенә яуапһыҙ ҡарап, бисәнән бисәгә йөрөп, ҡайҙа етте шунда һыйланып йөрөгән уландарының да киләсәге юҡ. Ошо фекерҙе тылҡый беҙгә романсы.

Миңниса БАҺУМАНОВА.

* * *

Өфөнөң «Нефтсе» мәҙәниәт һарайында күренекле шағирә, йәмәғәт эшмәкәре, «Башҡортостан ҡыҙы» журналының баш мөхәррире, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Йомабикә Ильясованың «Мин донъяға тик яратып бағам» тип исемләнгән юбилей кисәһе булды.

Шағирәне Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың комитет рәйесе, халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов, Ҡатын-ҡыҙҙар союзы рәйесе Рәшиҙә Солтанова, Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов, Хәйбулла районы хакимиәте башлығы Раил Ибраһимов, шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Гөлфиә Юнысова, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернаты уҡыусылары, журналда бергә эшләүселәр ҡотланы.

Халыҡ артистары Хөрмәтулла Үтәшев, Сара Буранбаева, Рәмилә Сәлимгәрәева, Рәмзиә Хисамова, Фирҙәт Ғәлиев, Азамат Тимеров һәм башҡа күп сәхнә оҫталары ҡатнашлығында барҙы шағирәнең байрамы.

Йомабикә Ильясова төрлө йылдарҙа яҙылған шиғырҙарын уҡыны.

* * *

«Нефтсе» мәҙәниәт һарайында Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбайҙың «Даланың даланлы улы» тип аталған ижад кисәһе уҙҙы.

Әҙәби-музыкаль кисәлә шағирҙы Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов, БДУ профессоры Тимерғәле Килмөхәмәтов, шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Факиһа Туғыҙбаева, Хәйбулла районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Минзәлә Баймырҙина, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы идараһы ағзаһы Буранбай Күсәбаев, БДУ студенттары, Аҡъярҙағы 1-се урта мәктәп уҡыусылары ихлас тәбрикләне.

Танылған сәхнә оҫталары Рәсүл Ҡарабулатов, Ишморат Илбәков, Сәйҙә Ильясова, Илшат Ишморатов, Артур Туҡтағолов, «Каруанһарай» төркөмө артистары сығыштары кисәгә йәм өҫтәне.

* * *

Туймазының үҙәкләштерелгән китапханаһында үҙнәшер ысулы менән китап баҫтырыусы авторҙарҙың семинары булып үтте. Унда Яҙыусылар союзынан идара рәйесе Риф Тойғонов, әҙәби консультант Марис Нәзиров, тәнҡитсе, ғалим һәм педагог Рәйеф Әмиров, «Ағиҙел» журналынан Сабир Шәрипов, шулай уҡ халыҡ шағиры Марат Кәримовтың, яҙыусы-фронтовик Азат Мағазовтың сығыштары, төбәк әҙиптәренең һәм әҙәбиәт һөйөүселәренең фекерҙәре тыңланды. Кисен татар дәүләт театрында Фәтих Сайфрандың «Бөркөт яҙмышы» исемле шиғри йыйынтығының исем туйы уҙғарылды. Сараны Туймазы таланттары матур концерт менән биҙәне.

* * *

Башҡорт дәүләт университетында күренекле яҙыусы һәм әҙәбиәт белгесе, фольклорсы Әхнәф Нурый улы Кирәевтың (Кирәй Мәргән) тыуыуына 100 йыл тулыуға бағышлап Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы үтте. Унда БДУ проректоры Г. Захаров, профессорҙар М. Зәйнуллин, Т. Килмөхәмәтов, Ә. Сөләймәнов, З. Шәрипова, Г. Гәрәева, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Р. Тойғонов, Кирәй Мәргәндең

яҡташтары, балалары һ.б. сығыш яһаны. Конференцияны әҙәбиәт һәм фольклор кафедраһы мөдире Илшат Янбаев алып барҙы.

***

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты күренекле ғалим, шағир, прозаик, әҙәби тәнҡитсе Әнүр Вахитовтың тыуыуына 80 йыл тулыуға арнап фәнни-ғәмәли конференция үткәрҙе. Конференцияла Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов, академик Ғайса Хөсәйенов, профессор Әхмәт Сөләймәнов, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин, Ә. Вахитовтың бер туған ҡустыһы, Башҡортостандың халыҡ рәссамы Рәшит Зәйнетдинов, институттың әҙәбиәт секторы мөдире, филология фәндәре докторы Миңлеғәли Нәҙерғолов, яҙыусы Әмир Әминев Ә. Вахитовтың әҙәби, фәнни, ғилми эшмәкәрлеген барланы, иҫтәлек-хәтирәләре менән уртаҡлашты.

Фойела ғалимдың тормошона һәм ижадына бағышланған стенд ойошторолоп, институт фонында һаҡланған хеҙмәттәре, китаптары, фотолары ла ҡуйылғайны. Юбилей уңайы менән сығарылған «Әнүр Вахитов тураһында хәтирәләр» китабының презентацияһы ла булды. (Йыйынтыкты төҙөүсе – Әмир Әминев.)

Йылы һәм эшлекле шарттарҙа үткән конференцияны институт директоры, профессор Фирҙәүес Хисамитдинова асты һәм алып барҙы.

* * *

Ишембай районының Маҡар мәҙәниәт йортонда билдәле ғалим һәм шағир Вафа Әхмәҙиевтең тыуыуына 75 йыл тулыуға арналған хәтер һәм ҡәҙер кисәһе ойошторолдо.

Кисәгә Өфөнән БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, БДУ профессоры Тимерғәле Килмөхәмәтов, шағирҙар Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, Әнисә Таһирова, Зөһрә Алтынбаева, шағирҙың ҡатыны Фәриҙә Әхмәҙиева, улы Фәрит Әхмәҙиев килгәйне. Улар Вафа Әхмәҙиевтең сағыу ижады һәм әҙәби мираҫы хаҡында һөйләне.

Сараны уҙғарыуҙа мәрхүм шағирҙың мәктәп буйынса һабаҡташы, һәүәҫкәр композитор Мәрйәм Солтанова ҙур ихласлыҡ күрһәтте. Кисәлә уның күп йырҙары йырланды.

Хәтер кисәһендә район хакимиәте башлығы урынбаҫары Гүзәл Шаһиева данлы яҡташының бөгөнгө йәштәргә ҙур үрнәк булыуын билдәләп, кисәне ойоштороусыларға рәхмәт әйтте.

* * *

Благовар районының Күсәрбай урта мәктәбендә ошо ауылда тыуған, ошо мәктәптә уҡыған шағир Әхмәт Ғайсиндың тыуыуына 75 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһе уҙҙы.

Шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Марис Нәзиров, яҙыусы Мансаф Ғиләжев әҙиптең ижады хаҡында фекерҙәре һәм иҫтәлектәре менән уртаҡлашты. Мәктәп уҡытыусылары, уҡыусылары уның шиғырҙарын яттан һөйләне. Кисәне район мәҙәниәт йортонан Илмир Ҡоҙабаев, Пионерҙар йортонан Элиза Шәрипова, мәктәп һәүәҫкәр артистары йыр-моң менән биҙәне. Сарала район хакимиәте башлығы урынбаҫары Дамир Ноғоманов ҡатнашты һәм баш ҡала ҡунаҡтарына рәхмәт белдереп сығыш яһаны.

***

Дыуан районы Өлкөндө ауылында танылған татар шағиры, биш йөҙҙән ашыу йыр тексы авторы Әхмәт Ерикәйҙең тыуыуына 110 йыл тулыуға арналған саралар булып уҙҙы. Танылған шағир һәм йәмәғәт эшмәкәре, СССР Юғары Совет депутаты, күп йылдар Татарстан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе булып эшләгән шәхесте формалаштырған ҡатмарлы дәүер һәм әҙиптең ижады хаҡында район һәм ауыл хакимиәте етәкселәре, Башҡортостан Яҙыусылар идараһы рәйесе Риф Тойғонов һөйләне.

Шағирҙар Мөхәммәт Закиров, Радик Хәкимйән, Зөфәр Вәлит, публицист Ризуан Хажиев, әҙәбиәт белгесе профессор Рәйеф Әмиров әҙиптең үҙ дәүере менән бәйләнеше, бөгөнгө әҙәбиәт, сәнғәт тормошона

тәьҫире тураһында бәйән итте, үҙ әҫәрҙәрен уҡыны. Ауыл хакимиәте һәм мәҙәниәт йорто бинаһында әҙип хөрмәтенә мемориаль таҡта асылды. Ауыл һәм район мәҙәниәт йортоноң үҙешмәкәр сәнғәт, мәҙәниәт әһелдәре бай йөкмәткеле концерт күрһәтте.

* * *

Миәкә районының Туҡһанбай ауылында Мифтахетдин Аҡмулла ижадына арналған традицион саралар уҙҙы. Бер төркөм ҡунаҡтар, мәғрифәтсе-шағирҙың йорт-музейын ҡарағандан һуң, Аҡмулла шишмәһенә сәфәр ҡылды, аҙаҡ мәҙәниәт йортонда әҙәби-музыкаль осрашыу ойошторолдо.

Район мәҙәниәт йортонда хакимиәт башлығы Зәйнулла Насиров М. Аҡмулла исемендәге йыллыҡ премияны күренекле ғалим һәм сәйәсмән, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Раил Әсәҙуллинға тапшырҙы. Егерме дүртенсе лауреат быға мәшһүр шағирҙың исемен мәңгеләштереү буйынса башҡарған әһәмиәтле эштәре өсөн лайыҡ булды. Профессорҙы оло награда алыуы уңайынан вуздың филология факультеты педагогтары, академик Әхмәт Сөләймәнов, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов, әҙиптәр Ирек Кинйәбулатов, Сабир Шәрипов ихлас тәбрикләне.

* * *

Проза секцияһында Ейәнсура районынан тарих уҡытыусыһы Сабит Фазлыевтың «Ҡара этап» исемле романы тикшерелде. Унда С. Шәрипов (секция рәйесе), Ә. Әминев, Р. Йәнбәк, А. Юлдашбаев, Г. Ғиззәтуллина, Ф. Аҡбулатова, Р. Сәғитов, С. Әбүзәр, Д. Шәрәфетдинов ҡатнашты. Колхозлашыу осоронда башҡорт ауылдарынан Себергә һөрөлгән ватандаштарҙың аяныслы яҙмышы реалистик һүрәтләнгән күләмле әҫәр матбуғатҡа тәҡдим ителәсәк.

Ҡотлайбыҙ!

Башҡортостан Яҙыусылар союзына яңы ағзалар – шағирҙар һәм прозаиктар ҡабул ителде. Өфөнән Рөстәм Вахитов, Әлфис Ғаязов, Спартак Ильясов, Любовь Колоколова, Зөлфиә Кускилдина, Баймаҡтан Айгөл Ишемғужина (Иҙелбаева), Силәбенән Ҡамса Мортазин, Йылайырҙан Зөлфиә Ҡаҙаҡбаева (Ҡудашева), Туймазынан Фәтих Сайфран һәм Учалынан Әҡлимә Сафинаны ижади яҙмыштарындағы иҫтәлекле ваҡиға уңайынан ихлас ҡотлайбыҙ.

***

«Скитники» романы өсөн яҡташыбыҙ, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Камил Йыһаншин «Дальний Восток» әҙәби-нәфис журналының лауреаты булды.

Хабаровск крайы мәҙәниәт министрлығы менән журнал редакцияһы ойошторған конкурста 200-ҙән ашыу шағир, прозаик, публицист ҡатнашҡан. Жюри «Махсус премия»ны үткән йылдың 4-5-се һандарында донъя күргән (конкурста 2011–2012 йылдарҙа нәшерләнгән әҫәрҙәр ҡаралған) романы өсөн Башҡортостан әҙибенә бирергә ҡарар сығарған.

* * *

Яҙыусылар союзында З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәтендә мөмкинлектәре сикләнгән ижад кешеләренең төрлө жанрҙағы әҫәрҙәре тупланып, башҡорт, урыҫ, татар телендә баҫылып сыҡҡан «Артылыш» китабының исем туйы булды.

Унда авторҙарҙы ҡотлап идара рәйесе Риф Тойғонов, йыйынтыҡтың мөхәррире Гөлназ Фазлиәхмәтова, шағир Ирек Кинйәбулатов, китапты төҙөүҙә ҙур әүҙемлек күрһәткән Фатима Ғәлиева сығыш яһаны.

Китап авторҙары – Өфөнән Ольга Москвина, Күмертауҙан Виктор Ураҙбаев, Стәрлетамаҡтан Светлана Шәрипова, Салауат районынан Ғәтиәт Садиҡов һәм башҡа төбәктәрҙән Рәйлә Назарғолова, Шамил Исхаҡов үҙҙәренең шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе.

2013 ЙЫЛҒЫ ЮБИЛЯРҘАР

Ғинуар

Ғәзим Аллаяров	1 ғинуар 1913 йыл	100 йыл
Әмир Әминев	1 ғинуар 1953 йыл	60 йәш
Әминә Яхина	1 ғинуар 1953 йыл	60 йәш
Зәйнәб Биишева	2 ғинуар 1908 йыл	105 йыл
Рәйес Ғабдрахманов	3 ғинуар 1918 йыл	95 йыл
Фәрит Ғәбдрәхимов	8 ғинуар 1933 йыл	80 йәш

Февраль

Назар Нәжми	5 февраль 1918 йыл	95 йыл
Иван Сотников	12 февраль 1908 йыл	105 йыл
Юрий Андрианов	13 февраль 1953 йыл	60 йыл
Әмир Гәрәев	22 февраль 1928 йыл	85 йыл
Әнғәм Атнабаев	23 февраль 1928 йыл	85 йыл

Март

Хәким Ғиләжев	1 март 1923 йыл	90 йыл
Фәрит Исәнғолов	6 март 1928 йыл	85 йыл
Шакир Насиров	6 март 1913 йыл	100 йыл
Зәйни Рафиҡов	11 март 1923 йыл	90 йыл
Мәрйәм Бураҡаева	27 март 1943 йыл	70 йәш

Апрель

Ғайса Хөсәйенов	10 апрель 1928 йыл	85 йәш
Владимир Денисов	10 апрель 1953 йыл	60 йәш
Агиш Ғирфанов	14 апрель 1928 йыл	85 йыл
Роберт Паль	15 апрель 1938 йыл	75 йәш
Дауыт Юлтый	18 апрель 1893 йыл	120 йыл

Май

Зариф Бәшири	5 май 1888 йыл	125 йыл
Марсель Ғафуров	10 май 1933 йыл	80 йәш
Мансаф Ғиләжев	17 май 1933 йыл	80 йәш
Игорь Фролов	30 май 1963 йыл	50 йәш
Тимер Йосопов	31 май 1938 йыл	75 йәш

Июнь

Ғәйнан Хәйри	15 июнь 1903 йыл	110 йыл
Ғилемдар Рамазанов	16 июнь 1923 йыл	90 йыл
Ғаян Лоҡманов	30 июнь 1923 йыл	90 йыл